Журналдың 6 – 7-се һандарынан мөхтәрәм замандашым, күренекле ҡәләмдәш, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғоман Мусиндың “Хәтер шаңдауы”н аҡыллы ихласлығы, сетерекле ваҡиғаларға һәм кешеләргә лә үҙ ҡарашын һәм баһаһын йәшермәй, йәки кемгәлер яраҡлашырға тырышмай асып һалғаны өсөн кинәнеп тә ҡәнәғәтләнеп уҡыным; хәтирәләрҙә телгә алынған экс-рәйес Рауил Бикбаевтың 10-сы һандағы “Аңлатма биреү кәрәк” тигән “шаңдау”ы менән дә таныштым. Оппонентҡа ла баҫма майҙанында урын биреп редакция был юлы дөрөҫ эшләгән. *Был юлы,* сөнки башҡа осраҡтарҙа ғәҙәттә юғарыраҡ вазифа биләгән, ниндәйҙер көскә йәки мөмкинлеккә эйә әһелдәргә генә кемдер хаҡында кире һөйләү форсаты бирелә лә “кирелекле” яҡтың шуға әйтер фекере яҡын да юлатылмай. Хаҡиҡәт иһә ике ҡырыйҙың уртаһынан үткәнлектән, бер яҡлылыҡ арҡаһында нахаҡлыҡ тамыр йәйә. Әммә Рауил Бикбаевтың аҡланырға көсәнеп-көсәнеп тыбырсыныуҙары бер төртөүҙән шартлаясаҡ бушҡыуыҡ кеүек кенә. Ә шулай ҙа редакция ҡиссаны баҫырға әҙерләгәндә, тәжрибәле күҙ менән ҡарағанда, түрә йоратының китек күңелен кителеүҙән һаҡлап, буғай, уның файҙаһына байтаҡ хәстәрлек күргән: авторҙың ғәҙел күҙәтеү һәм киҫәтеүҙәрен шаҡтай ҡыҫҡартып, әҙәбиәтебеҙҙең ғүмере буйына һыуҙан ҡоро сыҡмыш иркә балаһын кәрәкһеҙгә ҡурсалаған һымаҡ тойола. Ләкин шуны онотмайыҡ: барыһын да Күреп-Белеп Тороусы Хоҙай Бабай бар – бының ҡоһоро гонаһ шомлоғон ҡурсалаусының үҙ башына төшөүе бик ихтимал. Оло әҙиптең тексы менән улай иркен ҡулсырланырға ярамаҫ ине, тип әйтеүем. Ул һөйләгән бәндәүиҙең ҡылыҡтарын шаҡтай яҡшы белгән миңә йәки бәғзе берәүҙәргә ҡалһа, был хәйерһеҙ теманы, ни ҡәҙәре уҡшытһа ла, бүтәндәргә фәһем өсөн тәрәнерәк алдыртып та һөрөр инек; хәйер, игелекһеҙҙең таш мәсеткә ағас мулла (йәғни рәйес) булып ултырған сағында уҡ мәшһүр шағирыбыҙ Назар Нәжмиҙең “Ағиҙел”дә Хәсән Назар ижады тураһындағы сығышында уны (Р. Бикбаевты) “йөрәкһеҙ шағир” тип ифрат мәргән сәпәүе, шулай уҡ әҙәм ышанмаҫлыҡ дәрәжәләге боҙоҡлоғон ил алдына асып һалған күренекле ҡәләмдәштәре (әүәлге дуҫтары) Тайфур Сәғитовтың “Йөрәкһеҙ шағир”, Риф Тойғондоң “Башҡортостан Распутины” тигән ташҡа баҫмалы брошюралары күптәрҙе шаңҡытҡайны. Ә бит былар әйтеп бөтөлгән һүҙ түгел -- оҙаҡ йылдар тонйораған шайтанлы күлдәге йәмһеҙ мажараларҙың ни бары тамсылары ғына. Сөнки ул “шайтан” үҙенең табыныу тәреһе булған Мостай Кәрим ағаһының күләгәһенә ышыҡланып, үкенескә ҡаршы, уның яҡшы яҡтарын түгел, ә иң алама сифаттарын бурһып көпшәкләнгән серек тәбиғәтенә һеңдергән. Шуға күрәлер ҙә, тимен, хәҙер өлкән ҡәләмдәшенең баҫалҡы ғына киҫәтеүенә лә түҙә алмай үрһәләнеп, осаһы ҡортлаған һарыҡтай, ҡойроғон сыпраңлата. Әхләҡи асылын күҙаллатҡан саҡ ҡына тәңкитте лә күтәрә алмай, бөтәһен дә кире ҡағырға тырышып: “...байтаҡ фәнни хеҙмәттәр яҙыуым, ғалим булараҡ әҙәбиәтебеҙҙең уҙған тарихын да, хәҙерге хәлдәрен дә, ...ҡәләмдәштәремдең... һәр береһенең тын алышын да тойоп-белеп йәшәүем, ғилми эштәремде башҡарғанда әҙәби күренештәрҙе ентекле өйрәнеүем...” тип һауалана ла “Яҙыусылар союзына эшкә килгәнсе үк мин

Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры инем. Шәйхзада Бабич ижадын, Рәми Ғариповтың әҙәби мираҫын халыҡҡа тулыраҡ ҡайтарыуҙы хәстәрләп, байтаҡ эштәр эшләгәйнем", тип һушыбыҙҙы алмаҡсы. Премияларына һәм хөрмәтле исемдәренә ҡарыу юҡ, ләкин ғалим дәрәжәһен йөкмәп тә, еңел кәсепсе һымаҡ, илке-һалҡы эшләне, ғилми эштәренең сифатын ҡайғыртманы, быһың өсөн уға ирҙәрсә егәрлелек, принципиаллек етмәне. Шәйхзада Бабич ижады тураһындағы кандидатлыҡ диссертацияһында уҡ лейтмотив итеп үткәрелгән төп фекерен кемдәрҙеңдер баҫымына яраҡлаштырып яһаны: "татар һәм башҡорт мөхитендә был шағир...", "башҡорт һәм татар мөхитендә...", "татар һәм башҡорт донъяһындағы...", "Бабичтың поэтик мираҫын бары башҡорт әҙәбиәтенә генә ҡайтарып ҡалдырыу мөмкин түгел, Бабич ижады татар поэзияһының...", "Бабич ҡулына ҡәләм алған йылдарҙа татар һәм башҡорт...", "татарҙар, башҡорттар менән бергә...", "татар әҙәбиәте традицияларынан илһам алһа...", "Бабич... башҡорт һәм татар донъяһында..." (Р.Бикбаев. Шәйхзада Бабич. Тормошо һәм ижады. Өфө -- 1981; 7,10,19,20,39,41,63,85-енсе биттәр). Шағир ижадының башланғыс осорон бәйәнләгәндә, әлбиттә, был мөхитте уратып үтеп булмай, ләкин үтә ярамһаҡланып ниңә бер балыҡ башын күп сурытып сәйнәргә -- ғалим кешегә бер һәм берәгәй әйтеү ҙә етер ине.

Ауыр-билғауыр заманала мөхтәрәм Имай Насири туплаған йыйынтыҡта Бабич шиғырҙарының бер килкеһе боҙоп үҙгәртеүгә дусар ителгән, был кәмселек баҫмаларҙа шул көйөнсә ҡала килде. Бөйөгөбеҙҙең юбилейы айҡанлы ҡалын китабына (Шәйхзада Бабич. Беҙ үҙебеҙ – башҡорттар. Өфө, 1994. Төҙөүсеһе, баш һүҙ, аңлатмалар авторы – филология фәндәре кандидаты Рауил Бикбаев) аҡ юл асылғас, төҙөүсе ғалимыбыҙ үҙенә докторлыҡ дәрәжәһе килтерәсәк ошо хеҙмәтендә хөкүмәтебеҙ биргән форсаттан ғалимдарса тулы файҙаланманы -- өҫтә әйтелгән етешһеҙлектәр был "академик" баҫмала ла шул килеш ҡабатланды. Быға эсем бошоуҙан мин "Башҡортостан", "Большевиктар менән килешеү туралы башҡорт халҡына көйлө хитап" әҫәрҙәренең төп нөсхәләрен архивтарҙан эҙләп табып, һуңғы китаптағы текстарға сағыштырып ҡарап, киләсәктә рыяларын төҙәтерҙәр тигән өмөт менән матбуғатҡа сығарғас, үҙ тиреһенә һыйыша алмай буҙарынған шул ғалим-етәксебеҙ идара бинаһы фоеһында мине үҙенең мөрит-ярандары алдында: "Фәләнсәмдә соҡсонаһың!" тип ажғырып әрләне, ҡара эсенән шуны һис онотманы, сөнки аҙ эшләп тә күп алырға йәтешләнгән тар күңелле эгоислығы еңде. Халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың 75 йыллыҡ юбилейына ҡарата уның тол ҡатыны (инде вафат) Надежда Васильевна менән берлектә шағир хаҡындағы иҫтәлектәр тупланмаһын әҙерләгәс, Рауил Бикбаев шуны, нәшриәттә сығарышырға ярҙам итермен тип, һорап алып үҙендә оҙаҡ тотҡан; шул арала үҙенең Рәми Ғарипов тураһындағы монографияһы һоҡландырғыс тиҙлек менән тәүҙә "Ағиҙел"дә, күп тә үтмәй, "Китап" нәшриәтендә башҡорт һәм урыҫ телдәрендә килеп сыҡты, ә беҙ төҙөгән китап һуңлабыраҡ нәшер ителде. Шунан һуң Надяның: "Беҙҙең ҡулъяҙмаларҙан күп нәмәне күсергән, ә шулай ҙа миңә ярҙам йөҙөнән ҡыл да ҡыбырлатманы", -- тип әсенеүе хәтерҙә. Ғалим кеше,

әлбиттә, иҫтәлектәрҙән файҙаланырға хаҡлы, әммә шул хаҡта, ғилми этика буйынса, уҡыусыларын иҫкәртергә тейеш ине, быны ул эшләмәне...

Үҙенең бөйөк эшмәкәрлегенең өлгөһө итеп идараның ғүмер-баҡый һәүетем генә ағылып барған ығы-зығылы көндәлек эштәрен күрһәтмәксе, ә бит асылында улар егәрле бөтөн коллективтың, бигерәк тә тәжрибәле һәм түҙемле урынбаҫары Риф Тойғондоң, тарафынан әрһеҙ башҡарылыуы, түрәнең иһә күбеһенсә, әҙер ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйып ҡына, ҡунаҡ булып ҡына йөрөргә яратыуы билдәле. Дөрөҫ, был осраҡта оппонент хәтһеҙ ныҡышып, һәр төрлө трибуналарҙан бер ҡалыпҡа һалынған телмәрҙәр оранлауын байраҡ итеп күтәрмәксе, тик ул кәсепте уға тиклемге чиновник йәнле башҡа түрә йораттары ла хатта унан уҙҙырып уҡ башҡарҙы, унан һуңғылар ҙа ҡалышмаясаҡ. Һәр бер етәксене, борондан уҡ яҡшы мәғлүм булыуынса, уның илгә игелеге, кешелексән сифаттары ғына биҙәй, ә күкрәк һуғып шөһрәтлек дәғүә ҡылыусы был ҡәләмдәшебеҙ бындай сифаттарҙан мәхрүм – йәнатып ул үҙе өсөн, үҙенең бер ус ялағай-йолағай әшнәләре өсөн генә ҡырҡышты. Башҡаларына ҡағылмай, күпселектең йәненә тейгән торлаҡ мәсьәләһен генә алайыҡ. Эшем эйәһенең бармаҡтары үҙ яғына ҡарай кәкрелеге ҡиссала һиҙемләнә, ләкин ошо тәңгәлдә лә оппонент: “Торлаҡ мәсьәләһенә килгәндә, 1995 йылға тиклем йәшәгән фатиремда әле лә йәшәп ятам. Бәғзе әҙиптәр һымаҡ, ҡат-ҡат фатир алып торғаным юҡ”, -- тип, гонаһһыҙ дөйә ҡоштай, башын ҡомға тығып ҡына йәшеренеп ҡалмаҡсы. Әммә уның маҡтаныуының сәбәбе аңлашыла: теге болғансыҡ осорҙа республиканан табан тайҙырған хәйерһеҙ хөкүмәт башлығының үҙенәме, әшнәһенәме зиннәтләп йыһазландыртҡан хан һарайын ниндәйҙер болғпнсыҡ ысул менән эләктереп алғайны был өлгөрйән, шуға күрә һис кенә лә яфаланмай, эсеп-сысып, тигәндәй, йырлап ҡына йәшәне. Мохтажлыҡ кисергән яҙыусылар өлөшөнә төшөргә тейешле барлы-юҡлы торлаҡтарҙы ул үҙенең һөйәркәләренә, шешәләштәренә “тамыҙыуы” тураһында аяныслы хәбәрҙәр урам гиҙҙе, хәйер, уға тиклемге рәйес заманында ла тап шулай ине – эстафета ышаныслы ҡулға күсерелгән, тимәк. Фәҡәт үҙемдән генә алып әйткәндә, сиратлашып түрәлеккә үткәндәре һайын, ҡосаҡлашып бер-береһен “ихлас ҡотлаған” Р.Бикбаевтыҡынан саҡ ҡына ҡалыш фатир билегән “дуҫы” Динис Бүләковҡа ауыр хәлемде һөйләп ике тапҡыр ингәнемдә лә, асыҡтан-асыҡ: “Бында һин генәме ни, үҙемдең балаларыма фатир кәрәк!” – тип бороп сығарҙы. Уны алмаштырған Бикбаев иһә, күҙ ҙә йоммай, “игелекле” кәңәш бирҙе: “Фатирыңды Салауат ҡалаһындағыға алмаштырырға иғлан бир – баш ҡалаға күсенергә ашҡыныусы берәйһенең киңерәк фатирын алырһың”... Күп йылдар буйы хәсрәттәр сигеп кенә, мәрхәмәтле башҡа кешеләр ярҙамында торлаҡ хәлемде саҡлы-соҡло яҡшырта алдым. Р.Бикбаев яҙмаларында тел төбөнән һуҡтырырға маташҡан Ноғоман Мусин да, белеүемсә, көнкүрешен ыңғай яҡҡа тегенең ҡатнашлығынан тыш үҙгәртте.

Хәтирәләрҙе уҡығанда күңелемде ҡырған нәмәне лә әйтеп үтергә кәрәк. Донъялағы һәр кеше, бигерәк тә тәжрибәле әҙиптәр, донъяға үҙенсә ҡарай һәм, тәбиғи, заманаһы ваҡиғаларын, кешеләрен “үҙ манараһынан” күренгәнсә баһалай. Миңә ҡалһа, ошо тәрән мәғәнәле, фәһемле, күркәм хисле ҡисса биттәрендә ҡайһы бер билдәле абруйҙарға мөкиббән китеп табыныуҙың ихлас

йөрәктән икәнлеген тойһам да, автор менән һис килешә алмайым. Әйтәйек, Сталин һәм Гитлерҙы мин бер үк миҙалдың ике яғы итеп күреп тетрәнәм; ә мөхтәрәм авторыбыҙ (һәм редакциялағы һеҙ бөтәгеҙ ҙә) бәндәүиҙән илаһи яһаған "Мостай ағайым"ығыҙ иһә мин фәҡиргә иблес һымаҡ шәүләләнә -- ни хәл итәйем, намыҫым һәм белемем шулай бойорғас. Әммә-ләкин манаралар айырым-айырым булһа ла, үҙебеҙ бергә йәшәп үткән ҡатмарлы замана мөхитендәге күп факттар, уларға баһаламалар буйынса икебеҙҙеке берҙәй тап килә, ә был иһә хәтирәләр авторының күп юҫыҡтан хаҡлылығын, яҙғандары һис кенә лә шәхсиәт-хиссиәтте түгел, ә объектив ысынбарлыҡты сағылдырыуын иҫбатлай. Шул уҡ ваҡытта, Н.Мусиндың билдәле ҡәләмдәшебеҙ Ғәйнан Әмири тураһындағы үҙ фекерен белдереүен хөрмәт итеү менән бергә (һәр кем үҙенекен әйтергә хаҡлы), был тәңгәлдә уның менән һис килешә алмайым, сөнки автор республикабыҙҙың хатта Юғары суды тарафынан кире ҡағылған нигеҙһеҙ дәғүәне инде килеп шул көйөнсә яңырта. Ғүмере буйына тормошҡа һәм кешеләргә ғашиҡ шағирыбыҙҙың тыуыуына быйыл йөҙ йыл тулып үтте, мәҙәниәтебеҙ тарихындағы күренекле ошо дата бөтөн республикабыҙҙа танылған дәртле йырсының тыуған Яңауыл районында ғына лайыҡлы билдәләнеп, баш ҡалабыҙҙа иғтибарһыҙ ҡалдырылды – бының өсөн, бөтөнөбөҙ менән бергә, Яҙыусылар союзы идараһы, уның элекке рәйесе Рауил Бикбаев та ғәйепле. Заманында Ғәйнан Әмиригә япһарылған "гонаһ"тың ялғанлығы тураһында мин бынан ун йыл элгәре үк сың ҡағып, "Ағиҙел"гә тәҡдим итһәм дә, тексты уҡып баһалаған биш-алты рецензенттың (исемдәре һәм яҙмалары редакцияла һаҡланалыр) дөйөм ҡарашы ыңғай була тороп та, "өйҙән сүп сығармайыҡ, быны киләсәккә ҡалдырырға кәрәк" тигәнерәк фекер менән кире ҡайтарылғайны. Бына хәҙер "Ағиҙел"дең биттәрендә баяғы-шул касафат ҡалҡып сығып, бер яҡлы шаулатылғас, "киләсәк" килеп еткәндер тип һанайым – икенсе яҡ (унда бер мин генә түгел) фекере лә журнал уҡыусыларға һис кисектермәй еткерелергә тейеш, быны беҙҙең выждан бурысы ҡуша. Ошоно иҫәпкә алып, әле әйткән "Мәңге ғашиҡ" тигән әҫәремде, ташҡа баҫып сығарыуығыҙҙы һорап, икенсе тапҡыр тапшырам.

***P.S.*** Р.Бикбаев Яҙыусылар берлегенең XV съезын телгә алһа ла, ундағы шөкәтһеҙ ҡылыҡтарын онотҡан; шуларын, архивымдан сығарып, "Ҡушымта"ла иҫегеҙгә төшөрәм.

**Йыһат Солтанов.**
30.10.2011

## Ҡушымта

## Противоправные действия допущенные на XV съезде писателей Р.Б.

1. Ни один писатель лично не был извещен о дате предстоящего съезда.

2. Не был выбран и утвержден делегатами съезда *рабочий президиум*, съезд вели не выбранные и не утвержденные делегатами съезда корпоративные лица

(Р.Бикбаев, К.Аралбаев, Т.Кильмухаметов, Г.Идельбаева и другие) – приспешники уходящего в отставку Р.Т.Бикбаева.

3. В процессе избрания председателя Союза писателей в урну для прямого тайного голосования было опущено фактически 136 (сто тридцать шесть) бюллетеней (велся совместный список голосовавших Т.Кильмухаметовым и Р.Туйгуновым), но при вскрытии урны, по свидетельству некорпоративных членов счетной комисии, оказалось в наличии 160 (сто шестдесять) бюллетеней; значит 24 из них являются фальшивыми, что было использовано в пользу кандидата – ставленника уходящего в отставку председателя Р.Т.Бикбаева.

4. Не был составлен протокол с подписями всех членов счетной комиссии об избрании ими председателя счетной комиссии, в следствии этого не был оглашен и не был утвержден такой протокол делегатами съезда.

5. Не был составлен такой же протокол о вскрытии урны с бюллетенями для прямого тайного голосования с последующим перечнем о количестве и пригодности их, с указанием распределения поданных голосов для каждого кандидата и с выводом комиссии об избранном новом председателе; поэтому не был вынесен такой протокол на обсуждение и не был утвержден делегатами съезда.

6. Был грубо нарушен новый Устав союза писателей РБ, предварительно утвержденный делегатами данного съезда, где четко указано: уславием для избрания председателя Союза писателей РБ является набранный кандидатом 50% голосов плюс один голос при прямом тайном голосовании.

Получается: даже с учетом выше указанных 24 фальшивых бюллетеней в пользу ставленника Р.Т.Бикбаева подано 75 (семьдесят пять) голосов, что составляет 47% всех поданных голосов, а с вычетом тех фальшивых – 51 (пятьдесят один) голос – т.е. только 32%. Значит названный кандидат фактически не был избран председателем.

Даже согласно упраздненному уже Уставу (при исключении 24 фальшивых бюллетеней) сей кандидат остается не избранным.

Еще: газета “Республика Башкортостан” от 15 апреля сего года собщил, что “в столицу съехалось 150 делегатов” (по-видимому, сведение получено с первых рук и отражает фактическое состояние) – нет кворума, так как для кворума должно быть не менее 66%, а фактически 65%. Наблюдаем лихорадочное исправление первоначальной оплошности допущенной фальсификаторами съездовских документов: в тот же день на “родной кинзябаевской” газете “Башкортостан” было дано собщение о 180 делегатах.

Вывод: указанные нарушения являются строго подсудными.

17.04.2011

## БӨЙӨК ТӨРКИ

Бөйөк төрки, туған телем,
Ни бар һинән бөйөгөрәк?!

Был донъяла йәшәү өсөн,
Кемлегеңде белеү кәрәк!

1074 йылда үҙенең үлемһеҙ хеҙмәтен – төрки телдәр һүҙлеген (Диван Лөғәт әт-Түрк) яҙып ҡалдырған бөйөк бабабыҙ Мәхмүт Ҡашғариҙың атаһы Хөсәйен Көнсығыш Ҡафҡаздағы үҫәргән-башҡорттарҙың Бүре-әсә-ил (Берсилия) тигән дәүләтенең баш ҡалаһы Бүре-әсә-ханда (Барсханда йәки Барсғанда) тыуғанлыҡтан, уны бөгөнгө үҫәргәндәрҙең ҡан-ҡәрҙәш бабаһы һанайым. Бүре-әсә-ил (Берсилия) тураһында бер килке мәғлүмәтте сайтымдағы "Хазарҙар һәм аҙарҙар", "Тарих: карталарҙа башҡорттар" исемле хеҙмәттәремдән алырға мөмкин.

Тел белеме өлкәһендә бөтөн донъя күләмендәге бөйөктәрҙән-бөйөк ҡомартҡыбыҙҙың яҙылыу тарихы ҡулъяҙмалағы өҫтәлмәлә аныҡ итеп әйтелгән: "Быны күсереп яҙыуҙы Аллаһы Тәғәләнең тыңлаусан ҡоло Мөхәммәт ибн Аби Бакр ибн Аби-л-Фатих ас-Сәви, һуңыраҡ ад-Димашки – Аллаһы Тәғәлә кисерә күрһен уны! – алты йөҙ алтмыш дүртенсе йылдың егерме етенсе Шаввәлендә аҙнаның беренсе көнөндә[1] китап авторының[2] ҡулъяҙма тексынан башҡарҙы.

Китапты төҙөү дүрт йөҙ алтмыш дүртенсе йыл Жумади л-үлә айының беренсе көнөндә[3] башланған. Артабан ҡарап сыҡҡандпан, төҙәтеүҙәрҙән һәм дүрт тапҡыр мөхәррирләгәндән һуң, ул дүрт йөҙ алтмыш алтынсы йыл унынсы ай Жумади л-Әхыр аҙнаһының икенсе көнөндә[4] осланған".

Аллаһы Тәғәлә был ҡулъяҙма-мөғжизәне баяғылар күсереп биргәнгә тиклем -- ике быуат, һәм 1915-1917 йылдарҙа Төркиәлә беренсе тапҡыр нәшер ителгәнгә тиклем мең йыл буйына саңға әйләндертмәй һаҡлағаны, килтереп еткергәне өсөн шөкөрана ҡылайыҡ һәм урыҫсаға тәржемәлә бөйөк ғалимдың төрки телдәр тураһындағы ифрат мөһим иҫкәртмәһенә иғтибар итәйек: "Самым легким является наречие Уғуз, Самым правильным — у Йағмә, Тухсы и жителей долин рек Ила, Артиш, Йамар и Атил..." Цитатала "Туҡсы" тип аталғаны – ҡыҫҡартылып әйтелмеш "Туҡсабасы" йәғни Туҡсаба бабаның тоҡомдары үҫәргәндәр, тигән һүҙ. Тимәк, хәҙерге башҡорт ырыуы Үҫәргән һәм, ғөмүмән, Или, Иртыш, Һамар һәм Иҙел буйҙары төркиҙәренең һөйләше борондан уҡ төркиҙең "иң дөрөҫө" йәғни төп төрки тел һаналған.

XX быуатта, ниһәйәт, Төркиәнең Мәҙәниәт министрлығы "Диван"дың тулы факсимилеһен ташҡа баҫтырып сығарғас, ҡитғаның төрлө илдәрендә уны ныҡлап өйрәнеү, тәржемәләү эштәре йәнләнә, әммә бик күп төрки халыҡтарҙың ватаны СССР-ҙа, унан һуң Рәсәй Федерацияһында ғына был йәһәттән ҡыл да ҡыбырҙатмайҙар ("ятбауыр" төркиҙәр мөлкәте булғанғамы?..). Шуға күрәлерме, ғалим исеме йөрөткән башҡаларыбыҙ һымаҡ, кустәнәстең Мәскәүҙән килеп төшкәнен көтөп ятмайынса, Мәхмүт бабаның бөгөнгө ҡан-ҡәрҙәше – Үҫәргәндең

[1] Тимәк, 1266 йылдың 1 августында.
[2] Мәхмүт Ҡашғариҙың.
[3] Тимәк, 1072 йылдың 25 ғинуарында.
[4] Тимәк, 1074 йылда.

белдекле һәм игелекле уҙаманы Йәнбирҙин Иршат Бикбулат улы, Рәсәйҙә беренсе булып, 2009 йылда хәҙерге Үҫәргәндең мәркәзе Иҫәнғолда 1433 битлек китап итеп баҫтыртып сығарҙы (фото). Мин был ҙур эштең Башҡортостанда башҡарылыуы менән ифрат ғорурланам.

Факсимиленең һәр битенә аңлатмалар бирелгән, баҫма аҙағында ҡыҙыҡ һәм тәрән мәғәнәле ҡушымталар бар. Моғайын, быуындары ҡатып ҡалсаймаған йәш быуын ғалимдарыбыҙ араһынан бөйөк “Диван”ды тулыһынса туранан-тура ғәрәпсәнән башҡортсаға тәржемә итеүсе лә табылыр. Милләттәшебеҙ Иршат Йәнбирҙиндең ошо ҡыйыу башланғысы бар ҙаһа! Шулай ҙа бик үкенес: мәҙәниәтебеҙ тарихында оло ваҡиға дәрәжәһендәге фәнни яңылыҡ бик наҡыҫ – 30 (утыҙ) ғына данала донъя күргәнлектән, зыялыларыбыҙҙың күпселегенең йылы ҡулы аҫтына барып кермәне, күптәребеҙ белмәне лә күрмәне. Бәҫле уҙамандарыбыҙ, нәширҙәребеҙ, хөкүмәтебеҙ ошоға иғтибар итеп, тиражын етерлек күләмдә ҡабат ташҡа баҫтыртһа, бер беҙгә генә түгел, Рәсәйҙәге бөтә төрки халыҡтар өсөн дә оло ваҡиға, ҡиммәтле ҡулланма булыр һәм ҡомарҡыны




тулыһынса ғәрәпсәнән башҡортсаға һ.б. ҡәрҙәш телдәргә тәржемәләү яйға һалыныр ине. Ә урыҫ теленә килгәндә, китап Рәсәйҙән ситтә -- үҙ аллы Ҡаҙағстан Республикаһының Алматы ҡалаһында 2004 йылда нәшер ҡылынды. Бөтә төрки халыҡтарҙың аралашыу теленә әүерелгән урыҫсаға ауҙарыуҙы ҡаҙаҡ әҙәбиәте классигы Мөхтәр Әүәзовтың Нидерландта йәшәүсе ейәнсәре Зифа-Алуа Әүәзова ханым егәрле атҡарып, хәләл ефете Роберт Эрмерс (индекстарҙы төҙөүсе) менән берлектә әҙерләгән баҫманы.

Донъя күләме әһәмиәтендәге шул тарихи ваҡиғаға инде – ете йыл, һәм мөхтәрәм Иршат Йәнбирҙиндың да нәширлек игелегенә ике йыл үтә тороп та, башҡорт ғалимдары шул йәһәттән һис кенә лә ҡыбырҙамай – академиктарыбыҙ күп, белгестәребеҙ һирәк... Шул сәбәпле әлеге фәҡирегеҙ, ойоуыбыҙға түҙмәй, эсендә йәне булғандарҙың зитына тейеү, эшкә сәмләндереү өсөн, урыҫса текстағы боронғо бабабыҙҙан килгән, әммә бөгөнгөләй аңлашылған байтаҡ һүҙҙәребеҙҙе, мәҡәлдәребеҙҙе, шиғри дастандарыбыҙҙан өҙөктәрҙе әҙәби телебеҙгә тиңләп күрһәттем. Ул өлгөләр, хәҙерге төрки телдәрҙәгегә сағыштырып ҡараһаҡ, барыһынан дә бигерәк башҡорт теленә хастыр. Шул ғәжәйеб тамашаны бабабыҙ Мәхмүт Ҡашғариҙың үҙ кереш һүҙенән башлаһаҡ хәйерле булыр (ҡатар-ҡатар тәржемәнән биҙәрләп, Әүәзованың урыҫсаһын килтерәм).

## Предисловие автора

Хвала /с. 2/ Аллаху, Щедрому на милость и прекрасные благодеяния, Ниспославшему Жибрйла Мухаммаду для раскрытия и толкования Откровения с разъяснением дозволенного и запретного, чтобы он встал на Путь, подняв

путеводный светоч во времена, когда самый здравый был болен, а красноречивейший — нем, да благословит Аллах его и его ближних благороднейшего происхождения и дарует им мир! Ну а далее сказал раб божий Махмуд ибн ал-Хусайн ибн Мухаммад: Когда я увидел, что Аллах Всевышний вознес светило Судьбы к созвездиям тюрок,

небесам указал вращаться вокруг их царства,

назвал их *ат-турк* и наделил могуществом,

сделал Правителями Века и вложил им в руки бразды Избранного народа,

возвысил над [остальными] людьми и направил к истине,

усилил тех, кто был к ним близок и проявлял преданность, — получив от них желанное и избежав позора рабской толпы, — [я понял, что] каждому разумному следует стремиться к их вершинам и остерегаться падения их стрел.

Самый лучший путь к ним — разговор на их языке, манящий слух и лелеющий их сердца. Когда недруг, избегая вражды, обращается к ним, они охраняют его от врагов. Тогда, в поисках добра, к ним устремляются и другие.

Я слышал от благонадежного Эмира Бухарского, а также от другого имама, живущего в Нишапуре, что посланник Аллаха — да благословит его Аллах и да приветствует! — говоря о свойствах нынешних дней, о сумятице, присущей концу эпохи, и /с. *3*/ выступлении тюрок-огузов, сказал: „Учите язык тюрок, так как их правление будет длительным

[туваль]", с *у* после *т*. Если этот хадис достоверен, — а ответственность лежит на тех двоих, — его необходимо изучать, а если и не достоверен, его требует разум.

Я прошел их города и степи, узнал их наречия и стихи: Туркиййя, Туркманиййя — ᵓУғузиййя, Чикилиййя, Йағмаᵓиййя, Ӄирӄизиййя.

Из их числа я один из самых красноречивых и ясных в изложении, образованнейший, благороднейший по происхождению и наиболее ловкий в метании копья. Наречия всех племен усвоены мной в совершенстве и изложены изящной чередой.

Я написал свою Книгу, прося помощи у Аллаха Всевышнего, и назвал ее *Диван Лугат ат-Турк* [Свод тюркских наречий] с тем, чтобы она стала Вечным Памятником и Непреходящей Ценностью, я посвятил ее [продолжателю рода] святых и пророков, имамов, хашимидов и аббасидов, нашему Господину и Покровителю ᵓАбу-л-Ӄасиму ᶜАбдаллаху ибн Мухаммаду ал-Муӄтадӣ би-ᵓАмриллах, Эмиру Правоверных, Халифу Властелина миров, — да продлит Аллах его пребывание в вечной и непреходящей славе и его счастливую и благую жизнь!

Да укрепит основы его власти славой так, чтобы былое величие продлилось при его дворе!

Да возвысит силу его доводов такими доблестями, чтобы люди черпали жизнь из его щедрой ладони:

удачей, спутницей счастливой звезды,

решимостью, бьющей в цель,

другом, познанным в славной победе,

неприятелем, укрощенным силой!

Пусть не покидают мусульман его тень, красота, сила, расположение и величие!

Я составил ее в соответствии с последовательностью букв, входящих в /с. 4/ слова, украсив мудрыми высказываниями, саджем, пословицами, стихами, раджазом и прозой, разровняв их кочки и заполнив лакуны. Я посвятил ей долгие годы труда, расставляя все слова по подобающим местам и освобождая их от неясности, чтобы всякий ищущий мог найти их в соответствующем месте, а пытливый — наблюдать в употреблении.

Весь этот язык я представил в восьми Книгах.

Первая из них — Книга слов, начинающихся с *хамзы [китаб ал-хамз],* которую мы изложили» видя предзнаменование в написании Имени Аллаха Всевышнего[1].

Вторая — Книга правильных слов *[китаб ас-сәлим].*

Третья — Книга удвоенных *[китаб ал-муӡа^с^аф].*

Четвертая — Книга слов, подобных правильным *[китаб ал-миҫәл].*

Пятая — Книга слов со средним слабым *[китаб ӡават аҫ-ҫаләҫа].*

Шестая — Книга слов с последним слабым *[китаб ӡавәт ал-арба^с^а].*

Седьмая — Книга назальных слов *[китаб* ал-ғунна].

Восьмая — Книга слов, содержащих два слитных неогласованных согласных *[китаб ал-чам^с^байн ас-сәкинайн].*

Каждую из этих Книг я разделил на две части, именную и глагольную, на первое место поставив имена, затем — глаголы, подразделяя их далее по порядку — первые в начале [и т. д.]. Названия этих Книг и разделов я позаимствовал из арабского как термины, знакомые людям. Вначале, желая показать, что тюркские наречия идут наравне с арабским языком, подобно двум коням на скачках, я намеревался построить этот труд так же, как ал-Халйл /с. 5/ построил *Китаб ал-^с^Айн,* — он упоминает как употребляемые, так и неупотребляемые слова. Тот метод был яснее. Однако эта структура точнее, легче для понимания и вообще больше нравится людям. Поэтому, стремясь к краткости, я включил то, что употребляется, и пренебрег тем, что не употребляется.

Вот примеры слов, которые употребляются, и тех, что не существуют, они могут дать представление о том, что принято в тюркских языках:

**ариҝ,** „река” — употребляется;

**^э^аҝур,** „конюшня” — употребляется;

**ҝар,** „снег" — употребляется;

**ҝара,** „черный” — употребляется;

**раҝа** — не существует;

**раҝ,** частица сравнения — употребляется;

**^э^азуҝ,** „пища" — употребляется;

**^э^аҝуз** — не существует;

1 Слово „Аллах" в арабском языке начинается с *хамзы [^э^аллйх].*

**ҝузы,** „ягненок" — употребляется;

**ҡыз**, „девушка" — употребляется;

**знҡы** — не существует;

**зныиҡ** — не существует.

Говорят, шаг указывает путь: так же проявляют себя слова, содержащие четыре и более согласных.

Выбрав этот порядок в стремлении к легкости и краткости, я создал беспримерное творение, сочинение, не имеющее себе равных. Основные понятия изложены в нем в соответствии с ясно выраженными правилами и сопровождены примерами, которые я привел, чтобы сочинение шло по пути аналогий и доходчивых сравнений.

Я сделал так, чтобы оно направляло несведущего и следовало за тем, кто его опережает. Это путь, открытый для путешествий, и лестница для восхождения. Для каждой из групп наречий я вывел основные правила, на которых строится речь, так как изложение пространного в кратком виде порождает мудрость.

Я усеял его примерами стихов, произносимых ими в речах и обращениях, а также пословицами, /с. 6/ которые они приводят в качестве мудрых изречений и в горести, и в радости и передают от одного рассказчика другому. Мной также упомянуты известные события и знаменитые изречения. Таким образом, Книга достигла вершин совершенства и пределов изысканности.

*Я прошу у Аллаха помощи в том, к чему стремлюсь всем сердцем: могущество и сила лишь в Аллахе Всевышнем и Великом, Он — наш*

*Милостивый Покровитель!*

Шуныһы ғәжәп: шанлы быуатыбыҙ белдеклеләре – филология фәндәре кандидаттары ғына түгел, ә докторҙары, академиктары тәүәккәлләнеп үркенә алмаған үрҙәрҙе Мәхмүт Ҡашғари бабабыҙ әллә ҡасан -- бынан бер мең йыл элек үк артылып үткән икән!

Инш-Алла, бисмилланан башлап, дөйөм миҫал өсөн тәүҙә текстан һайланма парсаларҙы бирәйек.

татиғ күзрә тиканик тубрә
Таттың (фарсының) күҙенә тегәнәк төбәлдер.

татсиз түрк булмәс башсиз бүрк булмәс
Татһыҙ төрк булмаҫ, башһыҙ бүрк булмаҫ.

ҡилич татиҡса иш йунчир
ар татиҡса ат тунчир
Ҡылыс тутыҡһа эш йонсор,
Ир тутыҡһа аты (исеме) тынсыр (боҙолор).

уҙлаҡ ҡамуғ кавради
ардам ариғ савради
йунчиғ йавуз тавради

ардам баҡи чартилур
Уҙалаҡ ҡамғаҡ ҡаураны,
Артым (прибыль, приплод) арыҡ(ланып) һаураны (һауһыҙланды),
Йонсоу яуыз табышланды, --
Артым баҡи (теге донъя) йортталыр.

алб ар туңа улдиму
исиз ажун ҡалдиму
уҙлаҡ учин алдиму
амди йурак йиртилур
Алп ир туңып үлдеме,
Иҫһеҙ уҙын (заман) ҡалдымы,
Уҙалаҡ (ваҡыт) үсен алдымы. –
Инде йөрәк йыртылыр.

алғил уҡут миндин уғул ардам тилә
буйда улуғ билкә булуб билкиң ула
Алып уҡыу миндән, уғыл, артым телә,
Буйҙа (һәр ҡайҙа) оло белгес булып белемең белән.

уғлум саңә ҡуҙурман ардам уҡут хумару
билкә ариҡ булуб сан баҡкил аниң табару
Уғлым, һиңә ҡуямын артым, ҡот-ҡомарыу,
Белем ире булып, һин, баҡ ҡыл (үҫтер) уның табарын (табышын).

ардамсиздән ҡут чартилур
Артымһыҙҙан ҡот сиртелер.

ардам баши тил
Артым башы – тел.

тилин тукмиши тишин язмас
Телен текмеш тешен яҙмаҫ (телен тешләгән ауыҙ асмаҫ).

алб яғидә алчаҡ чуғидә
Алп – яуҙа, алсаҡ – бәхәстә (һыналыр).

алб чариҡдә билкә тирикдә
Алп – ярыҡта, белгеле – тирәктә (ҡасып ҡалған).

күк тамур кару турмас
Күк тимер (ҡорос) ҡарыуһыҙ тормаҫ.

бу күк кирсун ҡизил чиҡсүн

Был күк (ҡорос) керһен, ҡыҙыл (ҡан) сыҡһын (хәнйәр ҡуйып ант итешеү).

ҡут балҡуси билик
Ҡот билгеһе – белем.

арди уза аранлар
ардам баки билик тағ
айди уҡуш уҡутлар
куңдум булур аңар сағ
Арты уҙғандың (ваҡыттың) – ир-аналар,
Артым бәге (бейе) – белем-тау.
Әйҙәп уҡыу, уҡыттылар –
Күңелем булыр шунан һау.

ума калсә ҡут калир
Өмә (ҡунаҡ) килһә, ҡот килер.

калсә кали йарлиғ булуб йунчиғ ума
калдур ануҡ булмиш ашиғ тутма ума
Килә-ҡалһа ярлы булып йонсоу ҡунаҡ,
Килтер уға булған ашыңды, тотма (көттөртмә) ҡунаҡты.

калса киши атма аңар уртар кула
баҡкил аңар аҙкулукун ағзин кула
Килһә кеше, атма уға үртәр көлөү,
Бағыл (ҡара) уға изгелекле, ауыҙың көлөп (йылмайып).

барди аран ҡунуҡ куруб ҡутка саҡар
ҡалди явуз уйуҡ куруб авни йиҡар
Барҙы (китте) ирҙәр – ҡунаҡ күреп ҡотҡа сығар,
Ҡалды яуыз – ыйыҡ күреп өйҙө йығар.

калсә ума тушуркил тинсун аник аруҡлуҡ
арба саман йағутғил булсун ати йөруҡлуҡ
Килһә ҡунаҡ, төшөр гел – тынһын уның арыуы,
Арпа, һалам йоғондор – булһын аты яраҡлы.

Әүәзованан иҫкәртмә: Обращение к арабской транслитерации ставит перед читателем задачу самостоятельной интерпретации тюркских звуков, переданных посредством арабских букв. Здесь следует иметь в виду, что некоторые арабские буквы и *харакаты* (огласовки) при чтении тюркского текста могут иметь несколько вариантов произношения.

Рәхмәт төшкөрө ғалимә шул варианттарҙы асыҡлап үҙ урындарына ҡуйып билдәләү йәһәтенән ғәрәп телен белмәүсе уҡыусыларға файҙалыҡлы эшләгән.

## Дөйөм текстан мин һөҙөп алған тулы булмаған һүҙлек:

ҡилич – ҡылыс
уҡ – уҡ
касма – ҡашмау
касди – киҫте
үрмә сач – үрмә сәс (толом)
ува – ыуа
увди – ыуҙы, ыумас
каҙут – кейем
каҙти – кейҙе
савинч – һөйөнөс
билиш – белеш
уруш-тукуш – орош-туҡыш (туҡмаш)
ҡурут – ҡорот
йайлағ – йәйләү
йай – йәй
ҡишлағ – ҡышлаҡ
ҡиш – ҡыш
бич – бес
йағач – яҡҡыс, ағас
утуң – утын
балды – балта
тарғаҡ – тараҡ
сач – сәс
урғаҡ – үргәк (үреүле сәс)
ут урди – ут (үлән) урҙы
тирик – тере
тирилди – терелде
улук – үлек
улди – үлде
таргил – тарғыл, тарҡау
тарилди – таралды
йаҙти – яҫтау, яҫтыҡ
ҡағун – ҡауын
аҡин – ағын (ағын һыу)
сув аҡди – һыу аҡты
йиғин тубраҡ – йыйын (өйөм) тупраҡ
тубраҡ йиғди – тупраҡ йыйҙы
сурди – һурҙы
турғу йир – торғо (торған) ер
ат – ат

ар – ир
азуҡ – аҙыҡ
йазуҡ – яҙыҡ
йағмур – яумыр, ямғыр
кумулдурук – ҡомолдороҡ (ҡамыттағы тамаҡбау)
ҡуриғ – ҡурығ, ҡурғауыс
ариғ – арыҡ
ануҡ – аныҡ
тануҡ – таныҡ, танытма
аҙғир – айғыр
ҡазған – ҡаҙған
ҡубуз – ҡубыҙ
түн – тун
барди – барҙы
бартурди – барҙырҙы
калди – килде
калтурди – килтерҙе
сув ичисади – һыу эсәһе
кулумсунди – көлөмһөрәне
урди – орҙо
урушди – орошто
турди – торҙо
турушди – тырышты
ар ачуҡди – ир асыҡты
ар уҡ атди – ир ук атты
буз тукуди – бүҙ туҡыны
бардачи ар – барыусы ир
калдачи ар – килеүсе ир
ау – ау, өй
таз калики буркчика – таҙ килеүе – бүреҡсегә
сукти – һүкте
табди – типте
ҡуш ҡанатин ар атин – ҡош – ҡанатын, ир – атын (ҡурсалар)
әт – ит
ут унди – ут (үлән) уңды
атҡа ут биркил – атҡа ут (үлән) биреп кил
үт – үт (әсе дарыу)
үт ичтим – үт (дарыу) эстем
үтәчи – үтәсе, үтсе (табип)
үт – ағыу
бак аңар үт бирди – бәк (бей) уға үт (ағыу) бирҙе.
ит – эт
уч -- өс
уч ярмаҡ -- өс ярмаҡ (тәңкә)

ич – эс
сүз – һүҙ
арлар – ирләр
әр -- әр, әрләү, әрнеү, әрһеҙ
өз -- өҙлөк, һөҙлөк (ит майы)
ус, эс – ҡоҙғон

Миҫал:
калди маңа тат
айдим амди йат
ҡушҡа булуб әт
сани тилар ус бури
Килде миңә тат (фарсы),
Әйттем: "Инде ят (үл)
Ҡошҡа булып ит –
Һине теләр ҡоҙғон, бүре!"

Һүҙлек:
уҡ йилан – уҡ йылан
байа уҡ калдим – бая уҡ килдем
иҡ – иҡ, иҡылдау (икота)
ул – ул, теге
ул маниҡ уғлум ул – ул минең улым ул
ам – им (дауа)
амчи – имсе
әм -- әм (женский половой орган), оғуз, ҡыпсаҡ һөйләшендә
им, ым – ым (пароль)
ым билсә ар үлмәс – ым белһә, ир үлмәҫ
өн -- өн
аң – аң (сикә), аңкау (сикә эсе)
уң алиг – уң алғыс (уң ҡул), Сик-ил һөйләшендә
алб – алп
арт сач – арт сәс
арт – артылыш, тау артына төшөү

армаҡуҡа ашиҡ арт булур
Арымһаҡка ашыҡ (ашыҡ/аяҡтың шайтан һөйәге) артылыш (тау) булыр.

үрт – энә күҙәүе
үрт – үрт (янғын)
анд – ант
аст – аҫты (кәртә аҫты)
илк – элек

ут – ут

ут тисә ағиз куймас
“Ут” тиһә (тигәндән) ауыҙ көймәҫ.

үт – үт, үткелек
үч – үс
уч – ос (ботаҡ осо)
уч ил – ос ил, остағы ил
уд – уҙ, уҙғын ваҡыт

уд качар киши туймас
йалиңуҡ уғли маңку ҡалмас
Уҙғын (ваҡыт) ҡасыр – кеше тоймаҫ,
Әҙәм уғлы мәңге ҡалмаҫ.

ыд – ыҙа, ыҙансы үгеҙ
ыд йили – ыҙа (үгеҙ) йылы
үз – үҙ

күрклүк тунуғ узуңка
татлиғ ашиғ аҙинҡа
тутғил ҡунуҡ ағирлиғ
йаҙсун чавиң буҙунҡа
Күркле туның – үҙеңә,
Татлы ашың – уҙғынға.
Тот ҡыл (күтәр) ҡунаҡ ауырлығын –
Яҙһын (таралһын) шәбең (шәплегең) бөтөнгә (халыҡҡа).

үз – үҙән; тағ үзи – тау үҙәне, үҙәге
үз – үҙ; үз киши – үҙ кеше
үз – эс; үзүм ағирди – эсем ауырыны
үз – үҙәк, йән

борди кузум йаруҡи
алди узум ҡунуҡи
ҡанда аринч ҡаниҡи
амди удин уҙғурур
Борҙо күҙем ярығын,
Алды йәнем ҡунағын.
Ҡайҙа әрнеш ҡаныуы?
Инде (нисек) ваҡыт уҙғарырмын?

иш – эш

иш – иш (кемдеңдер, нимәнеңдер ише)

аниӊ ишин ҡачурдум
ишин йима ҡачурдум
улум үтин ичурдум
ичди булуб йузи тури

Уның эшен ҡасырҙым (бөтөрҙөм),
Ишен йәнә ҡасырҙым (бөтөрҙөм),
Үлем үтен (ағыуын) эсерҙем,
Эсте булып йөҙө турһайыулы.

ык – ыйыҡ (ауырыу)
ил – ил
ил – ел (ат елә)
ил баши – ил башы
ун – ун
өн -- өн
он – он
ин – иӊ; бу буз ини ничә -- был бүҙ (мамыҡ туҡыма) иңе нисә?
өн -- өң
уй – уй, уйһыулыҡ
учут – үжәт
уҡут – уҡыт, уҡытыу

алғил уҡут миндин уғул ардам тилә
буйда улуғ билка булуб билкиӊ ула

Ал гел уҡыу минән, уғыл, артым телә,
Буйҙа (һәр ҡайҙа) оло белгес булып белемең менән.

улут – үләт
атач – атас (атаһына оҡшаған)
атич – атыш
ишич – эсес (ҡаҙан)

ишич айур тубум алтун
ҡамич айур ман ҡайда ман

Ҡаҙан әйтер, төбөм алтын.
Сүмес әйтер, мин ҡайҙамын?!

ачә -- әсә
ачә, аҡа – (бер туған ҡыҙҙарҙың өлкәне)
ичи – (бер туған малайҙарҙың өлкәне)
акач – аҡ әсә
анач – анас (анаһына оҡшаған)

анə -- ана
апə -- апа
абə -- əсə (Уғыҙ һөйлəшендə)
абə -- айыу (Ҡыпсаҡ һөйлəшендə)
абə -- ата (Тубут һөйлəшендə)
убə -- уба, түбə, ҡəбилə (Уғыҙ һөйлəшендə)
ағир – ауыр
уғур – ығыр (үтер-ваҡыт)
акир – айыр (һаҙматта үҫкəн дарыу үлəне)

акир булса ар улмас
    Айыр булһа ир үлмəҫ.
Хəҙергеһе:
    Ирəүəнле ерҙə ир үлмəҫ,
    Андыҙлы ерҙə ат үлмəҫ.

учуз, учуз наң – осһоҙ, осһоҙ (арзан) нəмə
уҙуз/ыҙыҙ – ыҙалаусы, ҡорсаңғы

тилкү үз йинка өрсə уҙуз булур
    Төлкө үҙ өңөнə өрһə ҡорсаңғы булыр.

ағуҙ – ыуыҙ
ағиз – ауыҙ

ағиз йиса куз уйаҙур
    Ауыҙ ейһə (ашаһа) күҙ оялыр.

укуз – ыуыҙ (йылға)
укуз – үгеҙ

укуз аҙаки булғинча бузағу баши булса йик
    Үгеҙ аяғы булғансы, быҙау башы булһа инек.

авус (Болғар һөйлəшендə) – бал-ауыҙ, балауыҙ
ыулас – көлəс; ыулас күз – көлəс күҙ

булнар мини ыулас күз
ҡара маңиз ҡизил йуз
андин тамар төкəл төз
булнаб йана ул ҡачар
    Буйлар мине көлəс күҙ,
    Ҡара миңле ҡыҙыл йөҙ,
    Унан тамар теүəл төҫ,

Бүленеп йәнә ул ҡасыр.

убуш – үбеш
атиш – атыш
отуш – отош
итиш – этеш
адаш – аҙаш
уруш – орош
алиш – алыш
улуш -- өлөш
улуш – ылыҫ (ауыл, йки ҡала)
ачиғ -- әсе
аҙиғ – аҙғын (айыу)

авчи нача ал билса
аҙиғ анча йул билир
Аусы нисә алым белһә,
Айыу шунса юл белер.

аҙиғ – айыҡ
уруғ – ырыу
азиғ – аҙау
улуғ – олоғ, оло
илиғ – йылы; илиғ сув – йылы һыу
ачуҡ -- асыҡ
учаҡ – усаҡ
аҙаҡ – аяҡ
иҙук – изге
ариҡ – арыҡ, йылға, канал
уғлаҡ – тәкәбәрәс

ағилда уғлаҡ туғса ариҡда ути унар
Ауылда тәкәбәрәс тыуһа, йылғала үләне уңыр.

аруҡ – арыҡ, арыған; аруҡ ар – арыҡ (арыған) ир
урук – үрек (үрелгән бау)
азуҡ – аҙғын
азуҡ – аҙыҡ

сартник азуҡи ариғ булса йул уза йир
Һарттың (сауҙагәр-юламандың) аҙығы арыҡ (наҡыҫ) булһа, юлы оҙайыр.

узаҡ – оҙаҡ

узуҟ – уҙыҟ, уҙар ат
ашуҟ – ашыҟ (шайтан) һөйәге
ушуҟ – ышыҟ
улуҟ, улаҟ – улаҟ
улуҟ – ҡул башы

улуҟ йағри уғулҟа ҟалир
Ҡул башы яраһы уғылға ҡалыр (йәғни тиҙ уңалмаҫ).

ануҟ – аныҟ
абаҟ -- әпәк (сабый телендә “икмәк”)
атак – итәк
атук – итек
утук – үтек, үтеү, эс үтеү
үҙик – саманан уҙыу, ашҡыныу

үҙик мини ҟумитти
саҟинч маңа йумитти
күңлүм аңар амитти
йузум маник сарғарур
Өҙөк (өҙөлөп һөйөү) мине кәметте (ябыҡтырҙы),
Һағыныс мине йонсотто.
Күңелем уға өмөтләнде --
Йөҙөм минең һарғайҙы.

арук -- өрөк
ирик – эрек, серек
ирук – йырыҟ, ярыҟ

кунда ирук йуҟ
баҟда кийик йуҟ
Көндә (Ҡояш битендә) ярыҡ юҡ,
Бәктә (бейҙә) ҡыйыҡ (ҡыйышлыҡ) юҡ.

арик – шәп, матур; арик йилҟи – шәп йылҡы

арик ирини йағлиғ
армаку баши ҟанлиғ
Шәптең ирене майлы,
Һармаҡтың башы ҡанлы.

үзәк – үҙәк, йән
ужук – ижек
асик – асыҟ

исик – эҫе
алик – алыҡ, алғыс (ҡул)
йилик – елек
амик – эмей
атил – Иҙел

атил суви аҡа турур
ҡайа туби ҡаҡа турур
балиҡ тилим баҡа турур
күлүң таки кушпарур
　　Иҙел һыуы аға торор,
　　Ҡая төбөн ҡаға торор,
　　Балыҡ, тәлмәрйен баға торор –
　　Күлен тағы ҡаушарыр (ҡушылдырыр).

ағил – ауыл (һарыҡ кәртәһе)
уғул – ул
амул – йыуаш

ҡанча бардиң ай уғул
ардиң мунда инч амул
аттин амди сан туңул
ҡилдиң арса ҡилмағу
　　Күпме барҙың, ай, уғыл,
　　Арттың (күтәрҙең) мында инсе (исем) “Йыуаш” тип.
　　Аттан (ул исемдән) инде һин төңөл –
　　Ҡылдың ирҙәрсә ҡылмағанды!

убум – убым, йотом
урум – урым (бесән урымы)
узум – йөҙөм (виноград)
ағим – аҙым
аҡим – ағым (һыу)
алим – алым, алынасаҡ бурыс

алимчи арслан
биримчи сичған
　　Алымсы – арыҫлан,
　　Биремсе – сысҡан.

атан – бестерелгән дөйә

атан йуги аш булса ачҡа аз курнур
　　Атан йөгөндәй аш булһа ла, асҡа аҙ күренер.

учун -- өсөн (унын өсөн)

аран – ирҙәр

аран – аран (мал торлағы)

ирин – ирен

узун – оҙон

ажун – ужым (“теге донъя” Сикил һөйләшендә)

ажун – уҙын (уҙынсы-ваҡыт) йәғни быны ғәрәпсәнән ингән “заман” алмаштыра

асан – иҫән

авин -- әүен

аќин – уќ-иң (яурын)

укун -- өйөм (әйбер өйөмө)

улун – олон

убуб – һөҙһөт-ќош

ат – ат (исем)

ач – ас

ач на йимас
туќ на тимас

Ас ни еймәҫ (ашамаҫ),
Туќ ни тимәҫ.

ар, ар бури – ир бүре (гиена)

куруб начук ќачмадиң
йамар сувын кәчмәдиң
тавариңни сачмадиң
йису сани ар бури

Күреп нисек ќасманың,
Һамар һыуын кисмәнең?
Табарыңды сәсмәнең –
Ейһен (ашаһын) һине ир бүре!

аз – аҙ

әс -- әсә-ќол

аш – аш

аш айаќ – аш аяќ

ашла – ашлау

ав – ау

өв -- өй

аќ – аќ

ал – ал (ал төҫ)

ал – алдау, хәйлә

алин арслан тутар кучун айуҡ тутмас

Алғыр арыҫлан тотар, көслө айыу ҙа тотмаҫ.

ала – ала тән
ай – Ай
ай – ай (месяц)

ҡишҡа итин калса ҡали ҡутлуғ йай
тун кун ҡача алҡинур уҙлак била ай

Ҡышҡа етеп килһә ҡалған ҡотло йәй,
Төн-көн ҡаса алҡыныр уҙалаҡ (тиҙлек) менән ай.

айиғ – айыу
айаҡ – аяҡ (туҫтаҡ)
уйуҡ – ыйыҡ

барди аран кунук куруб ҡутка саҡар
ҡалди йавуз уйуҡ куруб авни йиҡар

Барҙы (китте) ирҙәр – ҡунаҡ күреп ҡотҡа сығар,
Ҡалды яуыз – ыйыҡ күреп өйҙө йығар.

уйун – уйын
айа – ая (ус аяһы)
уйа – оя
аба – аба (Оғуз һөйләшендә “әсә”)
аба – аба (Тубут һөйләшендә “ата”)
апа – апа
ата – ата
ача -- әсә, то же, что ака “старшая сестра”
ара – ара
ари – бал ҡорто
ур – ур (ҡаҙылған соҡор)
ури – “ур-ра!” (оран)
уза – уҙа (уҙған ғүмер, ваҡыт)

арди уза аран лар
ардам баки билик тағ
айди уҡуш уҡутлар
куңлум булур аңар сағ

Бар ине элек ирҙәр –
Артым бәге, белем тауы.
Әйҙәп уҡыу(ға), уҡыттылар,
Күңелем булды шунан һау.

ağу – ағыу
ава – авау! абба!
акә -- өлкән апай
акә -- аға, ил ағаһы
ала – ала төç, ала тән

киши аласи ичтин йилҡи аласи таштин
Кеше алаһы – эстән, йылҡы алаһы – тыштан.

ула – юл билдәһе, маяҡ

ула булса йул азмас
билик булса сүз йазмас
Билдә булһа, юл аҙмаç,
Белем булһа, һүҙ яҙлыҡмаç.

ума -- өмә, өйгә йыйылған халыҡ, ҡунаҡ

ума калса кут калир
Өмә килһә, ҡот килер.

калса кали йарлиғ булуб йунчиғ ума
калдур анук булмиш ашиғ тутма ума
Килә-ҡалһа, ярлы булып, йонсоу өмә,
Килтер уға булмыш ашыңды, тотма (көттөртмә) өмәне.

ана – ана (инә, әсә)
ини – эне
аңар – уға
уңур -- өңөр, өңөрәйгән (мәмерйә)
иңир – эңер
аңас – аңыш
армут – армыт (груша)
артуч – артыш
аркач – иркәс (кәзә тәкәһе)

аркач ати ам булур
ачку ати йил булур
Иркәс ите им булыр,
Әсә-кәзә ите ел булыр (эс күптерер).

уркуч – үркеш (тулҡын)
аҙғир – айғыр

улкар -- Өлкәр йондоҙлоғо
аркуз сув – эркеш һыу
йаруҝ – ярыҡ (яркий), яҡтылыҡ

йай барубан аркузи
аҝти аҝин мундузи
туғди йаруҝ йулдузи
тиңла сузум кулкусуз
Йәй барышы эркелде,
Аҡты ағын эркете,
Тыуҙы ярыҡ йондоҙо, --
Тыңла һүҙем(де) көлкөһөҙ.

уксуз – үкһеҙ
артиш – Иртыш һыуы
арҝиш – арҡыш (йөк арҡалаған карауан)

йираҝ йир савин арҝиш калдурур
Йыраҡ ер һүҙен арҡыш килтерер.

алҝиш – алҡыш
утруғ – утрау
атлиғ – атлы
утлуғ – утлыҡ (үләнлек)
итлиғ – этлек, этле
ағриғ – ауырыу
артуҝ – артыҡ
уртаҝ – уртаҡ (әшнә, товарищ)

уртаҝ ардан артуҝ алмаш
Уртаҡ ирҙән артыҡ алмаш.

усруғ – уҫырыҡ
ағдуҝ – аҡтыҡ
ағруҝ – ауырлыҡ
ивриҝ (ғәрәп һүҙе) – ҡыуышан (кувшин)

ивриҝ баши ҝазлайу
сағраҝ тулу кузлайи
сакинч ҝуҙи кизлайу
тун кун била савналим
Ҡыуышан башы ҡаҙмуйын,
Тағараҡ тулы күҙенән (хәмер менән).
Һағыныс ҡуҙын ҡыҙыулатып,

Төн-көн буйы һөйөнәйек.

тағиҡ уҡруҡин акмаш
таңизни ҡайғикин букмаш
Тауҙы ҡороҡлап эймәҫһең,
Диңгеҙҙе ҡайыҡлап бөкмәҫһең.

уҡлуҡ – уҡлыҡ, уҡ һауыты (ҡулсан)
алчаҡ – алсаҡ
абмак – әпмәк (икмәк)
атмак -- әтмәк (икмәк)
ариғ – арыу (шәп, яҡшы)
уҙлак – уҙалаҡ (ваҡыт)

уҙлак ҡамуғ кавради
ардам ариғ савради
йунчиғ йавуз тавради
ардам баки чартилур
Ваҡыт кәмеп ҡауранды,
Артым арыу һауыҡты,
Йонсоу яуыз табышланды –
Артым бәге сиртелер.

урдак – үрҙәк, өйрәк

ҡаз ҡубса урдак кулук илланур
Ҡаҙ ҡупһа (китһә), үрҙәк күлдә илләнер.

арсак -- ирсәк (фәхишәсе)

арсак аркә такмас
ивак авкә такмас
Ирсәк -- иргә туймаҫ,
Ебек -- өйгә туймаҫ.

арлик – ирлек
арнак – бармаҡ
асрук – иҫерек
учкил -- өскөл
ахшам – ахшам
уҙрум – уҙырым, уҙаман
ардам – артым (доход, приплод)

ардам баши тил

Артым башы – тел.

уҡтум йир – уҡ атым ер
арҡун – арғын (метис)
иркин – иркен
уркун – үрген (ҡасыу урыны)
устун -- өҫтөн
астин – аҫтын
ашкин – ашҡын
амкак – имгәк

амкак акинда ҡалмас
Имгәк иңеңдән ҡалмаҫ.

аркак – иркәк, иркә
иңак – инәк (инә-һыйыр)
айтиш -- әйтеш
айруҡ – айырым
өйлә -- өйлә (төш ваҡыты)
ачлиҡ – аслыҡ
ашлик – ашлыҡ
ашйак – ишәк
аҡру – аҡрын
андуз – андыҙ

андуз булса ат улмәс
Андыҙ булһа ат үлмәҫ.

аңлик – иннек (румяна)
айдиң – айҙың
арҡар – архар
ухшағ – оҡшаған
увруғ – умыртҡа
учмаҡ – ожмах

турлук чачак йазилди
барчин йазим карилди
учмаҡ йари курилди
тумлиғ йана калкусуз
Төрлө сәсәк яҙылды (асылды),
Барса яҙым кирелде,
Ожмах йорто ҡоролдо –
Дымлыҡ (һыуыҡ) йәнә килгеһеҙ.

ахсаҡ – аҡһаҡ
урғаҡ – ураҡ
ағлаҡ – аулаҡ
уғлаҡ – кәзә тәкәбәрәсе

уғлаҡ йиликсиз уғлан биликсиз
Уғлаҡ (тәкәбәрәс) – елекһеҙ, уғлан-бала – белекһеҙ.
истак – эстәү, эҙләү
устак -- өçтәк, өçтәү
алтун – алтын
инкән – инә дөйә
буту – бута (дөйә балаһы)
инкән иӊраса буту бузлар
Инкән (инәһе) иӊрәһә, бута буҙлар.

уйнаш – уйнаш
уйнаҡ – уйнаҡ
айран – айран
арӊаҡ – бармаҡ

биш арӊаҡ туз армас
Биш бармаҡ тигеҙ булмаç.

үсүз – йоҡоһоҙ
исиз – иçһеҙ
икиш – ығыш
ушаҡ – ошаҡ
усал – уçал
айас – аяҙ
үкәй – үгәй
умай -- әсә ҡарынындағы бала күлдәге
умай – Һомай

умайҡа табинса уғул булур
Һомайға табынһа, уғыл (ул) булыр.

арбә -- арпа

арбәсиз ат ашумас
арҡасиз алб чариҡ сийумас
Арпаһыҙ ат (тау) ашмаç,
Арҡадашһыҙ алп сиреү һуймаç.

уртү – урта

иртә -- иртә
арчи -- әрйә
амди – инде (хәҙер)

убкам калиб уғрадим
арслан лайу кукрадим
алб ләр башин туғрадим
амди мани ким тутар

Үпкәм килеп үкерәнем (үкерҙем),
Арыҫландай күкрәнем,
Алплар башын тураным –
Инде мине кем тотар?!

умду -- өмөтө
анда – анда, унда
убри -- әбрә(кәй)
урту – урта
уғри – уғры
акри – кәкре

йилан канду акрисин билмас
тавә бувинин акри тир

Йылан үҙенең кәкреһен белмәҫ:
Дөйә муйынын “кәкре” тир.

арғү – арғы
арҡа – арҡа
убкә -- үпкә
ичкү – эске
аҙкү – изге

калса киши атма аңар уртар кулә
баҡкил аңар аҙкүлукун ағзин кулә

Килһә кеше, атма уға урттәр көлө,
Баҡкыл (ҡара) уға изгелекле, ауыҙың көлөп.

арки – йәки
аркү – табут
аскү – аҫҡы (аҫма иләк)
аски – иҫке
иҙмә -- гиҙмә (үҙаллы гиҙергә ебәрелгән йылҡы)
үрмә -- үрмә (сәс)
укмә -- уҡмаш
алма -- алма

утнү – үтенеү
анда – анда, унда
ики – ике
утунч – үтенес
учунч -- өсөнсө
икинч – икенсе
унунч – унынсы
йикирминч – егерменсе
иринч – иренес
укунч – үкенес
умунч -- өмөтлөнеш
инанч – инаныс
утуң – утун
ириң – эрен
аңаҡ – яңаҡ
алачу – аласыҡ
улиғу – олоуы
атаҡи – атаҡай
ичакү – эсәге, эсе
айаку – аялай (ус аяһындай)
армакү – һармаҡ

армакүкә булут йук булур
Һармаҡҡа болот (та) йөк булыр.

ҡатун – ҡатын
иҡилач – ихлас (юртаҡ ат)

алб арика йавритмә
иҡилач арҡасин йағритма
Алп иргә йәбер итмә,
Ихлас (юртаҡ) арҡаһын яралы итмә.

иҡилачим арик булди
арик булгу йари курди
булит уруб күк уртулди
туман туруб тули йағди
Ихласым (юртағым) арыу булды,
Арыу булыуҙы ярай (тип) күрҙе.
Болот урап, күк үре тулды,
Томан тороп, түле (боҙборсаҡ) яуҙы.

алаван – аламан (крокодил)
итинди – этенде

акинди – икенде (намаҙы)
арғағ – ырғаҡ
уттуз – утыҙ

уттуз ичиб кикралим
йуҡар ҡубуб сакрилим
арслан лайу кукралим
ҡачти саҡинч савналим
Утыҙ эсеп кикерҙем,
Юғары ҡубып һикерҙем,
Арыҫланланып күкрәнем –
Ҡасты һағыныс (һағыш), һауыҡтым.

иккиз – игеҙ
арриғ – арыу
аллик – илле
авичға – абышҡа
азуҡлиғ – аҙыҡлы

азуҡлиғ аруҡ армас
Аҙыҡлы ырыу арымаҫ.

урунчаҡ – урынсаҡ (аманат)

урунчаҡ алб йармади
алимлиғ куру армади
адашлиҡ уза турмади
ҡалин аран тиркашур
Аманат-алп ярманы (яҡламаны),
Алымлыҡ ҡоро арыманы,
Аҙашлыҡ уҙҙы, торманы –
Ҡалын ирҙәр тиргәшер.

уғулчуҡ – ул тыуҙырыусы инәлек (матка)
учуслуҡ – осһоҙлоҡ
уруғлуҡ – орлоҡлоҡ (орлоҡ бойҙайы)
ачиғлик -- әселек
ачуҡлуҡ – асыҡлыҡ
учаҡлиҡ – усаҡлыҡ
аруҡлуҡ – арыулыҡ
урумчак – үрмәксе
уҙитғән – үҙиткән

устиған ҡуйаш ҡабсади

умунчлуғ аҙаш йайсади
артиш сувин качсади
будун анин уркушур

“Эс!” – тигән (һыуһатҡыс эҫе) Ҡояш ҡабынды,
Өмөтлөк аҙаш йыйынды,
Иртыш һыуын кисенде –
Бөтөнөһө унан өркөшөр!

украйуҡ – үкереүсе (һыҙғырыусы) уҡ

украйки мундағ уҡ
мунда аҙин тилдағ уҡ
атса ажун уғраб уҡ
тағлар баши картилур

Үкереүсе – мындағы уҡ;
Мында – оҙон телле уҡ;
Атһа заман табуты уҡ, --
Тауҙар башы киртелер.

уйатсилик – оятсылыҡ
өке -- өкө
уткунч – үткән эш (хикәйәт)
утуңлуҡ – утынлыҡ
ур -- өр
ип – ип; иплән – яйлап, йәйәүләп

уҙу бариб укуш ипдим
талим йуриб кучи капдим
атим бирлә таку апдим
мини куруб йаси ағди

Үҙем барып уҡыу ипләнем,
Талым (берталай) йөрөп көсөн ҡаптым (еңдем),
Атым менән тағы ауҙым (ябырылдым) –
Мине күреп йәше аҡты.

тариғ акди – тары икте (сәсте)
укмак – уҡмаш
бишиб – бешеп
тиканак – тегәнәк
илди – элде
илар – элəр
илмак – элмәк
ам – им,
амди – имде,

амар – имәр
ин – ин
таӊ атти – таӊ атты
ут – үт, үтте

ӄиш йай билә тукишти
ӄиӊир кузун баӄишти
тутушӄали йаӄишти
утғәлимат уғрашур

> Ҡыш Йәй менән төкөштө,
> Ҡыңғыр күҙен бағышты.
> Тоташлай яҡынлашты –
> Ут-ғәләмәт урлашыр.

кайик – кейек
әч – ас
арди – арыны
азди – аҙҙы
узди – уҙҙы
ас – аҫ
аш, ашун – аш, ашын
айди -- әйтте
уйди – уйҙы
уӊди – уӊды
утур – утар (сүп үләнде утар)
учур – осор
исир – иҫер

ит исирмас ат табмас тимә

> Эт иҫермәҫ (тешләмәҫ), ат типмәҫ, тимә.

аларди – аларҙы

ӄаӄләр ӄамуғ күләрди
тағлар баши аларди
ажун тини йилирди
ту ту чачак чаркашур

> Ҡаҡтар (ҡаҡ ерҙәр) ҡамалып күләрҙе (күләүекләнде),
> Тауҙар башы аларҙы,
> Заман тыны йылынды –
> Тыу-тыу сәсәк сәкәшер (теҙелер).

амуз – имеҙ
убуш – үбеш

ачиш – асыш
әчиш -- әсеш, әсеү
учаш – үсәш, үсләшеү
аруш – ирешеү, иреү
уруш – орош, орошоу

алблар бирлә урушмә
бакләр бирлә турушмә
Алптар менән орошма,
Бәктәр менән (ҡаршы) торошма.

аран алби уҡиштиләр
ҡиңир кузун баҡиштиләр
ҡамуғ тулмун туҡиштилар
ҡилич ҡинкә кучун сиғди
Ирҙәр албы айҡаштылар,
Ҡыңғыр күҙен бағыштылар,
Ҡамау толомон туҡыштылар –
Ҡылыс ҡынға көскә һыйҙы (ҡан уҡмашҡанлыҡтан).

маңа – миңә
аңир – уға
аник – уның, уныҡын
ағиш – ауыш
аҡиш – ағыш, ағылыу

ҡар буз ҡамуғ арущди
тағлар суви аҡищди
кукшин булут урущди
ҡайғуҡ булуб укришүр
Ҡар, боҙ ҡамалып ирене,
Тауҙар һыуы ағылды,
Күкшел болот орошто –
Ҡайғылы булып үкерешер.

икаш – игәш (игәүләш)
икашур – игәшер

икки буғра икашур
утра кукәкүн йанчилур
Ике бүре игәшер,
Уртала күгәүен йәнселер.

алиш – алыш

улиш – олош, олошоу

улишиб аран бүлайу
йиртин йаҡа урлайу
сиҡриб уни йурлайу
сиғтаб кузи уртулур
    Олошоп, ирҙәр бүлешәлер,
    Йортон дошман урлайҙыр.
    Һыҡрап өнө, йырлайҙыр –
    Һыҡтап, күҙе үртәлер.

усуҡмаҡ – ысыҡмаҡ (һыуһамаҡ)

усуҡмишҡа саҡиғ ҡамуғ сув курнур
    Һыуһамышҡа сағыу ҡамаҡ (мираж) һыу (булып) күренер.

алиҡ – олаҡ

баши аник алиҡти
ҡани йузуб туруҡти
балиғ булуб тағиҡти
амди ани ким йатәр
    Башы уның олаҡты,
    Ҡаны йөҙөп тороҡто (уҡмашты),
    Балиғ булып тауланды –
    Инде уға кем етәр?

атик – утыҡ
атикти – утыҡты
урул – урыл (үлән урыл)

ҡурви чувач ҡурулди
туғум тикиб урулди
суси атин урулди
ҡанчуҡ ҡачар ул тутар
    Ҡор-бей сатыры ҡоролдо,
    Тыуым (байрағым) тегеп (дөмбөр) ороллдо,
    Һуғышсылар атына үрелде –
    Ҡайһылай ҡасыр ул тотар (дошман ғәскәренең тотҡа-башлығы)?!

уркән -- үркән, үргән

ялңуҡ урулмиш ҡаб
ул ағзи йазлуб алкинур

Ялҡын – үрелмеш ҡап,
Ул ауыҙы яҙылып (асылып) алҡыныр.

акил – эйел

ҡуруғ йиғач акилмәс
ҡурмиш кириш тукулмәс
Ҡоро ағас эйелмәç
Ҡоролмош (ҡоролған) кереш төйнәлмәç.

утун – үтен
ишан – ышан
авин – ауан
алин – алын (әсир)
илин – элен

йабду маңа алинди
амкак куру илинди
килмишиңа иланди
тутғун булуб ул ҡатар
Яусы миңә алынды –
Имгәк күрә ул инде.
Килмешенә иланды –
Тотҡон булып ул ҡатыр.

ашит – ишет

кулак ишитса куңул билур
куз курса удик калир
Ҡолаҡ ишетһә, күңел белер,
Күҙ күрһә, үҙе (һөйөү) килер.

амитти – ынтылды

ҡулан тукәл ҡумутти
арҡар скаҡ йумутди
йайлағ таба амитти
тизкин туруб сакришур
Ҡулан, туҡал ҡомарҙы,
архар, сайғаҡ йыйылды,
Йәйләү(гә) табан ынтылды –
Теҙелеп тороп һикерешер.

анутти -- әҙерләнде

тулум анутса ҡулун булур
тулум унутса булун булур
Толом (аруах-ирем) әҙерләнһә, ҡолон булыр,
Толом онотһа, бөлөм булыр.

унат -- өнәт (ризалаштыр)
унут – онот
уйат – оят
уңул – уңал
убтур – үптер
ичур – эсер

сув ичурмаска сут бир
Һыу эсермәҫкә һөт бир.

ахтар – аҡтар
артур – артыр

калди бару артуру
бирди илин артуру
мунда ҡалиб ултуру
букри булуб ун бутар
Килде бире артылып,
Бирҙе илен артылып.
Мында ҡалып ултырып
Бөкрө булып өн бутар.

азтур – аҙҙыр
узтур -- өҙҙөр
астур – аҫтыр
устар – үстәр (үсләшеүгә һәләтле)

тузун бирлә уруш
утун бирлә устарма
Түҙем(ле) менән орош,
Утын менән үсләшмә.

аҡтур – аҡтыр (ағылдыр)

аҡтурур кузум йулаҡ
тушланур урдак йуғаҡ
Аҡтырыр күҙем юлаҡ (йәш) –
Ташланыр үрҙәк-йыуғаҡ (йыуыныусы).

ултур – ултыр
умлук – үмнек (эйәр өҫтө, ыштан төбө)

бутун умлук ҡанчә ҡулсә ултурур
Бөтөн ыштан ҡайһылай ҡулай – шулай ултырыр.

уҙғар – уҙғар (хәтереңдән, күҙ алдыңдан уҙғар)
арғурди – арытты

куңлум аңар ҡайнайу
ичтин аңар уйнайу
калди маңа буйнайу
уйнаб мини арғурур
Күңелем уға ҡайнаны,
Эстән уға уйнаны.
Ҡалды миңә буйһынырға –
Уйнап мине арытыр.

Аш татыһы тоҙ -- йүгәрене еймәҫ (ашамаҫ -- боҙмаҫ)

йаҡри – майлы

биширлүр йаҡри ҡийәҡ
тушғурур йуғри чанәк
Бешерелер майлы кейек,
Ташыр тулып йүгәренән (өйрәнән) шан (оло һауыт).

йавғу – ялпы
йалға – ялға

ҡарә муң калмакинчә
ҡарә йалғә качмә
Ҡара моң килмәйенсә,
Ҡара ялға ҡасма.

йалв – йәлеп итеү
йалвин – йәлеп иткес

йалвин аник күзи
йалҡин аник үзи
түлун айин йүзи
йарди маниң йүрәк
Йәлеп иткес уның күҙе,
Ялҡын уның үҙе,
Тулған Айҙай йөҙө --
Ярҙы минең йөрәкте.

йувҡә -- йоҡа

анәси тавлуҡ йувҡә йабәр
уғли тайтик ҡушә ҡабәр

Инәһе тауыҡтай – йоҡа ябар (көлсәне),
Уғлы тайҙай – ҡуша ҡабар (бер юлы икеһен).

йилҡи – йылҡы
йарма – ярма
йикнә -- энә
йумғи – йәмғе
йаләчи – яласы
йашәгү – йәшәге
йамағү – ямағы, ямауы
йабаҡү – ябағы
йимшән – емшән (күгәрем)
йалғән – ялған
йатикән – Етегән
йунинди – юнынты, юнышҡы
йасғәч – яҫы ағас (ҡуна таҡтаһы)
йағмур – ямғыр

начә мә убраҡ каҙук арсә
йағмурҡә йарәр
Нисәмә өлбөрәк кейеҙ ҙә
Ямғырға ярар.

ҡуйди булут йағмурин
кариб тутәр аҡ турин
ҡирҡә ҡуҙти ул ҡарин
аҡин аҡар аңрашур
Ҡойҙо болот ямғырын,
Киреп тотар аҡ түрен.
Ҡырға ҡыуҙы ул ҡарын –
Ағын ағыр, ыңрашыр.

йарбуз – “мангуст” тигән кейек

йилән йарбуздин ҡачәр
ҡанчә барсә йарбуз утрү ҡалур
Йылан ярбуздан ҡасыр,
Ҡанса (күпме) барһа ла, йылан үлтереү ҡылыр (үлтерер).

йулдуз – йондоҙ
аран түз – Юпитер
ҡара ҡуш – (ҡара ҡош) Бизмән
өлкәр – Плеяды
йатикән – Етегән

тамур ҡазуҡ – Тимер Ҡаҙыҡ
баҡыр һуғым – Марс
йулсүз – юлһыҙ
йардаш – ерҙәш

узлак ариғ кавради
йунчиғ йавуз тавради
ардам йимә саварди
ажун баки чартилүр
Ваҡыт арыу ҡауланы –
Йонсоу яуыз табышланды.
Артым еме һауылды –
Заман бәге сиртелер.

йарлиғ – ярлы
йарлиғ – ярлыҡ
йатғәҡ – ятаҡ
йудруҡ – йоҙроҡ

йатник йағлиғ тикүсиндән
үзнук ҡанлиғ йудруҡ йик
Яттың майлы төкөшөнән
Үҙеңдекенең ҡанлы йоҙроғо яҡшы.

йавлаҡ – яулаҡ, яусан

кулсә киши йузиңә курклук йузин курун кил
йавлаҡ куҙаз тиликни аҙкү савиғ тиланкил
Көлһә кеше йөҙөңә, күркәм йөҙөңдө күрһәт,
Яусан көйәҙ телеңде изге һүҙгә телләндер.

йумғәҡ – йомғаҡ
йандиҡ – яндыҡ, янған ат
йанчуҡ – янсыҡ
йузлук – йөҙлөк
йуксак тәғ – юғары тау

ус ас куруб йуксак ҡалиҡ ҡүди чаҡәр
билкә киши укут бириб тавраҡ уҡәр
Бөркөт, аҫ күреп, юғарылыҡтан ҡыуып сағыр,
Белекле кеше, өгөт биреп, тәбрик уҡыр (алыр).

йаләвар – ялбарыусы (илсе)

йәш ут ҡуймәс
йаләвар улмәс
Йәш ут (үлән) көймәҫ,
Ялбарыусы (илсе) үлмәҫ.

йавишғү – йәбешке, йәмшегән (боярышник)
йибарлиғ касуркү – йофарлыҡ ҡапсығы

йибарлиғ касуркүдин йибар китсә йиҙи калир
Йофарлыҡ ҡапсығынан йофар китһә, еҫе ҡалыр.

йишиҡлиғ – ышыҡлыҡ
йабушғәк – йәбешкәк
йишилғән – йышылған
йиғилғән – йыйылған
йиҡилғән – йығылған
йирилкән – йырылған
йайилғән – йәйелгән
йабәҡулаҡ – ябалаҡ

табуғ тәш йарәр
тәш баш йарәр
Табышсы -- таш ярыр,
Таш – баш ярыр.

йазмәс атим булмәс
йаңилмәс билкә булмәс
Яҙлыҡмаҫ атыу булмаҫ,
Яңылышмаҫ белгес булмаҫ.

тавай мунуб ҡуй ара йашмәс
Дөйә менеп, ҡуй (һарыҡ) араһында йәшенмәҫ.

ҡутлуғкә кушә йағәр
Ҡотлоға ҡуша яғыр.

тавар йиғиб сув аҡин анди саҡин
ҡурум киби иҙишин ҡуди йувәр
Тауар йыйып, һыу ағынынан һаҡлан --
Ҡором кеүек осороп, ҡотон юйыр.

йум – йом
ян – ян (утта ян)

йалиңуќ маңку тирилмәс
синќә кириб киру йанмәс
Ялќынлыќ мәңгелеккә терелмәç (дөрләмәç),
Һүнеүгә кереп, кире янмаç.

йанди аринч уғраги
калди бару тиғраги
узи ќуйи уғраги
алблар ќамуғ тиркашур
Янды әрнеп йөрәге,
Килде бары тирәһе.
Йәне ќуйҙы (ќалдырҙы) йөрәген –
Алптар ќамап тиргәшер.

ќәниғ ќән билә йумәс
Ќанды ќан менән йыумаçһың.

ағруќ ағир ишиңни аҙнағуќә йуҙурмә
ачруб узуң ушәриб аҙнағуни туҙурмә
Ауырыу-ауыр эшеңде башќаларға йөкмәтмә,
Асығып үҙең, үшәнләнеп, башќаларҙы туйҙырма.

ундаб улуғ табәру тавраґ калиб йукуркил
ќурғаќ йилин буҙун кур ќандә тушар куди ил
Өдәп олоғ таптырһа, тәбрик ќылып йүгер гел,
Ќорғаќ (ќоролоќ) йылында бөтәһен күр – ќайҙа төшәр күҙе илдең.

уртуќ булуб билишди
маниќ тавар сатишти
бистә билә йараштi
кизлаб тутәр тайими
Уртаќ булып белеште,
Минең тауарҙы һатышты,
Биçтә менән ярашты –
Көҙләтеп тотар тайымды.

айдим аңар савулмә
кулбук уҙу йувулмә
йувғә сувин сувулмә
ќабти маник ќәйими
Әйттем уға: сәбәләнмә,
Күбәләк йәндәй йығылма,
Йыуғы һыуына (йыуынтыќќа) һыуланма –

Ҡаптың (урланың) минең ҡәйемде (Ҡәй ҡәбиләһенән булған ҡоломдо).

йиҡил – йығыл
йамал – ямал
йанул – яныл (үткерлән)
йунул – йуныл
йабин – ябын
йубан – йыуан
йуҙун – йыуын
йаран – яран
йиғин – йыйын
йукун -- йөгөн, йөгөнөклә

йукнуб маңа имлади
кузум йашин йамлади
йағрим башин амлади
алкин булуб ул качәр
Йөгөнөп миңә ымланы,
Күҙем йәшен йәмләне,
Яурыным башын имләне –
Алғыр булып ул кисер (үлер).

йайин – йыйын
йарә -- яра, ярашлан

атә түни уғулҡә йарәсә
атасин тиләмәс
Ата туны уғылға яраһа,
Атаһын теләмәç.

тунлә йуруб кундуз савнүр
кичикдә авланиб улғәҙү савнүр
Төндә йөрөп, көндөҙ һөйөнөр,
Кеселектә (кесе йәштә) өйләнеп, олоғайғас һөйөнөр.

йашә -- йәшә

улуғни тиләр ман
таварин йуләр ман
тилакни буләр ман
йилҡим аңар убланур
Олоно телермен,
Тауарын йолормон,

Теләген бүлермен –
Йылҡым унығына әйләнде...

йалбир – елбер, елгәр

кабак йалбиради
Кәбәк елберәне (елгәрелде)

йувтур – йыуатыр
йабчур – йәбешер
йалвир – ялбыр
йамраш – емереш, болғаныш

ҡучңәр такә сашилди
сағлиҡ сурук ҡушулди
сүтлар ҡамуғ йушулди
уғлаҡ ҡузи йамрашүр
Ҡускар-тәкә сәселде (таралды),
Һаулыҡ-һарыҡ ҡушылды,
Һөттәр ҡамалып юшылды (йыйылды) –
Тәкә-бәрәс болғанышыр...

йиҙлаш – еҫләш, еҫкәш

киши сүзлашү
йилҡи йиҙлашү
Кеше – һөйләшеп (таныша),
Йылҡы – еҫкәшеп (таныша).

йарсиҡ – ярсыҡ
йиртил – йыртыл

атсә уҡин казкариб ким турәни йиғдачи
тәғиғ атиб уғрасә үзи ҡуйи йиртилүр
Атһа уғын көсәнеп, кем торор йығылмайса –
Тауға атып уҡталһа, йәне-көйө йыртылыр.

йайҡал – айҡал
түб – төп
түб – туп
күб – күп
бүт – бөт
сүт – һөт
күч – көс

күч илдин кирсә турү туңлуктин чиҡәр
Көс алдан керһә, ҡанун төндөктән сығар

бүҙ – буй
түр – түр
ҡүр – ҡур (ҡымыҙ ҡуры)
ҡүр – ҡоро, ҡоро ер

ҡулән ҡудуғкә тушсә
ҡүр баҡә айғир булүр
Ҡулан ҡоҙоҡҡа төшһә,
Ҡоро ер баҡаһы айғыр булыр.

бүз – бүҙ (һоро төҫ)
бүз – бүҙ (мамыҡ туҡыма)
бүз – боҙ

бүздан сүв тамар
Боҙҙан һыу тамар.

биз – биҙ
түз – туҙ, туҙан
түз – төҙ
туз – тоҙ
тиз – теҙ (тубыҡ)
сүз – һүҙ
сиз – һеҙ “частица обращения к старшему и уважаемому человеку в наречии Чикил, т.е. “вы”. К младшему обращаются “сан” (һин).
бүс – боҫ
бүш – буш
түш – түш
түш – төш ваҡыты
түш – төш (төш күреү)
тиш – теш
сиш – шеш
ҡуш – ҡуш

ҡурҡмиш кишикә ҡуй баши ҡуш курнүр
Ҡурҡҡан кешегә ҡуй башы ҡуш күренер.

киш – кеш
лиш – лыс (лыс-һыу)
түғ – тыу (знамя)

сүв – һыу

сүв бирмәскә сүт бир
Һыу бирмәҫкә һөт бир.

бүҡ – буҡ
сиҡ – сиҡ ҡына, саҡ ҡына
күк – көй (мелодия)
күк – күк үлән (йәшел үлән)
күк – күк (небо)
күк йилҡи – күк үләндәге (тибендәге) йылҡы

күклар ҡамуғ тузулди
аврик иҙиш тизилди
сансиз узум узалди
калкил амул уйналим
Көйҙәр күмәге төҙөлдө,
Тәбрик итеш (тост туҫтаҡтары) теҙелде,
Һинһеҙ үҙәгем өҙөлдө --
Килсе, әмәл, уйнайыҡ!

күккә сузсә йүзкә тушүр
Күккә һуҙһа (төкөрһә), йөҙгә төшөр.

бил – бил
түл – тол
түл урәғут – тол орғасыһы (тол ҡатын)
тил -- тел

ардам баши тил
Артым башы – тел.

йавләҡ тиллиғ бикдан курү йалнүс түл йик
Яуыз телле бәктән ҡоро-яңғыҙ тол яҡшы.

чил – ел, елһенеү
сүл – һүл
сукут -- өйәңке ағасы

сукут сүлиңә
ҡаҙиң ҡәсиңә
Өйәңке – һүленә (күрә),
Ҡайын – кәҫенә (туҙына күрә).

ҡүл – ҡул, ҡол
күл – күл, диңгеҙ
сим, симүз – һимеҙ йән
ҡүм – күм, күмәк (тулҡын)

кулум ҡуми ҡубсә ҡали тәмиғ итәр
курса ани билкә киши сүзкә бутәр

    Күлем күмеп ҡупһа (ташһа), ҡаланы тамаҡ (һыу тамағы) итәр,
    Күрһә уны белгән кеше, һүҙе бөтәр (һүҙһеҙ ҡалыр).

түн – тун
түн – тын
чин – сын, ысын
син – һын (буй-һын)
син – син (ҡәбергә илтеү кәмәһе)
ҡин – ҡын
күн – күн
мүн – мөн
мүнкәр – ғәйепле
мун -- моң

йалиңуҡ уғли мүнсуз булмәс

    Ялсы уғлы мөнһөҙ (ғәйепһеҙ) булмаç.

ҡуй – ҡуй (осалы һарыҡ)
ҡуй – ҡуйын
ҡуй – ҡойо
йүт – йот (аслыҡ)
йәр – яр
йир – ер
йир – йыр
йүз – йөҙ

йүзкә күрмә
ардам тилә

    Йөҙөнә ҡарама,
    Артым телә.

йиз – еҙҡурай, ҡамыш
йуҡ – юҡ
йүл – юл
йил – ел
йил – ен
йим – ем

йүн – тауис ҡош
сәб – һап

уғлан иши иш булмас
уғләҡ муңҙи сәб булмас
Уғлан эше – эш булмаç,
Тәкәбәрәс мөгөҙө һап булмаç.

ҡәб – ҡап
кәб – көп

калди асин аснайү
ҡәҙкә тукал уснайу
кирди буҙүн ҡаснайу
ҡара булит кукрашур
Килде иçен (ел) иçенеп,
Киçкен (һыуыҡ буран) түгелеп, осоноп,
Керҙе (өйгә) бөтәһе ҡасынып –
Ҡара болот күкрәшер.

бәр – бар
тәр – тар
тәр – тир
ҡәр – ҡар
тәз – таҙ

тәз ат тавәрчи булмәс
Таҙ ат табышсы булмаç.

ҡәз – ҡаҙ
ҡәз, ҡәс – кәç, туҙ

ҡәзиң ҡәсиңә
Ҡайын – кәçенә (туҙына ҡарап ҡыуаныр).

бәш – баш

куни барир кайикник
кузиндә азин баши йүҡ
Ҡыуылып барған кейектең
Күҙендә үҙенең башы юҡ (үҙ башы менән уйлар хәле юҡ).

тәш – таш
ҡәш – ҡаш

бәғ – бағ, баҡса
бәғ – бәй, бәйләм
тәғ – тау

тәғ тәғкә ҡавушмәс
киши кишикә ҡавушүр
Тау тауға ҡауышмаҫ,
Кеше кешегә ҡауышыр.

сәғ – һау
сав -- әйтем, мәҡәл

билкә аран савларин алғил укут
аҙкү савиғ аҙләсә үзкә сиңәр
Белгес ирҙең әйтемдәрен ал гел уҡып,
Изге әйтем изгелеге йәнгә һеңәр.

ҡәв – ҡыу (трут)
бәк – бәк, бей
нәк – крокодил
бәл – бал

барди саңә йәк утрү тутуб бәл
барчин каҙибан талү йувғә булуб ҡәл
Барҙы һиңә оторо яҡ тотоп бал,
Барсын (парча) кейенеп, тула-йыуғыс булып ҡал.

тәл – тал
сәл – һал
ам сәм – им-том
ҡәм – ҡам, ҡамлаусы (шаман)
тән – таң
хән – хан
сән – һан
ҡән – ҡан

ҡәниғ ҡән бирлә йумәс
Ҡанды ҡан менән йыумаҫ(һың).

бәй – бай
тәй – тай

танкур маник сәвими билкәләкә ай
тинар ҡали атитсә ҡисраҡ сини тәй

Таныт минең әйтемде билгелегә, әйт:

Тынар ҡала (шәһәр), ат итһә (аҡылға ултыртһа) ҡыçырыҡ (мохтажлыҡ) һине, тайҙы.

йәт – ят
йәз – яҙ (весна)

язин ҡатиғләнсә ҡишин савнүр

Яҙын ҡатыланһа (нығынһа), ҡышын һөйөнөр.

йәк – ек (дошман)

билмиш йәк билмәзук кишидан ийик

Белемле дошман белемһеҙ кешенән эйек (һауымлы, файҙалы).

йәй – йәй

күз калики йәйин балкүлук

Көҙ килере йәйҙән билгеле.

йәй куркиңә инанмә
сувлар уза тайанмә
асизликин анунмә
тилдә чикәр аҙкү сүз

Йәй күркенә инанма,
Һыуҙар уҙымына таянма,
Иçһеҙләнеп өнәнмә --
Телдән сығар изге һүҙ.

йукүн – йоғон
кувуз – ҡыуаз (үс, ҡон)
ҡуҙруҡ – ҡойроҡ
ҡувуҡ – ҡыуыҡ
тавуш – тауыш
тайиғ – тайғаҡ
туяғ – тояҡ
ҡуйуғ – ҡуйы
ҡуйуғ – ҡойо
байиҡ сүз – байыҡ (дөрөç) һүҙ
тайаҡ – таяҡ

тайаҡ билә таймас
тануҡ сүзун бутмәс

Таяҡ менән таймаç,

Таныҡ (шаһит) һүҙен боҙмаç.

ҡайаҡ – ҡаймаҡ

садрамиш улғун ҡуйаҡ
сармамиш сүттан ҡайаҡ
Һайраған, олоған көйә (моль)
Һәрмәгән һөттән ҡаймаҡ.

майаҡ – маяҡ (дөйә буғы – сүлдәге "маяҡ")

тави бадук арсә
майаҡи йадуҡ армәс
Дөйә баҙыҡ иһә (булһа),
"Маяғы" ятыҡ имәç (булмаç).

кайик – кейек
туйин – туйын (жрец-кафыр)

бир туйин баши ағирсә
ҡамуғ туйин баши ағримәс
Бер туйын башы ауырығандан
Күмәк туйын башы ауырымаç.

ҡайә -- ҡая
куйә -- көйә (моль)
йанә -- йәнә
ҡайәс – ҡаялас (ҡаялы). "Название страны Тухси (Туҡсабасы-Үçәргән. – Й.С.) и Чикил (Сик-ил. – Й.С.). В ней три крепости: одна называется Сәблиғ ҡайәс (Һаплыҡая, Башҡортостандың Йәнсура районында Һаплаяҡ йылғаһы бар, Әселегә ҡоя. – Й.С.), вторая – Уруң ҡайәс (Үргеҡая. – Й.С.), третья – Ҡарә ҡайәс (Ҡараҡая, ғәрәп географтарынан билдәле. – Й.С.)".
ҡуйаш – Ҡояш
айәғ – Ай-аға (титул)

ҡуҙғил маңә аҡилиҡ
булсун маңә айағә
иҙғил мани туҡишҡә
йувҡил маңә уләға
Ҡуй гел миңә игелек
Булһын миңә титул Ай-аға.
Изгелә мине туҡмашка (һуғышҡа),
Юлыҡтыр мине улъяға.

ҡайдә -- ҡайҙа
ҡуйҡә -- ҡойҡа
ҡуймә -- ҡойма, ҡоймаҡ
туриғә -- турғай
куликә -- күләгә
йуриғә -- юрға
тайғән – тойғон (эт)

тайғән йукуркун тилкү савмәс
Тойғон йүгереген төлкө һөймәç.

ҡаймач – ҡайылған
ҡаймач бүрк -- ҡамсат бүрек
ҡайғиҡ – ҡайыҡ, кәмә
байрам – байрам
туҡимаҡ – туҡымаҡ, туҡмаҡ
йабитак – яйҙаҡ
сандувач – һандуғас
булғайуҡ – болғаныс, болғансыҡ
буйундуруҡ – бойондороҡ, муйындырыҡ (үгеҙ ҡамыты)
бир – бир
түр – тор
тир – тир (йыйна)
сүр – һур
түғ – тыу

ағди ҡизил батрәк
туғди ҡара тубрәк
йатшу калиб уғрәк
туҡшиб анин кичтимиз

Ауҙы ҡыҙыл байраҡ,
Туҙҙы ҡара тупраҡ,
Етеште килеп Уғраҡ,
Төкөшөп, унан кистек (киттек) беҙ.

түк – төй
сүк – һүк
тән – тан (әйткән һүҙеңдән ҡайт)
буйур – бөйөр
баҡир – баҡыр
тәтур – татыр
күттур – көттөр
ҡайиш – ҡайыш (эт ҡайшы, әрһеҙ)

налук аңар билиштим
ҡучшуб таҡи ҡавуштум
тузунликин ҡайиштим
алҡти маник йәйими

    Нилектер уға белеш белдым,
    Ҡосошоп тағы ҡауыштым,
    Түҙемлеләнеп ҡайышландым?! –
    Алды минең йәнемде.

ҡайнәр укуз кичик сиз булмәс

    Ҡайнар (ҡайнап аҡкан) йылға кисеүһеҙ булмаç.

сайраш – һайраш

йаруҡ йулҙуз туғардә уҙну калиб баҡарман
сәтүлайү сайрашиб татлиғ үнун ҡуш утәр

    Яҡты йондоҙ тыуар ваҡытта үҙеңде килеп бағырмын,
    Сутылдашып һайрашып татлы өнөн ҡош үтәр.

билал – биләл
биләзүк – беләҙек
хумәрүлән – ҡомарлан
ҡарәкул – ҡарауыл
бү – быу (һыу быуы – боç)
бү – был
би – бейә
тү – төк
сү – һуғышсы

утәғкә убкаләб сүкә сүзләмәдук

    Үткәнгә үпкәләп, һуғышсыға һөйләмәнек.

сү калди йир йабә
ҡарәр ҡар ... табә
ҡачти аңар алб айә
увут булуб ул йашәр

    Ғәскәр килде ер ябып,
    Ҡарар ҡар ... табан.
    Ҡасты унан алп Ая –
    Оят булып ул йәшәр.

йә -- йәйә, ян

ҡурмиш кириш тукулмәс
уҡруҡун тәғ акилмәс
Ҡоролған кереш төйнәлмәҫ,
Ҡороҡлауҙан тау эйелмәҫ.

туби – түбәләүсе, көслө ел

ҡалин булутуғ туби сурәр
ҡараңҡү ишиғ урунч ачар
Ҡалын болотто көслө ел һөрөр,
Ҡараңғы эште оронос (подкуп) асыр.

ҡубә -- ҡоба төҫ
качи – кәзә
качә -- кисә, төн

качә түруб йурир ардим
ҡарә ҡизил бури курдум
ҡатиғ йәни ҡурә курдум
ҡайә күруб баҡү ағди
Кисен тороп йөрөр инем,
Ҡара-ҡыҙыл бүре күрҙем.
Ҡаты янды кирә ҡорҙом --
Ҡаялай күреп, баҡыйға ауҙы (үлде).

начә -- нисә
дадә -- дәдә (Оғуз һөйләшендә)
бури – бүре

бури ҡушнисин йимәс
Бүре күршеһен еймәҫ (ашамаҫ).

бури – бура
турү – туры (йола, ҡанун)

ил ҡалир турү ҡалмәс
Ил ҡалыр – йолаһы ҡалмаҫ.

тари – тире
ҡарә -- ҡара төҫ

бирмиш саник бил йалңуҡ табар ҡаринҡә
ҡалмиш тавәр аҙинник кирсә ҡарә урунҡә

Биргәнең һинең, бел, яланыу табыр ҡарынға,
Ҡалған тауарың аҙыныр (таралыр), керһәң ҡара урынға (ҡәбергә).

ҡари – ҡарый, ҡарт
ҡури ҡури – ҡарағура
ҡази – ҡаҙы
ҡузи – бәрәс
киши – кеше
тавә -- дөйә
ҡуви – ҡупшыҡ, көпшәк

ҡуви ар ҡудуғкә кирсә йил алир
Ҡупшыҡ ир ҡоҙоҡҡа керһә, ел алыр.

баҡә -- баҡа
буҡә -- буға, бүгәй
таҡи – тағы
бүкә -- быуғы, быуар йылан

йити башлиғ йил бүкә
Ете башлы йылан-быуға

букү – бөйөк

билкини ирдадим
букүни уҙурдум
узумни аҙирдим
йалғил атим йазлинүр
Белгәнде ирләнем,
Бөйөктө уҙҙырҙым,
Үҙемде аҙҙырҙым –
Елгән атым яҙлығыр.

такә -- тәкә
йи – йөй
балү балү – бәллү-бәллү
тулү -- тулы
тули – түле (боҙ түле – боҙборсаҡ)
ҡулә -- ҡола төҫ
ҡали -- әгәр

калсә ҡали ҡатиғлиҡ ар тартайү саринкил
уҙлук ишин билиб тур анча аңар таринкил
Килһә әгәр ҡатылыҡ, ир тартҡанға һарын гел.

Ваҡыт эшен белеп тор, шунса уға тарын гел.

тамү – тамуҡ

тамү ҡабиғин ачар тавәр
Тамуҡ ҡапҡаһын асар тауар.

ками – кәмә (Оғуз, Ҡыпсаҡ һөйләшендә)
кими – кәмә

кими ичрә улдуруб
илә сувин качтимиз
уйғур табә башланиб
миңлаҡ илин ачтимиз
Кәмә эсенә ултырып,
Илә һыуын кистек беҙ,
Уйғыр түбәһе башланып,
Меңлек (меңдәр, мең башҡорттары) илен астыҡ беҙ.

намә -- нимә?
ҡайү – ҡайһы
ҡани – ҡайҙа?

куниник кулинә такү йаға
Көндәшлек килендәр – төкөшкән дошман.

мунү – менә, бына
кәчә -- кәсә
үнү – уны
мүнү – быны
ҡәни – ҡәнә (ҡайҙа)
лийү – лай (лай-балсыҡ)
үхи -- өкө
чиғәй – сығай, сиған (ярлы)

куңул кимник булсә ҡали йүк чиғай
ҡилсә кучун булмас ани туҡ бай
Күңеле кемдең булһа ҡалған – (ул) юҡһыл-сиған,
Ҡулланһа ла көсөн, булмаç унан туҡ, бай.

турнә -- торна
бухтәй – моҡсай
ҡунчуй – көнсө, көндәш ҡатын
буғдәй – бойҙай

буғдәй кутиндә сарҡич сувәлүр

Бойҙай ҡатында әрем һыу алыр (һуғарылыр).

ҡурдәй – пеликан

ҡурдәй ҡуғү андә учуб йумғин үтәр<br>ҡузғун таңән сайраб анин үни бүтәр

Ҡурдай-ҡуғыу унда осоп йомошон үтәр,<br>Ҡоҙғон таңдан һайрап, унын өнө бөтәр.

ҡумшуй – ҡамшай (талпан)<br>бурғуй – борғой, борғо<br>чирғуй – сирғый<br>чирғуй – һырғы<br>ҡарғуй – ҡарғый, ҡурғай (маяҡ)<br>тариғчи – тарысы (игенсе)<br>суруғчи – һораусы<br>букурчи – бөкөрсө (һуҡа)<br>каслинчү – кеҫәртке<br>турумтай – торомтай<br>тай – тай<br>туй – той<br>туй – туй<br>тий – тый<br>суй – һуй

бир тилкү тарисин икилә суймәс

Бер төлкө тиреһен икеләй һуймаҫ (тунамаҫ).

ҡаҙаш тимиш ҡаймәдҡ ҡазин тимиш ҡаймиш

Ҡарындаш, тиһәң – ҡайырылмай, ҡәйнеш, тиһәң – ҡайырыла.

Бардиң налук аймадиң<br>Кирү куруб ҡаймадиң<br>Куңул бару йаймадиң<br>Булдуң аринч булмағу

Барҙың – ниңә әйтмәнең,<br>Кире кереп, ҡыйманың?<br>Күңелеңдә барын йәймәнең –<br>Булдың әрнеү булмышы...

ҡарә түнәк качурсәдим<br>Ағир үни учурсәдим

Йатиканик качурсәдим
Сакиш ичрә кунум туғди
    Ҡара төндө кисерҙем,
    Ауыр өндө осорҙом,
    Етегәнде күсерҙем –
    Һағыш эсендә Көнөм тыуҙы.

утә -- ута
утә -- үтә

булсә кимник алтун кумуш авла итәр
андә булуб таңрикарү табғин үтәр
    Булһа кемдең алтын-көмөшө -- аулы (ауланған) итәр,
    Унда (тамуҡта) булып, Тәңрегә табыныу үтәр.

уши -- өшөй
уҡи – уҡый
уҡи – уҡшый
икә -- игә
улә -- өләш
улә -- элә
ули – олой

йазидә бури улисә
авдә ит бағри тартишур
    Яҫыла (яланда) бүре олоһа,
    Өйҙә эт бәғере тартышыр.

ули – һыуланыу, күшегеү

каҙуҡ лук улимәс
кувачлик куримәс
    Кейемле – күшекмәҫ,
    Йүгәнле – киреләнмәҫ.

унә -- өнә
инә -- инлә, ин һал

киши ати тириклә татир
    Кеше итте (үҙе) тере сағында татыр.

сучи – сөсө
кучә -- көҫә

узик мани кучәйур
тун кун туруб йиғлайү
курди кузум тавраҡин
йурти ҡалиб ағлайу

Үҙәгем (йәнем) мине көҫәйҙер –
Төн-көн тороп илайым.
Күрҙе күҙем тупрағын –
Йорто ҡалып аунауын...

качи – ҡашый
буҙи – бейей

ҡуртға буҙик билмәс йирим тәр тир

Ҡортҡа, бейей белмәһә, ерем тар, тир.

йиҙи – еҫе, йөҙәү
тарә -- тара
тар – тар

арслан ҡарисә сичғән утин куҙәзур

Арыҫлан ҡартайһа, сысҡан өңөн күҙәтер (аңдыр).

саси – һаҫы
мүш, мүши – бесәй

улдачи сичғән мүш ташаҡин ҡашир

Үләһе сысҡан бесәй ташағын ҡашыр.

сүлә -- һуғыш
ҡали – ҡалҡып, ҡалҡынып

йағиң табә титрү баҡиб буҡдаң билә
уғраб ҡачән ҡали калсә саңә ҡаршу сүлә

Дошманыңа табан тура бағып, бысағыңды беләүлә (ҡайра),
Үкереп ҡасан ҡалҡынып килһә һиңә, ҡаршы һуғыш.

ҡамади – ҡамашты

атаси анаси ачиғ алмилә йисә
уғли ҡизи тиши ҡамәр

Атаһы-анаһы әсе алма ейһә (ашаһа),
Уғлы-ҡыҙының теше ҡамашыр.

синә -- һына

ҡиш йәйғару сувланүр
ар ат маник таврайүр
икләр йамә саврайүр
ат йин таҡи баҡрашүр
　　Ҡыш йәйерәп һыуланыр,
　　Ир, ат менеп, тарбайыр.
　　Ыйыҡтар (ауырыуҙар) йәнә һауығыр,
　　Ат-йән (мал-тыуар) тағы баҡрышыр.

сатғә -- сатлан, саталан

ажун туни кундузи йилкин качәр
кимни ҡали сатғәсә күчин кавәр
　　Заман төнө-көндөҙө елеп-ҡасыр,
　　Кемде, ҡалҡып, сатлаһа – көсөн ҡабыр.

курди мани амлайү
баҡди маңә имлайү
ҡалдим куңул тумлийү
ҡадғү мани турғурүр
　　Күрҙе (ҡараны) мине ымлап,
　　Баҡты миңә имләп.
　　Ҡалдым күңел тулышып –
　　Ҡайғы мине тураҡлар...

самлә -- сәмлә
санлә -- һанла
йастә -- яҫта

билкә букү йунчиди
ажун ани танчади
ардам ати тинчиди
йаркә такиб суртулүр
　　Белем бөркөп йонсоно,
　　Заман уны тансыны (сәпәне),
　　Артым аты тынсыны –
　　Ергә төкөлөп һөрнөгөр.

йаҡәдәки йалғәғәли аликдәки ичғинүр
　　Яҡалағын ялағандың ҡулындағыһы ысҡыныр.

йилкин булуб бардуҡи куңлум аңәр бағлайү
ҡалдим аринч ҡадғукә йшим уҙү йиғлайү

Елкенсәк булып (килеп) киткәстен, күңелемде уға бәйләнем,
Ҡалдым әрнеүле ҡайғыға – йәшем түгеп илайым...

чуғилә -- сүгәлә
шағилә, жағилә -- шаула

ҡатун сини чуғиләди
таңут бәкин йағиләди
ҡани аҡиб жағиләди
буйун сувин ҡизил сағди
Ҡатын-ҡытай һағаланы –
Таңут бәген яғаланы (яуланы).
Ҡаны ағып шауланы –
Буйын һыуына ҡыҙыл һауҙы.

йубилә -- йүпәләү, алдау

таңут хәни йубиләди
улум бирлә тубүләди
ҡаҙашләри табәләди
улум күруб йузи ағди
Таңут ханы йүпәләне,
Үлем менән түбәләне,
Ҡорҙаштары табаланы (таланы) –
Үлем күреп йөҙтүбән ауҙы...

сатиғсә -- һатыуса

әвин барҡин сатиғсәди
йулуғ бириб йариғсәди
тирик арсә туруғсәди
аңар саҡинч куни туғди
Өйөн-барыһын һатыулашты,
Йолоҡ (выкуп) биреп яраҡлашты,
Тере ҡалырға тырышты –
Уға һағыныс (һағыш) көнө тыуҙы...

ҡунуҡлә -- ҡунаҡла

йағи бакдин уҙуҡләди
куруб суни аҙуҡләди
улум ани ҡунуҡләди
ағиз ичрә ағу сағди
Дошман бәктән уҙҙырҙы,

Күреп шуны, аяҡланы.
Үлем уны ҡунаҡланы –
Ауыҙы эсенә ағыу һауҙы...

таң – тиң

таңсиздә такирмән турғурсә
йараҡсиздә йәр барир
Тиңһеҙҙә (тейешһеҙ ерҙә) тирмән торғоҙһа,
Яраҡһыҙҙа (көтмәгәндә) ер бәрер.

таң – таң ҡалыу
таң – таң

таң атә йурталим
буҙруч ҡанин ирталим
йасмил бакин урталим
амди йикит йавилсүн
Таң ата йөрөрбөҙ,
Бәҙрүш ҡанын иретербеҙ (ҡойорбоҙ),
Йәсмил бәген үртәрбеҙ –
Барса егет йыйылһын.

киң – киң

киң түн убрәмәс
каңашлик билик артәмәс
Киң тун иҙрәмәç,
Кәңәшле белем арытмаç.

маң – миң

бириң маңә сүзкийә
маңлик ҡарә тузкийә
йалвин тутәр кузкийә
муңум маник билиңә
Бирсе миңә һүҙкәйең,
Миңле ҡара (ҡара миңле) төçкәйең,
Ялҡын тотар (төтәр?) күҙкәйең –
Моңомдо минең белһәңсе!

аркә муң такир
тәғ саңириңә йил такир
Иргә моң тейер,

Тау сағылына ел тейер.

миң – мең

бирин бирин миң булүр
тамә тамә кул булүр
Берәм-берәм – мең булыр,
Тама-тама – күл булыр.

наң – нәмә?
наң – нәмә (әйбер, байлыҡ)

булмиш наңик савар сан
аҡрун аңар савинкил
бармиш наңик саҡинмә
азрәк аңар укуңил
Булмыш нәмәңде һөйәр һин,
Аҡрын уға һөйөн гел.
Бармыш (киткән) нәмәңде һағынма,
Аҙыраҡ шуға үкен гел.

йуң – йөн
йиң – ең
саңир – сағыл
сиңир – һеңер
таңиз – диңгеҙ
туңуз – дуңғыҙ
ҡуңуз – ҡуңыҙ, ҡуңғыҙ
муңуз – мөгөҙ

сускән үҙкә  таңри муңуз бирмәс
Һөҙгән үгеҙгә Тәңре мөгөҙ бирмәç.

суңиш – һөңөш, һөңгөләшеү
сиңуҡ – һыныҡ
сиңил – һеңел, һеңле
куңул – күңел

күздан йарисә
куңулдан йамә йирәр
Күҙҙән йырағайһа,
Күңелдән йәме ерләнер (китер).

сиңаҡ – сыйнаҡ (серәкәй)

сандә ҡубар чаҙанләр
ҡуҙғү сиңаҡ йиланлар
дук миң ҡуйү туманләр
ҡуҙруҡ тикиб йукрушур
Һиндә ҡубар саяндар,
Ҡуҙғыр серәкәй, йыландар –
Дәү мең ҡубып, ун меңдәр
Ҡойроҡ текәләтеп йүгерешер.

суңук – һөйәк

аҙкү ар суңуки арир ати ҡалир
Изге ир һөйәге арыр, аты (исеме) ҡалыр.

туңү – туңҡолаҡ (һаңғырау)
туңә -- юлбарыҫ
ҡаҙиң – ҡайын

ҡаҙиң ҡашиңә сукут сүлиңә
Ҡайын – ҡайыҙына, өйәңке – һүленә.

тариң – тәрән
ҡалиң – ҡалым

ҡалиң бирсә ҡиз алир
карәк булсә ҡиз алир
Ҡалым бирһә -- ҡыҙ алыр,
(Ҡәбергә) керәк булһа – киҙеү алыр.

бирдим саңә ҡалиң
амди муни алиң
амкәк маник билиң
уғрәр туңур барғали
Бирҙем һиңә ҡалым,
Инде мыны алың.
Имгәкләнеүемде минең белең –
Үкеререм (дарманым) тыныр, (яныңа) барғылап.

йалиң – яланғас
йалиң – ялан

уҡуш савинч булсә ҡатиғ ухсунүр
Ығышлығы һөйөнөс булһа, ҡаты уҡшыныр.

мандә булнур савинч ути ҡаҙғү атәр
ҡарши куруб сағдич ани учмаҡ атәр
Миндә булыныр һөйөнөс уты – ҡайғыны атыр,
Ҡаршы күреп һағышты, уны ожмах итер.

саҡинч – һағыныс
ҡаринчә -- ҡаранса (ҡырмыҫҡа)
йаңән – фил

туйин табуғ сәк таңри сафинч сиз
Кафыр табынһа, Тәңре һөйөнөсһөҙ.

тун кун табун таңрикә буйнамағил
ҡурҡуб аңар айманү уйнамағил
Төн-көн табын Тәңрегә -- буйлама гел,
Ҡурҡып унан айманһыҙ, уйнама гел.

маңкү – мәңге

туғуб таҡи ҡалмади маңкү аран
ажун куни йулдузи тутчи туғәр
Тыуып, тағы ҡалманы мәңге ирҙәр,
Заман Көнө, йондоҙо (һаман) яҡтылыҡ түгәр.

йаңкү – яңғырау, шаңдау

йазмас атим йағмур
йаңилмәс билкә йаңкү
Яҙлыҡмаҫ атым – ямғыр,
Яңылышмаҫ билге – яңғырау (шаңдау).

йаңкә -- еңгә
ҡучңар – ҡусҡар (һарыҡ тәкәһе)
ашич – ашнаҡ, ҡаҙан

ики ҡучңәр баши
бир ашичтә бишмәс
Ике тәкә башы
Бер ашнаҡта бешмәҫ.

ҡаңдаш – ҡандаш (туған)

ҡаңдаш ҡумә урүр

уҟдаш урү тартәр
 Ҡандаш күмеп орор,
 Уҡташ үргә тартыр.

тирңаҟ – тырнаҡ
ҟалңуҟ – ҡауыҡ
туңлук – тынлыҡ
куңлак – күлмәк
ялңүс – яңғыҙ

ялңүс ҟәз утмәс
 Яңғыҙ ҡаҙ ҡаңкылдамаҫ.

йалңуҟ -- Әҙәм пәйғәмбәр

йалңуҟ уғли йүҟәҙүр
аҙкү ати ҟалир
 Әҙәм уғлы юғалыр,
 Изге аты (исеме) ҡалыр.

йалңуҟ -- әҙәм балалары

йаҕи арур йалңуҟник наңи тавәр
билик ари йаҕисин нәлик савәр
 Дошман урыр әҙәмдәр нәмә (байлыҡ) табыр,
 Белем ире дошманын ниңә һөйөр?

йалңуҟ – ялсы
йаңлуҟ – яңылыш
табчаң – топчан
ҟалҟаң – ҡалҡан
ҟазғанч – ҡаҙаныш
ҟурҟунч – ҡурҡыныс
ҟуңрағу – ҡыңғырау
ҟараңғү – ҡараңғы
йаң – ең (победи)
таңаш – тиңдәш

маник билә ҟайңашди
билки маңә таңашди
аран билә суңушди
алблар башин ул йүвар
 Минең менән кәңәште,
 Белеме миңә тиңләште,

Ирҙәр менән һөңгөләште –
Алптар башын ул юяр.

туңул – төңөл
тиңлаш – тыңлаш
таңлаш – таңлаш, таң ҡал
маңраш -- алыш

урди булит иңрашү
аҡти аҡин муңрашү
ҡалди будун таңлашү
кукрар таҡи маңрашур
Орҙо болот иңрәшеп,
Аҡты ағын мөңрәшеп,
Ҡалды бөтөнөһө таңлашып –
Күкрәр тағы, алышыр.

муңаш – менгәш
суңдә -- эҙәрлекләү
маңдә -- мөнтә

уҙү бариб  суңдади
такрә туруб аңдиди
сачин ҡарә маңдәди
арзү лайү ар авәр
Үҙе барып эҙәрлекләне,
Тирәһендә тороп аңдыны,
Сәсен-ҡараһын мөнтәне –
Әрһеҙләнеп ир ауыр...

маңрә -- ҡысҡыр
муңрә -- мөңрә
тиңлә -- тыңла
саңлә -- саңла (сысып кит)
маңилә -- мейе ашау, ләззәтләнеү

ани йитиб суңүләди
башин йандрү йаңиләди
аран байуб маңиләди
аник албин ҡарә буғди
Уны етеп һөңгөләне,
Башын, яндырып, яңыланы.
Ирҙәр, байып, мейеһен ашаны –
Унығ албын ҡара (гүр) быуҙы.

алин арслан тутәр
кучин сичғән тутмәс
Алғыр арыҫлан тотор,
Көслө сыҫкан да тотмаҫ.

сандруш – һайраш

сабанда сандруш булсә
уруткүндә иртәш булмәс
Һабанда һайраш булһа,
Ураҫканда (ырҙында) ирешеү булмаҫ.

бурсмуҡ – бурҫыҡ
ҡилдруҡ – ҡылсыҡ
ҡурҡлиҡ – ҡурҡаҡлыҡ
турткил – дүрткел

ҡари укуз балдуҡә ҡурҡмәс
Ҡарт үгеҙ балтанан ҡурҡмаҫ.

ҡурҡмә аңар утрү туруб таҡрә йурә
ҡабсә аник албағутин андан турә
Ҡурҡма унан, оторо тороп тирәләй йөрө,
Ҡапһа, унын алптарын шунда тура.

ҡирҡ – ҡырҡ
силк – һелк
тирскәк – терҫәк

сүв курмәкинчә атук тартмә
Һыу күрмәйенсә итек тартма (сисмә).

карт – кирт
аларт – аларт
амурт – һыуыт

тусун мунуб сакиртсун
асизликин амуртсун
иткә кайик ҡайтартсун
тутмиш сәни умналим
Төҫөн (яҡшы атын) менеп һикертһен,
Эҫелеген һыуытһын,
Эттән кейек ҡайтартһын –

Тотмош һаны имләнем.

ҡабарт – ҡабарт
йадриҡ – ялтыраҡ
йарскү – ярғанат
йумуртғә -- йомортҡа
сүҙ – һөҙ (төкөр)

күккә сүҙсә йүзкә тушүр
Күккә һөҙһә (төкөрһә), йөҙгә төшөр.

сиҙ – һей
ҡүҙ – ҡуй

уғлум саңә ҡуҙурман ардам укут хүмәрү
билкә арик булуб сан баҡкил аниң табәрү
Уғлым, һиңә ҡуям артым, ҡот-ҡомарыу,
Белекле ир булып һин, баҡ ҡыл (үҫтер) шуның табышын.

кәҙ – кей
сәлчи – һалсы, һалмасы (ашнаҡсы)
ҡалдурғә түн – ҡыптыр тун
инанч – инаныс

Хәйерле булырына инаныс бағлап, һүҙлектәге төрки һүҙҙәрҙең байтағын, ә әҙәби өлгөләрҙең бөтәһен дә бөгөнгө башҡорт уҡыусыһына йәтешләтеп күсерҙем, бөйөк баба китабын тулайым ғәрәпсәнән башҡортсаға ауҙарыуҙы арҙаҡлы ғалимдарыбыҙға ҡалдырам.

31.12.2011

## Илдең Рәми ҡурсаулығы

Халыҡ шағиры Рәми Ғарипов юбилейын халҡыбыҙҙың артабан да милләт булып йәшәүенә хәүеф янаған глобалләшеү осороноң ҡырҡыу сәйәси шарттарында ҡаршылайбыҙ. Шуға күрә башҡорт рухи донъяһында лайыҡлы урын алған, милли йәшәйеш оранына әүерелгән үлмәҫ әҫәр – “Туған тел” шиғыры тураһында уйланмай мөмкин түгел, сөнки уның иҫкермәүсән проблемаһы шағир ижадының һәм, ғөмүмән, башҡорт шиғриәтенең зыңғыр үҙәген – “эпицентр”ын тәшкил итеп, күңелебеҙҙә һүрелмәҫлек лейтмотив булып зыңлай. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡорҙашымды халыҡ шағиры иткән, пьедесталға күтәргән шиғыр ҙа – ошо. Йәшлегендә янып-ярһып туған телде ҡурсалаған шәхсән Рәми ҡурсаулығы, шулай итеп, ил күләмендә ниндәй генә фирҡәләр йә төркөмдәр өҫтөнлөк алмаһын, күптән инде дөйөм башҡорт булмышының ҡурсаулығына әйләнде,

сөнки шағирҙың йәнен йәнсегән, ауыҙ тулы ҡанды йотоп йәшәргә һәм “йырларға” мәжбүр иткән тынсыу сәйәси мөхит томаны әле булһа таралмай, төрлө сүрәттәргә кереп сәсәтә -- ни өсөн? Тап шуның төп тарихи сәбәбен аңламаһаҡ, һәр кем үҙенән башлап күҙҙәрҙе асмаһаҡ, яман шауҡым башкөлләйен маңҡортлоҡҡа һабыштыртып, башыбыҙға етәсәк – ошо хаҡта киҫәтә түгелме шағир?! Әммә ҡырҡыу “башҡорт мәсьәләһе” уға тиклем дә шешкән, һыҙлатып тулышҡан бит...

Башҡортостан “үҙе теләп” Мәскәү дәүләтенә ҡушылған тарихи дәүерҙә үк, бер-бер артлы илдәр йотоп ҡомһоҙланмыш быуар йылан -- империя уғата ҡарыуланып, туймаҫ йотҡолоҡло һалҡын уралманын Урал аша Себергәсә һуҙылдырып килелгәс, уның артындағы ғорур башҡорт иле һындырылмаған азатлыҡтың япа-яңғыҙ утрауы булып тора. Үҙе теләп ҡушылһа ла, холоплыҡты үҙһенмәй, үҙ ҡанундары менән ирәүән йәшәп ятҡан, уҡ-һаҙағын, ҡылысын ҡулдан ысҡындырмаған ғөләмә, империя быуымында ла булмышын һаҡларға ҡырҡышып, быуарйәндең тамам теңкәһенә тейә, тамағына арҡыры тора. Ә был иһә Иҙелдән алып Иртышҡаса киң йәйрәгән гүзәлдәрҙән гүзәл ерҙең аҫабаһын тамырынан йолҡоп ташлау, шул тупраҡҡа тулайым үҙе хужа булыу нәфсеһен ҡомарлата. Шуға күрә оторо “башҡорт мәсьәләһе” империя эске сәйәсәтенең көнүҙәгенә ҡалҡып, баш бирмәүсене ***ер йөҙөнән ҡырсып ташлап ҡотолоуҙың*** быуаттарға һуҙыласаҡ стратегик алымын –***этногеноцид*** ысулын тәшкил итә (тап шул инде борондан уҡ башҡортто ҡан-дошман һанатҡан төп сәбәп!)...

Милләтебеҙҙе регресс (бөтөүгә юҫыҡланыу) фажиғәһенә терәткән был уҫал ниәт йә аҫтыртын, йә асыҡтан-асыҡ көйрәп, башҡорт өсөн әжәл дәрәжәһендә булғанлыҡтан, “этногеноцид” терминының асылын асып һалыу – уның берәгәйләтелгән ике һүҙҙән тороуын, батша Рәсәйенең дәүләт сәйәсәте кимәлендәге комплекслы йәшертен ҡорал икәнлеген хәбәрһеҙҙәргә хәбәр ҡылыу лазымдыр. Әйтәйек, “этноцид” тигән беренсе өлөшө ғәмәлдә башҡортто көсләп суҡындыртыу, башҡа телдә уҡытып һәм һөйләштертеп (үҙенең әсә телен оноттортоп), ҡатнаш никахтар арттырып ассимиляциялау – бүтән этносҡа (татарға, урыҫҡа һ.б.) әүерелдертеү рәүешле атҡарылһа, “геноцид” тигәне бөтә булған аҫтыртын да, асыҡтан-асыҡ та саралар менән башҡорттоң йәнен алыу, ҡырып бөтөрөү ине (ҡанлы-данлы тарихыбыҙ быға шаһит!), ә был иһә беренсе нәүбәттә, әлбиттә, “башҡорт” тигән һүҙҙең үҙен телдәрҙән һәм күңелдәрҙән һепереп түгеү бурысын алға һөрә (юҡҡамы ни быуаттар буйына уны, ныҡышмалы рәүештә, “татар” тип атанылар, һаман да маташалар). Башҡорт зыялылары был хәтәр хәлде борондан уҡ төшөндө, аңланы: башҡорттоң үҙ ерендә үҙе хужа (аҫаба) булып, милләт булып йәшәү ысулы – Аллаһы Тәғәләнән бирелгән әсә телендә, туған телен күҙ ҡараһындай ҡурсалап һаҡлауында! Үҙ халҡының намыҫлы балаһы булған быуын-быуын башҡорт сәсәндәре, шағирҙары, ҡайһындай ғына үлемесле һынауҙар килгәндә лә, башҡортлоҡтан төңөлмәне, ябай ғына әйткәндә, башҡортто “башҡорт” тип йырлауҙан тынманы. Ҡеүәле был рухи тулҡын большевиктар хакимиәте осоронда Шәйхзада Бабич ижадының иң юғары нөктәһенә сорғолоп, бөйөк шағирҙың яуыздарса үлтерелеүе менән ҡапыл ҡырҡылды, башҡорт теле “башҡорт” һүҙен әйтмәҫлек итеп тешләтелде...

Урал илен баҫкан ауыр, шомло тынлыҡты ни бары 1943 йылда Ҡадир Даяныбыҙ сазы көтмәгәндә селпәрәмә килтерҙе: Бөйөк Ватан һуғышы фронтындағы шанлы Башҡорт дивизияһында хеҙмәт иткән, батырлыҡ ордендары алған яугир шағирыбыҙ Гитлер фашизмына ҡаршы йәндәрен аямай һуғышыусы башҡорт ҡаһармандарын, һис бер тартынмайынса ауыҙ тултырып, "башҡорт" тип атап данланы. Аллаһы Тәғәлә ғәҙеллегенән ҡарағанда былар бөтәһе лә хаҡ, тәбиғи кеүек ине, әммә...

Бер тарихи документ:

**"Протокол №1 общегородского собрания писателей Башкирии от 17 и 18 августа 1951 года.**

**Повестка дня:**

*1. Идеологические извращения в литературе, вскрытые статьями в газете "Правда" и задачи писателей Башкирии.*

*Слушали: по первому вопросу доклад т. Валеева А.*

...серьезные успехи нашей литературы были достигнуты после исторического решения ЦК ВКП(б) по идеологическим вопросам... Но это вовсе не означает, что мы гарантированы от проявления националистических тенденций в нашей литературе... В 1943 году К. Даян опубликовал свое стихотворение "Сынам Башкирии", где он пытался дать характеристику воинственности башкирского народа вне времени и пространства:

Спокойные, хладнокровные  
Башкиры, живущие на Урале.  
Если уж вскипит у них ненависть –  
Огонь забушует.  
Из древних времен  
Башкир был мужественным батыром.  
Он, как тигр, набрасываясь,  
Гнал своих врагов.  
Он батыром родился,  
В боях победами прославился.  
Врагам он – яд.  
Друзьям – исцеление.

И на основе такой, с позволения сказать, исторической характеристики Кадир Даян делает вывод, что из этой войны башкиры будут возвращаться с победой...

Наша советская армия победила потому, что она была армией социалистического государства, руководимого великой Коммунистической партией, гениальным полководцем тов. Сталиным. А не потому, что башкиры или другие народы "родились батырами" и испокон веков были героями, как это неуклюже пытался доказать поэт Кадир Даян. В текущем году Башгосиздат выпустил в свет книгу избранных произведений Кадира Даяна. Стихотворение, о котором сейчас только шла речь, конечно, в избранный сборник не вошло. Тем не

менее рецидивы идейных ошибок, приводящих в конечном счете к *национализму,* нашли место и в этой последней книге этого поэта.

Очевидно многие товарищи, сидящие здесь, знают песню Кадира Даяна об отважном *генерале Шаймуратове,* которая начинается следующими словами:

Уезжали башкиры на войну,
Провожал их голубой Урал.
Впереди на играющем коне
Ехал Шаймуратов генерал.

В "Избранном" песня "Генерал Шаймуратов" имеет примечание "измененный вариант". Вариант изменился, а существо ошибки осталось. В измененных строках говорится о боевых делах генерала, о том, что он "проходил через огонь и воды", "огненную бурю поднимал", "когда чужую свору громил". И далее говорится:

Урал растил сыновей
Со славными сердцами и мужественно-честных.
Вот с ними врагов громил
Шаймуратов-генерал.

И опять получается так, что башкирские воины хорошо воевали только потому, что их растил Урал, а советское государство тут не при чем. При этом не надо забывать: говоря об Урале, Кадир Даян не имеет в виду весь Урал, а имеет в виду только Башкирию... На 107-й странице "Избранного" напечатана другая песенька о гнедом коне большегривом – в третьей строфе песни говорится:

На седле отважный егет –
Сокол голубого Урала.
Едет, как батыр Салават,
Высоко подняв саблю свою.

Опять егет отважный потому, что он – "сокол голубого Урала" и потомок Салавата, а советское государство тут не при чем.

Или вот на 113-й странице книги напечатан "Марш Кусимова". Опять "как молния блестит сабля и "из-под копыт искра летит" – едет "отважный сын башкирина – Кусимов"...

Все эти факты говорят о том, что поэт Кадир Даян до сих пор не сумел осбободиться от серьезных идейных ошибок своего творчества, которые, в конечном счете, приводят к националистическим ошибкам..."

Бына һеҙгә, кәрәкһә, ҡанлы Николай-батшаның "халыҡтар төрмәһе"нән большевиктарса ҡотҡарылып, азат, яҡты тормошҡа сығарылып, Ленин-Сталин "ожмах"ында күкрәп "сәскә атыусы" башҡорттарҙың, Башҡортостандың хәле!

Йәнәһе, ниңә автор күрәләтә советтарҙы һанламай, беренсе сиратта иптәш Сталиндың бөйөк полководецлыҡ талантын данламай, “башҡорт яугирҙәре” тип яҙа, ә “совет воиндары” түгел? Ниңә: “Башҡорттар китте һуғышҡа, оҙатып ҡалды Күк Урал”, ә ниңә: “Совет кешеләре китте һуғышҡа, оҙатып ҡалды иптәш Сталин етәкселегендәге совет иле” түгел?!.

Ҡыҫҡаһы, фашизмды еңеп сыҡҡан совет Ватанының түҙеп торғоһоҙ бәләһе итеп Ҡадир Даян ижады сәпкә алына ла шағир маңлайына, бөтә башҡорт шиғриәтенең телен тағы тешләттертеп, “башҡорт милләтсеһе” тигән ғүмерлек келәймә һуғыла...

Рәми Ғариповҡа ла, әлбиттә, үҙенең төп әйтер һүҙен – “Туған тел”де -- ошо тынсыу сәйәси мөхитте ныҡ иҫәпкә алып, большевиктар партияһы ҡатылыҡлы ныҡыған социалистик реализм һәм интернационализм ҡалыбына ыҡсым һыйҙырып ижад итергә тура килә. Ысынлап та, ҡарағыҙ: унда урыҫҡа ла, татарға ла, башҡортҡа ла һәм башҡаларға ла берҙәй ҡағылышлы “әсә теле”, “туған тел” тураһында йырлана, ә “башҡорт теле” тигән “крамольный” һүҙ бөтөнләй юҡ. Ләкин башҡорт халҡы уны “башҡорт теле” тип бик дөрөҫ ҡабул ҡылып, рухи хазинабыҙ итеп таныны. Зарығып көтөлгән изге һүҙҙе үҙ ваҡытында һәм элегерәк әйтә алған ярһыу шағир халыҡ рухиәте асманының Шәйхзада Бабич бейеклегенә үрләне – тап ошонда ярылып ята ла инде шәхси ҡаһарманлығының, ижади уңышының төп сәбәбе, этәргесе! Муза түрендә тынлыҡ һаҡлап шымырға, намыҫын аяҡ аҫтына һалып, “бөйөк партиябыҙ” бойорғанса ғына йырлап, “ысын совет шағиры” булып иҫән-имен йәшәп ятырға ҡулайлашҡандарҙы ысын халыҡ трибуны шаҡ-ҡатырып, тоталитар режимдың ауыр тирмән ташын иңбашынан ҡыйыу быраҡтырып оранланы! Әммә был ғына ла түгел. Йылдар үткән һайын, йәшәйешебеҙ киҫкенләшә барған һайын, асығыраҡ күренә: Рәмиҙең бөйөклөгө -- көнүҙәк милли проблеманы байраҡ итеп күтәреүендә генә түгел, ә әләмен ғүмере буйына юғары сөйөп елберҙәтеүендә, хаҡлыҡ хаҡына бер аҙым да сигенмәйенсә, бер кемгә лә бирешмәйенсә, балға-майға сумып ҡына йылы йәшәйеш вәғәҙә ҡылған шаҡшы шайтан ҡотҡоһона төшмәйенсә, йәнен аямай фиҙакәр көрәшеүендә. Үҙе үк иҫәткәйне:

Бәлки керләнеп тә бөтөрмөн мин,
Янған өсөн яла яғылыр.
Ялған һыйыныр ер булмаһа ла,
Яласылар әле табылыр

Тик намыҫты данға алмаштырмам,
Юҡ, алданмам арзан даныма.
Мин янырмын ғәҙеллекте яҡлап,
Ҡәләмемде манып ҡаныма.

Һәр нәмәне халҡым зиһене менән,
Халҡым күҙе менән күрермен.
Әгәр кәрәк булһа, илем, телем өсөн

Ғәзиз ғүмеремде бирермен.

Юҡ, теҙләнмәм ялған алдында мин!
Маҡсатымдың иң-иң алыҫын
Яҡын күрер күҙем. Һәр күҙемдә
Балҡып яныр ғорур намыҫым!

Алмастай баҙыҡ Рәми рухы, намыҫы ошо ҡатмарлы заманала һәммәбеҙгә иш булып барһа ине! Үкенескә ҡаршы, был йәһәттән арабыҙҙа бурһыуҙар, ыуалыуҙар күбәйҙе. Бөгөн үҙҙәрен “Рәми ағай шәкерте”, “фекерҙәше”, “дуҫы” итеп танытырға, бәҫләнергә ынтылыусылар уның даны тирәһендә шайтан суралarылай өйөрөлөп, милләт, тел мәсьәләһендә Рәмиҙән уҙҙырып ебәрерҙәй һөрәнләп зыҡ-ҡубыша, әммә тим... остазынан аша ҡарарҙай ҡалҡынырға тейешле “шәкерт”тәр уның тубығы кимәленән түбәнерәктә үрмәләй... Йәнгә тейеп биҙҙерткес ҡылыҡтарына күрә, миңә ҡалһа, изге ҡурсаулыҡҡа рөхсәтһеҙ үтеп-кереп улъя ауларға тамшанған браконьерҙар рәүешле был һөмһөҙҙәр. Билдәле шағир һәм ғалим Фәнил Күзбәков уҙаман “Киске Өфө” гәзитенең үткән декабрь һанында: “Әҙәплелек, әхлаҡлылыҡ критерийҙарын, үлсәмдәрен нисек билдәләргә һуң? – тип ылғый шулар хаҡында яҙҙы әсенеп. -- Апрелдә уҙған Башҡортостан яҙыусыларының съезын ғына алайыҡ. Ябай ғына талаптарҙы (әхлаҡ тураһында әйтерлек тә түгел!) тупаҫ боҙоу арҡаһында уның ҡарарҙары нигеҙһеҙ тип табылды. Әҙәп, намыҫ тигән сифатҡа эйә булған әҙиптәр (был осраҡта съезды ойоштороусылар, президиумда ултырыусылар) быға бер нисек тә юл ҡуймаҫ ине. Ә инде бысраҡ эштәре бар йәмәғәтселеккә фашланғас, кәм тигәндә идара ағзаһы булыуҙан баш тартырҙар ине. Бер уйлаһаң, битһеҙҙәрҙең бөгөнгәсә бер ни булмағандай йөрөп ятыуҙарына ла аптырарға ярамай... Әхлаҡһыҙлыҡ, яман сир кеүек, әҙиптәргә лә таралған. Ә үҙе ауырыған кеше башҡаларҙы нисек дауалаһын?! Мине әҙәпле булырға тейешле әҙиптәрҙең берҙе һөйләп, икенсене яҙып, дөрөҫөрәге алдап яҙып, өсөнсө төрлө йәшәп ятыуҙары борсой...” Хаҡ һүҙҙәр! Үндайын муртйән “ҡош-ҡорт”ҡа: “Эйе, йәмле һайрайһығыҙ ҙа бит, йәмһеҙ осаһығыҙ шул...” – тип кенә әйтәһе ҡала.

Халыҡ тарафынан һайланмай-нитмәй ил түренә йылғыр-шылма ҡарпыған ошо “ауырыған кеше”ләр, хакимлыҡ ҡылыусы фирҡәнең йылы ҡуйынына оялап, хатта Дәүләт Ҡоролтайында емереп “эш ҡыйрата”. Йәшермәйем, улар миңә бөтәһе бер сыбыҡҡа ҡунаҡлаған, әтәс ҡысҡырыуын тыңлап берҙәм ҡытҡылдаған ыҫпай тауыҡтарҙы хәтерләтә. Йырлап тауыш биреүҙәре арҡаһында барлы-юҡлы Конституциябыҙ ботарлап ташланды – ҡасандырғы ғорур аҫабаларҙан меҫкен холоптар хәленә тәгәрәнек. Һәммәбеҙҙе әсәй хәстәрлеге менән берҙәй бағырға тейешле Рәсәй Федератив хөкүмәтебеҙ урыҫ телле булып тыумағандарының башына яман зәхмәтләп күндергән бәләне – әсә телдәрен тешләттертеүсе мәғариф реформаһын -- тап шул ыҫпайҙарыбыҙҙың “ҡытҡылдап” хуплауы ярҙамында һис ҡасан да булмағанса ҡатыға ултыртылып, милли мәктәптәрһеҙ ҡалдыҡ, башҡорт нәҫелдәре башҡортса уйлай белмәй, һөйләшә белмәй үҫә. Әлбиттә, аңламайым түгел -- аңлайым, ил яҙмышын хәл ҡылыусы хәҙерге заман сәйәсмәндәре (хатта

Жириновский ҙа) сәйәси программаларына “башҡортто бөтөрөргә” тип ҡырт-киҫеп яҙмаған, телдән әйткәндәрен дә ишеткән юҡ, бәлки, быны теләмәйҙәрҙер ҙә. Ләкин күпме йәшерһәң дә, осло беҙ тоҡта ятмай. Башҡорт өсөн борондан уҡ яланғас бер хаҡиҡәт кире ҡаҡҡыһыҙ: башҡорт мәктәптәрен ябыу, башҡорт теле, Башҡортостан тарихы дәрестәрен уҡытыуҙы ҡыҫҡартыу йә бөтөрөү – милләтте бөтөрөүгә йәғни башҡортто этнос булараҡ юҡ итеүгә тиң. Асы миҫалды алыҫтан эҙләйһе юҡ, әле һүҙ барған юбилярыбыҙ Рәми Ғариповтың тыуған төйгәндәге Арҡауыл мәктәбен генә алайыҡ. Йөмһүриәтебеҙҙең моңло “Ашҡаҙар” радиоһы журналистары ошо Яңы йыл алдынан байрам интервьюһы алырға барып, унда башҡортса һүҙ әйтерлек уҡыусыны таба алмаған... Был ни хәл?!. Башҡортостаныбыҙҙың йөҙ милләтле булыуына, ҡатнаш никахтар көнө-төнө ырауына, сабыйҙарыбыҙҙың теле йә урыҫ, йә татар, йә әрмән, йә башҡа берәй булып асылыуына бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡыуаныстан иҫерешеп йырлап-бейеп йөрөй торғас, ыңҡылдап көрсөккә таяныуыбыҙ дәрәжәле ил ағаларына мәғлүм түгелме икән әллә? Йәки был да республикабыҙҙың киң мәғлүмәт сараларында көнө-төнө шаулатылған берҙәмлек, халыҡтар дуҫлығы, сәскә атып берҙәй үҫешеү һәм бәхетле йәшәү өлгөһөнә ҡараймы? Исеме менән республикабыҙ исемләнгән төп милләтте ҡаҡшатып, башҡа милләттәр ырыҫлана алырмы?..

Заманында ең һыҙғанып автономиялы дәүләтселлегебеҙҙе төҙөгән, хатта Рәсәйҙең Федераль дәүләт ҡоролошон ижад итешкән башҡорт милли лидерын былтырғы Рәсәй Дәүләт Думаһы трибунаһынан ҡәбәхәт Гитлер фашизмына бәйләп маташыусы Андрей Назаров тигән боҙоҡбаш бәндә, күп тә үтмәй, республикабыҙ башлығының 2011 йыл 23 декабрь бойороғо менән Президент кәңәшсеһе итеп тәғәйенләнде – быны нисек аңларға? Миңә ҡалһа, “әтнәкә”һен ҙур түрәнең үҙенән түгел, ә уны тығыҙ ҡоршаулаған “штатский” өгөтсөләрҙән күрәм. Башҡа килмәҫлек фактты иҫәүән башҡорт үҙ башында әүеш-тәүеш килтереп миңрәүләнһен, осона сыға алмаҫ, тигәндәрҙер инде... Бар булмышына хәтәр ҡурҡыныс янағанда башын ҡомға тығып ҡына тынысланған дөйә ҡошолай иҫәңгерәп, маңҡортлашып барабыҙ бит, юғиһә. Рәми янып шиғарлаған рух һәм намыҫ бейеклеге, фиҙакәрлек етмәй беҙгә. Илдең Рәми ҡурсаулығын тиле дөйә ҡош ҡомлоғона әйләндермәйек.

17.01.2012

## Подвиг ученого

Перед нами, можно сказать, долгожданный настоящий прорыв в тюркологии – труд, смело и аргументированно опрокидывающий закостенелые лженаучные постулаты европоцентристов о “цивилизованных” индо-ираноязычных и “диких” тюркоязычных этносах -- книга “Этногенез тюрков, болгар и башкир” (Уфа, издательство “Гилем” – 2011, с. 286) доктора филологических наук, профессора, академика Российской академии лингвистических наук, заслуженного деятеля науки РФ и РТ, почетного профессора Казанского федерального университета, почетного доктора

Башкирского госуниверситета, почетного члена Турецкого лингвистического общества им. Ататюрка, почетного президента Татарского общества востоковедов Закиева Мирфатыха Закиевича. В краткой, но очень содержательной аннотации предугадывается непривычный многим, но чрезвычайно интересный “пробный камень” его построения: “Вопреки утверждениям европоцентристской тюркологии о том, что все тюрки (в том числе предки булгар и башкир) сформировались лишь в VI--VII вв.н.э. на Алтае и оттуда распространились по всем своим современным регионам, в книге раскрываются глубокие




лингвоэтнические корни этих народов. Этническими корнями булгар и башкир, которые составляли основное население Булгарского государства, были древние тюркские племена, носившие тюркские первичные, вторичные, третичные этнонимы *ар/ир* 'люди, мужчины' *субар/сумер/суар* 'речные ары', *тохар/тавр* 'горные ары', *мишер/маджар* 'лесные ары', *сарир* 'желтые иры', *бигер* 'богатые иры', *булгар/булгыар* 'способные ары', *башкир/башка ир* 'другие иры', ас/яс 'молодые', *астяк/аслы (иштяк)* 'племена, в составе которых имеются и асы', *сак/сака* 'род, племя', *кыусак/кыпчак* 'белые саки', *кусак/косак/казах* 'белые саки', *сакалиба/сакалы бай* 'богатые вместе с саками', *сакады/скыды/скылы* 'вместе с саками' (рус *скыды/скиф), сюн/хун* 'человек', *кусюн/кусян/казан (кушан)* 'белые сюны', *бурджан/буръян* 'светлые сюны', *усунъ/ас/сюн* 'асские сюны', *бай/би/пи* 'богатые', *мин/мен/ми* 'наши, умные', *барды/парды* 'состоятельные' (рус. *парфы/ парфян)* и т.д.

Книга предназначена для научных работников, студентов и аспирантов, а также для широкого круга читателей, интересующихся проблемами лингво-этнических корней тюркских народов, в том числе булгар, башкир, булгаро-татар”. Как видно, в отличие от некоторых своих коллег-казанцев (“патриотов-татаристов”), автор рассматривает тюркский мир в самом широком плане, включая в него, как неотъемлимое звено, обычно не признаваемый пантатаристами многосложный башкирский элемент. Издание осуществлено с ничтожно малым тиражом (150 экз.) и, к сожалению, похоже, как предмет одноразового пользования некачественно, без переплета – непрочно склеенные страницы при первом же соприкосновении начинают рассыпаться. Таким образом, вопреки благому пожеланию автора, его ценнейшее открытие остается практически не доступным даже узкому кругу ученых специалистов, не говоря уже о студентах и всех остальных. Надеюсь, Татарстанские издатели достойно оценят научный подвиг своего земляка, а читатели получат нормальную книгу.

Настоящее мое выступление носит в основном ознакомительно-просветительный характер, поэтому кроме своих скромных умозаключений буду широко пользоваться убедительными цитатами от самого автора, дающие всем нам квалифицированное представление об истинном положении современной тюркологии с ее сложнейшими проблемами, затрагивающими глубоких корней тюркских народов, в частности современных башкир-булгар и булгар-татар.

Исследование состоит из следующих объемистых глав:

1. Общие сведения о тюрках.
2. История изучения этногенеза тюрков – предков башкир.
3. Источники обнаружения этнических корней тюрков – глубоких этнических корней башкир.
4. О древних тюркоязычных ареалах.
5. Арийские и хуннские этнические корни тюрков.
6. Скифо-сарматские этнические корни тюрков.
7. Алано-асские этнические корни тюрков.
8. Обобщение изложенного.
9. Этнические корни булгаро-татар и башкир.
10. Древние тюркские государства, имевшие контакты с предками булгар и башкир.
11. Добулгарские государства, включившие в свой состав будущие булгарские и башкирские регионы.
12. О предбулгарском государстве Биармии.

Даже простая перечень заголовков говорят сами за себя: при написании подлинной истории тюрков нельзя обойттись без башкир-булгар и булгар-татар, как и не возможно представлять полнокровную мировую историю без тюрков, несмотря на противоположную позицию пресловутых европоцентристов, самовольно монополизировавших право на последнюю инстанцию в решении проблем мировой лингвистики и истории. Но, к сожалению, последователи европоцентристов продолжают довлеть и главенствовать во всех регионах, в том числе в Башкортостане, не признавая никого из придерживающихся иного чем их направления. Недавно в очередной раз я сам убедился в этом, получив ниже следующую оценку от дружественно относившегося ко мне ученого из Уфы на мою рукописную книгу (по проблематике и содержанию очень созвучной с рассматриваемой здесь):

“**Отзыв**
на рукопись Зигата Султанова «Хатерхитап — Книга-память»
Духовно-культурная история башкир
(том XI в 2-х частях, на русском языке)

Данная исследовательская работа посвящена сложнейшей теме: выяснению родственных связей народов мира. Согласно авторской концепции, в эпоху первобытного общества люди имели единый и единственный язык (праязык) и одну религию (прарелигию). В течение тысячелетий по мере освоения новых территорий и распространяясь по всему земному шару, отдаляясь друг от друга и утрачивая родственные связи, они настолько стали разными, что сегодня не только не знают те или иные языки, но и не задумываются о своих корнях.

Доказывая правомерность своей концепции, З.Султанов скрупулезно анализирует, сравнивает, сопоставляет языки урало-алтайской и индо-европейской групп, изучает мифологии народов мира, ссылается на

фундаментальные исторические источники, на труды корифеев науки. Словом, источниковедческая база исследования довольно-таки обширна и основательна.

Вместе с тем, рукопись не лишена и принципиальных недостатков. Прежде всего настороживает невыстроенность методологии исследования, недостаточная аргументация тех или иных выводов, подмена или подгонка под готовую схему сложнейших этнических, духовных и языковых процессов. Зачастую голые предположения преподносятся как доказанный факт, те или иные заключения оккультизма — как научно обоснованные явления. По этой причине в шелухе гипотетических рассуждений теряются и те рациональные зерна, добытые в результате чрезвычайно трудоемкой, скрупулезной работы.

*Без методологической выстроенности* автору сложно вести убедительную научную полемику, найти себе единомышленников по рассматриваемой теме.

Несмотря на указанные серьезные упущения, работа вполне заслуживает внимание как общественности, так и научных кругов. Более того она в известной мере станет основой для дальнейших изысканий в данном направлении.

27.01.2012

Можно сказать, отзыв вполне положительный, если не считать единственную, но убийственную фразу "без методологической выстроенности" (подразумевается не сответствие моей, основанной на природные тюркские языки и мировую мифологию, к общепринятой методологии, приспособленной для индо-иранских языков). Думаю, автор отзыва поступил честно и согласно своему образованию, полученного, как и другие его дипломированные коллеги, от высокопоставленных наставников-европоцентристов. Однако не отвергая изжившую себя ложную методологию, без нового подхода невозможно плодотворное изучение этногенеза и, вообще, историю тюрок – будем вечно топтаться на одном месте. Но, как говорится, у лжи ноги коротки, так или иначе она обречена на провал. Значит, тюрколог, прозябающий под спудом европоцентризма – вовсе не тюрколог.

теләктән булһа кәрәк: 9-сы биттә, һәммәбеҙ өсөн ҡәҙерле талант эйәһе исеменә бәйләп, 1967 йылда баш ҡалала башҡорт мәктәбе асыуҙы һорап яҙған ата-әсәләр ғаризалары араһында тәүгеләрҙән булып уның да ҡултамғаһы тора, тип ғорурланып раҫланған, ләкин ҡушымталап теркәлгән тиҫтәләгән документтарҙың береһендә лә был иҫбатланмай, һөҙөмтәлә күркәмлек өҫтөнә күркәмлек өҫтәргә көсәнеү генә һымағыраҡ тойола. Бәрәкәтле хәрәкәттә уның ижадының да рухи тәьҫир көсө ҙур булды, тиеберәк билдәләү ҙә хикәйәтте иҫкиткес биҙәр ине...

Ә ул заман геройҙарының иң алғырҙары Иҙел Миһран улы Агишев менән Мөхәмәт Ғәли улы Исҡужин шәхестәре йылдар уҙа барған һайын милли ғорурлығыбыҙ дәрәжәһенә күтәрелеп, икеһенең мыҡты бронза һынын ошо үҙҙәре тәүбашлап астырткан 20-се ҡала башҡорт гимназияһы алдында гранит постаментҡа ҡушарлатып баҫтыртыу теләге көсәйә. Ә миңә ҡалһа, һәйкәлде мин ошолай һынландырыр инем: әлеге ике уҙаман баҫып тора, алғы буйҙа бернесе уҡытыусыларыбыҙ Венера менән Роза һылыуҙар үҙҙәренең башланғыс синыф ике уҡыусыһын – малай һәм ҡыҙҙы ҡосоп ултыра (педагогтарға ла һәйкәл ҡойолһон!). “Кем быға аҡса бирер? Үҙ ғүмерендә башҡорт телен, мәғрифәтен яҡлап кәлимә яҙмаған бәҫле әһелебеҙгә баш ҡалала мөһәбәт һәйкәл, ауылында хатта Лев Толстой көнләшерлек алпауыт утары һалыр өсөн бюджетыбыҙҙан миллиард һум бүленә, имеш, тип ҡыуанышып торғанда...” -- тип киҫәтеүҙәре лә бар. Ләкин “кем”дән көтөп ятыу ярамаҫ – мәктәп астыртыу юлында ал-ял белмәгән өлкән быуындарыбыҙ өлгөһөндә үҙебеҙ ең һыҙғанып, илдән иғәнә йыйырға ла изге теләкте тиҙерәк бойомға ашырырға кәрәктер? Уҙамандарыбыҙ иҫән сағында уҡ йөрәктәрҙе тулҡынлаткан изге хисте ошо китапты уҡыусылар ҙа үҙ итер, тип уйлайым.

27.03.2012

## Рәшит Шәкүр кометаһы
### *(75 йәше айҡанлы)*

75-енсе яҡты үрен артылыусы был уҙаман барса тирә-яғына, кешеләрҙең күңеленә сағыу шиғриәт нуры, мәғрифәт нуры, ғилем нуры сәсер өсөн килгәндәй.

Үткән быуаттың алтмышынсы йылдарында уҡ студенттарҙың әҙәби “Шоңҡар” түңәрәгендә иле өсөн, теле өсөн фиҙакәрлек өлгөһө булып янды ул.

Артабан “Совет Башҡортостаны” гәзитендә башҡортоноң донъяла тиңһеҙ оҙон көйҙәре тарихын балҡытып, һүнеп барған күңелдәрҙе дөрләтте.

Асмандағы бик алыҫта емелдәгән аҡйондоҙобоҙ Аҡмулланы баҙырлатып арабыҙға ҡайтарҙы.

Туҡһанынсы йылдар боларышында инәй -- улын, атай ҡыҙын белмәгәндәй ҡыланғанда “Урал” башҡорт үҙәгенә аҡ ҡиблалы юл һуҙып, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының нур-ҡайсылы кендек инәһе булды.

Милләтебеҙҙең шоңғор рухи хазиналар сығанағын – “Башҡорт энциклопедияһы”н изге юлға юҫыҡлатып шәмдәлләне.

Хаҡлыҡ яҡлап, ғәҙеллек һаҡлап оранлайһы һәр ваҡытта, һәр урында алтындай саф Рәшит Шәкүр һүҙе бизмән табағын балҡышлы баҫып төшә, яҡтылығы күңелдәргә тарала.

Янып-ярһып уҙған көйрәү тормош юлын берәгәй күҙаллаһаҡ, мин уны рухиәт ғаләменең ҡараңғыһын алмас аҡбур осо менән сытырҙатып сыйып барған уҡйондоҙға – кометаға оҡшатам.

Серле ғаләм төпкөлөндә туп-тура юл ярыусы уға аҙаш уҡйондоҙ – Галлей кометаһы бар. Бәғзеләр унан ҡурҡа, ә күбәүҙәр уға һоҡланып ҡарай. Йыһандың был йор есеме тайпылышһыҙ осошоноң нәҡ 75 йыллығында Ер шарына ҡулһуҙым яҡынайып, бәндәләрҙең күҙҙәрен сағылдырҡыс, хайран ҡалдырғыс саҡылар сәсеп балҡый.

Ошо Галлей һымаҡ уҡ, Рәшит Шәкүр кометаһы ла туҡтауһыҙ-ғорур елә, ул да үҙенең тура юллы сәфәренең 75-легенә етте, йомарт нурҙарын һипте.

Уҙаман! Саялығың мәңге-мәңге һүрелмәһен, юҫығың яңылышмаһын!

Йәшәһен яҡтылыҡ! Балҡып барһын баҙырауыҡ уҡйондоҙ – Рәшит Шәкүр кометаһы!

28.03.2012.

## Ғәзәуатсы азамат

Ваҡиғаларға бай журналистика ҡырындағы был азамат ғәзәуатын (барымта-яуға һөрәнләүен) ваҡ ҡамасау һанарға ла булыр ине, әгәр гәзит уҡыусылар алъюҫыҡҡа албырғатылмаһа. Билдәле яҙыусы-тарихсы Йыһат Солтановтың “Аҙнамөхәмәт, Салауат һәм Юлай йондоҙлоғо. Мәсьәләгә яңыса ҡараш” тигән баҫмаһын, тәбиғи, өнәмәүселәр ҙә көтөлә ине, әммә фекер урынына көфөр атып бәүелләнеү һымағыраҡ тойолдо был сығырына һыйышмаған ғәзәуат (Радик Вахитов. Милли батырыбыҙҙың тарихы дауам итә. -- “Башҡортостан” гәзитенең 2012 йыл 7, 13-сө июнь һандарында). “Тарихы дауам итә” тиеп таныған, шул “дауам”ды ғәзәуатһыҙ тынысыраҡ, инсафлыраҡ кисерергә кәрәк ине лә бит... Яҙарманға үтә зарури сифат -- әхлаҡ мәсьәләһе килеп тыуа, шикелле, бында. Әлбиттә, бәндәлектән күтәрелеп шәхес булыу бәрәкәте һәр кемгә лә теймәгән, һеркәһе һыу күтәрмәгәндәр тамаҡ ярып ярһына, бигерәк тә ныҡ ауыртҡан зитына ҡағылһалар. Күрһәтелгән мәҡәләне һәүетемсә уҡып сыҡҡас, авторының баш бирмәүсе арғымаҡҡа атланыуын, теҙген тотаһы урында ҡамсы болғап екеренеүен ишеткәндәй булаһың: “Мин асҡанды ябырға, мин яҙғанды һыҙырға... не имеешь право! Минең һымаҡ булырға кәрәк әле!” Ҡайҙа инде ул беҙҙәргә, ябай йәйәүлеләргә, арғымаҡлыға тиңләшеү!.. Халыҡ шағирҙарын тыуҙырған йәмле Аҡманай төбәгендә тиккәме ни был уңғанды өйөр-өйөр йылҡылары тиҙәгенән дә алтын яһаусы баҙарман -- заманабыҙҙың мәғрифәтле алпауыты һымағыраҡ ҙурлайҙар. “Вәт бына “яңы урыҫ” -- тере аҡса һандығы! Заман юрғаһын егеттәрсә эйәрләп, күҙ асып-йомған арала ҡанъяғаһына күпме ерҙе көрмәкләне!” -- тип эскерһеҙ сәмләнәләр. Бындай бөтмөр табышмандар ыраһа, бәлки, илебеҙ ҙә сәскә атыр ине, тип, беҙҙәр ҙә һоҡланабыҙ. Тау тиклем тауҙы боронғо таш ҡәлғәләрҙәй

диуарлап кәртәләгән, тимер ҡапҡаһын себен үтмәҫлек бикләгән -- яҡшы хужа тап шулай ҡаҙанырға, “аҡса һандығы”н ана шулай ҡурсаларға тейештер ҙә, моғайын. Байлығынан ҡоторонған ҡорҙаштары наркотик, казино, хөббиямалдар менән шаярып хоббиланһа, бының хоббийы ла күркәм -- бөйөк милли батырыбыҙҙың йомоҡ тәржемәи хәлен асып ҡәләм тибрәтә, лауреат та булған, тиҙәр, етмәһә. Әммә бер нәмә борсой: тарихи-рухи ҡиммәттәрҙе аҡса һандығына тиңләп, үҙен тема монополисы һанап, таҡыр ерҙә һөрләгәп, яҡташтпарын да һөрләктөрөп ҡуймағайы. Беҙҙеңсә, ҡәрҙәштәребеҙ салауаттарға Слауат Юлаевтың хәҙерге Иглин районы Тәкәй ауылында тыуғанлығын танырға ваҡыт, быының менән улар һис ни юғалтмай, ә дөрөҫлөк ҡануни өҫкә сыға. Ҡәләме йор азаматты ысын күңелдән хәүефләнеп киҫәтергә теләйбеҙ: Салауаттың изге рухын “яңы урыҫ”са аҡса һандығына тиңләү, таш ҡәлғәгә бикләп тотоу мөрәүәт түгел дәһә -- диуарҙарҙан ташҡынып, башҡаларҙың зауҡын да бимазалай, ҡәләмдәрен үткерләй. Әммә ҡәлғәсенең баҫымы ныҡыш: мәңге яңыраҡ асыласаҡ бөйөк тема уның үҙенән ғәйреләргә яҙыҡ ҡалырға тейеш, батыр хаҡында фәҡәт уның һүҙе хаҡ, башҡаларҙыҡы ялған (“ялған” суҡмарын азамат ярата). Иң көслө аргументы -- Салауат Юлаевҡа бәйле уның асыштарынан һуң, “элек үҙҙәренең Салауат Юлаевтың тоҡомонан булыуҙарын белмәгәндәр ҙә... бөгөн ғорур рәүештә: “Мин Салауат тоҡомонан!” -- тип күкрәк ҡаға”. Баҡтиһәң, Бөйөк Ватан һуғышында данлы Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙәрен: “Беҙ -- Салауат Юлаев тоҡомдары!” -- тип дәһшәтле яуға рухландырған генерал Шайморатов та, ул заман был хоббисының асышы булмағас ни, күкрәк ҡаҡмай ғына һуғышҡан икән... Имеш-мимештәр йыйып, юҡты уйлап сығарып һәм осо осҡа ялғанмаған шәжәрәләр әтмәләп, балға ҡунған ныҡышмал һағыҙаҡтай, ул үҙе лә иң кәмендә Салауат-баба данына һырныҡмаҡсы. Тик, ҡоро ҡалаҡ ауыҙ йырта, тигәндәй, ҡоро теләк менән генә ҡала ҡороп булһасы! Үҙе әйтмеш күкрәк ҡағып осоноусылар, “лейтенант Шмидтың балалары”, ғилми институттарҙың береһендә төҙөтөп алған шәжәрә лә уларҙың сонтор нәҫел бауын Салауатҡа терәтеп теркәмәне -- өҙөк һыҙыҡтар үткәреп кенә “беркектте”, ә был иһә “шулай булыуы ла, булмауы ла ихтимал” тигәнде иҫкәртә. Уға ҡалһа, беҙ фәкирҙәрегеҙ “булыуы бик ихтимал” тигән ыңғай тоҫмалда торабыҙ, сөнки Юлайҙың, Салауаттың ярты ғүмере шул төбәктә йәшәлгән. Ләкин төбәк патриоттары ныҡышмал төйөп-тылҡыған, Салауат мотлаҡан улар төбәгендә тыуған, тигәнде аңлатмай был. Юлға сыҡҡан эҙәрмән, юҫығын ипле шәйләһә, тик-томалдан шаулы өйөр ойоштормаҫ, үҙҙәренә ҡан-ҡәрҙәш һәм уткүрше Иглин районы Тәкәй ауылы уҙамандарының милли батырыбыҙҙы ололап һынландырған һәйкәлен ауҙарырға яҫҡынмаҫ ине. Әлеге лә баяғы шул ҡәлғә әхлағы...

Хаслашыусы хоббисының ҡан дошманылай иң күрә алмағаны -- Баш йылғаһы тамағындағы салдарҙан-сал ауыл да уның оҙон хәтерле халҡының милли батыр тап үҙҙәрендә тыуғанлығын һис кенә лә оноторға теләмәүе -- ғәзәуаттың төп сәбәбе, моғайын, ошондалыр. “Ҡыҫҡаһы, -- тип күҙ ҙә йоммай “иҫбатлай” ғәзәуатсы, -- бер кем дә Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналиндың Иглин районының Тәкәй ауылында тыуғанлығын танымаңы. Бөтәһе лә батырҙың тыуған төйәге хәҙерге Салауат районының Көҫкәнде (ә дөрөҫө -- Күҫҡунды. -- Й.С.)

йылғаһы буйында урынлашҡан Тәкәй ауылы тип иҫбатланы", сөнки быны, имештер, башҡаларҙан да бигерәк, теманың ошо монополисы шәхсән үҙе һис бер кире ҡаҡкыһыҙ итеп раҫлаған -- уға тарихи факттар факт түгел. 1752 йыл төҙөлөп, 1755 йыл баҫмаланған Красильников картаһындағы ап-асыҡ "с" хәрефен (уҡыусы иғтибар иткәндер: дәғүәсебеҙ гәзиткә күсергән карта киҫәгендә лә бит шул уҡ ҡәһәр төшкөрө "с"!) "е"ға алмаштырып уҡыу юлы менән генә "ТъкЪсва"ны "Текеева" тип, 1737 йылғы Ерофей Струков картаһындағы "д. ЕлаЕ" (деревня Юлая, Баш йылғаһы ярында) менән дә шундай уҡ фокус-мокустар үткәреп, ауыртмаған баштарға ниңә тимер тараҡ ҡаҙарға?! Һуҡыр -- үҙенекен уҡыр, тигәндәй, ҡәлгәһенең шайтан ҡотҡоһонда интегеүсебеҙ имәнесле һаташыуға ла дусар: "1773 йылда... -- ти ул, -- Тикеевтар әле Ҡобауҙан бүленеп сыҡмаған, йәғни Тәкәй (ауылы. -- авторҙар) 1773 йылда булмаған. Бер ниндәй тарихи сығанаҡтарҙа ла был ауыл күрһәтелмәй... Улар (Юлай, Салауат. -- Й.С.) бер нисек тә Баш йылғаһы тамағындағы Тәкәйҙә тыуа алмаған. Был -- ташҡа һуғылған дәлил" (ташҡа түгел, ә башҡа -- һаташмандың башына һуғылған зәхмәт, тип ҡыҙғаныулы нарыҡлайһы ғына ҡала). Баяғы 1755 йылғы Красильников һәм Рычков баҫмаһының 1752 йыл төҙөлгән ап-асыҡ карталарындағы (22,24,28,29,32,34-се биттәр) тап Баш йылғаһы тамағында шаҡырайтылған һәм аҡҡа ҡара менән яҙылған ысын Тәкәй ауылына күҙ йомоп ҡарауҙыр был. Ентеклерәк ғилми йыйынтыҡ та бар (Ф.Г. Хисамитдинова. Башкирская ойкономия XVI-XIX вв. Уфа -- 1991), унда (№1649) ошо Иглин районындағы Тәкәй ауылының 1740 йылда -- Урман-Көҙәй, ә 1765 йылда (№1648) Шайтан-Көҙәй ылыҫына теркәлеүе күрһәтелгән. Бәғзе берәүҙәр, моғайын, ошо ике яҙыуға ҡарап, бер үк төбәктә ике Тәкәй ауылы булған икән, тип хаталана ла хәҙерге Салауат районындағы Тоҡос (Шайтан) ауылын Салауат Юлаев тыуған Тәкәй ауылы итеп аймылыштыра, ләкин төрлө осорҙа төрлө ылыҫҡа ҡаратылған бер үк (Баш йылғаһы тамағындағы) Тәкәй ул. Шул зәхмәтле ашҡыныу бәләһеме, маһир салауатсыбыҙ ҙа бер үк төбәктә (хәҙерге Иглин районында) урынлашҡан билдәле ауылдарҙы (Тәкәйҙе, Меңйетәрҙе), йүнһеҙ малайҙай ҡулсырланып, хәҙерге Салауат районына күсерә, шуның хаҡына "Минево"ны (Меңде йәки Меңйетәрҙе) "Миней (Минкә)" яһай ҙа Баш йылға тамағындағы Тәкәй ауылын Тәкәй ҡарт нигеҙләмәгән, тигән төп уйҙырмаһына дәлил итеп, үҙе лә абайламаҫтан, үҙен тас-салҡан быраҡтырмыш документты килтерә: "Наш предок Текей-баба переехал на устье реки Баш и основал там всем известную деревню Тикеева"... Тағы ниндәй дәлил кәрәк?! Сал Тәкәй ауылынан, уның мөхтәрәм халҡынан иләмһеҙ көлөүме был?!. Тарихсы ғына түгел, хатта тарих тирәһендә ем сүпләгән кәсепсе лә алмашынмаҫ был хәтлем. Шул рәүешле уйлап сығарылған "Тәкәй", үҙһүҙленең ныҡ яратҡан "ялған" һүҙен үҙенә ҡайтарғанда, ялған Тәкәй, ауылын нигеҙләүсе Тәкәй исемле шәхес шул Йүрүҙән буйындағы һис бер шәжәрәгә лә, халыҡ хәтеренә лә теркәлмәгәнлектән, йылғырыбыҙ икенсе бер "дәлил" уйлап сығара: имештер, "Салауаттың тыуған төйәгендә (йәнәһе хәҙерге Салауат районында. -- Й.С.) Тәкәй ҡарт -- тарихи сығанаҡтар аша билдәле кеше". Сөнки, ти ул, "Әлкә ауылын Әлкә Бикбулатов башлап ебәргән... Уның атаһы Бикбулаттың... фамилияһы Текеев. Атаһы ана шул Тәкәй ауылына нигеҙ һалыусы Тәкәй ҡарт булған да инде". Афарин! "Ана шул"

тигәнен хаҡлы рәүештә хәҙерге Иглин районына күсерһәк, дөп-дөрөҫ: Баш йылғаһы тамағындағы ханзамандан килгән Тәкәй ауылын нигеҙләүсе -- Ҡобау кенәздәр тоҡомо Тәкәй-бей тап үҙе шул. Документтағы Бикбулаттың фамилияһы ла, ғәзәуатсы фаразлап килештергәнсә, һис тә “Текеев” түгел, ә “Тюкаев” тип яҙылған; арҙаҡлы тарихсыбыҙ Ә.З. Әсфәндиәровтың “История сел и деревень. Книга девятая. Уфа -- 2001” хеҙмәтендә лә тап шулай -- “Бикбулат Тюкаев”. Ярай, тегеләй ҙә булһын, ти. Тик ул сүрәттә лә билдәле фамилияны нәҡ Баш йылғаһы тамағындағы Тәкәй ауылын нигеҙләүсе Тәкәй-бей шытымы итеп ҡарамай хәл юҡ. Йомаҡсыбыҙ алға һөргән Әлкә Булатов (документтарҙа Полатов) та Бикбулаттың улы була алмайҙыр, сөнки тарихи сығанаҡта был ике шәхес бер ҡатарҙан ҡуйылып, ике төрлө яҙылған: “...Алка Полатов (“Алка Бикбулатов” түгел. -- Й.С.), Бикбулат Тюкаев (МИБ, том IV, ч. I, 246-сы бит). Ә шулай ҙа тылҡымыштың тел төбөндә: “Полатов -- Бикбулатовтың ҡыҫҡартылышы ул”, -- тигән мәғәнә ятҡандай, ләкин быны дөрөҫләүсе бер-берәй дәлил ҡайҙа? Был фамилия Янбулатов, Сынбулатов, Тимербулатов, Ташбулатов, Аҡбулатов, Ҡарабулатов кеүек иҫәпһеҙ күп “булат”тарҙан килеүе бик ихтимал. Әйткәндәй, урыны ожмахта булғыры Тәкәй-бейҙең шул Тәкәйев йәки Тикеев йәки Тюкаев фамилиялы тоҡомдары тирә-яҡҡа (хатта сит илдәргә) хисапһыҙ күп таралған. Һәм ул аҫабаларҙы, саманан тыш яһилланып, татар дворяндары, тип хөсөтләү өсөн генә, “башҡорттарҙа совет дәүеренә тиклем фамилияны һаҡлау ғөрөф-ғәҙәте булмаған”ды уйҙырмалау ҙа килешмәй -- данлы баба намын быуаттар буйына юғалтмай йөрөтөү тап башҡортҡа хас әмәл (мәҫәлән, Иван Грозный заманынан уҡ билдәле Бикбау-кенәз, Йәнсура-батыр исемдәрен ошо көндәргәсә фамилия итеп һаҡлаған Бикбовтар, Йәнсуриндар һ.б.), ә асыштар яһаусыбыҙ көллөһөн үҙ аршинында үлсәп яман хитлана. Талағының ташыуы шул кимәлгә ирешә ки, Юлай менән Салауатты Ҡобау ерлегенән айырыу өсөн, Ҡобау ылыҫы старшинаһы Юлай ҡул ҡуйып мөһөрләгән ер һатыу ҡағыҙын үҙенсә файҙалана: имештер, “килешеү хаты Юлай Аҙналиндың Ҡобау ерҙәренә аҫаба булмауын күрһәтә... Аҫаба хоҡуғы булмағас, Ҡобау ырыуының ерҙәре Юлайҙың, уның улы Салауаттың тыуған төйәге түгел”. Йәғни ҙә ки, тип фаразлай эҙәрмән, 1759 йылда Сим (Эҫем) заводсыларына ер һатыуҙың ҡанунһыҙлығын земский судта дәғүәләгән старшина Юлай Аҙналин, йәнәһе, үҙенең аҫаба ерҙәрен кафырҙарға һатмаҫ ине!. Ә дәғүәләү сәбәбе башҡаса бит: 1743 йылдан һуң отставкалағы элекке старшина Шығанай Борсаҡов, ғәмәлдәге старшина Юлайҙы аша атлап, ерҙәрҙе уға белдертмәйенсә һатҡан (МИБ том IV, ч. 2, 166, 595-се биттәр), ә был иһә төбәгендәге хакимиәтте һанға һуҡмау тигән һүҙ. Бөтәбеҙҙең, аҫыл аҫабаларҙың, ғәзиз бабаҡайҙары үҙ заманында ярты Башҡортостан ерен болғап (бол-аҡсаға алмаштырып) елгә осороуҙарын, шул күңелһеҙ шауҡым әлегәсә дауам ҡылыуын белмәй, йә белергә теләмәй, күрәһегеҙ. Әбйәлилдәй райондарыбыҙҙы телгә алмай, миҫалына ғибрәтлерәк ваҡиғаны -- элекке Президентыбыҙ (йөҙ процентлы аҫаба -- бөтөн аҫаба ерҙәренең “хужа”һы!) 219 квадрат километр (!) майҙанлы күркәм Янғантау төбәген (Межгорье) “регион”ыбыҙ кеҫәһенән йәһәт кенә федераль ҡаҙна кеҫәһенә шылдырыуын хәтерләйек. Үҙ заманының кесерәк түрәһе Юлай Аҙналин да бит, үҙбелдегенсә түгел, ә императрица ғалиә йәнәптәренең юғарынан өргән көслө

һулышынан бөгөлөп төшөп ҡул ҡуйған (был һулыш шул 1759 йылдың 6 декабрь Указы менән ҡанунилаштырыла). Үҙен аҫаба һанаусы хәҙерге азаматыбыҙ ҡайһылайыраҡ һайрар ине икән ошондай хәтәр мөшкөл осраҡта?!.

Шәжәрәләр шыттырыуға маһирйән үҙ уйынында ҡасандырғы Ҡыуаҡан ылыҫы старшинаһы Аҙнабай Ҡарағузин исемен "козырь" кәрт итеп алып, Юлай Аҙналиндың атаһы рәүешендә ҡуллана. Милли батырыбыҙҙы тыуған ырыуы ҡобауҙарҙан айырыу, хәҙерге Иглин районындағы Иҫке Ҡобау, Тәкәй ауылдарына уларҙың тамсы ла ҡатнашлығы юҡ, тигәнен тамам нығытыу өсөн ең осонан сығарылған төп "козырь" булалыр был. Ләкин хилаф концепцияһы шул кәртен һурып алыуҙан уҡ ҡыйрала. Артыҡ сурытмай ғына, күренекле тарихсыбыҙ Ә.З. Әсфәндиәровтың һүҙҙәре менән әйткәндә: "Чтобы обосновать свою ошибочную концепцию о том, что Юлай Азналин, его отец и дети, происходившие [якобы] из Куваканского рода, были припущенниками Шайтан-Кудейской волости, один из авторов (Р.Ш. Вахитов), исходя из неверного понимания сути Указа от 11 февраля 1736 г., разрешившего продажу башкирских земель, приходит к следующим необоснованным выводам: 1) вопреки его утверждениям, Указ не лишил башкир их вотчинного права на землю; ...3) без никакого документального обоснования, ...старшина Куваканской волости Аднабай Карагузин (Аднали-бай -- по-Вахитову, чтобы уподобить его имя с фамилией Юлая Азналина; его отец Карагузя Акаев [Акаков], дед -- Акай Камакаев, ...прадед -- Камакай Биккулов)... объявляется отцом старшины Шайтан-Кудейской волости... Юлая Азналина и дедом Салавата Юлаева...

Несостоятельность суждений вышеназванного автора подтверждается неидентичными по форме тамгами представителей двух волостей. Ничего общего мы не видим между тамгами Юлая Азналина и его мнимого прадеда Ака муллы Камакаева. Отсюда напрашивается вывод: тамги двух родов волостей категорически отрицают их кровное родство" (аталған китап, 132 -- 134-се биттәр).

Мәҡәләсебеҙ, сүп өҫтөнә сүмәлә өйөп, буғай, теңкәһенә тейгән "54 битлек брошюра"ның "ғилми баҫма" тип аңлатылыуын ғәйепләй. Әммә ун биш томлыҡ Әҫәрҙәренең алты томын башҡорт тарихына арнаған өлкән әҙип был юлы ла йыбанмаған -- лайыҡлы ғилми тикшеренеү башҡарған. Хәйер, гәзит уҡыусыла тыумыш һорауҙарҙың күбеһенә "брошюра"ның үҙендә үк тейешле яуап бирелә -- ҡыҙыҡһыныусыларға был баҫманы, бушлай ғына, беҙҙән алырға мөмкин.

11.06.2012

## 1812 йылғы Ватан һуғышында Үҫәргән атлы полктары

### 1

Билдәле булыуынса, башҡорт халҡы борон-борондан, Рәсәй дәүләтенең именлеген яҡлашып, уның бөтә һуғыштарында ла йән аямай ҡатнашҡан. Һәм шулай уҡ башҡорттар, бабаларыбыҙҙың үҙҙәре теләп Мәскәү дәүләтенә ҡушылыу

шарттарын батша хөкүмәте тупаҫ боҙғас, үҙ аҫаба хоҡуҡтарын, милли-рухи азатлыҡтарын ҡурсалап дәһшәтле яуға күтәрелеүе, ике йөҙ йыл буйына ҡораллы көрәше менән империя нигеҙҙәрен дер-һелкетеп ҡаҡшатыуы ла сер түгел. Төптән уйлап ҡараһаҡ, режим әгәр аҡыллыраҡ ҡыланһа, баш бирмәүсән башҡорт рухы толпарының ауыҙлығын бушағыраҡ тоторға тейеш ине, ләкин золмат-империя толпарҙың башына етеү сараһын һайланы: ул юҡ икән – уның мәшәҡәтенән баш ауырттырыу ҙа юҡ. Ә бының өсөн, кемдер яһил әйтмешләй, аҫыу-киҫеү генә аҙ, иң мөһиме – халыҡтың тарихын тартып алып юҡ итергә кәрәк, сөнки тарихһыҙ ҡалғандың рухы һына, рухһыҙ йәндәр үҙенән-үҙе бөтөүгә табан ыңғайлай. Был сәйәсәт (башҡорттан маңҡорт яһау) Рәсәйҙең батшалыҡ заманында тамырланып, 1917 йылғы большевиктар түңкәрелешенән һуңғы совет осоронда сәскә атты -- айырыуса ентекле һәм ҡаты ҡуллы башҡарылды. 1941 йылда дөйөм Ватаныбыҙға дәһшәтле Гитлер фашизмы ябырылып, Сталин режимы бауыр аҫтына ҡанлы яра алғас ҡына, “урыҫ түгел милләт”тәрҙең дә Рәсәй үткәнендә патриотик ҡаҙаныштары барлыгы Кремль әһелдәренең берҙәй иҫтәренә төшөп, баяғы ауыҙ йыртҡыс ауыҙлыҡ саҡ ҡына бушатылғас, ҡанлы һуғыш барған 1943 йылда ғына башҡорт халҡы фронттағы улдарына данлы бабаларыбыҙҙың яугир тарихын иҫкәртеү форсатын алды:

“Яугир башҡорт халҡы сит ил килмешәктәренә -- Ватаныбыҙҙың намыҫына һәм азатлығына ҡул һуҙырға баҙнат иткән илбаҫарҙарға ҡаты отпор биреүе тәүге тапҡыр ғына түгел, -- тип әйтелде ул хатта. -- Тыуған илгә мөхәббәт менән янып, башҡорт атлылары рус һуғышсылары менән бергә рус ҡоралын маҡтаулы Фридрих II армияларына ҡаршы һуғышып данланылар. 1760 йылда рустар менән бергә беҙҙең егеттәр тәкәббер Пруссияның баш ҡалаһы Берлинға барып керҙе һәм аттарын Шпрее йылғаһында һуғарҙы.

Башҡорт кавалерия полктары Михаил Кутузов командалығында 1812 йылғы Ватан һуғышында Наполеон Бонапарт сиреүҙәрен Россиянан ҡыуған рус ғәскәрҙәре сафында шанлы һуғышты. Был алыштарҙа улар иҫ киткес батырлыҡ һәм ғәййәрлек өлгөләре күрһәтте. Башҡорт атлылары Ҡаһым түрә, Йәнтүрә һәм Абдрахман Аҡъегетовтар башлығында беренселәр булып Парижға бәреп керҙе.

Ҡырым һуғышы афәтендә Севастополь ерҙәре үҙҙәренең үлемһеҙ ҡурсаусылары араһында Ҡара диңгеҙ терәген обороналаусы башҡорт полктарын да күрҙе. Беренсе донъя һуғышында башҡорт кавалеристары кәперәйгән немецтар менән аҙ ораашманы.

Граждандар һуғышы йылдарында, йәш Совет дәүләтенә ун дүрт державаның интервенттары ябырылғас, батша генералдары беҙҙе аслыҡтың һөлдә ҡулы менән быуырға янағас, башҡорттар Рәсәйҙең бөтә халыҡтары менән бергә Ленин саҡырыуы буйынса ҡоралға тотондо.

Улар Петроград фронтының алғы позицияларына сыҡтылар ҙа былай тинеләр: “Беребеҙ ҙә ҡалмай һәләк булырбыҙ, ләкин дошманды үткәрмәбеҙ!” Егет һүҙе изге булды. Үҙ ғүмерҙәре хаҡына улар Ҡыҙыл Армияның башҡа частәре менән берлектә Петроградты – революцияның ялҡынлы йөрәген һаҡлап алып ҡалдылар” (С.Р. Ҡадиров. Урал бөркөтө. Өфө -- 1981; 166-167-се биттәр). Һәм, ниһәйәт, өндәре тығылған тарихсыларыбыҙҙың да ауыҙлығы 1944 йылда саҡ ҡына

бушатылды -- Әбүбәкер Усмановтың “Башҡорт атлылары 1812 йылғы Ватан һуғышында” тигән монографияһы донъя күрҙе. Әммә, Бөйөк Ватан һуғышы бөйөк Еңеү менән тамамланғас, Кремлдең рухияты әүәлге хәленә ҡайтып, рухи булмышыбыҙҙы ҡабат ауыҙлыҡлау башланды, ахыр килә үткән быуаттың туҡһанынсы йылдарында большевиктар режимы ҡыйралғас ҡына, күренекле яңы быуын тарихсыбыҙ Әнүәр Әсфәндиәровтың һәм башҡаларҙың 1812 йылғы Ватан һуғышы тураһындағы тикшеренеүҙәре ишәйеп, Наполеон сиреүҙәренә ҡаршы үҙ иҫәбенән, бер генә түгел, “утыҙ полк төҙөп ебәргән” һәм башҡа матди саралар менән дә Рәсәй армияһын ихлас тотанаҡлаған халҡыбыҙҙың ҡаһарманлығы тураһындағы мәғлүмәттәр халҡыбыҙға еткерелә башланы. Һәм, ниһәйәт, Ватан һуғышының 200 йыллыҡ юбилейы айҡанлы 2012 йылда Өфө “Китап” нәшриәтендә “Вклад Башкирии в победу России в Отечестенной войне 1812 года. Сборник документов и материалов” тигән бик кәрәкле йыйынтыҡҡа эйә булдыҡ. Унда байтаҡ документтар, иҫтәлектәр тупланған, әммә уны, мөмкин тиклем уғата тулыландырып, киң ҡатлам уҡыусыларыбыҙға еткереү бурысы һәммәбеҙгә -- заманында шанлы башҡорт полктарын биргән һәр кантон, ырыуҙың бөгөнгө вариҫтарына туранан-тура йөкмәтелә, тип һанайым. Шул йәһәттән яҙыусы-публицист ҡәләмен тибрәтеп, изге эшкә өлөш булһын тип яҙылған был мәҡәләм Ватан һуғышы ваҡиғаларын махсус тикшергән егәрле тарихсыларыбыҙҙың хеҙмәттәренә нигеҙләнде.

## 2

19 быуат башындағы Рәсәй дәүләте тарихы Наполеон Францияһы донъяны бүлешеү маҡсатында алып барған 1805-1814 йылдар ҡанҡойошо менән, Францияға ҡаршы берләшмәләрҙә ҡатнашыуы менән билдәләнә. Англия, Австрия һәм Рәсәй берләшмәһе 1805 йылдың 2 декабрендә тарихта мәғлүм Аустерлице һуғышында еңелгәс, 1806 йылда уҡ Англия, Швеция һәм Рәсәйҙең яңы берләшмәһе ойошһа ла, Англия тайшанып, һуғыш ауырлығы Пруссия менән Рәсәй иңенә яҡкас, прусс армияһы тиҙҙән ҡыйратылып, артабан урыҫ армияһы французддарға ҡаршы яңғыҙ һуғышҡанлыҡтан, император Александр I шул һуғышҡа илдәге регуляр түгел көстәрҙе – һуғышсан рухлы башҡорттарҙы ла йәлеп итергә мәжбүр була. 1806 йылдың 9 ғинуарында ул кисекмәҫтән 10 (ун) башҡорт атлы полкы әҙерләргә фарман биреп, үҙтеләкле башҡорт ир-егеттәре һәр кантондан ташҡын йылғалай ағыла, һөҙөмтәлә тиҙ арала атлы ун мең башҡорттан төҙөлгән һәм һәр береһе бишәр йөҙлөк 20 (егерме) полк хәрәкәттәге армияға оҙатыла, шуларҙың икеһе 1807 йылдың 10 майында уҡ алғы һыҙыҡта француз генералдары Массен һәм Вреде ғәскәрҙәре менән бәрелешә, йәнә икеһе 4 июндә Тильзит ҡалаһы янындағы дәһшәтле һуғышта ҡатнаша. Буранғол Ҡыуатов етәкселегендә 9-сы кантон (Үҫәргән) башҡорттарынан төҙөлгән 1-се атлы полк ул һуғыштарҙа ҡаһарманлыҡтар күрһәткәне киң мәғлүм, император Александр беренсенең был кантонды үҙенең император байрағы менән бүләкләүе быны яҡшы дәлилләй. Бына ул ҡул ҡуйған документ:

*«Божией милостью, Мы, Александр Первый, Император и Самодержец Всероссийский и прочая, прочая, прочая... Нашему Девятому Башкирскому Кантону. В воздание верности вашей и усердие к Нам оказанное, Жалуем вам Наше Императорское Знамя, повелевая употребить оное на службу Нам и Отечеству с храбростью и ревностью единому Российскому воинству, свойственным. Пребываем вам Императорского Нашего Милостию Благосклонны.*

*Дана, в Санкт-Петербурге, Мая 31 дня 1805 года.*

*Александр».*

Император, үҙ ҡулы менән яҙып, кантон башлығы Буранғол Ҡыуатовтың үҙенә лә хат ебәрә:

*«Господин поручик Бурангул Куватов. В воздаянии отличной храбрости, оказанной вами в сражениях 4 и 6 июня противу французских войск, где вы, нанося удары неприятелю, поступили храбро, ободряя примером своих подчиненных, жалую вас кавалером Ордена святой Анны третьего класса, коего знак, к вам доставляя, повелеваю возложить на себя и носить по установлению, уверен будучи, что он послужит вам поощрением к вящему продолжению усердной службы вашей.*

*Пребываю вам благосклонный Александр.*

*С.-Петербург 1 май 1808 г.».*

Рәсәй өсөн уңышһыҙ шул һуғыштан һуң французлар менән ике-ара Тильзит солохо төҙөшкәс, декабрь айында башҡорттар үҙ иленә ҡайтарылып таратыла. Ләкин был Тильзит килешеүе көсөргәнешле яңы һуғыш алдынан тын алыу ғына ине, шуға күрә Рәсәй хөкүмәте төрлө яҡлап хәрби көстәренең һанын арттырыу сараһын күрә, шул йәһәттән империяның урыҫ булмаған халыҡтарына ла иғтибарын тағы арттыра. Башҡортостан – беренсе нәүбәттә, әлбиттә, сөнки башҡорттарҙы “яугир халыҡ”, “атлы халыҡ” тип юҡҡа ғына атамағандар, был сифаттар быуаттар буйына ҡанлы яуҙарҙа һыналып дөрөҫләнгән. Нәҡ шуға миҫал итеп заманындағы башҡорт яугире Күсәрбай Аҡсулпановтың швед короле Густав III алдында күрһәткән хәрби оҫоллоҡ, тапҡырлыҡ өлгөһөн алайыҡ:

“Бөйөк Себерҙең икһеҙ-сикһеҙ сахраһында тыуып үҫкән шул ҡыйыу һыбайлы, -- тип тасуирлай сит мәмләкәт авторы, -- үҙенең йылғырлыҡ һабағын шунан башланы: аты йән-фарман сабып барғанында эйерҙә туп-туры баҫып тороу өсөн ул өҙәңгеләрҙе эйәр аша һалып шөйлә ҡыҫҡартты. Шунан һуң Күсәрбай кәпәсен ергә ташланы ла бер ни тиклем араға атлатып барҙы. Кәрәкле тәңгәлдә ул менгеһен ҡапыл артҡа бора һәм, теҙгенде ат муйынына һалып, бер-нисә сажин араны кәпәсенең эргәһенән йән-фарман саптыртып үтә. Шулай йән-фарман саптырҡан килеш артына боролоп, Гораций һәм Вергилийҙың фарсылары һәм парфтары, шулай уҡ Ксенофондтың кардухтары һәм курдтары йолаһынса, оҫҡор уғы менән кәпәсте үтәнән-үтә ата... Йәнә кәпәс тәңгәленән елдертеп һәм бәйгеһе башланған ергә етеп, шул уҡ алымын ҡабатлай – кәпәскә ике уҡ “X” хәрефе һымаҡ сатрашланып ҡаҙала. Шул оҫоллоғонан һуң тағы, йән-фарман саптыртып барышлайы, Күсәрбай үргә йоморҡа сөйҙө лә төшөп барғанында уны, йәшендәй оҫҡор уғын атып, һауала килеш селпәрәмә килтерҙе. Ниһәйәт, һаҙағынан уҡ алып ергә ташланы һәм, йән-фарман саптыртып барышлайы, ерҙә ятҡан шул уҡты

ҡулына эләктерә алып, уны юғары сирғытты ла икенсе уғы менән уны, һауала килеш, баяғы йоморҭҡалай, ҡап-урталай яра атты"...

Ә бына Ж.-Б. Бретондың 1813 йыл Парижда сыҡҡан китабының III томынан:

112-се бит. Казактар, шулай уҡ башҡорт яугирҙәре еңел кавалерия сифатында башлыса разведка һәм сапҡындар өсөн ҡулланыла.

118-се бит. Башҡорттар – гүзәл һыбайлылар һәм иҫ киткес уҡсылар. Был ҡыйыу һуғышсылар өсөн батшаға хеҙмәт итеү ауыр йөк түгел – был уларҙың бурысы, улар уны шатланып башҡара. Был яугир халыҡта, боронғо спартандарҙай, ҡарттарға айырым ихтирам: бөтә байрамдарҙа ҡарт кешеләр иң хөрмәтле түрҙә ултыра.

120-се бит. Башҡорт яугирҙәре елберҙәк әләмле оҙон һөңгө (бының менән улар офицерҙы билдәләй), ҡылыс, ян, егерме уҡлы һаҙаҡ менән ҡоралланған. Яндары ҙур түгел, ғәҙәти азиаттарҙыҡы рәүешендә һәм, ҡағиҙә буларак, тупаҫ эшләнгән. Уҡ башаҡтарында ҡауырһындар аҙ. Ләкин улар иҫ киткес шәп, мәргән ата".

"Төньяҡ амурҙары" тиеп хаҡлы маҡталғандар шул!

Башҡорт яугирҙәренең һуғыш оҫталығын урыҫ замандаштары ла юғары баһалаған:

***П. Размахиндың "Башҡорттар тураһында мәғлүмәттәр"енән***

Башҡорттар, бабаларына оҡшап, хәрби күнекмәләргә ифрат һәүәҫ. Шул һәүәҫлек һәр береһен кесе йәштән үк яугиргә кәрәкле бөтә шөғөлдәргә өйрәнергә этәрә. Улар ғөмүмән бөтәһе лә һыбай шәп йөрөй, һөңгө ҡулланырға, мылтыҡтан һәм бигерәк тә яндан атырға бик оҫта. Оҫоллоҡтарҙың һуңғыһы башҡорттарҙа шул тиклем юғары кимәлгә еткерелгән ки, уларҙың күбеһе уҡ менән иң бәләкәй нәмәгә лә мәргән сәпәй, мәҫәлән, үҙенән йөҙ аҙым һәм унан да алыҫыраҡтағы турғайға.

***Аноним авторҙың "Башҡорттар тураһында иҫкәртмә"һенән***

Яндан атып тура тейҙереү өсөн уртаса ара ҡырҡ аҙым. Һуғышта башҡорт арҡаһындағы янын күкрәккә күсерә, ике уҡты ҡап-урталай бер юлы тешләп ала, ә икеһен янға йәтешләй ҙә күҙ асып йомғансы бер-бер артлы [дүрт уҡты] осора; дошманына ябырылғанда аты арҡаһына һырыша ятып, тетрәндерткес һөрәнләп, асыҡ күкрәк һәм һыҙғанған еңле беләк менән дошманға ҡыйыу ташлана, бер-бер артлы дүрт уғын атып ебәреп, һөңгөһө менән сәнсә.

***В.М. Черемшанский башҡорттарҙың һуғыш оҫоллоғо тураһында***

Ҡоралды башҡорттоң төп йыһазын мылтыҡ, һөңгө, ҡылыс, ян һәм уҡлы һаҙаҡ тәшкил итә. Әйткәндәй, башҡорттар хәрби күнекмәләргә бик һәүәҫ: ғөмүмән бөтәһе лә оҫта һыбайлы, һөңгөнө шәп ҡуллана, мылтыҡтан һәм яндан

мәргән ата, һуңғыһы менән шундай ҡеүәтле эш итәләр ки, алыҫ булмаған, мәҫәлән ун биш сажин араға атҡан уҡ, кешене генә түгел, хатта атты ла үтәләй сыға...

Императорҙың Ырымбур гөбөрнәтере Г.С. Волконскийға 1811 йыл 7 апрель фарманына ярашлы, ут ҡапҡандай ашыҡтырып 1-се һәм 2-се башҡорт атлы полктары төҙөлә, һәр полкта 530 кеше (полк командиры, поход старшинаһы, биш яҫауыл, биш йөҙбаш, биш һарунъя, бер квартирмейстер, бер мулла, бер писарь, ун иллебаш һәм унбаш, биш йөҙ ябай яугир) булырға, һәр башҡорт үҙ ҡоралы, монаяты, кейеме һәм һәр береһе ике ат менән килергә тейеш. 1-се Башҡорт полкы (һәм һуңыраҡ 7,8,9-сы полктар) 9-сы кантон Үҫәргәндән йыйылып, Эйек йылғаһы тамағындағы Нововоздвижинск ҡәлғәһендә (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районындағы Воздвиженка ҡасабаһы) ойоша һәм май айында Самара аша Серпухов ҡалаһына оҙатыла (2-се полк – Рыльск ҡалаһына). Ваҡиғалар оҙаҡ көттөртмәй: 1812 йылдың 12 июнендә Наполеон армияһы Неман йылғаһын кисеп, Рәсәй еренә баҫып керә -- халыҡтарҙы берҙәм изге яуға күтәргән Ватан һуғышы башлана. Шанлы генерал П.И. Багратиондың 2-се армияһы сафтарында ҡыйыу хәрәкәт иткән 1-се Башҡорт (Үҫәргән) атлы полкы яугирҙәре Гродно ҡалаһы янындағы беренсе һуғыштарҙа уҡ ҙур батырлыҡтар күрһәтә, шулар араһынан Үзбәк Аҡмырҙин, Буранбай Сыуашбаев, һарунъя Ғилман Хоҙайбирҙин, яҫауыл Ихсан Әбүбәкировтарҙың исемдәре билдәле. “Ревизские скаски”ҙарға ҡарағанда, Үзбәк Аҡмырҙин уҙаман (яу ҡырында ятып ҡала) ошо юлдарҙың авторы тыуып үҫкән Сәнкем-Биктимер ауылының Солтановтары нәҫеленән – Аҡмырҙа Көбәковтың ғәзиз улы булырға оҡшай.

### 3

Полоцк ҡалаһы янындағы хәрби лағырҙан император Александр I иғлан ҡылған 1812 йылдың 6 июль Манифесында бөтә Рәсәй халыҡтарының изге һуғышҡа ҡуҙғалырға тейешлеге әйтелеп, изге фарман бөтә гөбөрнәләргә еткерелә. Мәкерле һәм көслө илбаҫарға ҡаршы тороу, уны илдән тамам ҡыуып сығарыу өсөн, регуляр армияға ярҙамға дәүләт эсендәге “яңы көстәрҙе” йәлеп итеү сараларын күрергә саҡырыла. Ошо айҡанлы Ырымбур гөбөрнәтере Г.С. Волконскийҙың бөтә башҡорт кантондары башлыҡтарына атҡарған 1812 йыл 25 июль бойороҡнамәһендә барлыҡ башҡорт яугирҙәрен кисекмәй яуға әҙерләргә ҡушылып, тәғәйен күрһәтмәләр бирелә: һәр кемдең яу менгеһе ҡурала торһон, төҙөк һөңгөһө, ҡылысы, уҡ-һаҙағы һәм мөмкинлегенә ҡарап мылтығы, пистолеты һуғышҡа әҙер булһын.

Бөтә Рәсәй күләмендә, шул иҫәптән Башҡортостанда ла, халыҡтарҙың патриотлыҡ тойғоһо ифрат көсәйә, фронтҡа оҙатылырға тейешле башҡорт атлы полктарына үҙ менге аттары, ҡоралы, монаяты, кейеме, аҙығы менән үҙҙәре теләп ағылыусылар өҙлөкһөҙ ырай. Мәҫәлән, 1812 йылдың 9 авгусында 9-сы кантон Үҫәргәндән 9-сы Башҡорт атлы полкына алыуҙарын һорап бер туған Абдулхалиҡ

менән Нәзир Абдулвахитовтар, 10-сы кантон Бөрө өйәҙенән йорт старшинаһы Абуталип үҙенең Сәғит исемле улы менән икеһен бергә башҡорт атлы полктарының берәйһенә ҡабул ҡылыуҙарын үтенеп генерал-гөбөрнәтер Г.С. Волконскийға ғариза яҙғандар. Һәр кантон үҙ халҡының һанына, матди хәленә ярашлы бер йәки ике полк ойоштороп биргәндәр, ә 9-сы кантон Үҫәргән, 1811 йылда уҡ үҙ иҫәбенән төҙөп оҙатылған данлы 1-се полктан тыш, тағы 7-се, 8-се, 9-сы атлы полктарын йыһазлап оҙата. Шулай итеп, Наполеон армияһына ҡаршы Ватан һуғышында урыҫ армияһы сафтарында Үҫәргән башҡорттарының үҙтеләкле дүрт атлы полкы ҡаһармандарса ҡатнаша. Документтарҙан асыҡ күренеүенсә, фронтта 22 (егерме ике) башҡорт атлы полкы һуғыша, шуларға өҫтәп тиҙ арала тағы 6 (алты) запас полктар төҙөлә -- бөтәһе 28 (егерме һигеҙ) атлы полк. Ырымбур гөбөрнәһе халыҡтарынан Ватан һуғышында нисшәр полк ҡатнашыуын күрһәткән таблица фәһемле:

**Полки, созданные в 1811-1812 гг.**
**в Оренбургской губернии**

**Башкирские – 28;**
**Уральские казачьи – 5;**
**Оренбургские казачьи – 1;**
**Оренбургский драгунский – 1;**
**Тептярские – 2;**
**Мишарские – 2;**
**Уфимский пехотный – 1;**
**Ставропольский (за Волгой) калмыцкий – 1;**
**Всего – 45.**

Шуларҙан 12 (ун ике) мең башҡорт яугире (алты полк) Рәсәй дәүләтенең тылын -- көнсығыш сиктәрен һаҡлай.

Үкенескә ҡаршы, башҡортто өнәмәүсе бәғзе-берәүҙәр, шулай уҡ һөрһөгән башҡорт нигилистары һәм яраҡлашыусы ялағай-ҡурҡаҡтары һуңғы ваҡыттарҙа ифрат та яһилланып, Ватан һуғышы йылдарында Рәсәй азатлығын яҡлап башҡорттарҙың атлы егерме һигеҙ полкы хеҙмәт иткәнлеген кәметеп күрһәтергә, егерме йәки егерме ике генә итеп сафсаталарға тырышалар. Уларса, йәнәһе, этнограф Р.Ғ. Кузеев иҫәпләүенә яраҡлы, ул заманда барлыҡ башҡорт халҡының бөтә булған ир-ат затын (бала-саға, ҡарт-ҡоролар менән ҡуша) 125000 (йөҙ егерме биш мең) кеше генә тәшкил иткәнлектән, һәр береһе бишәр йөзлө егерме һигеҙ полк төҙөү өсөн ирҙәр һаны етешмәй – төптө нигеҙһеҙ ялған! Беренсенән, урыны ожмахта булғыры Р.Ғ. Кузеев хеҙмәттәрендәге фактик материалдың байтағы алтын бәрәбәрендә булһа ла, дөйөм концепцияһы ла, айырым һөҙөмтәләре лә, үкенескә ҡаршы, күп осраҡта дөрөҫлөккә тап килмәй – тарихи белеме наҡыҫтар ғына уның һәр бер раҫлауын алтынға һанай. Икенсенән, баяғы әйткән отороло̆кло авторҙар ҙа башҡорттарҙан төҙөлгән 22 (егерме ике) атлы полкты һәм, шуға өҫтәп, шундай уҡ атлы полктар рәүешендә Рәсәйҙең көнсығыш дәүләт сиктәрен һаҡлап

тороусы 12000 (ун ике мең) башҡорт атлы ғәскәрен таный. Ун ике мең атлы яугирҙең һәр береһе бишәр йөҙлөк 6 (алты) полктан хасиллығын да танып, егерме икегә алтыны ҡушаһы (22+6) ғына ҡала – тимәк, ысынлап та 28 (егерме һигеҙ) полк! Инде килеп Р.Ғ. Кузеевтың “125000 (йөҙ егерме биш мең) генә ир-ат”ына ышыҡланып оторолоҡланыусыларҙың сафсатаһын ябай арифметик ысул менән тикшереп күрһәтәйек. Фәндә асыҡ билдәле булыуынса, бөтөн халыҡтың 5 (биш) проценты ғына ғәскәр була ала, әйтелгән айырым йөҙ егерме биш мең ир-аттан да – шулайуҡ биш процент. Шуны сығарып бирһәк: 125000:100х5=6250 ғәскәри ир-ат – теүәл 12 (ун ике) полк. Тимәк, әгәр Р.Ғ. Кузеев хаҡлы булһа, башҡорт халҡы ул йылдарҙа, ныҡ көсөргәнеп, 12 (ун ике) полк ҡына бирә алырға тейеш ине, был иһә ғәмәлдәге 28 (егерме һигеҙ) полкка ла, баяғылар сафсаталаған “ни бары 22 (егерме ике) полк”ка ла тура килмәй – улар таянған халыҡ һанының яңылышлығы фашлана…

1812 йылда Башҡортостанда ҡоролоҡ-ҡытлыҡ арҡаһында аслыҡ булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт халҡы илбаҫарҙарҙы еңеү файҙаһына дәүләт ҡаҙнаһына 500 (биш йөҙ) мең һум иғәнә йыйып бирә, Рәсәй армияһына бүләк итеп 4139 (дүрт мең бер йөҙ утыҙ туғыҙ) яҡшы яу атын үҙ ҡулдары менән фронтҡа илтеп тапшыра (шул йылҡының сирек өлөшө (бер мең ике йөҙ ҡырҡ биш) – Үҫәргән башҡорттарынан. Яугир халыҡтың егерме һигеҙ атлы полкы, әлбиттә, һиҙелерлек көс ине һәм ул, дөрөҫөн әйткәндә, дәһшәтле Ватан һуғышында урыҫ армияһына яңы һулыш өҫтәне.

Башҡорттарҙың яу ҡырҙарында Ватан хаҡына йән аямай батырҙарса һуғышыуы тураһында дошман тарафынан юғары баһа бирелгән. 1812 йылда полковник Робер (башҡорттарҙы ул “монголдар” тип атай) үҙенең дуҫына яҙған:

“Урыҫтар беҙгә ҡаршы монгол урҙаларын ебәрҙе! Бөтә дәүерҙәр беҙгә ҡаршы ҡуҙғалғандай! Тирегә һәм мехҡа төрөнгән был кешеләр ҡурҡыуҙы ла, ҡыҙғаныуҙы ла белмәй. Уларҙың һуғыш алымы аптыраткыс. Улар ҡырағайҙарса һөрәнләй ҙә өйөрө менән емергес ябырыла. Уларҙы күп йәҙрәләр киҫеп һала, ә был уларға һис тә ҡурҡыныс түгел. Һеҙ хайран ҡалырһығыҙ, ләкин үҙҙәренең ҡоралланышында улар беҙҙең канонирҙарҙы рәхимһеҙ ҡырыусы ян һәм уҡтар ҡуллана. Капитан Клемансоның өсмөйөшлө кәпәсе монгол уғынан тишелде, ә был иһә алыҫ яландағы саҡ-саҡ күренмәле нөктәнән осоп килде. Ошо әҙәм ышанмаҫ яугирҙәр менән бәрелешкәнгә тиклем үк, уларҙың ҡырағай күмәк һөрәнен ишетер-ишетмәҫтән, беҙҙең һалдаттар һуғыш ҡырынан ҡаса. Аҡылға һыймаҫлыҡ был, әйтерһең дә, саң эсенән Сыңғыҙ-хандың урҙалары ҡалҡынған!”



Наполеон генералы де Марбо 1813 йылдың 4-7 октябрендә Лейпциг ҡалаһы янындағы "халыҡтар бәрелешендә" төньяҡ амурҙары" тип аталған йәш башҡорт яугирҙәренең француз армияһында тәрән тәьҫир ҡалдырыуын билдәләй: "Һуғышҡа яңы алынған, французлдарҙы бөтөнләй белмәгән был егеттәр үҙҙәренең башлыҡтары тарафынан шул тиклем дә рухландырылғайны ки, беренсе килгән көнөндә үк беҙҙе ҡасырға мәжбүр итәсәктәренә инанып, ғәскәрҙәребеҙҙең күҙ алдында иҫәпһеҙ күп өйөрләнеп беҙҙең өҫкә ташланды, ләкин мылтыҡтарҙың һәм мушкеттарҙың залпы менән ҡаршыланып, бәрелеш ҡырында байтаҡ һандағы үлектәрен ҡалдырҙы. Был юғалтыуҙар уларҙы, ҡыҙышҡан ҡандарын һыуытыу урынына, ҡайнарлаттылар ғына. Ғәскәрҙәребеҙҙе уратып улар, нәҡ һағыҙаҡ күстәрелә́й ҡаныға́п, көтмәгән һәр тарафтан ябырылдылар. Уларҙы ҡыуып етеү бик ҡыйын булды".

Баш командующий М.И. Кутузов үҙе һәр урыҫ һуғышсыһының, казак һәм башҡорт яугиренең батырлығына һоҡланыуын белдергән: "Рус һуғышсыларының бөтәһе һәм һәр береһе ниндәй шатлыҡ, ҡәнәғәтлек менән үҙҙәренән еңелеп ҡасып барған дошманды эҙәрлекләүен һәм беҙҙең һуғышсыларҙың, шул иҫәптән казактарҙың һәм ҡайһы бер башҡорт полктарының ниндәй батырлыҡ менән уларҙы ҡыйратыуын күҙ алдығыҙға килтерһәгеҙ ине!"

Дөйөм Ватаныбыҙ Рәсәйҙең үҙаллылығын, именлеген ҡурсалау өсөн Ватан һуғышында ошондай ҙа фиҙакәр ҡатнашҡан башҡорт халҡының данлы полктары – "төньяҡ амурҙары" иҫтәлегенә, Бородино ҡырында ғына түгел, хатта Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөлә һәйкәл ҡуйылмауын маңҡортлаша барыуыбыҙҙың билдәһелер һәм был хәл дөйөм Ватаныбыҙ Рәсәй өсөн дә бик аянысл ы тип һанайым...

Француз яуында байтаҡ башҡорт ҡатындары ла үҙҙәренең яугир ирҙәре йәнәшәһендә һуғыш сәфәрен үтә, заманында урыҫ авторы В. Зефиров шул һуғыш ветеранының үҙ ауыҙынан ишетеп яҙып алған хәтирә тап ошо хаҡта бәйәнләй. Күптәребеҙ өсөн билдәһеҙ ҡалған йәки яртылаш ҡына мәғлүм булған ҡиммәтле ҡомартҡыны уҡыусылар иғтибарына тулы килеш күсерәйек.

**В. Зефиров. Йәнтүрә хикәйәте (1847 й.)**

...Өйҙәге бер нәмәгә иғтибар иттем: тимер күлдәк -- башҡорттарҙың боронғо һуғыш кейеме...

-- Был монаят һеҙҙә хәҙер ҡулланыламы? -- тип ҡыҙыҡһындым.

-- Юҡ, хәҙрәт, -- тине Йәнтүрә, -- беҙҙең егеттәр инде буҫтау көрткә, киверҙарҙа ғына йөрөй ыҫпайланып -- ауыр тимер күлдәктәр онотолдо. Әүәлге заман башҡорттары бүтәнсә ине: әйтәйек, хәрби сәфәргә саҡырһалар, тимер күлдәк кейәһең, өҫтөнән -- күк көптән, башыңа -- аҡ ҡалпаҡ, арҡаңда -- уҡлы һаҙаҡ, билеңдә -- ҡылыс, ҡулыңда -- һөңгө һәм китәһең командир ҡушҡан яҡҡа. Шундай кейем-ҡоралда мин французлдарға ҡаршы һуғышта һәм уларҙың баш ҡалаһы Парижда булдым.

-- Ә нисек, матурмы Париж? -- тип һораным.

-- Данлы ҡала, ифрат шәп! Ә ҡатын-ҡыҙҙарысы!.. -- тип өҫтәне көлөмһөрәп, -- иҫ китмәле һылыуҙар! Тик шуныһы -- әбекәйем яңғыҙымды ҡыҙырырға ебәрмәй ине... Сая ҡатын!

-- Нисек инде ҡатын, -- тип аптырап бүлдерҙем, -- әллә ул да һуғышта булдымы?

-- Булды, миҙалы ла бар.

...Һүҙ ыңғайында ул француз яуындағы үҙенә бәйле ике ваҡиғаны хикәйәләне.

Беҙҙең ғәскәр Дризенгә бик ҡыҙыу барҙы. Беҙ өс көн һәм өс төн аттарыбыҙҙан төшмәнек. **Ул** ваҡытта августың урталары ине. Эҫе һауа кешеләрҙең тынын ҡура. Бик ныҡ арыным. Ат өҫтөндә көскә-көскә генә килдем. Ахырҙа, бара торғас, минең хәл тамам бөттө. Мин атты юлдың бер яғына ҡайырҙым да үләнгә яттым. Бисәм дә үҙемдең янда ине. Ул да минең янға ултырҙы. Ул өҙөлөп-өҙөлөп илай башланы. Мин саҡ-саҡ ҡына тын ала инем. «Хуш бул,— мин әйтәм,— тыуған илем Бангкортостан, хуш булығыҙ киң сахраларым, мин һеҙҙе хәҙер яңынан ҡайтып күрә алмам инде». Миңә бик ҡыйын, бик ауыр ине. Тамағым кипкән. Беҙҙән алыҫ түгел күтәрле соҡорға оҡшаған, ылымыҡлы бер бәләкәй күл бар икән. Нисек етте шулай, бисәм ярҙамы менән, шыуышып шул күл янына барып еттем. Сисендем дә бер сәғәт самаһы һыу эсендә яттым. Миңә еңел булып китте. Аяҡҡа баҫып, һыуҙан сыҡтым. Сығыу менән мин ҡурҡып киттем: көллө тәнемде, муйыныңмдан алып табаныма тиклем, һөлөк һырып алған. Бисәм ҡурҡыуынан йығылып китә яҙҙы. Ҡурҡыуҙан һуң мин шатландым. Ҡанымды тағы бер аҙ һурһындар әле тип, яңынан һыуға инеп яттым. Һыуға өсөнсө тапҡыр инеп ятҡандан һуң, минең ҡанымды эсеп туйған һөлөктәр үҙҙәре төшөп бөттөләр. Шунан һуң тәнем еңеләйеп китте. Ауырлыҡ ҡул менән һыпырып ташлаған кеүек булды. Мин үҙем кейенеп, атыма ырғып мендем. Бисәм менән икәүләп, үҙебеҙҙең әтрәтте ҡыуып еттек.

Икенсе бер ваҡыт мин тыуған иләмә әйләнеп ҡайтыуҙан бөтөнләй өмөтөмдө өҙгәйнем. Бисәм генә ҡотҡарып алып ҡалды. Ҡайһы урында икәне

хәтеремдә ҡалмаған, беҙҙе бәләкәй бер күҙәтселек әтрәтенә ҡуйҙылар. Белмәйем, беҙ нисектер күрмәй ҡалғанбыҙ, таң атып килгәндә, түштәренә тимер таҡта кейгән егермеләп француз беҙҙең алға килеп сыҡты. Беҙ тиҙ генә һөңгөләребеҙҙе эйәргә нығытып, һөрән һалып, яуыздар өҫтөнә ташландыҡ. Мин атланған ат бик йылғыр, ҡурҡмаусан ине. Сабып барған ыңғайға бер французды һөңгөм менән сәнсеп йыҡтым. Һөңгөнө тартып алып маташҡанда, икенсеһе килеп, ҡылысы менән минең яурынға сапты. Тимер кейем сыҙаманы, мин сабылған яурын менән аттан йығылып төштөм. Шунда иҫтән яҙғанмын. Һушыма килгәндә, беҙҙең иптәштәрҙең яртыһы тегеләр тарафыыан тураҡланып бөткәнен күрҙем. Ҡалғандарының ҡул-аяҡтары бәйләнгән. Бисәм янымда юҡ ине. Мин инде уны бөтөнләй донъяла юҡтыр тип уйланым. Аттарға мендереп, беҙҙе пленгә алып киттеләр. Сәғәт ярымдан һуң ҡапыл урман араһынан бер йөҙ самаһы Дон казактары килеп сыҡты. Беҙҙе тирәләй уратып алдылар. Унлап ҡына ҡалған французлар ҡойолоп төштө. Бирелеүҙәрен белдереп, баш эйҙеләр. Ҡараһам, бисәм Дон казактары араһында йөрөй. Ул эш шулай булып сыҡты: беҙ һуғыша башлау менән, минең ҡатын, тегеләргә ҡаршы тора алмаясағыбыҙҙы аңлап алып, һуғыш майҙанынан тайшанып сыҡҡан да, беҙҙең главный әтрәткә хәбәр иткән. Эйе, әгәр ҙә бисәм булмаған булһа, мин үҙ илемдә былай итеп байрам ҡороп, күңел асып йөрөй алмаған булыр инем. Яманлап бер һүҙ ҙә әйтерлек түгел. Бик яҡшы һәм дан бисә!

Кем һәм ҡайҙан ул яугир Йәнтүрә?

“Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе”нән беҙ уның Үҫәргән башҡорто икәнлеген, хәҙерге Ырымбур өлкәһененә Һарыҡташ районы Жултый ауыл советындағы Этбай (Үрге Ырыҫҡол – Ҡаҫмарт йылғаһының уң ярында) ауылынан икәнлеген күрәбеҙ (бабаһы – хәҙерге Башҡортостандың Йәнсура районындағы Өмбәт ауылын нигеҙләүсе Өмбәт батыр). Шәжәрәнән өҙөп алғанда:

1. Яукүсте (Күскенсе) Мусаҡай улы. – 2. Именбирҙе Күскенсе улы. – 3. Таймас-бей (кенәз) Именбирҙе улы (Шешәйҙәр араһы Ҡәҙерша, Аҡназар ауылдары). – 4. Бабай Таймас улы (хәҙерге Күмертау ҡалаһы ереккән Бабай ауылын нигеҙләүсе). – 5. Өмбәт-абыҙ Бабай улы (Һамар буйынан Өҫкәлек буйына килә: 1600-1703 йй.). – 6. Этбай Өмбәт улы (Этбай – Үрге Ырыҫҡол-Этбай ауылын нигеҙләүсе). – 7. Бохарбай батыр Этбай улы. – 8. Йәнтүрә батыр (1812-1814 йй. батыры) Бохарбай улы...

## 4

Фронттағы башҡорт яугирҙәренең физакәр батырлығын, рухи-мәҙәни һәм әхләҡи баҙыҡлығын һоҡланып ихлас тасуирлаусы яҙма хәтирәләр байтаҡ; шуларҙан был мәҡәләгә, темабыҙға ярашлы, күберәген Үҫәргәндең 1-се, 7-се, 8-се, 9-сы Башҡорт атлы полктарына ҡағылышлылары һайлап алынды.

Рухи-мәҙәни һәм әхләҡи баҙыҡлығы, тигәндә, Бөйөк Британияның Рәсәй армияһындағы вәкиле генерал Р.-Т. Вильсон көндәлектәренең Таруса ҡалаһында

1812 йылдың 13 октябрь сәхифәһе ҡыҙыҡлы. Шуныһын да иҫкәртәйек: был әфәнде, Көнбайыш Европала тамырланған хаталы ҡағиҙә буйынса бөтә төркиҙәрҙе, шул иҫәптән үҙе күргән башҡорттарҙы ла, "татар" тип атай, ләкин яҙмала Платов армияһындағы 9-сы Башҡорт (Үҫәргән) атлы полкы тураһында һүҙ бара. Күп генералдар менән бергә Платов табынында һыйланғанда, ти ул, башҡорт полктарының береһенән белдермә-хәбәр килде – сиркәү биҙәктәрен иретеп ҡойған бик күп алтын-көмөштөң француз-дошмандан тартып алыныуы, ә "беҙҙең тарафтан уларҙы йомоп ҡалдырыу оло гонаһ буласағы" әйтелеп, шул хазина генералдың ҡарамағына оҙатылған. Эй илаһым, юғарыраҡ кимәлдәге милләттәргә әхләҡи өлгө булырлыҡ ниндәй күркәм сифат һаҡланған быларҙа! – тип һоҡлана көндәлек авторы һәм бер казак полкында шундай уҡ хәрби улъяны дәррәү бүлешеп алып байығанлыҡтарын үҙ күҙҙәре менән күреп аптырай…

Урыҫ авторы А.Н. Олениндың шул уҡ темаға фәһемле хәтирәһен, тәрән мәғәнәле тәьҫир көсөн һаҡлар өсөн, үҙ телендә килеш бирәйек:

***Из «Рассказов из истории 1812 года» А. Н. Оленина***

Генер. Бороздин мне рассказывал, что часто случалось ему видеть башкирца, который к нему на походе принесет целый ком серебра, отбитого у неприятелей, из числа грабленных в церкви образов, и говорит изломанным русским языком: «Вот, бачька, серебра, прикажи взять». - «Как взять? Да оно твое, ты его отбил». - «Да, бачька, отбил, но оно твой мечет». - «Что же ты его и возьми, оно тебе теперь принадлежит». - «Нет, бачька, Магомет убьет. Вот, видишь, собак француз умирает (показывая тут же на дороге лежащего и умирающего француза, каковой пример на всяком шагу встречался!), видишь, бачька, он умирает за то, что мечет ваш грабил!» Какая противоположность просвещенного и невежественного народа!

Башҡорттарҙың ер йөҙөндәге бөтә милләттәргә, диндәргә лә берҙәй хөрмәт менән ҡарауы, башҡорт яугиренең юғары әхләҡи һәм мәҙәни сифаттары нәүбәттәге документта күркәм сағыла:

***Пожертвование 1000 рублей 1-м Башкирским полком на восстановление разрушенного французами исторического памятника в Москве - Донского монастыря***

*8 сентября 1813 года*

Перевод письма с башкирского языка к графу Матвею Ивановичу Платову от старшины 1-го башкирского полка Кутлугельдея Темировича

Ваше сиятельство, милостивый государь граф Матвей Иванович!

Уже с давних времен под скипетром августейших российских монархов с любезными своими семействами блаженствуем. Когда вздумали хищные французы напасть на отечество наше, по воле всемилостивейшего нашего государя призваны и мы на помощь для обороны нашей границы под начальство вашего сиятельства. При всем нашем рвении не могли унять сих святотатцев, допустили до Москвы, где ограблены древние чудотворные храмы божий, в чем считаем себя не менее виновными, что не укротили сволочь нечестивую и

позволили ограбить святыню. Само провидение наказало извергов за их бесчестный и безбожный поступок против святой церкви.

А ныне услышали мы, что герои русские намерены возобновить благолепие Донского монастыря в Москве. Благоволите, ваше сиятельство, и нам удостоиться, по возможности наших сил, участвовать в сем богоугодном деле. Мы прилагаем тысячу рублей ассигнациями к определенным даяниям в сие святилище. Хотя мы считаемся иноверцами, но бог у всех народов один!.. Удостоив принять нашу просьбу, по гроб обяжете всех нас.

*Русский вестник на 1814 г. Кн. 9. С. 64-66*

Артабан, Үҫәргән башҡорт атлы полктарының һуғыш юлдарын һәм батырлыҡтарын мөмкин тиклем ентеклерәк яҡтыртыу өсөн, дүрт полктың һәр береһенә айырым бүлек асып, тарихсыларыбыҙ йыйып баҫтырған документтарҙы нисек бар – шулай, тәржемәһеҙ биреү хәйерле булыр.

**5**

**1-се Башҡорт атлы полкы** (тарихсыларыбыҙҙың иҫкәртмәләренән тәржемәләп күсерәм). Уның командирҙары ошолар булған: Звериноголов гарнизон батальоны майоры В.Ф. Добровольский, ә 1812 йылдың апреленән – Нарва драгун полкы майоры М.М. Лачин, ул үлгәндән һуң 1813 йылдың октябренән – Павлоград гусар полкы майоры кенәз Ф.Ф. Гагарин, ул әсир төшкәс, 1814 йылдың 21 февраленән – старшина К. Тимеров, ул әсир төшкәс, 1814 йылдың 1 мартынан – яҫауыл И. Әбүбәкиров. Әммә тарихсыларыбыҙ полктың һуңғы командиры Буранғол Ҡыуатовты күҙ уңынан ыҫҡындырғанға оҡшай:

“Башҡорт полктары Рәсәй сиген һаҡлауҙа, баҫып алыу һуғыштарында әүҙем ҡатнаша. Атаман Платовтың Рәсәй ғәскәренең баш командующийына биргән рапортында 1-се башҡорт полкы командиры Буранғол Ҡыуатҡа, сотник Ҡарағужа Ҡәҙерғолға, Айсыуаҡ Үҙәнбайға, прапорщик Ҡаһарман Буранғолға, ҡаһарманлыҡтарын атап әйтеп, рәхмәт һүҙҙәре еткерелгән” (Марат Түләбаев. Йәнтөйәктең хәтер хазинаһы. Өфө -- 2005; 10-сы бит). Аталы-уллы ҡаһармандарыбыҙ капитан Буранғол менән прапорщик Ҡаһарман Париждағы Еңеү парадында ҡатнаша, император Александр I саҡырған тантаналы мәжлестә ҡунаҡ була.

Һуғыш башланғандан алып полк түбәндәге һуғыштарҙа ҡатнашты: 15 июндә Гродно ҡалаһы янында, 27-28 июндә Мир местечкоһы эргәһендә, 30 июндә Несвиж местечкоһы эргәһендә, 2 июлдә Романов мечстечкоһы эргәһендә, 27 июлдә Лешня ауылы һәм Молево Болото эргәһендә, 12 августа Смоленскиҙан сигенгәндә, 22-25 августа Можайск янындағы арьергард һуғыштарында, 26 августа Бородинола, 8 сентябрҙә Мәскәү янындағы арьергард һуғышында, 14 сентябрҙә Вишневское ҡасабаһы эргәһендәге һуғышта. Полковник И.Е. Ефремов әтрәте берлегендә 8 сентябрҙән 14 октябргәсә Молодь ҡасабаһында тороп, Серпухов юлын кәртәләне. 14 октябрҙән полктың бер өлөшө -- полковник кенәз Н.Д. Ҡудашев әтрәтендә, артабан Баш армия обоздарын һаҡларға ебәрелде. Полктың бер өлөшө Англия вәкиле генерал Р.-Т. Вильсон конвойында булды, полктың бер

1814 йылдың 20 марты, Елисей ҡыры. Париж ҡупшыһы, һоҡланыуынан тулҡынланып, үҙенең һылыуҡайына яңы атҡан сәскәләр шәлкемен тотторған һәм һөйгәненең мөхәббәтле күҙҙәренән тилергән урында төтөнлө усаҡ эргәһендә оҙон ҡолаҡсынлы ҡаҡашҡан кәпәс кейеп башҡорт тора һәм уғының башағында үҙенең бифштексын ҡура...

***"Тарихи хронология"нан мәғлүмәт:***

**1814 год** 19 марта.

**1**, 2, 5, **8, 9**, 12, 13, 14, 15 и 19-й башкирские полки победоносно вступили в Париж. Воины этих полков были награждены серебряными медалями "За взятие Парижа. 19 марта 1814 года".

Бөйөк бабабыҙ Бикбауға лайыҡлы һәйкәл ҡуйған ырыуҙаштарым үҫәргәндәр үҙҙәренең шундай уҡ данлы 1812 йылғы Ватан һуғышы ҡаһармандарына ла лайыҡлы ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеренә ышанам. Үҫәргәндең данлы 1-се, 7-се, 8-се, 9-сы атлы полктары иҫтәлеген, Иҫәнғолдан тыш, ул полктар йыйылып ойошҡан һәм хәрби сәфәргә юлланған хәҙерге Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районы Воздвиженка ҡасабаһында ла юғарылыҡлы кимәлдә билдәләү йәһәтенән был мәсьәлә Йәнсура районы һәм Ырымбур өлкәһе башҡорттары ҡоролтайҙарында эшлекле ҡуҙғатылып, Башҡортостан Республикаһы һәм Ырымбур гөбөрнә хөкүмәттәре кимәлендә тормошҡа ашырылһын ине. Амин.

Өфө, 06.09.2012

## Шәптәрҙән-шәп "иң шәп"лек

Бының тарихы тәрән – империя ҡыҫымында интегеүсе башҡорттарҙың үҙ аҫаба хоҡуҡтарын ҡурсалап ҡоралды баш күтәрә башлау осоронан уҡ килә.

Тәрәнерәккә төшһәк, кешелек донъяһының берәгәй тәүдин дәүерендә көн һәм төн, аҡ һәм ҡара, яҡшы һәм яман бер-береһен тултырыусы гармониялы бер бөтөн итеп ҡаралһа, беҙҙең эраға тиклем XVII быуатта хәҙерге Башҡортостан тупрағында хасил булған сураштора (зороастризм) диненең рухи емеше “Урал батыр” эпосында (тимәк, халҡыбыҙ аңында) иһә донъя-ғаләм бер-береһенә дошманлыҡлы көн һәм төнгә, аҡ һәм ҡараға, яҡшы һәм яманға (йөҙө аҡ һәм яҡшы Урал батыр һәм йөҙө ҡара һәм яман Шүлгән матур мөнәсәбәтенә) бүленә. Дәүләтселлек барлыҡҡа килгәндән һуң был бүленеш хакимдарҙар сәйәсәтенә әүерелеп, кешеләрҙе ҡапма-ҡаршылыҡлы икегә -- ышаныслыларға һәм ышаныcһыҙҙарға бүлеп йөрөтөү башлана. Шуның тәғәйен миҫалы Рәсәйҙең батша хөкүмәте сәйәсәтендә сағыла – “вор башкир” һәм “лутчий башкир”…

Бына батшаның 26 сентябрь 1755 йыл указы (ҡыҫҡартылыбыраҡ үҙ телендә күсерелә):

**Объявляем** всем Нашим верным подданным Казанской губернии служилым и ясачным мурзам и татарам. Понеже пред недавним временем из Нашего подданнаго башкирскаго народа некоторые, забыв свою к Нам верноподданическую должность и Наше Всемилостивейшее об них милосердие… дерзнули присягу свою нарушить… собираясь партиями некоторых жительствам разорении и убивства чинить… и хотя большею частию из того ж башкирскаго народа к тому злу не токмо несогласны и состоят Нам верны, но и за ними злодеями те *верные башкирцы* поиски чинят; однако ж те злодеи многих принуждая и своих башкирцов и *лутчих старшин* до смерти убивают… наконец тож злодейство оказалось и на Осинской дороге, соглашая к тому злодейству и других башкирцов, против которых принуждено несколько регулярных и нерегулярных Наших войск в Оренбургской губернии умножить… Того ради, в разсуждении непоколебимой Наших казанских *мурз и татар к Нам верности и что и в прежний Башкирский бунт против их башкирцов с пользою употребляемы были, и положенную на них службу с ревностью исправляли, указали Мы сим Нашим Императорскаго Величества указом… дабы от тех злодействующих башкирцов, верные Наши подданные Казанской губернии мурзы и татары крайнее имели остережение; и ежели явятся подсылаемые с чем их башкирцов согласники, то б, ловя оных, отсылали в Казанскую губернскую канцелярию и к другим ближним Нашим командам, под крепким караулом. Яко же Мы их Наших Казанской губернии служилых мурз и татар навсегда верными Нашими признавая и для усмирения искоренения тех злодействующих башкирцов, из тех Наших верноподданных Казанской губернии служилых мурз и татар доброконных и вооруженных 5000 человек, удовольствовав их с начала выступления Нашим денежным жалованьем и провиантом, и фуражем, под командою одного штаб-офицера в Оренбургскую губернию отправить повелели, где в поисках над теми башкирцами поступать им по диспозициям и наставлениям Нашего деиствительнаго тайного советника и Оренбургскаго Неплюева, или кому от него велено будет, с таким при том им, Нашим мурзам и татарам будущим в той службе удовольствием, что во время деиствительнаго их

над злодействующими ворами башкирцами поиску и сражения и добычь из их башкирскаго имения, тако ж и взятые в плен малолетные и женский пол, им Нашим служилым мурзам и татарам в пользу оставляется, которым оное и внутри России продавать позволяет: и чтоб они, Наши служилые мурзы и татара, по верноподданической к Нам и государству нашему должности, в вышеписанном с ревностию поступали и исполняли, со обнадеживанием за то им Всевысочайшей Нашей Императорской милости, сим указом и публикуется.

*ПСЗ РК I. — Т. XIV. — № 10469. — С. 436 — 437.*

Асыҡ күренеүенсә, "Именной"ҙа һәммәбеҙгә яҡшы таныш "верные башкирцы" "лутчие старшины" (быныһы батша сатраптары тарафынан артабанғы осорҙарҙа "лутчий башкир" рәүешендә яратып ҡулланыла) кеүек билдәләмәләр бар; тимәк, "лутчий"ҙың "вор" тип аталмыш киреһе лә күҙаллана: батшалыҡтың 1722 йылғы документтарында уҡ "лутчие люди башкирцы" һәм "пущие воры, которые имеют в башкирцах первенство, Юлуш Батыр, Тыгамбеть, Батурманчи-бай, Алдар-бай" тигән билдәләүҙәр бар (Материалы по истории Башкирской АССР, часть I, М.- Л., 1936; 119, 122-се биттәр).

Документта идара итеүҙең империалистарса мәңгелек алымы -- бер халыҡты икенсеһенә ҡаршы аяҡландыртыу хөсөтө лә ярылып ята. Атап әйткәндә, баш бирмәүсән башҡорттарҙы баҫтырыу һәм ҡырып бөтөрөү буйынса полктар биргән Ҡазан яғы "игеҙәк туған"дарыбыҙ батшаның иң ышаныслылары дәрәжәһенә күтәрелеп, улар файҙаһына сикләүһеҙ мөмкинлектәр (хәҙергесә әйткәндә, "льготалар") ҡаралған: башҡорт-"вор"ҙарҙы йәне теләгәнсә ҡырыу, ҡырылғандарының ерҙәрен, мөлкәттәрен үҙләштереү, тол ҡалған ҡатындарын, үкһеҙ бала-сағаларын ҡол итеп һатып ебәреү… Әйткәндәй, баш күтәргән ҡан-ҡәрҙәштәренә ябырылыусы "лутчий башкир"ҙар ҙа "льгота"нан мәхрүм ҡалмаған.

"Вор" башҡорттарҙы язалауҙың Рәсәй палачтары киң ҡулланған ытырғаныс ысулдарының береһе бөтөн Рәсәй күләмендә ҡануни нигеҙләнә:

**119. О клеймении воров, разбойников и прочих уголовных преступников словом вор, означая на лбу ВОг на правой щеке Рг на левой Ъ.**

**Именной, объявленный генерал-полицейместером.**

9 июня 1746 г.

Ея Императорское Величество изустно указать **соизволила:** впредь с сего числа ворам и разбойникам и прочим злодеям, которые за свои вины подлежать будут смертной казни или вечной на каторгу ссылке, до окончания им розысков клеймить сделанными на то литтерами вор: во лбу **ВО** на правой щеке **Р**, а на левой **Ъ**, чтоб они от прочих добрых и неподозрительных людей были отличны и когда из оных каким-либо случаем кто учинит утечку, таковых к поимке чрез то клеймение удобный способ быть может.

*ПСЗ РИ. I. — Т. XII. — № 9293. — С 558.*

Ябай ғына аңлатһаҡ, “вор башкир” һәм “лутчий башкир” төшөнсәләре тарихи бер миҫалда шәп асыла: туған халҡының бәхетен даулап йәнен аямай көрәшкән Салауат Юлаев – “вор” (уның йөҙөнә тап ошо тамғаны баҫҡандар), ә уға ҡаршы батша яҡлы алышҡан Ҡолой Балтасов – “лутчий башкир”…

Миңә ҡалһа, хәҙерен дә республикабыҙ хакимиәтенең юғары эшелондарында ҡорһаҡ һимертеүсе чиновник һәм депутаттарҙың күпселеге, теләйме-теләмәйме, һөрһөп бөткән “лутчий”ҙар ҡоронда ҡыбырлай.

Халыҡ күңелен әрнеткес был хаҡиҡәт, әлбиттә, борон-борондан уҡ билдәле булған:

Кантон да ғына кантон килә, тиҙәр,
Килгән кантондарҙан ҡаҡшаныҡ.
Яуыз кантондарҙы ҡуя икән
Рәсәй тигән яуыз батшалыҡ.
(Ҡолой кантон).

Хужаларының ышанысын еренә еткереп аҡлар, шәптәрҙән-шәп “иң шәп”лекте яулар өсөн, “иҫәүән башҡорт” үҙ тиреһенән сығырҙай кирелеп ҡыртыша – “Ҡолой кантон” кеүек бөйөк йырҙарыбыҙ тап шул мөхиттә тыуҙы. Ҡолойҙарҙың бөгөнгө вариҫтарының иһә мәшһүр йөрәк моңобоҙҙо тормошобоҙҙан быраҡтырырға, онотторторға көсәнеүҙәрен мин сал тарихҡа, башҡорт күңеленә яһил ҡул һалыу, ревизия яһарға яҫҡыныу тип һанайым. Тап шундайҙар ауыҙынан ғәйепләүҙәр таратыла: “башҡорт башҡортто ошаҡлап батыра” имеш. Бәлки, дөрөҫтөр ҙә, сөнки “яуыз кантон”дарҙан арынырға ялпының башҡа сараһы юҡ – ҡулындағы ҡылысы тартып алынған, ауыҙына көсләп келәп һалынған… Ә шулай ҙа “ҡарға күҙен ҡарға суҡымай” барыбер – оторо йырҙы суҡып ташлап, ҡолойҙарҙың яҡшы эштәрен генә йырламаҡсылар. Уға китһә, замана “кантон”дары Сталиндың да, хатта Гитлерҙың да үҙҙәренә күрә яҡшы яҡтары булған, әммә яуызлыҡтарына күҙ йомоу – үҙебеҙҙе үҙебеҙ һуҡырайтыу ул. Үткәндәрҙе үҙгәртеү мөмкин түгел, тарихыбыҙ нисек бар – шулай яҙылырға тейеш.

Салауат яуында ҡанһыраған башҡорт иле баш күтәреүҙән төңөлөп, теләгәнсә бороп ишеләкәй майлы ҡайышҡа әйләнгәс тә, бөйөк М.Ю. Лермонтов мәргән нарыҡлаған “страна рабов, страна господ” -- жандармерия дәүләтенең йәшерен башҡармаларында уҙамандарыбыҙҙы ҡапма-ҡаршы икегә бүлеү ҡағиҙәһе юйылмай: йә -- “вор”, йә -- “лутчий”. 1917 йылғы түңкәрелештән һуң да был дауам итеп, “пролетариат диктатураһы” тарафынан саҡ ҡына үҙгәртелә: “вор”ҙы – “бандит”, “лутчий”ҙы – “коммунист” ләҡәбе алмаштыра. Халҡыбыҙҙың ысын азатлығы хаҡына баштарын һалған Сөләймән Мырҙабулатов, Хажиәхмәт Унасов, Муса Мортазин кеүектәр тап шулай ләғнәтләнгән, “коммунист”арға ҡыҙыл режимдың майлы бәлеш төбө тәтегән. Социализмдың “сәскә атыу” осоронда хәтәр бүленеш яңы сәйәси-йәшерен көпкә төрөлөп, яҡтылыҡҡа ынтылыусы әүҙем башҡорт баяғы икенең берен: йә -- “милләтсе” (националист), йә -- “интернационалист” мөһөрөн ала; ғүмерлеккә юйылмаҫлыҡ был тамғалар КПСС комитеттарының һәм уның һыңары КГБ-ның йәшерен оҫтаханаларында

“синфи көрәш” суҡмары һәм прәниге рәүешендә “ҡара” һәм “ҡыҙыл” исемлектәргә теркәлеп, шәхестәрҙең йәшәйешен йә -- зәһәр туңдыртыусы, йә -- күкрәп сәскә аттыртыусы яҙмышҡа әүерелә. Йәшерен сара бигерәк тә милләтебеҙҙең рухиәт донъяһында -- әҙиптәребеҙ яҙмышында көҙгөләгеләй сағылды:

1. Шәйхзада Бабич (хатта үлтерелгәндән һуң да!), Мөхәммәтша Буранғол, Рәми Ғариповтар һәм уларҙың эйәрсендәренең яҙмышы.

2. Мәжит Ғафури, Мостай Кәрим, Рауил Бикбаевтар һәм уларҙың эйәрсендәренең ғүмер һөрмөшө.

Уйлап ҡараһаң, һәр ике яҡта ла күҙ сағылтҡыс таланттар гөлләмәһе. Айырма шунда ғына: “гөл”дәрҙең һәр ҡайһыныһы үҙенең рухи асылына ярашлы ҡиблаға юҫыҡлана – “йәне һөйгән – йылан ите ейгән” тиҙәр бит. Халыҡ менән хакимиәт араһында килешмәүсәнлек булғанда, ҡиблалар ҙа икәү килеш ҡаласаҡ. Рафаэль Сафин әйтмешләй, барыһы ла иҫкесә -- иҫ китә!..

Ике ҡиблалыҡлы яһил сәйәсәт, тормошобоҙҙоң барса тармаҡтарын фалижлатып, милли әҙәбиәтебеҙҙе ифрат та ныҡ ҡаҡшатты: “көсләп тағылған идеялар әҙәбиәт менән идара итә башлаһалар, бер һүҙһеҙ уны буйһондороп, һутын һурасаҡтар. Был осраҡта үҫеш тураһында һүҙ алып барыуы ситен. Социалистик реализм үткән быуат әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ һәм төп идеяһы булды… Шул талап үтәлмәй икән, китап нәшер ителмәйәсәк. Тоталитар режим саф сығанаҡтарҙы быуҙы, бына шуға ла күп әҫәрҙәр бөгөн актуаллеген юғалтты” (“Ағиҙел” журналы 2012/12; 149-сы бит).

Тынсыу сәйәси мөхиттә, әлбиттә, теремек йәндең йылыға тартылыуы, һаламға йәбешеп булһа ла батмаҫҡа -- өҫкә ҡалҡырға тырышыуы тәбиғи, был ҡанунға буйһоноуҙан хатта президенттарыбыҙ ҙа (элеккеһе һәм хәҙергеһе) азат була алманы һәм була алмаясаҡ та. Башҡорттоң ғына түгел, бөтә кешелек донъяһының (сайтымдың “Статьи” бүлегендәге “Тревога” тигән мәҡәләмде уҡығыҙ) изгеләрҙән-изге тауҙарының береһе Шәке-тауҙы төбөнәсә кимереп-ашап бөтөргән, инде нәүбәттәгеләрен – Тора-тауҙы, Ҡуш-тауҙы, Йөрәк-тауҙы умырып йоторға ҡомһоҙланған йот-аждаһа Сода комбинатының төпһөҙ тамағына арҡыры торған “регион башлығы”быҙҙың 2012 йыл ахырында Мәскәүгә барып ҡайтҡанынан һуң ҡырҡа ғына үҙгәреүе аяныслы күп нәмә хаҡында һөйләй. Изгелекте ил ағабыҙ тапаһа, бәндәләргә ни ҡала? Боҙ аҫтынан мәке өҫтөнә ҡалҡынған билдәле нәмәләй ерәнгес тулҡыныусы әһелдәребеҙ үҙҙәрендәге саҡлы-соҡло халыҡсанлыҡ тойғоһон, остоҡланған намыҫын һаҡлай алырмы, әллә карьера ҡоло, ҡанмаҫ нәпсе ялағайы нисбәтендә ҡалырмы? Юҡҡамы ни бәғзе берәүҙәр хамелеон сифатын алырға мәжбүр: ҡәләмдәшебеҙ Фәнил Күзбәков әйтмешләй, бер төрлө уйлайбыҙ, икенсе төрлө һөйләйбеҙ, өсөнсө төрлө яҙабыҙ… Өҫтәүенә, Мәжит Ғафуриҙың “һәр фәнгә лә маһир мулла” рәүешенә керәбеҙ. Шундайын өҫкырлыларыбыҙ тайғаҡ юлда ла йығылмай юғары ҡунаҡсаға – Дәүләт ҡоролтайына мут ҡунаҡлап, иле өсөн хәтәрлекле мәсьәләләр ҡубынғанда башын эйеп йоҡомһорап ултырыусан, улар фәҡәт тауыш биреү йыһазының “за” төймәһенә баҫыу өсөн генә ашҡынып уяна; халыҡ араһына сығыуҙары ла -- “һайлау” алдынан “бал” сиртеү ниәтенән, һәм тел сарлау алымдары ла “иҫкесә” –

йомшаҡ түшәп ҡатыға ултыртыусан. Ғәзиз туған телебеҙҙе (тимәк, милләтебеҙҙе!) бөтөрөүгә килтерәсәк федераль закондар башыбыҙға тимер таяҡтай һуҡҡан дәһшәтле дәүерҙә Башҡортостан Юлдаш Телевидениеһының 2012 йыл декабрь аҙаҡтарындағы "Телеүҙәк" тапшырыуында был ҡойто мәсьәлә ҡап-уртаға һалынып, Салауат ҡалаһынан килгән абруйлы бер ҡатнашсының бөтәбеҙ белгән Ҡоролтай депутаты, шундай мәсьәләләрҙе сисеү бурысы йөкмәтелгән комитет рәйесе Рауил Бикбаевтың ҡала тамашасыларына "ҡыуаныслы" кәңәш биреүе тураһындағы ихлас хәбәре һирәк кенә сәстәремде үрә торғоҙҙо. "Бөйөк Рауил ағай, -- тине ул, -- "Беҙ һеҙгә туған телдә уҡырға һәм һөйләшергә бөтә мөмкинлектәрҙе бирҙек, уны һаҡлау хәҙер фәҡәт үҙегеҙҙән тора", тип төшөндөртөп, ышанысыбыҙҙы арттырҙы"… Эй эскерһеҙ башҡорт уғланы, үкереп илар урында ҡыуанаһың – "һыуға батып барыусының ҡотолоу сараһы фәҡәт уның үҙ ҡулында" тигәнде тумбытҡан бит "маһир мулла"быҙ!..

Ошоноң ише "ҡыуаныслы" хәбәрҙәрҙең кәттәрәге "Башҡортостан" гәзитенең 2012 йыл 22 декабрь һанында шау-шоуланы. Көнүҙәк ҡаҙағына ҡағылышлы ойошторолған, Башҡортостан Конституцияһы көнөнә арналған әңгәмәлә тап шул Төп Ҡануниәтте "яҙыуҙа ҡатнашҡан, уның ике тиҫтә йылға яҡын дәүерҙә кисергән яҙмышының туранан-тура шаһиты булған шәхес – Башҡортостан фәндәр академияһының вице-президенты, сәйәсәт фәндәре докторы, профессор Мансур Әйүпов" әфәнде республика халҡын дәртләндерткес оптимистик аһәңдә: "Беҙ – дәүләтле халыҡ. Ошо хәҡиҡәтте онотмаҫҡа тейешбеҙ", -- тип оранлап, дәүләтселлек гарантияһы Конституциябыҙ барлығын иҫкәртеп йомшаҡ ҡына түшәй ҙә: "Совет осорондағы Конституцияларға айырым бер ҡалып хас ине. Улар "юғары"нан төшөрөлдө, шул килеш ҡабул ителде. 1993 йылда барлыҡҡа килгән Башҡортостан Конституцияһы иһә вәкәләттәре киң, үҙаллы республикаға ынтылышты сағылдырҙы. Үҙаллы эшләгән, иң тулы, бөтөн Төп Ҡануниәт булды ул", -- тип таҫыллап, гонаһһыҙ балыҡтарҙы емле ҡармаҡҡа алдаштырғандай, зиһендәрҙе кәнфитләй биреп ҡуя ла, көтмәгәндә, шул һиммәтле ҡануниәтебеҙгә мәжбүри рәүештә "ете тапҡыр төҙәтмә индерергә, уны федераль ҡануниәткә яраҡлаштырырға тура килде", тип әсеүташ йотторотоп, ҡатыға ултыртҡанын һиҙмәй ҡала, буғай. Әммә быны беҙ, ултырта зыңҡылдатылыусылар, йөрәгебеҙ ҡанһырап ҡаты тойҙоҡ, тоябыҙ. Ә һиммәтле ултыртыусыбыҙ һаман, һылап-һыйпап, үҙенекен һамаҡлай: "Ошо Конституция нигеҙендә республиканың үҙ закон сығарыу системаһы булдырылды, 20 кодекс, 400-ҙән ашыу закон ҡабул ителде. Сағыштырып ҡарағанда, шул осорҙа закон сығарыуҙа Ҡаҙағстандан, Ҡырғыҙстандан күпкә уңышлы эшләгәнбеҙ". Аяныс, ошо көндә милли рухиәтендә саҡ тын алыусы республикабыҙҙы "үҙ хөкөмкәйҙәре үҙ ҡулында" булған Ҡаҙағстан менән сағыштырыу – үҙебеҙҙән үҙебеҙ көлөү түгелме? Хәйер, бер нәмә иҫкә төштө. Бынан күп йылдар элек, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының беренсе йыйынында уҡ сәйәсәт юлына бәрәкәтле аҙымлаған оптимист әһелебеҙҙең, сәхнә түренән "тейешле сәйәсәт" үткәреп, делегат мандатлы мин фәҡирегеҙҙең Ырымбур гөбөрнәтеренән: "Ә Каруанһарайҙы ҡасан башҡорттарға ҡайтарып бирәһегеҙ?" тигән оторо һорауын (ул тура эфирҙан, иртәгәһенә яҙманан яңғыратылды) урынында уҡ томалап

ҡалдырырға тырышыуы күптәрҙең хәтерендәлер. Ә мин иһә әле килеп: хөрмәтле уҙаман! Артабанғы ҡаҙаныштарығыҙҙа Һеҙҙең турала, билдәле йырҙағыса: "Каким ты был – таким и остался, орел степной – казак лихой!" – тип баһаларға яҙмаһын ине, тип теләйем.

Бөгөнгө башҡорт элитаһы халыҡтан ныҡ йыраҡлашҡан, уларҙың яҡынлығы – Ер менән Күк араһы. Шуны ла бит күрергә теләмәйҙәр: Ленин бабабыҙ һәм вариҫтары йырта-йырта "ҡағыҙ ярпыһы"ның да ярпыһына әйләндермеш "Конституция" ҡағыҙында елгә елберләп саҡ-саҡ эләгеп торған ғәзиздәрҙән-ғәзиз туған телебеҙ – милли булмышыбыҙҙың һуңғы сик бағанаһы лаһа!. Уны алып ташлау менән "Конституция"лы дәүләтселлегебеҙ ҙә, Башҡортостан Республикаһы тигән төшөнсә лә бөтәсәк. Хәҙер ана шул бөтөрөлөштөң башланышында йәшәйбеҙ. Сик бағанабыҙҙы ауҙартмаҫҡа саҡырып сың ҡағыр саҡта ялған оптимизм менән һуғарылған әңгәмәлә баяғы бер йөҙәткес "аҡыл" ҡабатлана: "телде һаҡлау ғаиләнән, ата-әсәнән… Беҙ – Конституцияға эйә булған халыҡ… ғорурланырға тейешбеҙ!" Быны менән килешһәк, үҙебеҙгә үҙебеҙ ҡаҙған ҡәбер ситендә ултырып ҡыуаныу булыр ине.

29.12.2012.

# БАШҠОРТ ТАРИХЫНА БАШҠОРТСА ҠАРАШ

## Башҡортостан зыялыларына өндәшеү

Төпкөл-ысын тарихыбыҙҙы белмәйбеҙ һәм белергә лә тырышмайбыҙ, ахырыһы. Әллә нисәмә академик һәм йөҙәрләгән фән докторҙары, кандидаттары абруйланып етәкләгән ғалимдарыбыҙ ҙа ошо көнгәсә һис үҙгәреш һәм яңырыш кисермәй, тарихыбыҙға ҡарата ҡасандырғы колонизатор-остаздары бөхтәләп төҙөп биргән, мейеләренә һеңдерелгән хата концепцияға таянып эшләй, йәшәй һәм яңы быуын тарихсыларын маңҡортлаштырып тәрбиәләй. Улар бер төптән бара: Башҡортостан тупрағындағы боронғо ҡалаларҙы, һис тә башҡорттар түгел (йәнәһе ул замандарҙа башҡорт булмаған), ә "Урта Азиянан, Ҡафҡаздан, Ҡырымдан килмеш күскенселәр төҙөгән", меҫкен башҡорт тоҡомо иһә тап шул килмешәк ғәләмәләрҙән уҡмашҡан. Был бер яҡлы һәм аяныс фараз менән эш итһәк, проблеманы уғата киңерәк "сисергә" – башҡорт этносын һәм уның рухи-дини (мифологик) һәм матди мәҙәниәтен Америка, Азия, Африка, Австралия (Яңы Зеландия), Европа ҡитғаларынан Уралға ағылыусы төрлө-төрлө килмешәктәр хасил ҡылған, тип, "фәнни" нигеҙләргә лә бик мөмкин булыр ине (ә эш шуға табан бара!). Ләкин көллө ғалимдар ҙа бер төрлө генә уйламай – икенсе концепция ла яҡшы мәғлүм: тәүтел, тәүмиф, тәүдин, тәүге матди ҡаҙаныштартарҙың мәркәз-үҙәге хәҙерге Башҡортостан, Өфө ҡалаһы булған, дөйөм кешелек ҡиммәттәре әле әйтелгән ҡитғаларға тап ошонан таралған. Был концепцияны, айырым башҡорт зыялылары ғына түгел, ә байтаҡ сит ил алдынғы ғилем эйәләре лә яҡлай. Һәм, үҙ ҡабырсаҡтарына томаланып, иҫке ҡарашта

ҡатып ҡалған башҡорт ғалимдарына, баштарын ижади эшләтеп, икенсе ҡараш-концепцияны ла иҫәпкә алырға, өйрәнә башларға кәрәктер. Сөнки ҡатып ҡалғанлыҡ фәндәрҙе үлтерә.

Колонизаторҙар яҙып биргән "йәтеш башҡорт тарихы"нан арынып, үҙ тарихыбыҙҙы үҙебеҙ барлап яҙайыҡ, был юлда беҙгә ҡоростай ныҡ таяныс – бөйөк тарихсыбыҙ Сәйет (дин башлығы) Йәғәфәр Садиров бабабыҙҙың сал дәүерҙәрҙе иңләгән изге аманаты бар. Тәүәрихтең большевиктар КГБ-һы юҡ иткәндән тороп ҡалған ҙур ғына өлөшөн мин, интернет шырлыҡтарынан эҙләп табып, башҡалар ҙа кинәнеп файҙаланһын, тип, 2010 йылда уҡ "Башҡорт порталы"на һәм үҙемдең сайтҡа һалғайным, әммә сәйнәп ҡаптырғанды ла йотоп ебәреүсе юҡ... Ҡомартҡыны фатихалаусы аңлатмамды күсерәм:

**"СӘЙЕТ ЙӘҒӘФӘР САДИРОВ. БАШҠОРТ-БОЛҒАР ТАРИХЫ. Интернеттың "Башҡорт порталы"на әҙерләүсенән кереш һүҙ.**

*Бисмилла.* Башҡорт халҡының үҙ дәүләтселлеген тергеҙеү өсөн 1680-82 йылдарҙағы ҡораллы көрәшен ойоштороусы һәм етәкләүсе, Башҡортостандың рухияты, дин башлығы (Сәйете), башҡорт-болғар һәм ғөмүмән Евразия ҡитғаһы халыҡтарының бик боронғонан килгән яҙма тарихтарын йыйып, бергә тупланған китап рәүешендә үҙе йәшәгән һәм үҙенән һуңғы быуындарға изге аманат итеп тапшырып ҡалдырыусы бөйөк тарихсыбыҙ Сәйет Йәғәфәр Садиров бабаның быуаттар аша туранан-тура беҙгә өндәшеүе был. Ошо ғилми мөғжизәне, ғалимдарыбыҙ ғына түгел, ә эсендә йәне булған һәр бер башҡорт белергә тейеш, тип һанайым.

**Йыһат Солтанов.**

28.12.2010"

Бөгөнгө тынсыу рухи-мәҙәни мөхитебеҙҙең томаналығын ярып сығырға ынтылған, күнегелгән дөйөм хорға ҡушылмай, үҙенсә һәм яңыса йырларға тырышҡан һирәк кенә инсандарыбыҙҙы үҙһенмәй ҡағытабыҙ, хатта тонсоҡтороуҙан да тартынмайбыҙ. Бына бер ябай миҫал: "бөйөк" көндәлектәрендә ("Ағиҙел" 2006/11) "Белем запасым һәр ваҡыт әҙ булды..." тип ихлас белдереүсе әҙәбиәт генералыбыҙ большевистик идеология фронтында "милли сикләнгәнлек"кә ҡаршы ең һыҙғанып, балаҡ төрөп көрәшеүе осоронда сал тарихҡа ҡағылышлы хеҙмәттәремде, ысын большевиктарса, "бред" тип тамғаланы, Башҡортостан Яҙыусылар берлегенең унын ҡанаты аҫтындағы рәйесе (шундай уҡ "белем запаслы") был ҡара мөһөрҙө Мәскәү гәзитенә баҫып таратты. Бының ише белдеклеләрҙән башҡасаһын һис көтөп булмаһа ла, академик Н. Мәжитов уҙаманыбыҙ, тегеләрҙән дә уҙҙырып ебәреп, "Ағиҙел"дә "был авторҙың нәмәләрен баҫмаҫҡа кәрәк" тип ҡәтғи күрһәтмә биргәйне, һаплаған шул буйтлы күҫәге тора-бара "Өфө-2" ҡаласығы тәңгәлендә үҙенең башын бумерангылай шаңҡытҡас, уны яҡлап сығыуҙы мин намыҫым бурысы һананым (<зигатсултанов.рф> адреслы сайтымдың "Статьи" бүлегендәге "Тарих диңгеҙенә тишек кәмә килешмәй" тигән мәҡәләне ҡарағыҙ). Әммә "эт өрә -- каруан йөрөй",

тигәндәй, башҡа каруандар ҙа сәфәргә сыҡты һәм әле лә сыға тора: башҡорттоң үткәнен байҡау – бөтә кешелек донъяһының тамырын барлау бит ул. Тиккәме ни был эш менән төрлө милләт зыялылары шөғөлләнә, хатта “башҡорт” атамаһының, профессор Талмас Ғарипов яҙыуынса, ҡырҡтан ашыу төрлө әйтелешен тапкандар. Ошо юлдарҙың авторы ла бәхәслекле мәсьәләгә ҡыҫҡаса үҙ өлөшөн индермәксе (тулырағы сайтымдың “файлы” бүлегендәге 11-се томымда бирелгән).

## Тәүтөйәк һәм башҡорт, урыҫ халыҡтарының килеп сығышы тураһында йәнә бер фараз
## Еще одна гипотеза о Прародине и происхождениях башкирского и русского народов

Әлхасил, боронғо географтар ҡарашынса, Скифөйө -- Башҡорөйө картаһы ер битләүендә дүрткел яҫылыҡ рәүешле һыҙатланып, эс яғында Өфө -- Дим йылғалары үҙәне буйынса ҡап-уртаға (ике яртыға) бүленгән (һүрәткә күҙ һалығыҙ): дөйөм үҙәндең көнбайыш яғы – Эске Башҡорт (Әсәбүре-Көнгә һәм Атабүре-Айға табыныусылар). Был дөйөм үҙәнде перпиндикуляр һыҙатта ҡап-урталай Ағиҙел йылғаһы киҫеп үтеп, дүрткел яҫылыҡ эсендә дүрт тармаҡлы сатраш (кресть, свастика ишараты) хасил ҡылып, еребеҙҙең йөҙөн теүәл дүрт өлөшкә бүлгән һәм был дүрт өлөштә тәүге туғандаш дүрт ҡәбилә йәшәгән:




1. Эске Башҡорт, Ағиҙелдең һул яғы, Үҫәргән-Урысайҙың Әсә тармағы: Ас-Ар-Көн (Әсәбүре-Иратабүре-Көн/Ҡояш) 'Әсәбүреһенә Ираtаның – Ҡояшҡа' йәғни Атабүренең Әсәбүреһе (Әсәһе) ҡиәфәтендәге Ҡояшҡа табыныусы, матриархат йәмәғәт ҡоролошонда йәшәүселәр. Мифтарыбыҙҙан билдәле булыуынса, Ҡояш-әсәй ер йөҙөндә Әсәбүре ҡиәфәтендә гиҙгән. “Ас-Ар-Көн”дән

яһалалыр: Асарган/Үҫәргән/Царь-Хан/Саргон (Боронғо Шумерға һәм унан ары Африкалағы Египетҡа барып еткән Үҫәргән батшаһы).

2. Эске Башҡорт, Ағиҙелдең уң яғы, Үҫәргән-Урысайҙың Ата тармағы: Ар-Ас-Ай (Иратабүре-Әсәбүре-Ай) 'Иратабүреһенә Әсәбүренең -- Айға' йәғни Әсәбүренең Иратабүреһе ҡиәфәтендәге Айға табыныусы, патриархат йәмәғәт ҡоролошонда йәшәүселәр. Мифтарыбыҙҙан билдәле булыуынса, Ай-апай ер йөҙөндә Атабүре ҡиәфәтендә йөрөгән. “Ар-Ас-Ай”ҙан яһалалыр Арасай-Әрәсәй/Урыҫ-Ай/урыҫ-рус-русский. Төрки телле был туғандаш ҡәүемебеҙҙең бер өлөшө көнбайышҡа – Балтиҡ диңгеҙе буйҙарынаса китеп, шундағы башҡа этностар менән аралашып, урыҫ телле халыҡҡа әүерелә.

Одна часть этой тюркоязычной братской племени уходит на запад вплоть до Прибалтики и, смешавшись там с другими этносами, превратилась в русскоязычный народ.

Тәүтөйәктәге был ҡәүемдәрҙе, шаҡтай ябайыраҡ итеп: 1. “Әсәгә (Әсәбүрегә) табыныусы ирҙәр (Ас-Ар)”, 2. “Иргә (Атабүрегә) табыныусы әсәләр (Ар-Ас)”, тип аңлатырға ла булыр ине.

3. Тышҡы Башҡорт, Ағиҙелдең һул яғы, Бәжәнәк-Башҡорттоң Ана тармағы: Боҙ-Ан-Аҡ-Көн (ер йөҙөнә төшкәнендә Боҙанаҡ-Көн) -- Боҙан-Бизон ҡиәфәтендә һынланмыш Ҡояш-анаға табыныусы, матриархат йәмәғәт ҡоролошонда йәшәүселәр. “Боҙ-Ан-Аҡ-Көн”дән яһалалыр Бәжәнәк-Ҡан (Хан)/Печенег-Хан.

4. Тышҡы Башҡорт, Ағиҙелдең уң яғы, Бәжәнәк-Башҡорттоң Ата тармағы: Боҙ-Аҡ-Ар-Ай (ер йөҙөнә төшкәнендә Быҙау-Ир-Ай) – Боҙан-Бизон үгеҙе Быҙау ҡиәфәтендә һынланмыш Ай-апаға табыныусы, патриархат йәмәғәт ҡоролошонда йәшәүселәр. “Боҙ-Аҡ-Ар-Ай”ҙан яһалалыр Башҡор-Арай/Башкир-Арий. “Башҡор”ға күплек күрһәткесе “т” ялғанып (Башҡор-т), “Башҡорт” атамаһы хасил.

Берәгәй төрки телдең диалекттарында һөйләшеүсе был туғандаш дүрт ҡәбилә берәгәй башҡорт халҡы булып уҡмашҡан, ә дүрт йылғабыҙ сатрашының ишараты башҡорттоң төп милли тамға-биҙәген – свастиканы биргән.

Әгәр ҙә ки сал дәүерҙәр тәрәнлегенә төшөп, Тора/Библия/”Урал батыр” эпосы замандарын байҡаһаҡ, баяғы дүрткел сикһыҙатлы аҫаба еребеҙ эсендәге Ҡатил (Аҡ-ата-Ил) һәм Яғыбит (Египет), Ҡанил (Аҡ-Ана-Ил) тигән илдәребеҙҙе, Аҡ-Әтил (Иҙел), Аҡ-Әсил (Ағиҙел) һәм Аҡ-Әнил (Нил) кеүек йылға исемдәрен күрәбеҙ. Тәфсилләберәк әйтһәк, хәҙерге Ағиҙелебеҙҙең уң яр бите Аҡ-Ат-Ил (Һөт-Ата-Ил) – Аҡ-Әтил тип аталып, шунан “Урал батыр”ҙағы яуыз Ҡатил иле һәм Тора/Библиялағы Яғы-бит (Ҡаршы яр бите) – Египет төшөнсәләре тыуған. Ағиҙелебеҙҙең һул яр бите иһә Аҡ-Әс-Ил (Һөт-Әсә-Ил) – Аҡ-Әсил/Ағиҙел тип исемләнеп (әсәмләнеп), әсә-ана берҙәйлегенә бәйле, йә -- Ҡасил, йә Ҡанил (Ҡанлы/Ҡаңғы иле) рәүешендә танылған; Ан-Ил (Анил) тигәндән Нил – Ағиҙелебеҙҙең һул яр битенең исеме барлыҡҡа килгән (хәҙерге Африка ҡитғаһындағы “Египет”ты һәм “Нил”ды шул яҡтарҙы баҫып алмыш Саргон-Үҫәргән батшабыҙ етәкселегендәге үҫәргәндәр алып барып еректергән).

Тимәк, “Египет” һәм “Нил”дың тәүтамыры Уралға тоташҡанлыҡтан, Муса (Моше, Моисей) пәйғәмбәребеҙҙең ҡырҡ йыл буйына гиҙмәле мажараларын да

Урал – Алтай (борон улар икеһе бер тау һаналған) тупрағынан тоҫмаллау урынлылыр, изге китап Тора үҙе был хаҡта һөйләп тора.

Тәүбашта унын, буласаҡ пәйғәмбәр-сабыйҙың, бәпес сағында үҫәргәндәр тәүтөйәгендәге Ағиҙел-Нил һыуынан табып алыныуын иғтибарлайыҡ: беҙҙең үҫәргән әсәләре әле булһа бәпесте "һыуҙан табып" алып ҡайта (ә урыҫтар – баҡсалағы кәбеҫтә араһынан)…

Ағиҙелдең һул яр битендә матриархатта йәшәүселәр өсөн уң яр битендәге патриархаттағылар, моғайын, Яғы-бит/Египет -- ҡаршы (дошман) яҡ һаналған. Ул яҡтағыларҙың, был яҡтағы Әсәбүрегә табыныусыларға ҡапма-ҡаршы рәүештә, Атабүрегә табыныуҙары, батшаһының "бүрек-абан" (бүре-ата) – фирғәүен тип аталышы ла нығыта был фараҙды. Тап ошо фирғәүен дәһә, көс ҡулланып, бөтә Эске Башҡортто үҙ Атабүреһенә табындыртырға (патриархатлыҡҡа күсертергә) ниәтләнеп, Әсәбүре яҡлыларҙың бер өлөшөн әсир алып интектергәс, Бөтөнбарлыҡ Мәңгелек Рух (иң-иң Дәү Хоҙай) Үҙе ошо Муса пәйғәмбәргә бөйөк миссия йөкмәтә -- әсирҙәрҙе фирғәүен иҙеменән йолоп, туранан-тура иң-иң Дәүгә -- Унын Үҙенә табындыртҡыс тәүдингә ылыҡтырырға. Ентеклерәк байҡаһаҡ, Изге Китаптағы шуға бәйле ваҡиғаларҙың тап беҙҙең ерҙә барғанлығы асыҡлана. Миҫалына урыҫ телендә яҙылған 11-се томымдан өҙөк килтерәм.

## ПРОРОК МУСА (МОИСЕЙ/МОШЕ) И ПРОРОК СУРАШТОРА (ЗАРАТУШТРА/ЗОРОАСТР)

Как уже было сказано, были они, оба пророка, усярганцами-башкирами, жили и творили в XVII веке до н.э. на Урале – территории исторического Башкортостана.

Муса являлся последовательным поборником традиционной прарелигии, согласно которой миром правил мифический Господь Всевышний в 2 (двух) ликах (гермафродит), которого именовали еще Имир (или Янбирде и Янбика в башкирском эпосе "Урал батыр"). Ему подчинялись 12 (двенадцат) богов и еще 2 (два) полубожества – близнецы Урал (персонаж мужского пола) и Шульган (персонаж женского пола), были они первопредками двух основных башкирских родов Бажанак-Башкорт и Усярган-Урусай. Божества эти были полусмертными, поэтому после их кончины бессмертные части их тел, то есть головы, вознеслись на Небо в качествах Солнца (голова Шульгана) и Месяца (голова Урала), совершая вечный круговорот вокруг Земли. А повсюду всю иерархию названных богов и божеств своим невидимым присутствием обвалакивает Самая Высшая Сила -- Вездесущий Вечный Дух (Бөтөнбарлыҡ Мәңгелек Рух) – Созитатель Всего. И все наши молитвы – для Него, достигают только Его, независимо от того, перед кем мы молимся. Это и есть основа прарелигии.

Пространства мифических расположений башкирских основных родов таковы: принадлежавшие роду Бажанак-Башкорт (почитающие Урала) должны были обитать на северо-восточной части света (Внешний Башкорт), а Усярган-Урусай (почитающие Шульгана) – на юго-западной части его (Внутренний

Башкорт). Такое разделение общества на две части создавало земным правителям огромные трудности в управлении, в высших сферах возрастало стремление к единобожеству, что привело к тому, что один из усярганских беков (магов) с резиденцией расположенной около священного озера Асылыкуль Сураштора (Заратуштра, Зороастр) восстал против старых традиций и провел смелую реформу в прарелигии, разрушив ее до основания и построив свою концепцию единобожия. В результате культ Господа Всевышнего был низвергнут, вместо его верховным богом был объявлен сам Сураштора (или по-персидски Ормозд); все положительные качества обоих полубожеств (Шульгана и Урала) были приписаны только одному из них – Уралу и был возведен он в ранг единственного бога после Ормозда, а все отрицательные кочества их обоих близнецов – приписаны Шульгану, по причине чего объявленной злой девой, подлежащей к проклинанию. Реформа имела успех, учение Сураштора быстрыми темпами распространилось по региону. Пророк старой (фундаментальной) религии Муса со своими сторонниками был изгнан из религиозного центра Аркаима (библейской Арады, а по Торе – Нод ( от башкирского слова Онот – предай забвению) или Хорев, а по-современному Харап, что значит "Разрушенный", в результате вместо Мусы там обосновался новоявленный пророк Сураштора. Началось сороколетнее скитание приверженцев прарелигии во главе с пророком Мусой по маршруту Урал – Алтай – Урал. Начльной точкой Исхода служил район горы Син-ташты (Син-каменистый, а в Библии – Синайские горы) и реки под тем же названием (теперь местность находится в пределах Челябинской области Российской Федерации).

Так как текст священноә книги Тора сохранился в переводе на предполагаемый древнееврейский язык, она традиционно считается еврейской священной книгой; а пророка Мусу (Моисей, Моше) в свою очередь считают евреем; а под библейской "обетованной землей" подразумевается Палестина и новосозданное там государство Израиль; под библейский Синай подразумевают прилегающий к Израилю современный Синайский полуостров... Однако здесь среди археологов возникают сомнения: потому что "сама гора Синай задает много загадок ученым, так как Библия считает, например, что она представляла собой время от времени просыпающийся вулкан. В то же время на Синайском полуострове во времена Моисея уже не было действующих вулканов. К моменту открытия надписей уже не существовало ни одной горы, начиная от Южной Палестины и до Египта, которую не считали бы той самой горой, на которой израильтяне получили свои законы". (Эрих Церен. Библейские холмы. М., 1986, стр. 445). Однако этот "вулкан" имелся и до сих пор имеется в современном Башкортостане – широкоизвестный Янгантау – "горящая гора". Итоги разысканий самих израильских археологов последних лет тоже не говорят в пользу общепринятых догм: "Еще один удар по устоявщейся версии истории выглядит крайне правдоподобно, хотя и стоит уже, собственно, за рамками истории Руси, -- пишет известный автор. -- В прошлом году я обратил внимание на сообщение израильских агентств новостей, на сенсационное сообщение, от общей небрежности прошедшее незамеченным. Коллектив израильских археологов,

занимавшийся сорок лет (!) раскопками в Синайской пустыне и в святых для евреев местах, признался, что *не удалось, тотально не удалось найти никаких археологических свидетельств пребывания в этих местах городов Иерихона, или Содома и Гоморры*[5]*, или вообще каких-либо исторических артефактов. То есть не было древней еврейской истории, Ветхий Завет лжет, никуда не вел Моисей, так получается".* (Эдуард Лимонов. Священные монстры. "Ал-Маргинем", 2004, стр. 218).

Нет, Ветхий Завет не лжет, ибо рассказанные там события действительно имели место, но не на арабском Синайском полуострове, а на башкирском Урале, где и есть искомая гора и река Син-ташты (Син-каменистый). К концу Исхода Муса, оставив на Алтае часть своих соплеменников-башкир (одряхлевшее старшее поколение) на вечное поселение (современные алтайцы), с молодым поколением крепких воинов возвратился на Южный Урал; маршрут его по отрогам Урала до резиденции его заклятого врага Сурашторы (который после поражения в битве со своими приверженцами убежал в Бактрию), т.е. путь до города Аркаима[6] можно проследить по тексту последнего издания Торы на русском языке ("Шамир" Иерусалим 1993 Москва под общей редакцией проф. Г. Брановера):

**БРЕЙШИТ 1-2 БРЕЙШИТ**

*2. (8) И насадил Бог Всесильный сад (в Библии рай) в Эдене (в Библии Едеме) с востока и поместил там человека, которого образовал.*

Эдем (Едем) – это река Едем (русские называют Зилим) и прилегающий к ней "рай" – это есть Архангельский заказник Республики Башкортостан.

*3. (6) И увидела жена, что дерево это хорошо для еды и что услада оно для глаз, и вожделенно это дерево для развития ума, и взяла плодов его и ела, и дала также мужу своему с собою, и он ел. (7) И открылись глаза их обоих, и узнали, что наги они, и сшили смоковные листья и сделали себе опоясания.*

Смоковница – инжирное дерево, а плоды его -- инжир (инъяр); название это, по-видимому, исходит от реки Инжир (Инъяр), протекающей и по-ныне в том же районе. Вероятно, климат тогда был другой – теплый, и произрастали там теплолюбивые растения.

*(9) И произрастил Бог Всесильный из земли всякое дерево, приятное на вид и хорошее для еды, и дерево жизни посреди сада, и дерево познаний добра и зла.*

Один из деревьев назывался, вероятно, *едем* (виноград), как и название протекающей здесь реки Едем. Другое дерево тоже назывался *урук* (абрикос; урук), так же, как именуется протекающая недалеко река Урук. Как уже было сказано, вероятно в те далекие времена в регионе был другой климат и произрастали здесь теплолюбивые растения, что частично подтверждается наличием (на малой родине автора этих строк) таких реликтовых растений, как дикий хлопчатник, растениевидный "грецкий орех" тынкаук, также дикие злаки нескольких сортов.

---

[5] Содом и Гоморра – современный город Алабуга на территории Республики Татарстан.

[6] Которого он дотла разрушил, проклял и предал к забвению.

*(10) А река выходит из Эдена для орошения сада (в Библии: из Едема выходила река для орошения рая) и оттуда разделяется и образует четыре главные реки. (11) Имя одной Пишон, она огибает всю землю Хавилу, где золото.*

Пишон – это река Бишбаш, правый приток реки Шерды в Баймаском районе Республики Башкортостан. Земля эта действительно богата золотом, добыча которого велась с незапамятных времен.

*(13) А имя другой реки Гихон, она огибает всю землю Куш.*

Земля Куш – это ойкумен священной горы Куш-тау; река Гихон – это Зиган.

*(14) А имя третьей реки Хидекель... Четвертая же река это Прат.*

Хидекель – это река Кугидель, левый приток Сакмары в Баймакском районе; Прат (по Геродоту Пората или Пирет) – это река Агидель.

*(15) И взял Бог Всесильный человека и поместил его в саду Эдена (в Библии: в саду Едемском), чтобы возделывать его и хранить его.*

Как видно из этого, Архангельский заказник Республики Башкортостан является прародиной Адама (Урала) и Хавы (Шульгана) – первопредков человечества.

*(24) И изгнал человека, и поставил к востоку от сада Эдена (в Библии: у сада Едемского) ангелов и пламенный меч вращающийся для охранения пути к дереву жизни.*

Находящийся к востоку от "райской земли" (Архангельского района) "пламенный меч" – это знаменитый Янгантау (Горящая гора) в Салаватском районе Республики Башкортостан.

*4. (16) И ушел Каин от лица Бога и поселился в земле Нод, на востоке от Эдена (Едема).*

Нод – это тоже башкирское слово О**НОТ**, (предай к забвению) – город Аркаим, ставший после исхода Мусы религиозным центром заклятых зороастрийцев, которого пророк Муса (Моше) в конце Исхода полностью разрушил и проклял – предал к забвению.

Надо заметить, колонна Мусы, избегая лобового столкновения своими противниками, возвратилась не прямо в Аркаим, а южнее его в район Губерлинских гор (Ецьон-Гавер), совершая в дальнейшем, с мелкими переходами, продвижение на свер.

**БЕМИДБАР 33 МАСЬЭЙ**

*(35) ...и расположились в Эцьон-Гевере. (36) И двинулись из Эцьон-Гевера, и расположились в пустыне Цин, она же Кадеш. (37) И двинулись из Кадеша, и расположились у горы Гор (в Библии: Ор)...*

Эцьон-Гевер, как было уже сказано, -- Губерлинские горы; Гор (Ор) – гора у устья реки Ор (осталась на территории г. Орска). Кадеш – река и местность Кидеш или Кидяташ в Хайбуллинском районе Республики Башкортостан.

*(38) И взошел Агорон-коген на гору Гор (Ор), по велению Бога, и умер там в сороковой год после Исхода... в пятый месяц, в первый день месяца.*

Агорон-коген – назначенный Мусой военачальник-каган[7], его первый помощник. Гору Ор башкиры называют еще Улек тауы – Гора мертвеца.

---

[7] Каган – башкирский титул верховного главнокомандующего-императора.

**ДВАРИМ 32-33 ГААЗИНУ-БРАХА**

*(48) И говорил Бог, обращаясь к Моше:... (49) Взойди на эту гору Аварим, гору Нево... (52) Издали увидишь ты страну эту, но туда не войдешь...*

Гора Аварим – Аба-Арим (гора-Арим) – это современный Арим-эль – Иремель.

**ДВАРИМ 7-8 ЭКЕВ**

*(7) ...Бог, всесильный твой, ведет тебя в страну водных потоков, источников и родников, бьющих в долинах и в горах, (8) в страну пшеницы, и ячменя, и виноградных лоз, и смоковниц, и гранатовых деревьев, в страну масличных деревьев и меда, (9) в страну, в которой без скудости есть будешь хлеб, не будет у тебя недостатка ни в чем, в страну, камни которой – железо и из гор которой добывать будешь медь...*

Страна эта полностью соответствует историческому Башкортостану.

*9. (1) Слушай, израиль! Ты переходишь сегодня Иордан...*

Иордан – это река Йорудан.

**КНИГА БЕМИДБАР**

*13. /27/ "Пришли мы в страну, куда ты послал нас, и вот – течет она молоком и медом…"*

Это и есть башкирская река Бал-Ак-Ат-Ил (Мед-Молоко-Идель) – Белая-Агидель…

**ДВАРИМ 30-31 НИЦАВИМ-ВАЕЛЕХ**
**ГЛАВА ВАЕЛЕХ**

*31. (1) И пошел Моше, (2) и сказал им: "сто двадцат лет мне сегодня, не смогу я больше выходить и входить; а Бог сказал мне: Не перейдешь ты через Иордан этот".*

**ДВАРИМ 33-34 БРАХА**

*34. (1) И взошел Моше из степей Моава на гору Нево на вершину Писиги... и показал ему Бог всю страну... (4) И сказал Бог ему: Вот страна... я дал тебе увидеть ее глазами твоими, но туда не перейдешь. (5) И умер там Моше, раб Бога... (6) И был похоронен в долине... напротив Бейт-Пеора, и никто не знает место погребения его до сего дня.*

Но башкиры знают это место, название местности сохранили в народной памяти: ***Зираткуль*** (озеро, возле которого похоронен святой). Земля эта в 1934 году была незаконно отторгнута от республики и передана новообразованной Челябинской области Российской Федерации.

Название горы Нево образовалось, по-видимому, от древнебашкирского слова Ана-Аба (Ана-Хава) – Мать-Небо, которое с течением времени преобразовалось в Ана-Аба – Анаба – Наба – Небо/Нево. Значит, высота, вершинами дотянувшаяся до Неба. Высшая же точка Писиги – на современном башкирском языке звучит как Бишеге (его колыбель), т.е. самая высокая часть, вершина, горы. Гора эта, расположенная чуть южнее озера Зираткуль, на современном языке называется Нургуш; реконструкция слова дает Нево-ур-куш

(Нево-высота-парная или слитная) -- Ноуркуш -- Нургуш. Там же в сравнительной близости протекают упомянутые в Торе реки Иордан – Йорудан и Иерихон – Эй-ра-кан (Эй-река-вода) – сокращенное название которой теперь Эй/Ай...

Возникает вопрос: почему Муса подходил к этой “обетованной земле” не прямиком со стороны Аркаима, а избрал путь другой? Потому что он, вероятно, находясь в известной отдаленности, производил глубокую разведку сил противника и намеревался использовать фактор неожиданности. В конечном счете удалось ему разгромить и уничтожить главное препятствие – город Аркаим и подчиненных ему городов (вокруг обнаружены множество таких же руин) – и цель была успешно достигнута…

Авторҙың был фараздары, әлбиттә, аңыбыҙҙа күп быуаттар буйына нығытылған тар ҡалыпҡа һыйышмай, күптәрҙең ҡаршылығына, хатта нәфрәтенә дусар булыуы бик ихтимал. Әммә йоҡоло фекерҙең уяныуы, рухи килбәттең бер туҡтауһыҙ яңырыуы ҡалыптарҙан тышта башлана һәм дөрләп бара.

Бөйөк халҡыбыҙҙың сал хәтерен ҡатып ҡалыуҙан, томаланып ыуалыуҙан һаҡлайыҡ. Һәр беребеҙҙең ҡыҫҡа ғына ғүмерендә энә менән ҡойо ҡаҙып тапҡан йәншишмәһенең ҡәтрә-ҡәтрә тамсыларын, ҡыуан елгә осортмай, күңелдәргә бөркәйек. Ошо игелекле юлда игелеклеләрҙең ҡәҙерен улар тере сағында уҡ белеп өлгөрһәк ине. Зарланып әйтеү түгел (эштәремде Хоҙай Бабай Үҙе белә!), әммә бәндәлектә интегеп электрон текстка әүертелгән, интернетҡа ла һалынған ун биш томлыҡ Әҫәрҙәпемдең бер томы ла китап итеп сығартылмауы ла хаҡ. Дәүләтебеҙҙең Зәйнәб Биишева исемендәге “Китап” нәшриәтенә минең өсөн юл ябылыу сәбәпле, халҡыбыҙ тарихы буйынса “Книга-память. Основы башкирской мифологии” тигән төп хеҙмәтемде нәшер итергә иғәнәселәр табылһа, рухи бөлгөнлөккә дусар заманабыҙҙа ил фекерен ойотмаҫтай игелек өҫтәлер ине.

25 – 28.01.2013.

## Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһына.
## *Башҡортостандың ҡәҙерһеҙ яҙыусыһы.*

80 йәшемә ҡарата:

1. Орден юллау кәрәкмәй, сөнки 75 йәшемдә лә юллауығыҙ юҡҡа сыҡты. Һәм ул ҡалайға һис тә мохтаж түгелмен.

2. Быйыл Салауат Юлаев премияһына кандидатурам ҡуйылғанда идара ултырышында Ҡ. Аралбаев ҡаршы сыҡҡас, 33 идара ағзаһы – минең ҡәләмдәштәрем – уның дәғүәһен бер тауыштан хупланы. Ун биш томлыҡ ижади багажлы ҡәләмдәшен “хөрмәтләү” билгеһе был.

3. Ҡәләмдәштәрҙән йыйын ыбыр-сыбыр үҙҙәре юллап йөрөп “халыҡ шағиры”, “халыҡ яҙыусыһы” исемен алғанда ла миңә уны бирергә һүҙ ҡуҙғатылманы һәм ҡуҙғатылмаясаҡ та. Сөнки минең “хөрмәтле” исемем бар – “Башҡортостандың ҡәҙерһеҙ яҙыусыһы”.

4. Тимәк, бер ниндәй ҙә юбилей кисәләре, ижади осрашыуҙар бер ҡайҙа ла (хатта Яҙыусылар союзында, китапханала һ.б. урындарҙа – быны мин мәсхәрәләп кәмһетеү итеп ҡараясаҡмын) булырға тейеш түгел; һәм Йәнсура районына, тыуған ауылым Һунарсыға сәйәхәт ҡылыу ҙа кәрәкмәй. Сөнки мин фәҡирегеҙ, бик яҡшы беләһегеҙ, Башҡортостандың танылған ҡәҙерһеҙ яҙыусыһы.

5. Әгәр буклет эшләтһәгеҙ ҙә, тиражы бәләкәй булһын (иң күбе 150-200 дана).

**Йыһат Солтанов.**
01.10.2012.

## Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар берлеге идараһына, республиканың Әҙәби фонд идараһына Яҙыусылар берлеге ағзаһы һәм Әҙәби фонд идараһы ағзаһы Солтанов Йыһат Әҙеһәм улынан Белдереү

Ошо 2013 йылдың 13 февралендә Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе хөрмәтле Тойғонов Риф Ғәлим улы өйөмә телефондан шылтыратып (шуныһына рәхмәт), тарихыбыҙҙа быйыл беренсе тапҡыр атҡарылмыш Мәхәммәтша Буранғолов исемендәге йыллыҡ бер дана әҙәби бүләкте ике әҙипкә бүлеп биреү тураһында идара ултырышында ҡарар ҡабул ҡылыныуын, шул "бәхетле" кандидаттарҙың береһе мин йәғни үҙегеҙ белгән йәки белмәгән Солтанов Йыһат Әҙеһәм улы икәнлеген хәбәр итте. Ижадымды ҡәләмдәштәр шулай, яртылаш ҡына кимәлдә ҙурлап булһа ла, баһалауҙары иғтибарға лайыҡлылыр, әлбиттә. Ләкин минең фекерҙе лә иҫәпкә алһағыҙ ине.

Эш шунда: идарабыҙ тырышлығы арҡаһында беренсе тапҡыр булдырылған һәм бирелгән юғары бүләк ҡарарында бөйөк Мөхәммәтша Буранғоловтың үлемһеҙ исеменә йәнәшә шуға лайыҡлы ***бер генә*** кешенең исеме торорға, ә икәү булған сүрәттә лә улар ***авторҙаш*** – бүләккә лайыҡлы ***бер үк*** хеҙмәтте башҡарған булырға тейеш. Юғиһә, бөйөгөбеҙҙең рухын ваҡлау, лайыҡлыларыбыҙҙы түбәнһетеү буласаҡ. Тимәк, кандидаттар исемлегенән, йөҙ процентҡа тартмай тип һанаһағыҙ, мине алып ташлағыҙ, миңә йәнәшәләтелгән ҡәләмдәште ҡалдырығыҙ. Ә яртылаш ярлыҡауығыҙ кәрәкмәй.

Ихтирам итеп, -- **Йыһат Солтанов.**
13.01.2013.

## Слово ветерана

Моя младшая дочь Таннура, как истинная патриотка России, к празднику 23 февраля подарила мне прекрасную военно-морскую тельняшку (фото).



Дело в том, что ровно шестьдесят лет тому назад был я бравым военным моряком и единственным из числа писателей Башкортостана моего поколения принявшим участие, можно сказать, в боевых условиях, в разминировании минных полей на Балтике – опасных остатков Великой Отечественной войны…

Как известно, такие же, как моя дочь, простые патриоты России в течении прошлого 2012 года проводили всенародную акцию по сбору подписей под обращением Президенту Российской Федерации В.В. Путину с настоятельной просьбой присвоить генерал-майору М.М. Шаймуратову (посмертно) звание Героя России (собрано уже четыреста тысяч подписей). А что касается моей дочери Таннуры, она такую же "акцию" совершила еще задолго до этого, обратившись с письмом Путину, но от чиновника его канцелярии получила формальный отказ (и другие граждане, обратившись с такой же просьбой, получали такой же ответ). И не удивительно: ведь уже в далеком 1948 году руководители республики с таким же ходатайством кланялись лично "отцу всех народов" И.В. Сталину, а маршал СССР С.М. Буденный – Центральному Комитету КПСС, однако безрезультатно. Как мне кажется, кроется здесь коварная сталинская политика, направленная на подавление национальных чувств народов. И жаль, что современное руководство страны тоже, как я полагаю, не в силах избавиться от пут пагубного наследства тоталитаризма. Ведь недаром ответ ЦК КПСС на известное письмо маршала Буденного вот уже пятьдесят лет продолжает держаться в архиве под грифом "Совершенно секретно" и тщательно скрывается от общественности.

А подарок моей дочери (тельняшку) я принял как знак доброго внимания к скромным заслугам защитников Отечества моего поколения. Дай Бог, чтобы настоящие герои Великой Отечественной, каким яыляется М.М. Шаймуратов, наконец-то были отмечены достойно.

**Зигат Султанов.**

24.02.13

## Бөйөк инсан шәжәрәһе

Гәзитебеҙҙең 2013 йыл 28 март һанында сыҡҡан “Шәхес һаман уйланырға мәжбүр итә” тигән мәҡәләне уҡыусылар, моғайын, мәшһүр Зәйнулла Рәсүлевтең шәжәрәһен тулыраҡ белеү йәһәтенән дә уйланмай ҡалмағандыр, сөнки унда “Шәрип ауылы кешеһе Рәсүл”дән генә башлап 4-5 быуын ғына теркәлгән.

Хәтеремдә, ҡәҙимгесә күпте белергә теләгән үҫмер йылдарымда әнейем (әсәйем) Бибисадиҡаның шул атаҡлы Зәйнулла ишанды үҙе күреп белеүен ишеткәс: “Милләте кем ине?” – тип төпсөндөм. “Кем булһын, уттай янып торған ҡара күҙле башҡорт – үҙебеҙҙең үҫәргән кешеһе ине”, -- тип яуапланы. Шунан һуң күп йылдар үтеп, Үҫәргәндең сал Йәнсура (Бәкәтәр) ауылында һаҡланған “Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе” ҡулыма тарығас, бабабыҙҙың ысынлап та Туҡсабанан дауамланмыш шәжәрә бауына юлыҡтым:

1. Туҡсаба. – 2. Мөйтән-бей. – 3. Шаҡмал-бей Мөйтән улы. – 4. Бүрекәй-бей Шаҡмал улы. – 5. Һеркә-бей Бүрекәй улы. -- 6. Манғут-бей Һеркә улы. – 7. Урал-бей Манғут улы. 8. Ята (Буят)-бей Урал улы. 9. Иңкеш Ята улы. – 10. Туҡай Иңкеш улы. – 11. Мoраҭкабул Туҡай улы. – 12. Солтанай Мoраҭкабул улы. – 13. Ғашиҡ Солтанай улы. – 14. Байрамғол Ғашиҡ улы. – 15. Муса Байрамғол улы. – 16. **Рәсүл** Муса улы. – 17. Хәбибулла Рәсүл улы. – 18. **Зәйнулла** Хәбибулла улы (ишан). – 19. Ғабдрахман Зәйнулла улы (мөфтөй). – 20. Ғәбделрәүеф Ғабдрахман улы…

Әлеге мәҡәләлә ике һүҙ араһында ғына “Зәйнулланың туған **ҡыуаҡан** ырыуы” тигән мәғлүмәт бар. Быныһын автор Ҡыуаҡан ырыуы шәжәрәһе менән дә дәлилләһә, уғата нығыраҡ уйланырға булыр ине.

31.03.2013.

## Азы прамифологии. Обращение к современникам думающим

Это моя очередной попытка достучаться до заскорузлых умов и сердец представителей так называемых академических научных кругов, чиновников с зашоренными глазами. Но прежде всего расчитываю на независимых от догм и инструкций любознательных людей, желательно знакомых с содержанием электронного XI тома (“Книга-память. Духовно-культурная история башкир или основы башкирской мифологии” на русском языке) моих Сочинений. А кто еще не успел, тот сможет восполнить свой багаж на сайте <зигатсултанов.рф>. Говоря словами известного ученого – доктора филологических, кандидата исторических наук Ф.Т. Кузбекова: “Данная исследовательская работа… посвящена сложнейшей теме: выяснению родственных связей народов мира. Согласно авторской концепции, в эпоху первобытного общества люди имели единый и единственный язык (праязык) и одну религию (прарелигию). В течение тысячелетий по мере освоения новых территорий и распространяясь по всему земному шару, отдаляясь друг от друга и утрачивая родственные связи, они настолько стали разными, что сегодня не только не знают те или иные языки, но и не задумываются о своих корнях.

Доказывая правомерность своей концепции, З.Султанов скрупулезно анализирует, сравнивает, сопоставляет языки урало-алтайской и индо-европейской групп, изучает мифологии народов мира, ссылается на фундаментальные исторические источники, на труды корифеев науки. Словом, источниковедческая база исследования довольно-таки обширна и основательна".

Күренеүенсә, Башҡортостандағы татар әҙиптәренең исемлеге Мәжит Ғафуриҙан башлана һәм уның татар әҙәбиәте классигы икәнлеге лә бәхәсһеҙ. Ул ижадының башында уҡ үҙен "Ғәбделмәжид ибне татар" (Ғәбделмәжид татар улы) тип раҫлаған һәм ғүмере буйына шуға тоғро ҡалып, әҫәрҙәренең береһендә лә башҡортлоғон танымаған. Шағирҙың изге йөрәк ҡушыуын ихтирам итеп, уның яҡты исемен һәм һәйкәлен Өфө татар "Нур" театрына күсерһәк һәм шул айҡанлы театрға академия статусы ла беркетһәк, ә башҡорт академия драма театрына лайыҡлы Мөхәммәтша Буранғолов исемен һәм һәйкәлен бирһәк, ғәҙеллек тантана итер ҙә сауаплы булыр инек.

## ЦГАОО РБ (бывший партархив).

Ф. 122, оп. 26, д. 450. Список 1946 года писателей, докладные. Л. 17.

Тов. Шафикову. Список членов и кандидатов ССП Башкирии.

**...Из них татары:**

1. Кудашев С.Ф.
2. .............................

9.Максудов С.М.

10. Гумеров Г.М.
11. Шамуков Г.Р.
12. Исмагилов С.А.
14. Мухтаров Х.Б.
15. Давлетшин Ф.
16. Усманов А.Н.
17. Кудашев А.Г.
18. Валеев А.М.
19. Чанышев А.И.
22. Каримов М.С. (Мостай Кәрим. – Й.С.).
26. Ибрагимов Х.К.
29. Каримов Х.К.

Был мәғлүмәттәр ВКП(б)-ның Башҡорт өлкә комитеты секретарына бирелеүен һәм төгәллекле булыуын иҫтә тотайыҡ.

11.01.2014.

## ХАЛЫҠ ШАҒИРЫНЫҢ ШӘЖӘРӘҺЕНӘН

Башҡортостан Республикаһының Шишмә районы Келәш ауылында дәүләтебеҙ тарафынан халыҡ шағиры Мостай Кәримдең егерме гектар майҙанды биләйәсәк йорт-музейын төҙөргә ҡарар ҡылынғас, шул тиклем дә һоҡланып, буғай, уны А.С. Пушкин, М.Ю. Лермонтовтарҙыҡына тиңләүселәр ҙә булды, бирһен Хоҙай!

Шундайын да изге урынға, моғайын, төрлө яҡтан мосафирҙар, туристар ҙа ағылыр һәм, әлбиттә, уларҙың төрлө һорауҙарына (шул иҫәптән нәҫел-нәсәбенә, шәжәрәһенә ҡағылышлы) ғилми яҡтан теүәллекле аңлатма бирергә кәрәгер. Мәҫәлән, тыуған ауылының халҡы саф татар милләтенән, ә һеҙ уны башҡорт тип әйтәһегеҙ -- әллә ата-бабалары ситтән күсеп килгәнме, ҡасан, тип төпсөнөүҙәре бик ихтимал (шундайҙар бит әлегә көнгәсә хатта Келәштә лә бар). Был иһә арҙаҡлыбыҙ хаҡында төплө ғилми биографияның булмауына бәйле. Дөрөҫ, мәрхүм шағир үҙе бер саҡ күпте белергә тырышыусан ауылдашына “Ағиҙел” журналында яуаплап, Ғайса Хөсәйенев менән ошо Келәштәге ғәзиз бабаларымдың ”башҡорт типтәре” икәнлеген архивтан юллап бирҙе, тигәнерәк мәғәнәлә яҙғайны ла ул, ләкин ғилми яҡтан нигеҙләмәне, кәрәк тә һанамағандыр, сөнки ҡара эфиоп тоҡомло Пушкин да, шотланд тоҡомло Лермонтов та нәҡ урыҫтың бөйөк шағирҙары бит.

Үҙебеҙҙең төбәктә лә оҡшаш хәлдәр булғылай: билдәле архив эшмәкәре Дамир Ҡускилдин шул уҡ “Ағиҙел”дә мәҡәлә яҙып, Татарстан Республикаһының халыҡ шағиры Роберт Миңнуллиндың бер юлы атаһы һәм әсәһе яғынан да һигеҙ быуын бабалары аҫаба башҡорт икәнлеген таныҡҡайны, ләкин ундағы һуңғы быуын уҙаманыбыҙ үҙен татар милләтле таный ҙаһа! Йәнә килеп мәсьәләнең икенсе яғы ла бар. Әйтәйек, халыҡ шағиры Мәжит Ғафури ғүмере буйына тормошта ла, шиғырҙарында ла үҙен татар һанаған (“Русиялы бер төрөктөр асыл затым,/Ғәбделмәжид ибне татар мәшһүр атым”. – Ҡарағыҙ: Мәжит Ғафури. Әҫәрҙәр дүрт томда. I том, Өфө -- 1978; 66,88,93,114,213,266,280-се биттәр), тәғәйен башҡортҡа бағышлап бер юл шиғыр ҙа яҙмаған, әммә күркәм баш ҡалабыҙҙағы йорт-музейында ла, башҡа урындарҙа ла ул, сығышына (1911 йылда күсереп алынған боронғо шәжәрәгә) таянып, башҡорт тип йөрөтөлә. Тикшеренеүселәргә архивтарҙан ҡыҫҡырып ятҡан Мостай Кәрим шәжәрәһе иһә уның бабаларын “башҡорт типтәре” тип билдәләргә һис кенә лә юл ҡуймай, сөнки улар, тарихи документтарҙан асыҡ күренеүенсә, ***татар*** милләтле типтәрҙәр (типтәр ҡатламына теркәлеүсе татарҙар).

1833 йылдың 26 апрелендә Ырымбур граждан гөбөрнәтере Н.В. Жуковскийға Келәш ауылынан атҡарылмыш коллектив хат буйынса, 1737 йылдың 15 майында Өфө өйәҙе Себешле (Чебишинский) ылыҫы (волосы) аҫаба башҡорттары бер төркөм ***татарҙарға*** (улар иһә документҡа ҡул ҡуйыусылар тарафынан “предки наши” тип атала) ер һатҡан, килешеү ҡағыҙына йәмәғәт исеменән “***татарин*** Клящ Тулебахтин” ҡул ҡуйған (шунан килә Келәш ауылының исеме). Шул бер төркөм (“коренной”) татарҙарҙың туранан-тура тоҡомдарының ҡайһы берҙәренең исемдәре улар ҡул ҡуйған әлеге документта ике тапҡыр теркәлгән: Ҡудаш Бикташев (халыҡ шағиры Сәйфи Ҡудаштың бабаһы), Абдулкәрим Шәрипов (Мостай Кәримдең бабаһы), Сөбхан Сабаев, Абдулғәлләм Абдулваһапов (И-1, оп. 1, д. 1239. л. 1-2, БР Дәүләт Үҙәк тарих архивы).

Инде ошо Келәш ауылы ***татар*** типтәрҙәренең “ревизские сказки”ҙарына ла таянып, халыҡ шағирының шәжәрәһен барлайыҡ:

И-138, д. 626, л. 1454 оборот. 1850 йылдың 8 сентябре, типтәрҙәр.

4. **Абдулкәрим Шәрипов** үткән ревизияла 69 йәштә булған, 1839 й. вафат.
Абдулкәримдең улдары:
2. **Мөхәмәҙей** 13 йәштә булған, хәҙер 29 йәштә.
Мөхәмәҙейҙең улдары:
1. **Мөхәмәтсафа** яңы тыуған булған, хәҙер 10 йәштә.

*Д. 728, л.* 842. 1859 йылдың 15 авгусы, типтәрҙәр.
4.5. Мөхәмәҙей Абдулкәримовтың улдары:
**Мөхәмәтсафа** 10 йәштә булған, хәҙер 19 йәштә.

**Тимәк, халыҡ шағирына бәйле быуындар бауы:**
1. Шәрип (?)
2. Абдулкәрим (1781 --.1839)
3. Мөхәмәҙей (1821)
4. Мөхәмәтсафа (1840)
5. Мостафа (Мостай Кәрим 1919 – 2005).

Халыҡ шағиры үҙенең милләте тураһында Ғайса Хөсәйеновтың “юллап биреүе”нә тиклем белмәгән, тип уйлаһаҡ, мәрәкә булыр ине. Ул замандарҙа ВКП(б) һәм КГБ алдында һис кем дә ялған мәғлүмәт бирергә баҙнат итмәгәнлеген иҫтә тотоп, партия өлкә комитетына 1946 йылда тапшырылған 33 (утыҙ өс) яҙыусы исемлегенә мөрәжәғәт ҡылайыҡ:

## Список членов и кандидатов ССП Башкирии

1. Кудашев С.Ф. – середняк, ***татарин***, 1894 г.р. чл. ВКП(б), сред. образование.

………..

22. Каримов М.С. – крест. середняк, ***татарин***, 1919 г.р., чл. ВЛКСМ, высш. обр. (ЦГАОО РБ, ф. 122, оп. 26, д. 450, л. 17).

Бының менән, ихтимал, әҙәбиәтебеҙ ҡырындағы ҡайһы бер рияларҙы төҙәткәнмендер. Һабанымдан ярҙыртһам, минекен дә ямарҙар.

Меҫкен бәндәнән хоҙай яһап табыныусы маңҡорттар! Тәрегеҙҙең серек-сөрөк икәнлеген ҡасан төшөнөрһегеҙ?! Күҙҙәрегеҙ быуылып табына-табына, Башҡортостан Республикаһын Тартарстанға әүерелтеп бараһығыҙ.

03.05.2013

## М. Буранғолов исемендәге бүләкте алғанда рәхмәт һүҙе. 15.05.2013

Бөйөк Мөхәммәтша Буранғоловтың милли-мәҙәни нәжәғәйе ҡотайтҡан был ҡәҙерле бүләкте ихлас йәндән ҡабул ҡылам, сөнки Әҫәрҙәремдең ун биш томлығының һәр береһендә халҡыбыҙҙың һүнмәҫ рухы күтәрҙе күңелемде.

Ижадымда ла, көндәлек тормошомда ла үҙемдең башҡорт икәнлегемде яҡшы белеп эш иттем.

Милли мәҙәниәтебеҙгә күркәм яңылыҡ өҫтәүсе изге билдә ижади тормошомдоң сорғолошло бер мәлендә беренсе башлап миңә насип булыуынан ҡәнәғәтлек кисерәм, сөнки кешелек рухының һынмаҫ ҡаһарманы Мөхәммәтша бабабыҙҙың, уға тиклемге бөйөк бабаларыбыҙҙың, башбабабыҙ Урал батырҙың донъяға бөрккән тереһыуын аманатлай был бирнә.

Мәғрур Урал тауыбыҙҙың Рәсәй күләмен балҡытҡан сал Ирәмәл түбәһеләй, башҡорттоң ғына түгел, бөтә кешелек донъяһының йәшәү ҡеүәтен үҙе аша ҡитғаларға йәйелдерткән Мөхәммәтша Буранғоловҡа әле булһа Өфөбөҙҙә лайыҡлы һәйкәл ҡуйылмауы бошондорта. Әҙиптәребеҙҙең береһенә ашыҡтырып бронза монумент ҡойолоуы яҡшы күренеш, әлбиттә, ләкин ул иң әүүәл әҙәби-мәҙәни рухыбыҙҙың алмаштырғыһыҙ алпамышаһы Мөхәммәтша Буранғоловҡа хәләл ине, ғәҙеллек талабы был.

Хеҙмәтемде ошолай юғары баһалағандары өсөн Башҡортостан Яҙыусылар берлегенең Идара һәм Комиссия ағзаларына һәм, ғөмүмән, йылы мөнәсәбәтле барса ҡәләмдәштәремә ҙур рәхмәт.

16.04. 2013.

## Исемдәр һәм есемдәр

Ҡыҫҡаса ғына күҙәтеүемдә баш ҡалабыҙҙың иҫәпһеҙ-һанһыҙ урам һәм тыҡрыҡтарының телләшкәндә ҡолаҡтарға уҡлау һымаҡ яғымһыҙ, яҙылышын уҡығанда күҙгә төрткән тегәнәктәй шөкәтһеҙ һәм йонсоткос исем шәрифтәренә иғтибар иттертмәксемен.

Ата-бабалар, ғәҙәттә, ер-һыу, ауыл-ҡала атамаларын үҙҙәре йәшәгән төбәктең иң әһәмиәтле күренештәренә, ваҡиғаларына һәм ваҡиға тыуҙырыусыларына бәйләп тәбиғи беркеткән, шуға күрә лә улар, быуындан-быуынға күсеп һаҡланған, онотолмаған. Ә был замана мөхитендә миллиондан ашыу әҙәм балаһы зауыҡланып донъя көтмөш гүзәл Өфөбөҙ буйлап, ундағы яҙыуҙарға ҡарай-ҡарай, сәйәхәт ҡылһаҡ, аптырауҙан бармаҡтарҙы тешләп тороп шаҡ-ҡатҡыс: атамалар, әйтерһең дә, быуын-быуын халыҡтарҙан эреле-ваҡлы чиновник һәм түрәләрҙең сибек кенә шәхсиәтле көндәлек сәйәси кәйефенә ифрат ярашлы итеп, шанлы үткән быуат большевистик СССР-ҙың географик һәм административ карталарынан һәм таныҡлы "ВКП(б) тарихы"нан туранан-тура сүпләп алып уңлы-һуллы сәпәләгән дә сәпәлгән…

Күргәҙмәле һабаҡ итеп, урам-тыҡрыҡтарыбыҙҙың хәҙерге көндә бөтөнләй кәрәге ҡалмаған (минең фекер) атамаларын рәсми-урыҫса вариантында алфавит тәртибенсә теҙәм, фекер йөрөтөр өсөн:

**А.**

Абаканская, Абхазская, Аджарская, Адыгейская, Азербайджанская, Азовская, Айвазовского, Акмолинская, Алма-Атинская, Алтайская, Аму-Дарьинская, Амурская, Анадырская, Ангарская, Андижанская, Аральская,

Арзамасский переулок, Аркадия Гайдара, Арктическая, Армавирская, Армянская, Артекская, Артема, Архангельская, Астраханская, Ахтырская, Ашхабадская.

**Б.**

Бабушкина, Байкальская, Бакинская, Бакунина, Балашовская, Балтийская, Балхашская, Барабинская, Баргузинская, Баренцовая, Батумская, Баумана, Белогородская, Беломорская, Белорусская, Белякова, Березниковская, Бессонова, Благовещенская, Благоева, Блюхера, Бобруйская, Богдана Хмельницкого, Большая Чукотская, Большевистская, Борисоглебская, Братьев Кадомцевых, Брестская, Брянская, Бухарский переулок.

**В.**

Валда йский переулок, Верхоянская, Витебская, Вишерская, Владивостокская, Владимирская, Войкова, Вологодская, Володарского, Волочаевская, Воровского, Воронежская, 18-го партсъезда, Выборгская, Вышинского, Вятская.

**Г.**

Гатчинская, А. Гайдара, Гомельская, Грозненская, Грузинская, Гурьевская.

**Д**

Дагестанская, Дарвина, Двинская, Девятого Января, Демьяна Бедного, Джамбула, Дзержинского, Димитрова, Днепровская, Днестровская, Донбасская, Донская, Дунайская.

**Е.**

Елецкая, Енисейская, Ереванская.

**Ж.**

Жданова, Желябова, Жигулевская, Житомирская.

**З.**

Запорожский переулок, Запотоцкого, Зенцова.

**И.**

Игарская, Ижевская, Ильича, Иркутская, Иртышская.

**К.**

Кабардинская, Кавказская, Казанская, Казбекская, Калинина, Калужская, Камчатская, Карагандинская, Карельская, Карла Либкнехта, Карла Маркса, Карпатская, Каспийская, Каховского, Кемеровская, Керченская, Кецховелли, Киевская, Кирова, Кировоградская, Кисловодская, Кишиневская, Клары Цеткиной, Ключевская, Кольская, Коммунистическая, Комсомольская, Костромская, Котласская, Котовского, Красина, Красноводская, Краснодарский переулок, Краснодонская, Красноярская, Криворожская, Кронштадтская, Кропоткина, Крупской, Крымская, Кубанская, Куйбышева, Куликовская, Кулундинская, Курганская, Курильская, Курская, Кустанайская.

**Л.**

Ладожская, С. Лазо, Левановского, Ленина, Ленинградская, Ленская, Липецкая, Луганская, Львовская, Р. Люксембург.

**М.**

Магаданская, Майкопская, Марата, Минусинская, Мичурина, Можайского переулок, Мурманская.

**Н.**

Новгородская, Новороссийская, Новосибирская, Новочеркасская.

**О.**

Обская, Одесская, Омская, Онежская, Орджоникидзе, Осетинский переулок, Охотская.

**П.**

Павлика Морозова. Павлодарская, Памирская, Парижской коммуны, Пархоменко, Пекинская, Пензенская, Перекопская, Пермская, Петергофская, Петрозаводская, Петропавловская, Печерский переулок, Подвойского, Полтавская, им. Правды, Пятигорская.

**Р.**

Рижская, Ровненская, Розы Люксембург, Ростовская, Рузаевский переулок, Рязанская.

**С.**

Самаркандская, Саранская, Сарапульская, Саратовская, Сахалинская, Саянская, Свердлова, Севастопольская, Северо-Двинская, Селенгинская, Смоленская, Сормовская, Сочинская, Ставропольская, Степана Халтурина, Сумская, Сун-Ят-Сена, Сызранская.

**Т.**

Таганрогская, Тагильская, Таджикская, Таймырская, Таллинская, Таманская, Тамбовская, Ташкентская, Тбилисская, Тельмана, Тернопольская, Томская, П. Точисского, Тульская, Тунгусская, Туркменская, Тюменская.

**У.**

Ужгородская, Узбекская, Украинская, Ульяновых, Урицкого, Уссурийская, Ухтомского.

**Ф.**

Ферганская, Фурманова.

**Х.**

Хабаровская, С. Халтурина, Харьковская, Херсонская, Б. Хмельницкого, Хетагурова.

**Ц.**

Цимлянская, Цулукидзе, Цюрупы.

**Ч.**

Чапаева, Чебоксарская, Чеверева, Челюскина, Проезд Черкасский, Череповецкая, Черниговская, Читинская, Чкалова, Чудская, Чукотская.

**Ш.**

Шаумяна, Шахтинская, Шепетовская, Шушенская.

**Щ.**

Щербакова, Щорса.

**Э.**

Энгельса, Эльтонская, Эстонская.

**Я.**

Ялтинская, Ямальская, Ярославского…

Быларҙан арыныу өсөн, ҡалабыҙҙы өр-яңынан төҙөргә кәрәк булыр ине төҫлө. Хатта үҙ ағышына ҡуйған сүрәттә лә ишкелектән ҡотолоуҙың зарурилығы ярылып ята. Әйтәйек, Сталин, Фрунзе, Сәйфи Ҡудаш, Социалистик тигән урамдарҙың, шулай уҡ Ленин, Крупская, Луначарский, Калинин баҡсаларының, “халыҡтар атаһы”ның ҡалалағы иң ҙур һәйкәл-һынының ҡасандыр ғына булғанлығын йәш быуын уйлап та бирмәй. Миңә ҡалһа, әлеге исемлектәге ҡотһоҙ урамдарҙы һәм Цюрупа, Дзержинский, Калинин кеүек сая большевик иптәштәрҙең күптәр өсөн мәғәнәһеҙлек билдәһе булып һерәйеп ҡалған монументтарын да ошондай уҡ асы яҙмыш көтә -- ваҡыт иләге аяуһыҙ, иҫтәлектәр бәндәлекте кисермәй.

28.05.2013

## З.А. Султанов. Выступление на научно-практической конференции “Проект евразийской интеграции как начало цивилизационного преобразования человечества в эпоху Водолея и значение Урала в его реализации”. Уфа, 06.07.2013

Я искренне рад своим присутствием здесь среди Вас – одухотворенных передовых представителей народов России, серьезно озабоченных проблемами устройства мирной счастливой жизни всех людей не только нашего прекрасного Урала, но и всей евразии в целом.

Также приятно мне осознать, что посильный мой исследовательский труд “Книга-память” через интернет продолжает находить своих новых читателей и почитателей, что история духовной культуры наших общих предков и связанные с ней новые идеи во многом созвучны основными положениями данной конференции; и мне кажется, что большинство из нас горит желанием достичь духовного единения и плодотворной практической деятельности на благо нашего Отечества и всего человечества. Нас собралось здесь немного, но мы сильны своими прогрессивными устремлениями излечить мир от вирусов этнической и конфессиональной вражды, духовного разъеденения и несогласия. Сам факт созыва данного форума именно здесь, можно сказать, в сердце России и эпицентре евразии, весьма знаменателен, здесь ведь возникла працивилизация, отсюда ведь “пошло все человечество”.

В связи с этим уместно будет привести короткую цитату из отзыва на мою книгу известного ученого Фаниля Тимерьяновича Кузбекова:

“Данная исследовательская работа, – пишет он, – посвящена сложнейшей теме: выяснению родственных связей народов мира. Согласно авторской концепции, в эпоху первобытного общества люди имели единый и единственный язык (праязык) и одну религию (прарелигию). В течение тысячелетий по мере освоения новых территорий и распространяясь по всему земному шару, отдаляясь друг от друга и утрачивая родственные

связи, они настолько стали разными, что сегодня не только не знают те или иные языки, но и не задумываются о своих корнях.

Доказывая правомерность своей концепции, З.Султанов скрупулезно анализирует, сравнивает, сопоставляет языки урало-алтайской и индо-европейской групп, изучает мифологии народов мира, ссылается на фундаментальные исторические источники, на труды корифеев науки. Словом, источниковедческая база исследования довольно-таки обширна и основательна" (конец цитаты).

Да, признаюсь, не все наши светилы науки придерживаются подобного мнения о моих утверждениях, а некоторые считают их крамольными. Что же поделать, ведь они вот такие нестандартные:

Легендарный так называемый "остров" Атлантида когда-то была соединена посредством тонкой перешейки с северным отрогом Урала, и покоится она теперь на дне нашего Северного Ледовитого океана.

Древнейший на шаре земном артефакт – так называемый "Шигировский (или Шакировский) идол", сотворенный разумом и руками человека аж девять с лишним тысячи лет назад, представляет из себя образ Верховного Бога прарелигии двуполога Имира. Как известно, прарелигия эта является основой всех мировых религий и мировых мифологий.

Развалины древнейшего на всем земном шаре города Аркаима находятся здесь, что явно свидетелствует факт возникновения и существования первобытной цивилизации именно здесь на Урале.

Пресловутые цивилизации Древнего Китая, Индии, Египта, Греции, считавшиеся до сих пор самыми древними, в сравнении с уральской цивилизацией оказываются гораздо юными, но испытавшими благотворного влияния культурных достижений Урала.

Всемирно известный и всечеловеческого значения древнейший эпос "Урал батыр", впитавший в себя много слоев идеологий прарелигии и прамифологии, сохранен до наших дней именно здесь на Урале и записан из живых уст именно башкирских сказителей-сасянов.

В мифах башкирского и других народов мира говорится о происхождении Неба и Земли, а также всей живой и неживой природы (в частности крупных гор Урала) от телесной плоти выше названного человекообразного двуполого прапредка Господа Всевышнего Имира. Поразительно, что эти, почитавшиеся нами до сих пор священными, уральские горы сохранили свои первобытные башкирские названия как главных телесных органов человекообразного первопредка Имира, что является веским доказательством первобытной аборигенности башкирского народа.

Вот почему в богатейшем словарном составе и грамматике башкирского языка аккумулировались главные элементы основных языков народов евразии.

Как известно, современные прогрессивные представители из славянской интеллигенции приходят тоже к однозначному выводу о своих глубоких башкиро-тюркских корнях; однако многие, продолжая испытывать закоренелое чувство ложного этностыда, болезненно воспринимают такую информацию. Однако мы

все родились ведь от Адама и Евы (они же Янбирде и Янбике по башкирскому эпосу), а родителей не выбирают.

Значит, народы-аборигены континента должны, решительно перешагнув мешающий нам всем барьер этнического эгоизма, перестать отталкивать друг друга, а стремиться к тесному братскому союзу.

Если будем хорошо знать и почитать истинную свою историю, не заблудимся, не пропадем – Россия будет вечно жить и процветать.

Из всего здесь высказанного перед нами выставляется искомая всеми нами вот такая *национальная идея*:

“Мы все – из одного корня. Россия – колыбель человечества. Бог с нами! Вперед!”

17.06.2013.

## “Урал батыр” ямаулыҡҡа мохтажмы?

Алды-артты, уңды-һулды абайламаҫтан, тигәндәй, бөп-бөтөндө ямаулыҡлап көсәнеүҙе хәтерләтә ҡалын рәсми журналда (“Ватандаш” 1-5/2013) баҫылған “Оло “Урал батыр” тигән үтә лә ғәжәйебнамә. Сөнки “Урал батыр” бит ул донъя күләмендәге һәм быуаттар һуҙымындағы берҙән-бер тиңһеҙ мөғжизә -- уны олоғайтыу ҙа, кесерәйтеү ҙә һоралмай. Бөтәбеҙгә билдәле шул хаҡиҡәтте уйлайһың да, танылған фольклорсы ғалим, ҡабилиәтле шәхес шуны нисек шәйләмәй икән тип аптырайһың. Хәйер, тура ярып һалғанда, төбәгебеҙ фольклорсыларының байтағы ла шундайҙыр, сөнки, сит яҡтарҙың төрлө ғилми конференцияларына, байрамдарына хозур сәйәхәт ҡылып ҡайтҡандары һайын, матбуғатта ауыҙ һыуҙарын ағыҙып күтәрмәкләүсән “шәп өлгө”ләр – иҙерек ярҙарынан ашып ялҡыҡҡыс оҙон ағылышлы ҡырғыҙ дастаны “Манас” та, хатта ки ҙә ярһыҙ-ниһеҙ, осһоҙ-ҡырыйһыҙ даръя һымаҡ йәйелеүсе яҡут олонхоһы “Нюргун боотур Стремительный” ҙа, урыҫ былиналары һәм башҡалары ла, һис кемгә лә ялағайланмай таныһаҡ, үлемһеҙ өсәүебеҙ – Ғәбит Сәсән, Хәмит сәсән, Мөхәмәтша сәсәндәр беҙҙәргә күҙ ҡараһылай ҡурсаларға биреп ҡалдырған рухи ҡимматтәребеҙгә һис кенә лә тиң тороп тиңләшә алмай. “Ярһыҙ-ниһеҙ” тигәнемдең мәғәнәһен махсус тикшереүсе белгес (И.В. Пухов) үҙе аңлатып биргән. “Олонхо, -- тип яҙа ул, -- общее название героического эпоса якутов, состоящего из множества больших сказаний. Средний размер их 10-15 тысяч стихотворных строк. Крупные олонхо доходят до 20 и более тысяч стихотворных строк. Путем контаминации различных сюжетов якутские олонхосуты (сказители олонхо) в прошлом создавали еще более крупных олонхо”… (Өҫтәйек: ошондай ирәүән һәүәҫкәрлек уларҙа әлегәсә ҡомарлана). “Любой сюжет из одного олонхо, -- тип дауамлай белгес, -- можно более или менее безболезненно (ә “Урал батыр” өсөн был очень-очень болезненно!) перенести в другое. Можно, наоборот, без особого ущерба и сократить, выбросив целые сюжеты или отдельные детали, эпизоды, различные описания. “Взаимопроникаемость” и возможность сокращения, или

увеличения объема олонхо без особого ущерба для его содержания и логики развития событий составляют характерную особенность якутского эпоса, как следствие сходства сказаний" (1975 йылғы баҫманың 412-се битендә). Эврико! – тай-тулаҡтай йылғыр ҡәләмле фольклорсыларыбыҙға уңлы-һуллы һелтәнергә таяныс-ҡулланма бит был! "Урал батыр" тексы өҫтөндәге шундай бәйһеҙ һәүәҫкәрлеген ни бары "редакторлау" ғына тип нарыҡлаған "оло"лаусыбыҙ иһә үҙе лә, моғайын, тәрән үкенескә ҡаршы тип әйтәйек, тап шул олонхосылар өлгөһөндә ифрат егәрлеләнеп, халыҡ ғали йәнәптәре тарафынан ел-ямғыр үтмәҫлек ыҡсымлатып шымартылған, кителмәҫ алмас рәүешен алған шиғри юлдар ҡыҫаһына (ғәфү! Ғәфү!) сейле-бешеле ҡыҫтыбыйҙарын ҡыҫтырыпмы-ҡыҫтыра. Һөҙөмтәлә дәүерҙәр иләге иләп, һелкеүесе һелкеп бер ҡырыйҙа торғоҙоп ҡалдырылған фабуланың төйөрсөктәре сюжетҡа кире ҡайтарылып, олонхосылыҡҡа тартым шайтан ҡотҡоһо – гигантомания зәхмәте иҙә йәнде. Хөрмәтлебеҙ зарарлы ошо ҡотҡоһонан арынып, фольклор белгесе булараҡ бик ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәрен студенттарына һәм коллегаларына һабаҡка монография итеп кенә яҙһа ине, тип үкенеп уйлайһың. Сүлмәктәге майҙы йыпыртып (йәнә ғәфү!), тотоласағын белеп боҫҡан бесәйҙәй, төп тексы ботарлаған ҡулсырлығын аҡламаҡҡа күрше-күләнгә һылтаныу ҙа килешмәй: уларҙағы "Калевала", "Калевипоэг" һымаҡтар бит милләтенең юҡ эпосын бар ҡылырға сараһыҙҙың көнөнән уҡмаштырылған; башҡорт иһә башҡаларҙа булмаған байлыҡҡа эйә һәм беҙ кемдәрҙәндер түгел, ә кемдәрҙер беҙҙән алһын өлгөнө. "Урал батыр" "редакторлап" олонхолаштырыуҙы (ямаулыҡлап ҡабартыуҙы) ҡәтғи кире ҡаға, сөнки, бабаларыбыҙ үҙҙәре үк әйтмешләй:

870. Оҙон һүҙҙең -- ҡыҫҡаһы,
Ҡыҫҡаһы – һүҙ тотҡаһы.

Һүҙ тотҡаһын ҡулдан ысҡындырып ашҡынған уҙаманыбыҙ, ә шулай ҙа тотанаҡлылыҡ тойҙорторға теләпме, "мин сәсән түгел" тиһә лә, шайтаны һаман уға: "Сәсән һин, шағир һин! Һелтән, һелтән!" – тип ҡыҙырыҡлап торғандай. Һәм ул бына һелтәнепме-һелтәнә -- быуынһыҙға бысаҡ салып, юҡтан бар булып төҫмөрләнгән "буш урындар"ҙы тултырыпмы-тултыра, олоно "оло"ғайта. Мәҫәлән, төп текста:

20.Тора-бара у икәү
Ике уллы ла булғандар:
Шүлгән булған олоһо,
Урал булған кесеһе;
Бүтән кеше күрмәйсе,
Тик йәшәгән дүртәүһе, --

тигән ыҡсым фразаның 23-сө һәм 24-се шиғри юлдары араһына, бер ниндәй ҙә өҫтәкләүгә ихтыяж тойолмаһа ла, сәме сеңләүҙән түҙемһеҙләнеп ахыры, "төшөп ҡалған"ды (Урал батырҙың донъяға ни рәүешле тыуыуын, тәпәй баҫыр-

баҫмаҫтан уҡ дейеүҙәрҙе дөмөктөрөүен) үҙенең шиғри оҫтаханаһында бәйнә-бәйнә сурытып “тултырырға” керешә. Ә бит эпос сюжетынан былар төшөп ҡалмаған, фәҡәт тейешле тәңгәлгә мас килтереп теркәлгән:

2880. Бер ҡарт дейеү бик белеп:
-- Анау саҡта, ай, батшам,
Бер йәш бала тыуғанда,
Аның тауышы килгәндә,
Күккә осҡан дейеүҙәр
Бары ҡолап төшкәйне.
Аны урлап алырға,
Үтереп юҡ ҡылырға
Барған дейеү, ендәрҙең,
Бала текләп ҡарағас,
2890. Тоторға тип уҡталғас,
Барған бере ҡурҡыуҙан
Йөрәге ҡубып үлгәйне.
Шу баланың сыҡҡанын,
Илгә яҡын килгәнен,
“Алам…” тигән уйының
Йәншишмәгә төшкәнен…
Кемдер әйтеп уҙғайны…

Һорау тыуа: ошо 18 шиғри юлды ялҡытҡыс 88 юл яһап, “төшөп ҡалған” тип ямаулыҡлау мотлаҡан кәрәклеме? Өҫтәүенә, сәсәнлек сәме ғалимлығын онотторҙоп, саманы ла шәйләмәй: игелектәре баштан ашҡан өстаған-титанды текстҡа төрлө кәмселектәр ебәреүҙә, өлөштәрҙе юғалтыуҙа ғәйепләп ҡыйырһыта. “Урал батыр” ҡобайырынан төшөп ҡалған йә, бөрөлөнә биреп тә, үҫтерелмәгән, логик яҡтан ҡарағанда, мотлаҡ урын алырға тейеш булып та, әҫәр контексынан ситтә ҡалған тематик мотивтар һәм сюжеттар (I – XXXVII һ.б.) бихисап, -- тип көйөнә бит. -- Ошондай бушлыҡтарҙан “Урал батыр” ҡобайырының сюжетына билдәле кимәлдә (мәҫәлән, осо осҡа ялғанмау, анахронизм рәүешендә) зыян килгән, әлбиттә” – тип “ғилми” яҡтан нигеҙләп, изге текстҡа тығылырға юл аса. Уғата хәтәрерәге – академик юғарылығынан һалынған сәмле оран: “Хәйер, киләсәк күрһәтер, -- тип, кемдәргәлер янағандай, -- …эпостың шул буш урынын ямаусы өлөш тә табылыуы ихтимал. Әлегәсә “Урал батыр” ҡобайырын башҡарыу буйынса үткәрелгән бәйгеләрҙә ҡатнашыусыларҙың уның бушаҡ урындарын тулыландырырға тырышыуы ул “ихтимал”дың ғәмәлгә ашыуына өмөт уята”. Йәғни ҙә ки башҡалар ҙа үрнәгемә эйәрһен! Әгәр сәсәни “тултырма”ларын (урыҫса колбаса була инде!), бабаларҙың бәрәкәтле ҡаҙанында болғансыҡ турталатмай, шәхси тәғәме рәүешендә генә ҡобайырлаһа, уны тәнҡитләп ыҙаланыу ҙа кәрәкмәҫ һәм ижадсыбыҙ, бәлки, боронғолоҡто борғосларға дәғүәләмәгән бөгөнгө “сәсән” һәм “сәсәниә”ләр ҡоронда бер йондоҙ булып балҡыр ине. Әммә-ләкин… абруйлының һәр һөрәнен оран итеп алҡышларға

һәүәҫйәндәр, үҙҙәренең әлегә сәсән түгел, ә сәсән сәсемен урыусылар ғына икәнен онотоп, яңынан-яңы ямаулыҡтар туҡырға ла ямарға тотонмаҫтармы: “Академиктың академигы ошолай бәүелһеҙләнгәс, беҙ бәндәләргә ни ҡала?!.”

“Киске Өфө” гәзитендә (№24, 2013 йыл) хәүефле хәл бик ғәҙел һәм ваҡытында киҫәтелде, минеңсә. Ямаулыҡ һәм тултырмалар энтузиасы үҙенең шул игелеген эпосыбыҙҙы ЮНЕСКО исемлегенә теркәтеү өсөн кәрәк сара, тип тә ғәҙел хөкөмдән һырт ҡайырмаҡсы. Әммә урыҫ ағайыбыҙҙың “медвежья услуга” тигәне һаман иҫтә: самаһыҙ игелекле эскерһеҙ Айыу, яратҡан хужаһы Бабайҙың битенә ҡунған серәкәйҙе һытам тип, бахырҙың мейеһен сәсрәтә һуға… Бындай игелек эйәләре тарафынан төп текстка тығылған хатта бер хәреф, һүҙ ҙә ятбауыр булып, яҡшылыҡтан яһил мутант яралыусан. Һөҙөмтәһе бигерәк тә ҡурҡыныс: журналдағы “оло”ғайтыу ғәләмәте берәй хәйриә фонды иҫәбенән оло китап итеп әтмәләнмәҫ тә зәхмәте киң таралмаҫ икән, тимәгеҙ. Ул саҡта һис бер ЮНЕСКО-ң да ярҙам итмәҫ, гәүһәр (бриллиант) тигәндәре – яһалма таш, ябай ялтыраҡ икән дә, тип бүгеп йөҙ ҡайырасаҡтар, хатта башҡорттоң үҙе лә, (тәүбә-тәүбә!) миңрәүләнә-минрәүләнә, “эпосыбыҙ бар” тигәндән бот сабып көлөп, үҙенең аҡтыҡ рухын да, үҙен дә юғалтасаҡ. Әммә шул уҡ урыҫ ағай әйтмешләй, йыуынты һыу менән ҡуша бәпесте сығарып түкмәйек. Халыҡ рухын ҡурсалаусы ил инәләренең береһен – сәсәниә Әсмә ханым Усманованы “Урал батыр тураһындағы ҡарыһүҙ”е өсөн битәрләү (“Киске Өфө”нөң баяғы һанында) кәрәкмәйҙер. Әйтәйек, төп тексты белмәгән-күрмәгән (сөнки уның большевизм талаптарына яраҡлаштырырға тырышып имгәтелгән тексы беренсе башлап 1968 йылда ғына “Ағиҙел” журналында баҫылып сыҡты) Исмәғил Рәхмәтуллиндан 1956 йылда яҙып алынған “Урал батыр” ҙа төп текстка бик яҡын. Тимәк, эпосыбыҙ халыҡ араһында 20-се быуат ахырыныса төрлө версияла йөрөгән. Әҫәрҙе үҙ эшенең яҡшы белгесе – филология фәндәре докторы Розалия ханым, әлбиттә, фән талабын һәм шарттарын теүәл үтәп, тере ауыҙҙан һөйләтеп яҙып алыуын онотмайыҡ.

Билдәле булыуынса, йәмғиәтебеҙҙә борон-борондан атай һүҙен тотмау яҙыҡ һаналған – Шүлгәнебеҙҙең хилаф юлға баҫыуы шунан килә, ә Уралыбыҙҙы шул изге йоланы теүәл үтәүсе итеп беләбеҙ, эпоста был эҙмә-эҙлекле бара. Ә хөрмәтле Әхмәт уҙаман ошо ҡанундан тайпылып, Урал батырҙы атай тыйыуын боҙорға – балиғ булмаҫы элек үк ҡулына уҡ-һаҙаҡ алып, йән ҡыйырға этәрә… Мәшһүребеҙ, төп текстка ошондай ваҡ ямаулыҡтар һалыу менән генә мөрәхәтһенмәй, 526 юлдан хасил 2-се тулы бүлекте үҙэшмәкәрлекле әтмәләп йәбештерә. Өҫтәүенә, “ап-аҡ һаҡаллы ҡарт”тың: “Уңға китһәң, юл буйы – илау-һыҡтау төн буйы…” – тигән ҡануни киҫәтеүен дә иҫләмәй, уңға киткән Урал батырҙы, киреһенсә, һоҡланғыс хозурлыҡка -- батшаһы халҡына ифрат та игелекле, кешеләре ирәүән йәнле илгә килтереп еткерә; хозур илдә тик бер генә уңайһыҙлыҡ бар имеш: күктән бер туҡтауһыҙ ике ҡояш яҡтыртып, өҙлөкһөҙ көндә төндө һағынып йонсойҙар (әүлиә ҡарттың “төн буйы” тигәне ҡайҙа? Тимәк, унда төн бар, тигән һүҙ!)… Бында ошолай ҡобайырлатылған “Ай менән Урал тауы” тигән үҙ аллы эпостағыса, батырыбыҙ, әлбиттә, “артыҡ” ҡояшты атып төшөрә лә шунан Ай барлыҡка килә. Алайһа, сетерекле бер һорау: шуға тиклем донъяла Ай булмағас, Уралдың

тиңдәше йәки апаһы йәшендәге Айһылыу исемле Ай ҡыҙы ла бушлыҡтан -- тыумаған Айҙан тыуғанмы?!.

Америка, Африка, Полинезия аборигендарында һәм башҡаларҙа, башҡорттоң "Ай менән Урал тауы" һымаҡ уҡ, үҙ алдарына йәшәгән, әммә тәбиғәт күренештәрен, ваҡиғаларын примитив аңлатыуҙан уҙмаған ваҡ-ваҡ мифтар билдәле, тик улар тыуасаҡ эпоска ерлек кенә. Күренеклебеҙгә күберәге билдәлелер, әлбиттә; тик ниңәлер шундайҙарҙы "Урал батыр"ға кәрәкһеҙгә тынҡыслап "оло"ғайта.

3-сө бүлеккә ямаулатҡан нәүбәттәге ярпыһы (2030 – 2140) – Ҡатил батшаның ни рәүешле еңелеүен сурытыу ҙа -- артыҡ бүрәнә башы, сөнки эпизод төп текстың үҙендә бит ифрат бөхтә йыйнаҡлыҡта, баяғылай, "оҙон һүҙҙең – ҡыҫҡаһы" рәүешендә уҡыла:

2013. Ер һелкенгәндәй булған,
Аҡһаҡалдар, батша ла,
Олаҡтырған батыр ҙа
Он-талҡанға ҡалған, ти,
Күҙҙән ғәйеп булған, ти.

Ошоноң йше "редакторлау"ҙар артабан да йонсота уҡыусыны; шундайҙарынан 12-се бүлектәге, миңә ҡалһа, ытырғаныс күренеш – ҡатын кешенең (Һомайҙың) ир мәйетенең ауыҙынан үбеүе беҙҙәргә һис хас түгел һәм, ғөмүмән, үлекте үбеү ғәҙәте юҡ башҡортта (Әсмә ханым версияһында тере маңлайҙан үбәләр).

Бөйөк Буранғолов яҙып алғандың матур дөйөмләштерелеп тамамланыуынан һуң, арбаға бишенсе тәгәрмәс, тигәндәй, тағы ла "оло" (531 юллыҡ) 13-сө яһалма бүлектең тағылыуына үкенес белдереүҙән башҡаны әйтмәйем.

Йәнә лә бер урап үткеһеҙ рыя: тәүбабаларыбыҙ Йәнбирҙе менән Йәнбикә исемдәрен "Ейәнбирҙе" һәм "Ейәнбикә" итеп "тергеҙергә" ҡырҡышыу. Ғалимыбыҙ, әйтерһең дә, үҙе Аллаһы Тәғәлә -- бөтәһен дә бөтәһенән дә яҡшыраҡ белеп хәл ҡыла. "Башҡорттоң, -- ти ул, -- борон сабыйға "Йән" алҡушымталы исем ҡушыу йолаһы булмаған. Ҡатын кеше теге йәки был сәбәп арҡаһында, мәҫәлән, кейәү кеше ҡалымын йәки мәһәрен ваҡытында түләп өлгөрмәүе сәбәпле, йола буйынса, кәләшен күсереп алып ҡайта алмаған саҡта, үҙ атаһы йортонда уҡ әсәй булып ҡуйһа, уның балаһына "Ейән" ҡушымталы Ейәнбирҙе, Ейәнбикә, Ейәнғәле, Ейәнсура кеүек исемдәр биргәндәр. Әммә тел һүҙҙе еңелләштереп әйтергә яратҡанлыҡтан, ул исемдәр Йәнбирҙе, Йәнбикә, Йәнғәле, Йәнсура рәүешендә әйтелә башлаған… "Урал батыр" ҡобайырының беҙгә мәғлүм тексында Йәнбирҙе менән Йәнбикә исемдәренең килеп сығышына бәйле тәүҙә пролог рәүешендәрәк бер ярҙамсы сюжетмы, тематик мотивмы булып та, беҙгә килеп етә алмайынса, юғалып ҡалғанға оҡшай (XVI)… Әгәр ҙә ул булһа, Йәнбирҙе менән Йәнбикә исемдәрен рус телендә "дающие жизнь" тип аңлатырға урын ҡалмаҫ ине. А.С. Мирбаҙалова ла: "…отец Янбирде и мать Янбике, давшие жизнь

Урал-батыру и его брату Шульгену”, -- тип яҙып тормаҫ ине”. Ҡайһындай ҙа нығышмал үҙбелдеклелек!

Әсәйем Бибисадиҡа Ғәбиҙулла ҡыҙы (1896 йыл тыуған) хәҙерге Йәнсура (эйе, Ә. Сөләймәнов “тәғлимәт”е шауҡымында рәсмиләштерелгән “Ейәнсура” түгел, ә Йәнсура!) районы Юнай ауылы башҡортона беренсе кейәүенә сыҡҡас, баяғы сәбәптәр арҡаһындалыр инде, кейәү йортона килен төшөрөү йолаһы оҙаҡҡа (2 йылға) һуҙылып, тәүге улын тыуған ауылындағы атай йортонда таба. Әммә исем-шәрифен, буласаҡ Әхмәт уҙамандың буласаҡ “асыш”ын тоҫмалламағанлыҡтанмы, “Ейән алҡушымта”һыҙ ғына Әхмәҙулла тип ҡушалар. Үҙ тәжрибәмдән сыҡҡанда, күпме мәсет метрика дәфтәрҙәрен, “ревизские скаски”ҙарҙы, башҡорт шәжәрәләрен күҙҙән кисерә тороп та, башҡорт телендә “йән”де “зиян, жиян” тип, “сура”ны “чура” тип әйтелешенә һис инана алманым. Әүермәнлек мажараһы башҡортто насар белеүселәр, йәки юрый яңылыштырыусылар ҡәләме осонан сыҡҡан, күптәребеҙ иһә һаман шулар арбаһында бара тирбәлеп.

Донъя диндәренең нигеҙен тәшкил иткән тәүдин мифы менән таныш һәр кемгә лә “Урал батыр” эпосындағы Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең – шул диндәге ир-ҡыҙ (гермафродит) Имир Дәү Хоҙайҙың эпосыбыҙҙа үҙ аллыланған ике яртыһының – ысынлап та донъябыҙға йән биреүсе, йән бағыусы тәүге әҙәми заттар итеп күрһәтелеүе мәғлүмдер. Бик боронғо бабалар хөрәфәтенсә, был ир-ҡыҙҙың ир яҡ яртыһы – донъяға йән (Шүлгән, Урал) бирҙе, ә ҡыҙ яҡ яртыһы шул бирелгән йәнде баҡты (йәғни, инкубаторҙағылай, үҙ буйында бағып йөрөтөп тыуҙырҙы) тип һаналған, шуға күрә лә эпосыбыҙҙағы йән биргән тәүатабыҙ – Йәнбирҙе, йән баҡкан тәүәсәбеҙ Йәнбаҡа (Йәнбаға – Йәнбикә) тип атамлана (атала) һәм әсәмләнә (исемләнә). Тимәк, донъялағы тәүге әҙәми затлы йән эйәләре – ***тәүге*** йән биреүсе һәм йән бағыусылар булараҡ, был икәү һис берәүҙең дә “ейән”е йә “ейәнсәр”е була алмай. Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең “йән”ен алыу – “Урал батыр”ҙы йәнһеҙләтеү булыр ине. Әммә ошоларҙы белә, йәки белергә тейешле була тороп та, үҙбелдегендә ҡала биргән “редакторлаусы”быҙҙың “ижади” елһенеүе һүрелеренә өмөт юҡ, сөнки яҡын киләсәктә ул беҙҙәргә уғата ҙур бәлә-каза килтермәксе. “Был мәҡәлә, -- ти ғалим, -- “Оло “Урал батыр” ҡобайырына ахыр һүҙ. Әммә “Оло “Урал батыр” бының менән генә тамамланмай – автор әлеге көндә ҙур эпостың барлыҡ ҡалған ярсыҡтарын бергә йыйып, бер бөтөн итеп туплау өҫтөндә эшләүен дауамлай. Ҡәҙерле уҡыусыларыбыҙ был бер бөтөн эпосты яҡын киләсәктә ҡулында тота алыр тигән ышаныстабыҙ” (ләхәүлә!..). Шуға күрә ҡотолғоһоҙ бер сара: “оло”лауҙарын артабан да тиражлауға юл ҡуймай, ямаулыҡтарҙы төп текстан ҡырсып ташларға кәрәк. Булмышы менән алсаҡ, яғымлы кешегә ошолай ҡаты бәрелеүем килешеп тә етмәйҙер, ләкин ғәҙеллек, хаҡлыҡ талабы йомшаҡ түгел.

Баяғы өс титаныбыҙҙың мөһәбәт һынланышы – үкенес! -- баш ҡалабыҙҙа әлегәсә бронзанан ҡойолмаған, әммә асманға олғашҡан бөйөк-изге шәүләләре барсабыҙҙы көндәлек шөғөлдәребеҙҙә ҡоростай рух ныҡлығы менән һуғарып, аҡылыбыҙ һәм намыҫыбыҙ һаҡсыһы булып күҙ алдында мәңге-мәңге тере торорға тейеш.

04.08.2013.
09.10.2013

# Матбуғатҡа әҙерләүсенән аҙаҡ һүҙ

Бөйөк Бабичты мин үҙем өсөн, башҡа күптәребеҙ кеүек үк, Сталиндан һуңғы ләйсән елдәре осоронда сикһеҙ ҡыуанып һәм тетрәнеп астым, оҙон ғүмерем (Аллаға шөкөр!) буйына уның һәр бер китап-баҫмаһын йотлоғоп уҡый торғас, Сәйфи Ҡудаш, Мәхмүт Бөҙәйле кеүек ағайҙар бошоноп әйткән төрлө хата һәм етешһеҙлектәрен йәнем әрнеп кисерҙем. Совет осоро беренсе (Ҡазан, 1922) баҫмаһынан уҡ, күҙгә төртөлгән шырауҙар унан һуңғы төрлө йылдарҙағы китаптан-китапҡа шырауланып күсә килеп, тәрән үкенескә ҡаршы, үҙен Бабич ижадының "иң-иң" белгесе һанаған (М. Ғафурисараҡ әйткәндә, "һәр фәндән маһир") Р. Бикбаевтың ғилми эшмәкәрлегендә лә һәүетемсә тамырланып йәшәй бирҙе -- бөйөк шағирҙың йөҙ йыллығы айҡанлы сығарылған иң ҡалын һуңғы баҫмала улар бөтә иҫке етешһеҙлектәрҙең тупланышы булараҡ салынды күҙгә. Һәм шул сүп үләндәрен, ниһәйәт, тамырынан йолҡоп ташлау өсөн, йәмәғәтселек фекерендә Ш. Бабич ижадының академик баҫмаһына ирешеү теләге артты. Ошо йәһәттән бөйөгөбеҙҙең архивтарҙан үҙем соҡсоноп сығарған данлыҡлы ике әҫәренең ("Башҡортостан" һәм "Большевиктар менән килешеү тураһы башҡорт халҡына көйлө хитаб") төп нөсхәләрен баяғы баҫмалағыларға сағыштырып, һәленке ең менән эшләүебеҙҙе миҫаллап күрһәткәйнем ("Башҡортостан" гәзитендә, мөхәррире Т. Сәғитов), хаталарҙан арыныу хаҡында уйланаһы урында, зитлыйән "бабичовед"ыбыҙ, талағы яман ташып, мәҡәлә авторын Яҙыусылар берлегенең бинаһында мәсхәрәләп әрләне. Зәһәр ыуы ике тиҫтә йыл буйынса бытлығып, баҡтиһәң, "Көндәлектәр" тиеп бөгөн сутлап-мутлап әтмәләнгән ярымъяһалма (сөнки әхләғе төгәл бәндә үҙе тере сағында уҡ көндәлектәрен баҫтыртып, үҙенең интим донъяһын тамаша ҡылдыртмаҫ) рәүешле томдарына ла һарҡылған: "Эй бәндәнең этләшеүҙәре, тар күңеллелеге!.. 20-се ғинуарҙа Бабичтың опера театрында (иғтибар итегеҙ: дәүләттең түгел, ә "Бабичтың опера театрында"!.. – Й.С.) ҙур тантана көнөндә «Башкортостан» гәзите Йыһат Солтановтың «Көйлө хитап»ҡа бәйле мәҡәләһен баҫып сығарҙы. Текстологик хаталар эҙләй, ә үҙендәге текста әллә күпме хата, төҙәтмәләрендә хата (ташҡа баҫҡанда ебәрелгән техник сатаҡлыҡтар тураһында бара һүҙ. Интернетта төпсөнөргә теләүселәр сайтымдың "файлы" бүлегендә Әҫәрҙәремдең VIII томынан барлай ала. – Й.С.). Ләкин бында «Көйлө хитап» Солтанов күңелендәге үтте, ыу-ағыуҙы ҡағыҙ битенә түгеү өсөн һылтау ғына бит. «Мудрый», «культик», «культя» — былрҙың барыһының да Мостай Кәримгә мәкерле төрттөрөү икәнлеген кемдәр генә аңламай.

Бабичтың йөҙ йыллығына күпме бөйөк эштәр эшләнде: тулы йыйынтығы… һ.б. Был хаҡта «Башкортостан» ыратып һүҙ әйтә алманы. Ә бына иң оло кисәгә шундай бүләк әҙерләп ҡуйған.

Редактор тигән кеше нимә ҡарай ҙа нимә уйлай икән?" – Күрәһегеҙ, ныҡ өҙәләнә бахыр: ҡаты цензура ҡулланмағаны өсөн мөхәрриргә лә зәһәр еле ҡағылған. Аҡыллы

етәксе быны, әлбиттә, ниндәйҙер Йыһатты яратканы йәки Рауилды тибәрергә теләгәне өсөн түгел, ә етлеккән ижтимағи мәсьәләгә иғтибарҙы көсәйтеү өсөн эшләгәндер. Амбицияһы (Бикбаев яраткан һүҙ!) ярһыған ғалим ошоно аңлау һәләтенән дә мәхрүм. Әйткәндәй, иң яҡын фекерҙәш (Бикбаев һымаҡтарса “шешәләш” түгел!) ҡорҙашым тураһындағы “Халыҡ шағиры Рәми” тигән иң бай йөкмәткеле һәм ҡалын күләмле халыҡ иҫтәлектәре ҡулъяҙмаларын ошо Йыһат үҙ ҡәләме менән нәшерләүгә яраҡлы итеп әҙерләп биргәс, шағирҙың тол ҡатыны (хәҙер инде мәрхүмә) Надежда Васильевна: “Һинең ул хеҙмәтеңде Рауил Бикбаев “ҡарап ҡына сығайым” тип һорап алып торғайны, ундағы күп материалдарҙы, минең рөхсәтемдән тыш, үҙенең китабына күсергән, сволочь!”, -- тип рәнйеп йөрөгәйне. Күсереүен күсергән, әммә йыйынтыҡты әҙерләүселәргә рәхмәт әйтергә теле бармаған, сөнки аҡҡа ҡара менән: “Надя минең китап тураһында ауыҙ асып һүҙ әйтмәне. Рәхмәтен көткән дә юҡ инде. Йыһатты, Гөлсирәне (иҫтәлектәрҙе ҡарап сыҡҡандар, имеш), Мәрйәмде һ.б. әйтә, ә Рәмигә тәү башлап тотонған... тотош китап яҙған Бикбайға бер рәхмәт һүҙе әрәм...” – тип, үҙенең баяғы тынғы бирмәҫ амбицияһы өсөн генә көйәләнеп яҙа бит: ит игелек – көт яуызлыҡ, тигәндәре ошолор… *Лаф ороу* тел тирмәнендә арымай-талмай намыҫ, әхләҡ хаҡында шағирәнә матур һүҙ шауҙырлағы тартып та, ә ғәмәлдә тап шуның киреһенсә ғүмер һөрөүсенән башҡаһын көтөп булмай шул. Күҙенә төртөп әйтеүҙәрем өсөнмө, һаҡалы һәлпәйгәндән алып ул минең ижадыма, үҙемә, кәкре салғыһы менән аҫтан өҙә салып йөрөп зыян килтерҙе, әлегәсә килтерә. Уның һәм уның чиновник әшнәләренең аҫтыртын мәкере арҡаһында ун биш томлыҡ Әҫәрҙәремдең бер генә томы *ла* китап булып сыҡҡаны, халҡыма барып еткәне юҡ, Йыһат өсөн ваҡытлы матбуғат редакцияларының ишектәре *лә* бикле. Әммә Төхфәт Сенәкәйҙең бынан ярты быуат элек “Ағиҙел” журналында өҙөкләтә генә саҡ-саҡ мәғлүм ҡылынған был ҡиммәтле хәтирәләрен (90-сы болғаныш йылдарында уның ҡулъяҙмаларын үҙем эшләгән Матбуғат йортоноң сүплегенән табып алғайным) ошо тулылығында, һайланма шиғырҙарын да бергә теркәп, айырым китап итеп сығарыу һис яҙыҡ булмаҫ ине. Бөйөк Бабичыбыҙҙы заманында иң яҡындан күреп белгән серҙәш дуҫы быңдай ябай иғтибарға һәм хөрмәткә лайыҡлы.

09.10.2013

## Сиғанбайлыҡ – ҙур байлыҡ

Яңы йыл яҡынлашып килә, *ләкин* үтеп барған Иҫке йылдың Яңы йылға мираҫлаған ғәмдәре күңелде ҡыра, илгә тынғылыҡ бирмәй. Яҡташтарым, таныштарым һәм бөтөнләй таныш түгел серҙәштәрем шул ғәмдәрҙең сығанағы итеп баш ҡалалағы минең һымаҡ зыялыларын күргәндәй:

-- Мәктәп бөтһә, тел бөтә, ауыл бөтһә, башҡорт бөтә, Президент дәрәжәһе бөтһә, милли республика бөтә, ниңә бөтөрәһегеҙ?! – тип үпкәләһә:

-- Сиғанбайҙарҙы үҙегеҙ тыуҙырып үҫтерҙегеҙ, һайлауҙарҙа тауыш биреп күтәрҙегеҙ – бына шуларығыҙ бөтөрә! – тип әрнеүле яуаплайым да үҙ яғымдың ғибрәтле бер тарихын һөйләп бирәм.

1930 йылда яңы өйләнешкән бер ғаиләне “синфи дошман кулак” итеп Себергә һөргәндәр. Ғаилә башлығы шунда гүр эйәһе булғас, сая холоҡло йәш

ҡатын, тыуған яҡҡа ҡасып ҡайтып, нисәлер ай сиған таборында йәшенеп йөрөй ҙә буйында сиған "йөгө" менән ауылда пәйҙә була һәм, ауылдашҡа кейәүгә сығып, ҡойоп ҡуйған сиған бароны ҡиәфәтле шуҡ малай табып бирә. Ауылыбыҙ халҡы ошо уланды, мулла ҡушҡан исем-шәрифе булһа ла, Сиғанбай тип йөрөтә һәм ул бәләкәй сағынан уҡ йырларға ла, бейергә лә, хатта бәйеттәр сығарырға ла һәләтле йорйән булып үҫә. Билдәле йот йылдарҙа сиған ҡаны ла шөйлә һиҙҙертә үҙен: Сиғанбай кеше кетәктәренән йомортҡа сәлдереүҙән башлап, тауыҡ һуйып ашауға, хатта һарыҡ шылдырыуғаса барып етә, әммә хәйләкәрҙе тоҙаҡлай алмайҙар – арты "шиты-крыты". Урыҫ телле район гәзитендә илде намыҫлы йәшәргә, стахановса тырышып эшләргә саҡырған ялҡынлы шиғырҙары баҫыла башлағас, йәш шағирҙы Ырымбурҙың үҙенә уҡырға оҙаталар һәм ул шунда ныҡлы төпләнеп ҡала. Мине лә колхоз Ырымбурға уҡырға ебәргәйне, ҡайтҡаным һайын ауылдаштар: "Теге Сиғанбайҙы күрҙеңме, ни эш ҡыра унда?" – тип ныҡығастары, эҙләп табып, ит комбинатында һуйыу цехына малдар ҡабул ҡылыусы булып "эш ҡырыуын", һәм, әгәр ҙә дөрөҫ булһа, даланы йонсотҡан ат ҡарағы сиғандарҙың йылҡыларын да "шиты-крыты" үткәреп тороуын, түрә-ҡара тирәһендә ҙур абруй ҡаҙанғанын, хатта гөбөрнә мәжлесенә мосолмандар исеменән депутат итеп һайланыуын, ығы-зығы араһында Каруанһарай мәсетен дә үҙ ҡулына төшөрөп, унда ҡунаҡханамы, ресторанмы асырға маташыуын да белдем… Шуның кеүек, башҡорттан тыуған сиғанбайлыҡ – кемдәргәлер ҙур байлыҡ, ундайҙарҙан нимә көтөргә мөмкинлеген үҙегеҙ беләһегеҙ, тип кенә һүҙҙе йомғаҡлаһам, шулай шул, тип эскерһеҙ көрһөнәләр ҙә оноталар – сиғанбайлыҡ бер көйгә байыға бирә…

22.12.2013

## ЯҢЫ ЙЫЛЫБЫҘ АЙҠАНЛЫ

Интернет селтәрендәге серҙәштәрем!

Һәммәгеҙҙе нәүбәттәге артылыш – 2014-се Яңы йыл менән ҡотлап, өр-яңы ташҡын хистәр, ҡыуаныслы кисерештәр, татлы емешле эштәр, ғаиләүи бәхет-теүәллектәр һәм, иң мөһиме, ҡаҡшамаҫлыҡ һаулыҡ-байлыҡ теләйем! Үтеп барған 2013-сө йылда, электрон хәрефтәр һәм һүрәттәр ярҙамында ғына һәм аҙ ғына булһа ла, һеҙҙең менән туранан-тура аралашып та серләшеп йәшәнем, рәсми көстәр баҫымында ҡоластарым тарайған саҡтарҙа һеҙҙең аша донъяны киң ҡосаҡланым. Сөнки китап уҡыусыларыма барыр юлым киҫелгән: билдәле яҙыусы тиһәләр ҙә, республика гәзит-журналдарының, нәшриәттәренең ишектәре Йыһат Солтановҡа бикле. Түрҙән тороп бойороусы зәғифйәндәр ижадымды, тимәк, үҙемде, тереләтә шулай гүргә һалмаҡсылар – Мөхәммәтша Буранғолов заманынан һуң тарихта булмаған хәл! Әммә алмас рухлыларҙың өлөшөнә төшкән "көмөш" итеп һананым быны, шуға күрә намыҫым ваҡланманы, йөрәгем ярылманы. Тонсоҡторғос төрбәмдән ярыҡ ярып, электрон сайтым (унда ун биш томлыҡ Әҫәрҙәрем һалынған) һәм теркәлеш таҡтам аша кереп астым офоҡто, шул тындыҡтан (отдушинанан) тирткән илем һауаһы ныҡ күтәрҙе күңелемде!..

Фани донъя беҙҙең кеүек бәндәләрен Хаҡлыҡ тигән мәңге баҙыҡ тирмән ташы ниргәһенә өҫтән тороп баҫымлауы Нахаҡлыҡ тигән мәңге яҙыҡ тирмән ташы аҫты-араһынан тере бойҙай бөртөктәре һымаҡ тартып үткәрә. Әммә Хоҙай Бабайыбыҙ, тереклек тамам онтолып бөтмәһен өсөн, бөртөктәрҙең араһына бирешмәҫлек ҡаты алмас йәҙрәләрен тыуҙыра – шулар арҡаһында дөйөм тереклек, кешелек донъяһы онталмай уҙа. Иҙеүсе тирмән ташы, ниндәй генә ауыр-ҡаты булмаһын, алмасты онтай алмай – алмас үҙе тирмән ташын онтаҡлай! Барыбыҙ ҙа алмас рухлы булайыҡ, халҡыбыҙҙы онталыуҙан һаҡлайыҡ!

Яңы йыл менән, туғандар!

Яңынан-яңы үрҙәргә, уҙамандар!

**Йыһат Солтанов,**
**Мөхәммәтша Буранғолов исемендәге**
**әҙәби бүләк эйәһе.**
25.12.2013.

## Вперед-вперед артҡа!

(Фельетон)

Урра! – гелән артҡа һәм артҡа!

“Конституция” намлы Ваҡыт Кенәгәбеҙ дәүерҙәр һаны мөһөрләнгән йәнле-йәмле биттәрен һаман артҡа ғына табан аҡтарып, бит артынан биттәрҙе “клочок бумаги” (Ленин) рәүешендә аяуһыҙ йыртып ташлап, бөгөнгө “100” баллы биттән балһыҙ кәрәҙле “0” биткә -- бабаларҙың таш быуат мәмерйәһенә юҫыҡландырта, “Төп Ҡанун” тип тә аталмыштың төбө тамам бүҫерелеп, ғәрип-герб шәүләләнмеш ҡыҫыр ҡатырға тышлығы ғына ҡала, ә эстәлек урынында хәстәлек – “всегда за!” депутаттар һауаланып ҡул саба… Көнө-төнө ябырылмыш сәйәси “секс” көслөгөнән тамам алйып бәлйерәгән “электорат” – тәпәй-тәпәй һаман артҡа һәм артҡа… Әйтерһең, мең йыл ара артта ҡалған изге сексуаль хоҙайыбыҙ бәндәләрен үҙенә тарта ла тарта…

Йәмәғәт, хөрмәтле электорат! Ҡоролтайҙың алҡыштары йәшкәҙеткән күҙҙәребеҙҙе бер асып ҡарайыҡсы: алдыбыҙҙа бынан мең йыл элекке сексуаль хоҙай йәмғебеҙҙе ҡосоп алмаҡсы лаһа!... Оялмайыҡ, күҙенә тура ҡарайыҡ: “секс” тигән сәмле кәлимәне телебеҙҙә кәлйемәләп йоторға өйрәндек тәһә!




Оялғандар ойоҡһоһон ояла, ә беҙ инде баяғы хоҙайлы шөйлә артҡы донъяла! Унынсы быуат башында уҡ шанлы Болғар дәүләтенә килеп еткән мәғрифәтле ғәрәп Ибн Фаҙлан башҡорт кешеһенең муйынына ағастан юнып эшләнгән шул изге хоҙай ӘКӘЛӘБАШ (фаллос) ишараты тағып йөрөүен һәм уға ихлас табыныуын бәйән ҡылып ҡалдырған, һис оялып тормаған. Ә был изге исем үҙе ниҙән хасил һәм ни мәғәнәгә эйә, тип төпсөнөүселәр арала моронлаһа, ҡабилиәтле фил-филологтарыбыҙ оялмай ғына табып бирер яуабын. Баҡтиһәң, һөрһөп бөткән ҡушма һүҙебеҙ “ӘКӘЛӘБАС/АҠАЛАБАШ” – Аҡ-ала-баш, тигән өс һүҙ ҡушылмаһы, йәғни ирҙең тән дарманынан ҡатын дарманына биреү (бәреү) өсөн АҠ (түл-сперма) алыусы баш (бас) – ирҙең енеси ағзаһы (фаллос) икән. Тап шул ҡушма һүҙҙән урыҫ, үзбәк, башҡорт телдәрендәге “баш” – бөгөн һәммә башлыларыбыҙ “голова”ға тиңләргә тырышып баш ватҡан мөҡәддәс һүҙ ыраған; быға инаныу өсөн, өҫтә килтерелгән схеманың 1-се буйында номерланмыш һәр “ҡаптырма”эсендәге өн-хәрефтәрен уҡыйыҡ:

1. Әкәлә -- башҡорттоң хәҙерге Үҫәргән йәнле телендәге фаллос-баш. Ир кәүҙәһендәге был теремек ағза борон – “главный” һәм изге баш, тереклек сығанағы һаналған да дәрәжәһе бөтәһенән өҫтөнөрәк ҡуйылған (шуға күрә ишаратын муйынсаҡлап таҡҡандар). Ислам дине кергәс кенә ул әрләү һүҙенә әүерелгән.

2. Кәлә/кәллә -- хәҙерге үзбәк телендә “баш” тигән һүҙ.

3. Кәләба/голова – хәҙерге урыҫ телендә “баш” тигән һүҙ.

4. Бас/баш – хәҙерге дөйөм башҡорт телендәге “баш”.

Тел үҫешенең нәүбәттәге заманында (схемалағы 2-се буй), тип фаразлай оло фил башлы филологтар, әҙәм балаһына “аҡыл” кәрәме, сығамы башлауы ла һиҙелә:

1. Әкәл – бер ҡараштан күренеп тора бында Ағыл/Аҡыл. (Ағылыусы матдә түл-сперма “Аҡыл”ға әүерелде).

2. Әбас – асығауыҙланып йылмая Ауыҙ/Абыз. (“Матдә”не ағылдырыусы фаллос-баштың “Ауыҙ”ы, көтмәгәндә, “Аҡыл” ағылдырыусы “Абыз”ға, йәғни башҡорттоң “баш”лы аҡыл эйәһенә әүерелде).

“Оятһыҙ” үҫәргән бабаларҙың ӘКӘЛӘБАС/ӘКӘЛӘБАШ тигән ошо изге хоҙай исеме башҡорттоң Ҡатай һөйләшендә шуның теүәл мәғәнәүи варианты ҠОТАҠАБАС/ҠОТАҠБАШ тигән ҡушма һүҙ рәүешендә гел ҡулланылған, мәғәнәһе лә шул уҡ:

ҠОТАҠАБАШ – Ҡот-аҡа-баш, тигән айырым өс һүҙ ҡушылдығынан хасил, мәғәнәһе лә шул уҡ: ирҙең тән дарманынан ҡатын дарманына биреү (бәреү) өсөн ҠОТ (түл-сперма) ағылдырыусы изге һәм аҡыллы баш (фаллос). Изге хоҙай исемен белдергән был бик мөҡәддәс һүҙ ҙә, баяғыса, ислам дине кергәс кенә әрләү һүҙенә әүерелә. Әйткәндәй, “хоҙай” һүҙенең яһалышы ла: Ҡотаҡ – Хоҙаҡ – Хоҙай, ти бит олпат фил башлы филолог-уҙамандар.

Ниһәйәт, иҫке-моҫҡо замандарҙан арынып, артҡа табан дөрөп барышыбыҙҙың бөгөнгөһөнә күсәбеҙ. Дөрөҫөн әйтеү фарыз: сексҡа бәйле (кәрәкмәгән!) ошо ылғый лығырҙауҙар – ҡоролтайҙа тонйораған бөгөнгө сәйәсәткә, сәйәсәттән аҙыҡланыусы арҙаҡлыларыбыҙға һыу-һауа кеүек кәрәклеген тояйыҡсы, йәмәғәт! Төрлө кимәлдәге “главарь”ҙарыбыҙ ныҡышмалы үткәргән ҡырҡыу мәнфәғәткә ифрат ярашлы бит ул! Әйтәйек, һөйөклө ватаныбыҙ Рәсәй Федерацияһының “Өфө регионы” (оҙаҡламай ул тап шулай аталыр ҙа!) “ҡоролтай”ы ҡурсаҡтары[9] (йәғни “за һәр саҡ!”тары) әлегәсә ҡалтыр-ҡолтор йәшәп килгән “Республика Президенты”н йыртып ташланған “клочок”та ҡалдырып, беҙҙең кеүек ябай халыҡ-һарыҡтарҙың иң мөхтәрәм көтөүсеһенә ныҡ абруйлы “глава региона/регион башлығы” тигән, әммә “секс” хоҙайы күҙлегенән бигүк етлегеп етмәгән ғибрәт-намды беҙҙең менән ҡуша тарих арбаһына һалып ебәрмәкселәр, афарин! Миңә ҡалһа, шул тарихи “процес”ты тиҙләтеү һәм етлектереү йәһәтенән, “глава”ның әүәлге теүәл эквивалентын биреү мөҙҙәте етте.

Ҡәҙерле депутаттар! “Президент” тигән тегәнәк-исем етерлек ҡырҙы күҙҙәрҙе, “Башҡортостан Республикаһы” тигән оторо шырау ҙа зерә ялҡытты бәғерҙәрҙе. Ҡоролтайыбыҙға шөкөр: беҙҙең хәлде тойомлап, ҡотҡоло шул дәүләтселлек билдәләрен “тихим сапом” (ауыртыуын һиҙҙертмәй генә) быуаттың шыма эҫкәге менән һурып алып быуып ташламаҡсылар, тигән олуғ оранды ишеттем дә үҙемә лә иш иттем, рәхмәт төшкөрҙәре! Зымырҙатҡыс яңылыҡтан иҫәнгерәп татлы мәреткә китәсәгем ихтималлығын тегәнәкһеҙ күҙҙәрем менән шәйләп, ошоғаса тоноп торған томана башым аҡыллы фекер бирҙе (бәрҙе) аҡылһыҙ мөхитемә: “регион” һүҙен урынында ҡалдырып, “глава”мы, түгелме тип баш ваттырткан көтөүселек вазифаһын мут замандар терминынса “ӘКӘЛӘБАШ”, йәки “ҠОТАҠБАШ” (икеһе лә изге хоҙай исеме!) итеп рәсмиләштерһәк, ғәзиз бабалар мәмерйәһендә ойоп ятыр тәңгәлебеҙгә һалам түшәп янтайыу булыр ине, йәмәғәтел-йәмәғәт! Ул саҡта беҙ һарыҡ-электорат та, мәмерйәләш христиан туғандар ғөрөфөнән бер иле лә ҡалышмай, муйындарыбыҙға “главный көтөүсе”нең сексуаль-изге ишаратын баулап тағып йөрөр инек, кинәнеп! Сөнки ҡыҙыу аҙымдар менән “республика”нан “рис бублигы” әтмәләргә юҫыҡланып, Донъя Ҡуласаһын ылғый кирегә -- “демократия” һәм “республика” һүҙҙәренән азат Ибн Фаҙлан осоронамы, әллә мәмерйә дәүеренәме, боропмо-бороп дыу-килешәбеҙ, буғай…

27.12.2013.

## Уйланырға йәнә лә бер башватҡыс

Сәйәсәт барометрында һауа баҫымы ныҡ үҙгәреү сәбәпле, өҫтөбөҙҙәге күлдәк һымаҡ күнегелгән “президент”лыҡтан ҡолаҡ ҡағып, “башлыҡ”мы әллә “шашлыҡ”мы тигәндәйерәк мәсьәләнең көсөргәнеше ҡоролтай тышына үтеп,

[9] Ҡурсаҡ – борон төркиҙәрҙә тол ҡалған ҡатын өйөнөң мөйөшөнә мәрхүм иренең һынын (“ҡурсаҡ”) яһап ултыртҡан, шул ҡурсаҡ йортто бәлә-ҡазанан ҡурсалай тип ышанғандар.

минең кеүек миңрәүҙәрҙе лә шаңҡытты, йырып сыҡҡыһыҙ шырлыҡтағы кейек-януарҙар донъяһының мөшкөл хәлен ҡапыл иҫкә төшөрҙө.

Имеш, хатта тайгалағы кейек-януарҙарға ла бөйөк урыҫ теле аша билдәле булған “Закон тайга – Медведь Хозяин!” тигән төп ҡанунды онотоп, фәҡәт Медведь-Хозяин ғына теләһә -- ҡорбандарын ике аяғына баҫып баҫтырырға, теләмәһә -- дүрт аяғында ҡалырға ла тәпәйен имеп ятырға хоҡуҡлы икәнен һанға һуҡмай башбаштаҡланып, ҡараңғы шырлыҡ йәнлектәре төбәк-тупаҡ-тупиктарының иң юғарылыҡлы эйәһен “медведчик-хозяйчик” дәрәжәһенә күтәргән дә һәммәһе тиң ике аяҡҡа баҫырға, кендектән юғарыраҡ ырғырға маташҡан. Дүрт аяҡлыларҙың мутлығынан тамам тәҡәте ҡороған Медведь-Хозяин, әлбиттә, ятып түҙмәгән, бөтә тайгаға ажар һалып аҡырған:

-- Минән башҡа бер кемдең дә, бер ҡайҙа ла, бер ҡасан да “Медведь-Хозяин” исеменең ишен алырға хоҡуғы юҡ! Немедленно дүрт аяҡта ҡалырға, ике аяҡлап ҡарғыуҙы туҡтатырға! “Медведчик-хозяйчик” тигәнегеҙҙе башҡа берәй хайуанчикка үҙгәртергә, барсағыҙҙы ҡабып йотмаҫым элек!

“Бер ни ҙә ҡылып булмай: закон тайга – Медведь Хозяин! Немедленно дүрт аяҡта ҡалмаһаҡ, үҙгәртергә ҡушҡанын үтәмәһәк, немедленно килеп етеп ботарлар!” – тигәндәр ҙә, ти, меҫкендәр, керешкәндәр һыуҙан ҡоро сығырға. Һәм баш ватмай ғына килеп сыҡҡандар: “медведчик-хозяйчик” дәрәжәһен “зайчик-зазнайчик” итеп алмаштырырға…

Аҡыллы кейек-януарҙарҙан беҙҙәргә лә фәһем алырға ваҡыт. Тик шуныһы аяныс: Ҡөҙрәтле Аллаһы Тәғәлә беҙҙәрҙе бит мәңгелеккә ике аяҡлылар итеп яралтҡас, һис бер ниндәй фарман менән дә дүрт аяҡлы була алмайбыҙ. Әммә “бүре лә туҡ, һарыҡ та теүәл” ҡалырлыҡ ике тарафҡа ла уртаҡ әмәл бар: төбәк-тупаҡ-тупигыбыҙҙа “президент” та булмаһын, “почти президент” та булһын! Бының өсөн, минеңсә, ПРЕЗИДЕНТ-тың латинса төп мәғәнәһе “сидящий впереди” икәнен иҫәпкә алып, унан арттараҡҡы һәм кеселекле “сидящий, пребывающий” мәғәнәһендәге РЕЗИДЕНТ-ты (бер хәрефкә генә айырма, ләкин “ПРЕЗИДЕНТ” түгел!) титул итеп тергеҙһәк, ысынлап та “президент” та түгел, ләкин “почти президент” та булып кинәнер инек. Бөгөнгө көн сәйәсәтендә был атама бер-береһен бөтәйтеүсе һәм бөтәһе лә беҙҙең ғәзиз төбәк-тупаҡ-тупикка ифрат ярашлы дүрт мәғәнәгә эйә, тип яҙа йоморо башлылар, ә шуларҙың иң һуңғыһы беҙҙәр өсөн “һуйған да ҡаплаған” имеш: ***“РЕЗИДЕНТ – глава колониальной администрации в некоторых протекторатах и зависимых территориях”***. Именно беҙҙәр өсөн! Тик бәләкәс хәрефтәр менән генә яҙырға кәрәк! Президенттың резиденты!

Шулай итеп, туҡһан туғыҙ телле ғәзиз ҡәрҙәш-туғандар, бөтә телдәр өсөн уртаҡ-аңлайышлы итеп асылды, буғай, ныҡ йомоҡ йомаҡ: главный “сидящий впереди” ПРЕЗИДЕНТ-тың “ҡаты ҡулы” аҫтында ыңғай ҡыбырҙаусы, Ағиҙел яры башындағы Аҡ йортонан ҡарпып сығырға ынтылмайынса бәләкәс кенә, ябай ғына “сидящий, пребывающий”ҙың һәр яҡлап та иң лайыҡлы, ләкин мәғрур ПРЕЗИДЕНТ-тан айырмалы һәм бәләкәс мәғәнәүи яҙылыш-яңғырашлы атамаһын эҙләп таптыҡ шикелле: ***“резидент”!*** Эврико! -- Баш ватмай уйлашайыҡ!

22.01.2014.

## Ҡош-ҡорттар һәм ир-аттар донъяһында (интернеттың Серҙәштәр таҡтаһынан)

### Иҫ китмәле ҡаҙаныш

Төбәк ҡотлобайын ҡотлап мәҙехнамәләр яуғанда, ҡотһоҙ башҡа йүнһеҙ нәмәләр төшә…

Серҙәштәр, текләберәк ҡарайыҡ: ҡотланыусы бөркөтөбөҙ кереш күҙле ялп-йолп ябалаҡтай булды түгелме? Бөркөт сағылында торған ояһына аҙғын кәкүк ташлап киткән серек күкәйҙән һайыҫҡан баҫып сығарҙы, ҡанатландырып осорҙо, шыҡырыҡ-шыҡырыҡ һайыҫҡанды бөркөт ояһына мендереп ултыртты... Һә-ә-әй аҫыл ирҙәребеҙ!..

### Мин дә бөйөк ҡаҙанышты данлаусы!

Ҡаҙаныш тек ҡаҙаныш, төбәгебеҙ тарихында булмаған ҙур ялғаныш! Беҙҙең ише бахырҙарҙы батыр итер һынылыш! Ҡәҙерле серҙәштәрем, мине битәрләмәгеҙ, сая ҡоштар донъяһына ныҡ һоҡланып йәшәүсе тип аңлағыҙ! Ҡотлойәнгә мәҙехнамә яуҙырыуҙа мин дә бит һеҙҙең менән!

Ә шулай ҙа ҡош-ҡорттарға япһарылған риүәйәтте дөп-дөрөҫ морокуете (йәғни мәрәкәләйһегеҙ): һеҙ әйткәнсә, бахырҙы ла батыр итеп ҡотлай-ҡотлай, данлай-данлай бик юғары күтәрһәк, донъялар тап беҙ теләгәнсә булыр: илебеҙ ҙә, күңелебеҙ ҙә батырайып-матурайып күтәрелер, гелән генә маҡташып та йәпләшеп көн итербеҙ, көлөбөҙҙә аунарбыҙ...

Күрәм: риүәйәттең мороколы фәһемкәйе нескә күңелдәрҙе ифрат мәрәкәле сиртә-сиртә әшкәрткән — бөркөт-һайыҫҡан батырлығын (һәм шулай уҡ бахырлығын!) аҫыл ирҙәребеҙҙекенә шундайын тап килтерткән! Һоҡландырғыс был йәнәшәлектә ирҙәребеҙҙең ирлеген күреп илебеҙ һоҡлана икән — һис тә ҡаршылығым юҡ, хатта дөйөм ҡыуаныска иң кәмендә йөҙ проценттан ашыу шатлығымды һалып беркетәм, мин дә шат ил балаһы (бәләһе!) бит! Бәй, йөмләмдәге аҫыл ҡоштар батырлығын "һә-ә-әй аҫыл ирҙәребеҙ!" тип күтәренке аккорд менән ослауым да тиккә генә түгелдер: илем менән бергәләшеп үҙебеҙҙе ҡотлай-ҡотлай ҡыуанам! ҡыуанам! ҡыуанам!

Ҡыуанмай мөмкин түгел: бөркөткә лә, һайыҫҡанға ла иш килгән, икеһенең дә ярлыҡауын ҡыуанып көтөп алған берәгәй ил-электораттар бит беҙ!

## Йәнбирҙе һәм Йәнбикә -- ТәүАта һәм ТәүАна (Әсә)

Һөйөклө ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ! Илебеҙ тормошондағы һеҙҙең түҙемлеккә, әүҙемлеккә, ҡыйыулыҡҡа ныҡ һоҡланып йәшәйем. Ир-аттарыбыҙ йыш ҡына

шөрләй биреп, телдәрен тешләп боҫоп ҡалғанда ла һеҙ, ғорур саялыҡ һаҡлап, кәрәкле һүҙҙе үҙ мәлендә һәм үҙ урынында уҡ ярып һалаһығыҙ, ауыр эштәрҙе лә йөкмәп алаһығыҙ. Шуға күрә аналыҡ (матриархат) дәүере кире әйләнеп килһен ине лә бәғзе берҙәребеҙгә һис алмаштырғыһыҙ өлгөрөп еткән гүзәлиәләребеҙ дәүләттең иң юғары етәкселегенә дәррәү үрләһен ине, тип теләйем… Фекерҙәремдең дауамы түбәндәге йөмләләрҙә ентеклерәк асыла.

Бына ни хаҡта уйлайым: Ер йөҙөндәге иң боронғо бабаларыбыҙ табынған изге илаһиәләр (таштәреләр) – бала бағырға һәләтле мыҡты тәнле, һомғол килеш-килбәтле, ҡарынының аҫҡы өлөшө өскөлләнеп-ослайып бөтмөш тылсым эйәһе Ана (Әсә) итеп һынландырылыуы тикмәгә генә түгел:



Ни өсөн шулай икәнлеген бөтөн кешелек донъяһының салдарҙан-сал ауыҙ-тел ҡомартҡыһы “Урал батыр” эпосындағы тәүбабаларҙың исемдәре үҙҙәре үк аңғартып-әйтеп тора:

Йәнбирҙе (Йәнб бәрҙе) – тәүдонъяға башланғыс-йән (сперматозоид) бәреүсе (биреүсе);

Йәнбикә (Йән баға) – ана шул башланғыс-йәнде үҙенең изге аналығындағы башланғыс-тәненә (күкәй-күҙәнәгенә -- яйцеклеткаһына) һеңдереп йәғни уны башлы-күҙле, тере тәнле итеп үҙендә бағыусы, үҙ ҡарынында үҫтереп еткереп тыуҙырыусы. Әгәр шулай Анабыҙ Йәнбикә баҡмаһа, Атабыҙ Йәнбирҙенең бәргән йәне шул мәлендә үк үлер, кешелек донъяһы бөтөнләй булмаҫ ине. Тимәк, Анабыҙ Йәнбаға – беренсел, Атабыҙ Йәнбәрҙе икенсел урында тора. Быны бабаларыбыҙ яҡшы белгән һәм тәүикәүҙең һәр береһен тейешле үҙ урынына ҡуйған: Анабыҙ Һауа -- өҫтә, Атабыҙ Ер (Ир) – аҫта:



Боронғоларҙан-боронғо барлыҡ рәсемдәрҙән (мәҫәлән, Шүлгән-Таш мәмерйәһендә) күренеүенсә, Анабыҙ Һауаның (Йәнбағаның) аналығы изге өсмөйөш (Килен, Бирәмитә-Пирамида) рәүешле һүрәтләнгән һәм ул ысынбарлыҡтағы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙа ла тап шулай.

Кешелек донъяһын тыуҙырыусы ошо изге өсмөйөштө Килен (Клин) тип тә, Бирәмитә (Пирамида) тип тә исемләгәндәр һәм уға арнап ҡуйылған бер изге Килен-таш әлегәсә Башҡортостандың Әлшәй районы Ташлы ауылы ҡаршыһындағы күркәм тауҙа сурайып тора. Тәүбабаларыбыҙ Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең ана шул тормош сығанағы булған йән (йән-эс – енес) ағзаларына оҡшатып, халыҡ көнкүрешенең дә аҙыҡ-түлек әҙерләү сараһын – килен (киле) менән бәргесте (төйгөстө) яһағандар – ашлыҡтарын шуның эсенә һалып бәргесләп (төйгөсләп) ашарҙарына яраҡлы итеп алғандар. Күрәһегеҙ, киле ысынлап та Килен (өсмөйөш), бәргес-төйгөс – оҙонса килбәтле эшләнгән:



Илаһилаштырылған ошо өсмөйөш (Килен-Бирәмитә) боронғо Мысыр (Египет) ерендә изге аналыҡ-һәйкәлдәр – Пирамидалар (Бирәмитәләр) рәүешендә мәңгелек мөғжизә итеп һынландырылған, ә мәғәнә-доғаһы уның ошондай: илаһи өсмөйөштән тыуған йән эйәһенең йәне, ваҡытлыса булған фани донъянан күсеп, мәңгелек баҡый (бағыусы) теге донъяға – илаһи өсмөйөшкә кире ҡайтырға тейеш… Һәм, ғөмүмән, Ер шарының биш ҡитғаһын изге өсмөйөштәр рәүешле һүрәтләгәндәр (уртала башҡорттоң дүрт юлына бүленгән Евразия ҡитғаһы):



Әйткәндәй, заманында тап ошондай өсмөйөшлө билдәләрҙән хасил ҡылынмыш килен-яҙыу ҡулланылған, мәҫәлән, боронғо үҫәргән-бөрйән бабаларҙың Бүрәсә (Фарсы) дәүләтендә ҡаяларға ырып ҡалдырылған текстар:



Яҡшы аңлашыла ки, кешелек донъяһының тәүбашланғысын Әсәлек-Аналыҡ (матриархат) дәүере тәшкил иткән – һәр йәһәттән дә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ өҫтә, беренсел урында, торған һәм быуындар шәжәрәһе лә, хәҙергесә йәғни патриархат дәүерендәгесә ир-ат бауы (теҙеме) булмайынса, ҡатын-ҡыҙҙар (әсә-аналар) быуындарынан төҙөлгән; икенсе төрлө әйткәндә, фәҡәт ҡатын-ҡыҙҙар ғына шәжәрә тамыры һәм олоно һаналған. Мифтарыбыҙҙы (мәҫәлән, "Урал батыр" һ.б. эпостарыбыҙҙы) ижад итеп тыуҙырыусы һәм быуындан-быуынға олғаштырыусы бик боронғо сәсәндәребеҙ ҙә иң элек ҡатын-ҡыҙ затлы булған. "Сәсән" һүҙенең килеп сығышы: әс-әс-ән (әсәнең әсәһенән, йәки бераҙ урыҫсалаштырып әйткәндә, "бабушканың бабушкаһынан" тыңлана килгән изге һүҙ) -- әсәсән – *сәсән*; һәм шунан уҡ: әсәс – *сәс* (сыуашса "һүҙ" -- сасси) – *сүз* – *һүҙ*. Үҫәргән башҡорттары әлегәсә "бабушка"ны -- әсәй, "мать"те – анай, әней тип әйтә.

Әлхасил, булғанына шөкөр итеп, кешелек донъяһының мөғжизәүи эпостарын тыуҙырған һәм ошо көнгәсә һаҡлап килтереп еткергән исемһеҙ сәсәниәләребеҙ һәм атамалары билдәле Хәмит, Ғәбит, Мөхәммәтша сәсәндәребеҙ рухына доға ҡылайыҡ.

Матриархат дәүерендә ил менән, әлбиттә, әсә-аналарыбыҙ етәкселек иткән, был хәл хатта патриархат дәүерендә лә бер килке күҙәтелгән. Шундай бөйөкбикәләребеҙҙең тарихта билдәле бер-нисәһенең төҫ-киәфәтен ҡарайыҡ:

1. Батшабикә *Тамырәсәй* (Геродотса Тамарис), б.э. тиклем V быуатта йәшәгән, бына ул (яҙыуына ҡарағыҙ):




' быуатында:



49. ? 50. ?

56. А. Ягафаров?

эстан Вилдан

ҡыҙы ]

57. ? 58. ? 59. ? 60. ? 61.? 62. А. Инан?



63.Ю. Бикбов 64.А. Валиди 65. Ш. Манатов 66. Г. Таган 67. Багбустан 68. Р.Фахрутдин



69. ? 70. ? 71. ? 72. ? 73. ? 74.Ш. Бабич? 75. ?

4. Заманында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан беренсе булып роман "Ырғыҙ"ҙы яҙған Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшина:



*Урал тауҙарының буйында*
*Оҙон-оҙон быуат буйына,*
*БуйҺонмайса яуыз яҙмышҡа,*
*Ягалашҡан, ҡыйыу алышҡан*
*Башҡорт ҡыҙҙарын мин йырларға*
*Ҡәләм алды ниһәм ҡулдарға,*
*Һин, Һәҙиә, алға баҫаһың,*
*Һиңә мәҙех килә яҙаһым.*

*Башҡорт ҡыҙы әсе сеңләгән,*
*Тик һис кемгә башын эймәгән.*
*Йөҙө пәрәнжә лә киймәгән.*
*Ир-егеттәй һыбай менгән ул,*
*Илен һаҡлап, яуға елгән ул,*
*Үлем күҙенә бағып көлгән ул! —*
*О Һәҙиә, һинең һының был,*
*Замандашым, йәсе, йырым бул!*

*Башҡорт ҡыҙы ярһыу йөрәкле,*
*Һүрелмәҫтәй ҡайнар теләкле;*
*Йырҙан таша уның күңеле,*
*Шоңҡар ҡыйыуламы — бейеүе!*
*Мөхәббәте уның — ут көйөк,*
*Ә нәфрәте — сатнар боҙ кеүек.*
*Үҙе дәртле, үҙе бик түҙем. —*
*Һәҙиәкәй, был бит һин үҙең!*
*Ғәрәп һүҙе булған “Һәҙиә”*
*“Бүләк” тигән һүҙҙәр беҙҙеңсә.*
*Башҡорт, теләп һиңә ҙур теләк,*
*Биреп һиңә ҡайнар ҡуш йөрәк,*
*Бүләк итте һине донъяға,*
*Даның сиктәр аша тарала.*
*Йөҙөк ҡашы булдың халҡыңдың,*
*Күңелеңдә уның ялҡыны.*

*Йәмле, шаулы Ырғыҙ буйҙарын,*

*Ыргыҙ буйҙарының ҡыҙҙарын,*
*Тас та арыҫландай улдарын,*
*Һәҙиә, һин данлап йырланың.*
*Ғашиҡ инең беҙҙең заманға,*
*Йырың тынмай һаман, һаман да.*
*Юҡ, Һәҙиә, һүҙең тутыҡмаҫ,*
*Илең һине ғүмер онотмаҫ!*

Нескә хисле шағирыбыҙ Ғәйнан Әмириҙең Һәҙиәгә бағышланған ошо ихлас шиғыры һәммә гүзәл заттарыбыҙға мәҙхиә булһын ине:

## Әсәләрҙән башлана

Кешелек донъяһының тарихы матриархаттан (әсәләр өҫтөнлөгөнән) башланыуын, ә патриархат (аталар өҫтөнлөгө) шаҡтай һуңыраҡ дәүер икәнен беләбеҙ. Шуға бәйле, бөгөнгө мәҙәниәтебеҙ ҙә иң тәүге әсәләр мәҙәниәтенә тамырлана. Донъяға йән (ҡот) биреүсе (бәреүсе) ирҙән дә бигерәк, шул йәнде үҙ буйында яралтып-тән биреп тыуҙырыусы, тыуғанды имеҙеп үҫтереүсе әсәбеҙ тәүйәмғиәт аңында беренсе урынға ҡуйылған. Бының асыҡ сағылышын “Урал батыр” эпосындағы тәүбабалар исем-атында күрәбеҙ: Йәнбирҙе (йән-ҡот биреүсе йәки атыусы ата-ир) һәм Йәнбикә (йән баға йәғни ирҙең йән-ҡотон үҙ буйында бағып-тыуҙырып үҫтереүсе әсә-ана-ҡатын). “Ҡатын” һүҙе ҡот-ан (ҡот анаһы) тигәндән хасил. Мәҙәниәтебеҙҙең матриархаттан тороп ҡалған “реликт” билдәләрен ябай тормош-көнкүреш сараларыбыҙҙа шәйләйбеҙ. Йәғни:

Семья -- әсәм өйө (урыҫтар тылҡыған “семь и я” түгел һис тә!). Әҙәм балалары “әсәм өйө”ндә үҫкән, аталарын белмәгән; шәжәрә бауы ла әсәләрҙән быуынланған. “Әсәм” һүҙенән “исем” һүҙе яһалған (“атам/атым” һүҙе – патриархат дәүере килгәс кенә). Шуға ярашлы минең исем, тимәк, “Бибисадиҡа улы Йыһат” (“отчество” юҡ). Бында: әсә йәшәгән аб/об (уба) -- өй тигән һүҙебеҙ була. Шул уҡ оянан: аб-ана (ана өйө) – бана/бина/баня. Һәм бана (бина)-әсә -- банаса/мунса. Абар-анай (анай барып килә торған урын) – уборный; абар-аҡай (ағай барып килә торған урын) – әбрәкәй; эшеңде “бөтөрөп” килер урын -- бөтөрөп/бәҙрәф; эшеңде теүәл ит – туалет. Бүрегә табыныусы әсәләр ирҙәрҙе “бүре” тип атаған, ә “бүре аҫтына” түшәй торған йәймә -- бүре астына/простыня; батыр аҫтына һала торған ҡалынырағы – батыр-ас/матрас.

Ир кеше ҡатынды, буйында ул ирҙең йәнен (ҡотон) бағып үҫтергәненә күрә, “йәнем” тип ҡәҙерләгән; ҡатын кеше йәне күреп аяусыһын (ҡурсалаусыһын) “аярым/ярым/йәрем” тип ололаған.

Баҡса үҫтереү, иген игеү кеүек бөйөк ҡаҙаныштарыбыҙ өсөн дә кешелек донъяһы әсәләргә бурыслы.

Ботаҡ (ағас ботағы) – батаҡ/матик, үҫемлек орлоғо күмеү өсөн ерҙе соҡоғос тәүҡорал.

Әсәкә/сәкә (соҡо) – суҡа/һуҡа (ер һөрөү ҡоралы).
Әсә-аба (әсә өйө)/аçаба/асабан/сабан/һабан.
Әрлек/ирлек – орлоҡ, иген орлоғо.
Әсәлек/солоҡ – соло/һоло игене.
Баҡ-әсәй/бағаҙай – боғдай/бойҙай.
Әсә-алаҡ (әсә үçтереп ала торған) – ашалыҡ/ашлыҡ.
Бай-әсә -- баяс/мейес/печь/пич.
Әсәк – усаҡ/очаг.
Аҡ-әсән – ҡасан/ҡаҙан.
Әсәм – сәм/шәм (яҡтыртҡыс).
Былар бары өçтән-мәçтән күҙгә салынғандары.

30.10.2013
02.02.2014.

## Тәүтөйәктә ҡыҙ (кәләш) алышыу, бирешеү йолаһы

Тәүзамандарҙа беҙҙең тарихи Башҡортостан кешелек донъяһының Тәүтөйәге (Прародина) булған, уның теүәл схемаһы башҡорт милли биҙәктәрендә сағыу һаҡлана. Шуларҙың араһынан был теманы асырға ярашлы икеһен генә алабыҙ (ябайырағын һәм ҡатмарлырағын):





Ҡатмарлыһынан бик яҡшы күренеүенсә, Тәүтөйәкте дүрт (4) һыу-ятыу (горизонталь буйҙа Ағиҙелдең изге ҡала Өфөгә [урталыҡтағы шаҡмаҡҡа] тиклемге үрге [көнсығыш] ағыны һәм Өфөнө уҙғандан һуңғы түбәнге [көнбайыш] ағыны, ә вертикаль буйҙа төньяҡтан ыҡҡан һыу-ятыу Өфө һәм көньяҡтан ыҡҡан һыу-ятыу Дим, бергә сатрашланып, башҡорт һәм урыç ҡарыһүҙ-әкиәттәрендәге “диңгеҙ”ҙе хасил ҡыла. Сатрашлы һыу-ятыу (“диңгеҙ”) уртаһынан, уны һигеҙгә (8) бүлеп,

изге мәркәз-ҡала Өфө аша ***хоҙайҙарҙың изге юлы*** сатрашлана (биҙәктәге ылыҫлы сатраш), бәндәләргә ул юлдарҙан йәғни һыу-ятыу уртаһынан йөрөү тубаланып (табуланып) тыйылған – һыуҙа улар ярға яҡыныраҡ үткән. Шул уҡ ваҡытта бабаларыбыҙ изге мәркәз ҡала Өфөгә дүрт яҡтан да "диңгеҙ" аша туранан-тура бара алған, был юлдар ҙа, Өфө-үҙәктә тоташып, яңы сатраш (биҙәктә ул күренмәй, ундайҙарҙы түбәндәге өҫтәлмә схеманан ҡарағыҙ) – ҡалын һыҙыҡ менән күрһәтелгән ***бейҙәр юлын*** хасил иткән, дүрт юл бейҙәре шулай Өфө аша үҙ-ара аралашҡан һәм никахлашҡан.

## "Ете ят"тан ғына кәләш алыу-биреү йолаһы

"Ете ят" – ете ятыу-һыу тигән һүҙ; егет кеше кәләште, үҙ еренең (8-се) ятыу-һыуын иҫәпкә индермәй, Ҡояш (сәғәт уҡтары) йөрөшө ыңғайына ете ерҙе уҙып, ете ятыу-һыуҙы ("диңгеҙ"ҙе) кисеп, бөтөн Тәүтөйәкте әйләнеп (уратып) үтеп кенә алып ҡайтырға тейеш булған, был иһә уның географик белемен ныҡ арттырған. (Хоҙайҙар юлының һәр ике яғындағы һыу-ятыуҙарҙы -- "диңгеҙ"ҙәрҙе һанап ҡарағыҙ – теүәл һигеҙ). Никахлашырға тейешле ҡыҙ менән егет үҙ еренән Өфө-үҙәк аша үткәрелмеш тура һыҙыҡ-уҡ башындағы ҡаршы яҡ ерҙә йәшәп-торған. Ул уҡтарҙы, бейҙәрҙекенән айырмалы булараҡ, ***ябай бәндәләрҙең*** Өфө-үҙәк аша аралашыу һәм никахлашыу юлдары тип атайыҡ та, бейҙәр юлы менән ҡуша, Тәүтөйәктең схемаһына һалайыҡ:




Һандарға иғтибар итегеҙ: Тәүтөйәктә йола буйынса никахлашыу 1-се – 5-се, 2-се – 6-сы, 3-сө -- 7-се, 4-се -- 8-се тәүырыуҙар араһында ғына рөхсәт ителгән.

Никах-ырыу юлдары һандарының суммаһын сығарайыҡ: ябай бәндә ырыуҙарыныҡы һигеҙ (8) плюс (+) бей ырыуҙарыныҡы дүрт (4), бөтәһе була (=) ун ике (12) – был һан (12) башҡорттарҙы төплө тикшереп белгән мәшһүр

ғалимдыҡына теүәл тап килә: “В домонгольское время башкиры разделялись на двенадцать основных родов, из которых семь были расположены на территории бывшей Уфимской провинции, а пять – в зауральской ее части” (С.И. Руденко. Башкиры, историко-этнографические очерки. М. – Л., 1955, 50-се бит). Һөҙөмтә: Башҡортостан Республикаһының дәүләт символы итеп ҡабул ҡылынған ете (7) тупалсыҡлы ҡурай сәскәһе дөрөҫ түгел – ун ике (12) тупалсыҡ тейеш.

Башҡорт милли биҙәктәренең һәр береһе энциклопедик мәғлүмәттәргә эйә булыу ихтималлығын һәр ваҡыт яҙа килдем.

### Тәүмифологиянан – ҡарыһүҙ-әкиәттәргә

Мәғлүмәтлелек йәһәтенән “Урал батыр” эпосын һутландырған тәүмифологияға иң яҡын торғаны – “Алп батыр” ҡарыһүҙе. Ундағы “бер бабай менән әбей” – тәүмифологиябыҙҙағы гермафродит Имир йәки эпосыбыҙҙағы Йәнбирҙе менән Йәнбикә. Уларҙың балалары юҡ –тәүмифологияла ла шулай уҡ (гермафродит Имир буйындағы игеҙәк балалар яралғыһы уның менән ҡуша гүргә [гораға йәғни тау ҡуйынына] керә). Ҡарыһүҙебеҙҙә шул гүр-гор (тау) ҡаяһы ярығынан Алп-улан тыуа – тәүмифологияла ла шулай уҡ: Машаҡтау таш ярығынан Урал, Нарытау таш ярығынан Шүлгән донъяға килә (<зигатсултанов.рф> сайтымдағы Әҫәрҙәремдең XI томында). Ҡарыһүҙебеҙҙә Алп батыр “ете аҙым атлаған да туҡтаған”, шунда үҙенең кәләшен тапҡан -- өҫтә күрһәтелгән Тәүтөйәк схемаһындағыса. Алптың ете аҙымында “аяғы төшкән урындар аҡлан-аҡлан тигеҙ ялан булып ҡалғандар” – маршруттың схемалағы ете ырыу ерҙәре аша үтеүенә ишара.

19.01.2014.

## Ятбауыр планетарҙар бойомонда һаташыу

Өнөммө был, төшөммө?!. Төбәгебеҙҙең башҡорто ла, урыҫы ла, бер юлы баштары тоноп, үҙҙәренең бер үк ата Әҙәмдән, бер үк ана Һауанан тыуғанлыҡтарын шәйләмәй, үҙен-үҙе онотоп, ҡарыулаша туҡтауһыҙ. Сөнки йыһандың ниндәйҙер ятбауыр планетарҙары (инопланетяндары) Ерҙе һынау полигонына әйләндергән, бәндәләрҙе ике ҡәүемгә бүлгән дә бер яғын – ҡусҡыл үлән көйшәп мөңгөрҙәүсе һарыҡҡа, икенсе яғын ҡайнар ҡан эсеп ырылдаусы шакалға әүерелдертеү тәжрибәһенең һуңғы сигенә еткән. Баҡтиһәң, был бер бөгөн генә түгел, ә күп быуаттар буйынса аҫтыртын үткәрелгән. Бының өсөн кешелектең бишеге булған Уралды, тәғәйенерәге, башҡорт төбәген, һайлап алыуҙары ла юҡҡа түгел: төбәктә уңыш ҡаҙанған ***бөтөрөү тәжрибәһе*** Ер шарының бөтә өлөштәренә күсереләсәк. Һөҙөмтәлә ике аяҡлыларҙың йәмғеһе үҙҙәренән-үҙҙәре дүрт аяҡлыланып, мөңгөрҙәүек һарыҡҡа һәм ырылдауыҡ шакалға әүерелеп, һарыҡ – үләнде, шакал һарыҡты ашап бөтөргәс, аҙаҡ килеп ҡом сүлендә шакал да шашып дөмөгәсәк…

Күрәм, күрәм! – өнөмдәгеләй күрәм: бөйөк (бойоҡ!) тәжрибә барышын һуңғы быуаттың буйынан-буйына күрәҙәләнеп күрәм! Был ятбауыр планетарҙар ҡапма-ҡаршы торғоҙолған ике ҡәүемдең береһенең ҡулына моңло ҡурай, икенсеһенекенә зыңлы балалайка тотторҙо, һәр береһен, тыпырҙатып, үҙ таҡмағына бейетте; һәр береһенә үҙенекен генә -- хаҡ, тегенекен нахаҡ күрһәтеп алйытты, баштарын әйләндертте. Береһе «аҡ!» тиһә, икенсеһе «ҡара!» тине һәм йәнә киреһенсә. Әйтәйек, бер яҡ үҙенең ғәзиздәре Мөхәмәтхан Ҡулаев, Муллаян Халиҡов, Сөләймән Мырҙабулатов, Миңлеғәли Шайморатов һындарын ҙурлап постаменттарға күтәрергә уҡталһа, икенсе яҡ ул постаменттарға Михаил Калинин, Абрам Цюрупа, Феликс Дзержинский, Георгий Жуков тигәндәрен мендереп баҫтыртты. Бер яҡ мили театрҙарға Мөхәмәтша Буранғоловтоң, Шәйхзада Бабичтың, Булат Имашевтың шанлы исемдәрен бирергә ниәтләнһә, икенсе яҡ шунда уҡ уларға ҡапма-ҡаршы дан эйәләре Мәжит Ғафури, Мостай Кәрим исемдәрен беркетте, йәки исемһеҙ ҡалдыртты. Бөйөк-бойоҡ тәжрибәгә ҡамасаулаусы төп факторҙар -- ҡылды ҡырҡҡа телерҙәй ТУҒАН ТЕЛ һәм ТЕЛДЕ сарлаусы Ҡоролтай икәнен самалаған ятбауырҙар, әлбиттә, күҙ алдыбыҙҙа уҡ тейешле сараһын күрҙе. Беренсенән, телде ҡеүәтләп таҡмаҡлағыс балалайканан боронғо батша жандармдарының сөрөлдәүек һыҙғырткысын тергеҙеп, асылмалы һәр ауыҙҙың тере телен шул механик һыҙғырткыска алмаштыртты. Икенсенән, тел ҡеүәтен оҙонайтҡыс ҡурайҙы һуғып һындыртып, остоғонан баяғы уҡ сөрөлдәүек һыҙғыртҡысты әтмәләтеп, һәр ауыҙҙың телен шуға алмаштыртты, ә телде терелтер мәктәптәрҙе асылмаҫлыҡ яптыртты. Быға тиклем тере һәм төрлө теллеләр тел сарлашып үҙ-ара уртаҡ тел тапһа, инде ул хәстәр кәрәкһеҙ. Сөнки инде ятбауырҙар индерткән «уртаҡ тел» бар -- һәр ауыҙҙан бер үк ауазлы сөрөлдәүек һыҙғыртҡыс, жандарм һыҙғыртҡысы. Әҙәм балаһының генетикаһы ла тап шуға ауаздаш үҙгәртелә – бәндә тигәнең әсәнән үк әсә теле урынына жандарм һыҙғыртҡыслы булып тыуа башланы. Донъялағы ошо ҡоро ерҙең алтынан бер өлөшөндә (ә аҙаҡ бөтә Ер шарында!) оҙаҡламай хатта ҡоштар йыры ла тынып-тонсоғоп, төҙ һындарҙы йүгенекләткес (шыуышып йөрөткөс) сөрөлдәүек һыҙғыртҡыстарҙың берәгәй зыңы ғына зыңлап торасаҡ! Виват! Ур-рааа!

Ике яҡтың да әсә теле урынында сөрөлдәүек һыҙғыртҡыслы бала-сағаларына бер үк көйгә сөрөлдәгес берәгәй мәктәп ишектәрен астыртып, кластарҙа ажар һыҙғыртҡыс дәрестәрен керетте. Сиам игеҙәктәреләй ҡушалатән дирижерлы ҡоролтай хорын да бер тауыштан сөрөлдәүгә күсереп, дирижер таяҡлы ҡушалатән баштарына – йәшерен антенналы осло башлыҡ-көпәшән (осло баштар!), ә берҙәм хор ағзаларыныҡына – тупаҡ-таҡыя (тупаҡ баштар!) кейҙерттерелде. Илдең ябай-ялпылары түбәһенә ҡарар күҙгә күренмәҫлек кәкре антенна – Мефистофель мөгөҙө суҡайттыртылды (мөгөҙлө баштар!). Космостағы ятбауырҙан ҡупҡан бойороҡ эфир аша Ҡоролтайҙың ике дана осло баштарына тоташып һәм баш мейеләрен тейешенсә зыңҡытып, тупаҡ баштарға күсә лә зыңҡыу мейеләре аша артабан үтеп китеп, мөгөҙлө баштарға ирешә, һөҙөмтәлә көллө төбәк юғарынан бойоролғанса бер тауыштан сөрөлдәүек һыҙғыртыусан дөйөм хорға әүерелә…

Мин күргәнде һәммәгеҙ ҙә күрҙегеҙ: күҙ асып йомған арала бит ятбауырҙар һәммәбеҙҙе янтайтты, йәғни ҙә ки бөтә ике аяҡлыларҙы мәсхәрәле дүртаяҡланыуҙан тотҡарлаусы ифрат мөһим сәбәпте – төбәктең төп ҡанунын (республика Конституцияһын) тамуҡҡа быраҡтырҙы, ике аяҡлы тормошобоҙҙо нигеҙләүсе һәм ике аяҡлыларҙың Рәсәй Федерацияһын ижадлаусы Әхмәтзәки Вәлидов өсөн тәғәйенләнгән постаментҡа халыҡтарҙы һарыҡтай һуйған Алексей Тевкелев ҡараҫҡыһын (шомло төш!) юғарылыҡлап күтәрҙе; шул шауҡымда беҙ-бахырҙар бына-бына дүрт аяҡлы һарыҡланып баҡырмаҫбыҙ, шакалланып оломаҫбыҙ, тип кемебеҙ әйтә ала?.. Төшөммө, өнөммө был, йәмәғәт?!.

02.03.2014.

## 05.11.2013. Обращение башкира к башкирскому олигарху

**Председателю Совета Благотворительного фонда “Урал”**
**Рахимову Муртазе Губайдулловичу**
**от писателя-историка заслуженного работника культуры РБ,**
**лауреата литературной премии им. Мухаметши Бурангулова**
**Султанова Зигата Адигамовича (адрес: Уфа – 450103, ул. Муксинова, 7, кв. 59; тел. 254-61-37 или 8-927-087-96-42)**

**ЗАЯВЛЕНИЕ**

Может быть, Вам и Вашим сотрудникам мое имя не говорит ни о чем, но я являюсь незаурядным башкирским писателем-историком – автором Сочинений в XV (пятнадцати) томах (9 томов из которых – художественные произведения и 6 томов – исследования по древнейшей истории башкирского народа), пока что доступных, к сожалению, сравнительно узкому кругу читателей и только в электронном варианте в сайте <зигатсултанов.рф> -- файлы. В 2012 году благодаря Вашему фонду в Башкирском государственном книжном издательстве им. З. Биишевой к моему 80-летнему юбилею было начато издание I тома названных Сочинений, была получена корректура текста, однако, как объяснили мне в издательстве, по причине прекращения обещанного с Вашей стороны финансирования книга моя на полпути была заморожена и до сих пор остается на том положении.

Уважаемый Муртаза Губайдуллович! Прошу вникнуть в суть вопроса и возобновить издание моих (нужных народу) ***Сочинений в паятнадцати томах,*** открыв ход приостановленному в 2012 году первому тому с последующим продолжением издания всех остальных томов. Смею Вас уверять, издание это будет уникальным в нашей культуре и Вы вместе с автором Сочинений (а не с

Мустаем Каримом) останетесь в истории башкирского народа. Прошу ответить мне по существу.

Подпись: /Зигат Султанов/.

Уфа, 05.11.2013.

***P.S. Со стороны М.Г. Рахимова заявление было оставлено без ответа. З.С.***
26 февраля 2014 года.

## Завещание моим читателям и почитателям

Мне, Вашему беспокойному современнику и неутомимому писателю Зитату Султанову, стукнул уже 81 (восемьдесят один) год – слава Богу! Творил я почти во всех родах и жанрах литературы, труд этот составил объемистые 15 (пятнадцать) томов, из которых 9 (девять) – художественные произведения и 6 (шесть) – оригинальные исследования по истории и мифологии народов. Но по известным причинам темными силами госчиновников наложен тайный запрет на издание моих книг в государственных издательствах, а на частные предприятия у автора не было и нет финансовых возможностей. Оставался один единственный путь – дойти до читателей через интернет, что и стало возможным благодаря бескорыстной помощи замечательного профессионала своего дела Ильфата Фаритовича Ишмухаметова, за что я ему бесконечно благодарен. Однако ни что в этом мире недолговечен – погаснет и мой связывающий с Вами экран… Поэтому прошу Вас, моих дорогих читателей и почитателей, скачать (это бесплатно) из сайта <зигатсултанов.рф> в свои персональные компьютеры или флешки все пятнадцать томов, они много места не займут, но за то будете иметь интересную библиотеку электронных книг. Властвующая свора чиновников сделала и делает все для того, чтобы заглох мой голос, бесследно исчезли произведения, но Вы возьмите их в свои руки и сохраните для своих детей, внуков и внучат.

**Зигат Султанов,**
лауреат литературной премии
имени **Мухаметши Бурангулова.**
18.02.2014.

# ДИВИЗИЯ

## Йыһат Солтанов. Башҡорт дивизияһы (төрлө мәғлүмәттәр). Өфө -- 2007.

Ошо китаптан генерал М.М. Шайморатов иҫтәлегенә бәйле ике документ алынды. Л. Яҡубов фотолары матбуғатҡа тәүбашлап сығарыла.

Түбәндәге фотола дивизия политбүлегенең күренекле офицеры Сабир Рәхим улы Ҡадиров:



**Акт**

Мы, члены Правительственной комиссии по вяснению обстоятельств смерти и установлению места погребения и личности командира 112-й Башкирской – 16 гвардейской кавалерийской дивизии генерал-майора М.М. Шаймуратова в лице председателя комиссии депутата Верховного Совета БАССР Кадирова Сабира Рахимовича и членов в лице заслуженного деятеля науки БАССР республиканский судебный медицинской эксперт министерства Здравоохранения БАССР проф. В.Г. Кузнецова и зам. ответственного секретаря редакции газеты "Кызыл тан" Габитова К.Х., фотокора ТАСС Якубова Л.И., изучив прилагаемый при сем материал об обстоятельстве смерти, места погребения и опознания личности генерал-майора М.М. Шаймуратова, комиссия приходит к следующему заключению:

1. Командир 112 Башкирской – 16 гвардейской кавалерийской дивизии генерал-майор М.М. Шаймуратов героически погиб в боях за Родину при выходе из Дебальцевского района между 8 – 9-ю часами утра 23 февраля 1943 года в балке, проходящей один *км* южнее поселка Штеровка и 4 *км* севернее нас. пункта Ивановка Ивановского района Ворошиловградской области.

2. Труп генерал-майора Шаймуратова, как труп неизвестного генерал-майора впервые был обнаружен немецкими патрулями и в конце февраля месяца 1943 г. , по распоряжению немцев, погребен рабочими завода им. Петровского в балке против Романовой скалы.

3. После особождения Донбасса труп генерала неизвестного звания вместе с трупами других офицеров, павших в этом бою, в конце октября 1943 года

был перенесен и похоронен с гражданскими почестями в нижнем саду пос. Штеровка.

4. В лице похороненных в поселке Штеровка генерала неизвестного звания личность генерала Шаймуратова установлена многочисленными свидетельскими показаниями и опознанием его по групповым фотокарточкам и портретам.

5. Данные эксгумации трупа не противоречат свидетельским показаниям и с вероятностью определяют личность генерал-майора Шаймуратова.

6. Таким образом, погибший в районе пос. Штеровка и погребенный в том же поселке труп генерала неизвестного звания (генерала в подлинности) является генерал-майором М.М. Шаймуратовым.

Установив личность генерал-майора М.М. Шаймуратова, его останки похоронены комиссией 20 октября 1948 года в расположении воинской части № 5273-В при заводе им. Петровского Ворошиловградской области Ивановского района.

Председатель комиссии **Кадиров.**

Члены комиссии: **Кузнецов, Габитов, Якубов.**

19.10.1948.

Ошо эштәр барышында, өҫтә әйтелгәндәрҙән тыш, БАССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. Ниғмәтжанов рейдта ҡатнашып иҫән ҡайтҡан ветерандароҙың байтағының 1943 йыл 23 февраль трагедияһы тураһындағы шаһәҙәтнамәләрен йыя. Ошоларға таянып, Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатовҡа үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исемен биреүҙе һораған, ВКП(б) өлкә комитеты секретаре С. Ваһапов һәм БАССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. Ниғмәтжановтар ҡултамғалаған һәм 1948 йылдың 11 декабре менән даталанған юллама СССР Министрҙар Советы Председателе И.В. Сталинға атҡарыла (был документтар йыйылмаһын ҡарағыҙ: Йыхат Султанов. Обстоятельства гибели генерала М.М. Шаймуратова по свидетельствам очевидцев. – "Ватандаш" 10/1999 журналының 140-150-нсе биттәре), әммә юллауҙары туҡталып ҡала, сөнки был эшкә ҡаршылар үҙ хөсөттәрен Мәскәүгә еткерәләр…

Романов балкаһында М.М. Шайморатов һәләк булған урын:



Романов балкаһында М.М. Шайморатовтың беренсе ҡәбере:



Штеревкала М.М. Шайморатовтың икенсе ҡәбере:



Профессор В.Г. Кузнецов  М.М. Шайморатов ҡәберен тикшерә:





Генералдың кейем ҡалдыҡтары:



Генерал Һуңғы табутында:



Петровский заводында генералдың өсөнсө (һуңғы) ҡәбере:



Генерал ҡәберенә ҡуйылған һәйкәл янында дивизия ветерандары С.Х. Хәбиров, Родин һәм яҙыусы Й. Солтанов (1978 йыл):



Генерал зыяратындағы мемориал янында:



**Башкирский обком КПСС.**

**Уважаемый Тагир Исмагилович Ахунзянов!**

Вот уже более сорока лет занимался изучением революционного пути генерала М.М. Шаймуратова. Сложность заключался не только в том, что он был, как секретный работник разведслужбы Красной Армии, совершенно неизвестным в Башкирии, но по своему служебному положению многим сослуживцам и в Москве.

Вот почему, когда он в сложной обстановке героически погиб, этим решили воспользоваться для личного интереса кой-кто из его сослуживцев.

1. Командир 7-го гвардейского кавалерийского корпуса генерал-лейтенант Борисов, попавший в этот день в плен, потом после войны перед судом военного трибунала в Москве был вынужден писать в Башкирский обком КПСС о том, что во всем виноват Шаймуратов, что он не выполнил его приказ. Узнав об этом я лично написал Борисову, что не Шаймуратов, а он сам с пьяной головой вел дивизию на неоправданный прорыв. После этого он был вынужден писать в обком КПСС второе письмо, где он пишет, что иначе он не мог бы оправдаться перед военным судом. Это и помешало присвоить Шаймуратову посмертно звание Героя Советского Союза, хотя реляция была подписана руков. обкома партии и правительства БАССР.

2. Кроме этого, некоторые товарищи (Назиров Мубаряк, генерал Галиев) старались по возможности очернить генерала (якобы он в плену), ибо Назиров поехал в Уфу 17.11.1942 г. за пополнением и прибыл в дивизию только 27.03.1943 г. За это время не было ни от кого ни одной телеграммы. Мы продолжали выполнять нагрузку за полноправную дивизию, хотя активных штыков было всего лишь 52%. За это генерал назвал Назирова “башкирским феодалом”... Галиев хотел остаться единственным генералом из башкир...

3. Дивизия с честью оправдала доверие народа. В годы войны количество коммунистов увеличилось в четыре раза. Осталось черным пятном в истории дивизии то, что единственным солдатом, который был исключен из партии и отправлен в штрафную роту был Ихсанов Ахтям. Вот он даже сегодня продолжает черное, коварное, провакационное дела. В моей книге “Урал бөркөтө”, над которым я работал 35 лет, описывается, как я своими глазами видел, героическая гибель генерала. В 1948 году я съездил на место его гибели, перехоронил в воинской части. Он (Ихсанов) решил, побывав в штрафной роте, оспаривать моих доводов в пользу генерала.

Очень прошу Вас:

Сохранить героический образ генерала Шаймуратова М.М. как он описывается в моем долголетнем труде. Дать сугубо партийную оценку клевете Ихсанова по адресу генерала М. Шаймуратова.

В книге, как первое издание, отдельные недостатки могут быть. Мы их учитываем, сделаем все возможное их исправить и дополнить. За такие деловые, правдивые замечания мы рады, за это отвечаем только благодарностью.

**С. Кадыров.**

13.03.1983.

## Яраланған яҙмыштар, йыртылған сәхифәләр

*Күңелендә бабалар рухын һүрелтмәгән Бөрйән һылыуы*
*Көнһылыу Зәки ҡыҙына арнайым.*

Тарихты ябып булмай: заманында Башҡортостандың йән-йөрәге Өфөгә хәрби ҡәлғә ҡороп оялаған урыҫ түрәләре үҙ-ара һөйләшеп килешеү һылтауы

менән башҡорттоң ил ағаларын саҡырып килтереп, уртаҡ тел табыу урынына көслөк менән уларҙың ауыҙына ыулы урыҫ зәхмәтен – араҡы ҡойоп, утлы тәмәке торонбашы тығып язалап үлтергәндәр; әле илебеҙҙе баҫҡан араҡы һәм тәмәке, наркотик касафаты тап ана шунан башлана…

Дөрөҫ, дүрт быуаттан ашыу «аҡ батша»ға «ызнакум»лыҡ шауҡымында ла ғәзиз бабалар зәхмәткә бирелмәне, бирешмәне, сөнки Ислам нуры тулышҡан күңелдәре – саф, бөгөлмәҫ һәм һындырылмаҫ Урал рухы – ныҡ ине. Әммә «аҡ батша» быуаттар буйына эшләп бөтөрмәгәнде илле-етмеш йыл эсендә «ҡыҙыл батша» еренә еткереп үтәне: манараларын ауҙарған, түшенә ҡыҙыл киҙеү таҡҡан ябай башҡорт изге Ҡөрьән битен йыртып тәмәке урап тартты, ғаиләһе күҙ терәп торған һуңғы «байлығын» -- самауырын һатып эсте, сөнки илде тотоп торған аҙаҡҡы ил ағаларын йә атып, йә тонсоҡтороп бөтөргәйнеләр…

…Милләтебеҙҙең төп нигеҙ таштарының береһе Бөрйәндә салдарҙан-сал Ғәлиәкбәр ауылы бар, уҡымышлыларҙың уҡымышлыһы Сәғитовтар нәҫеле бар. Тап шуларҙың бөгөнгө аҫылбикәләренең береһе – ауыл мәктәбе уҡытыусыһы Көнһылыу Зәки ҡыҙы Ҡотлобаева менән нәҡ шул бабалар хаҡында интернет аша моңһоуланып һөйләшеп ултырабыҙ… Миңә ҡалһа, яҙғы байрам хисе менән башланһа ла, серҙәштәрҙең иғтибарына лайыҡлы етди диалог килеп тыуҙы.

Йыһат. Көнһылыуҡай-һылыуҡай, йылы һүҙең, изге теләккәйең менән мине шатландырғаның кеүек, ошо Көләс Яҙ байрамы үҙеңә лә сағыу нурлы ҡыуаныстар, ғаилә именлеге, яңы уңыштар килтерһен!

Көнһылыу. Рәхмәт! Ошондай олуғ ағайҙан ҡотлау һүҙҙәрен ишетеү -- минең өсөн ҙур мәртәбә! Төшкә лә инмәгән бәхетле мәл! Йөрәк майҡайҙары һыҙыла, Ил Ағаларының ишек төбөндә ҡалып, түрҙә ятбауырҙар ултырыуына. Ваҡыт еле ҡомон осороп, аҫыл таштарын өҫкә сығарыр ҙа ул бер саҡ, тик йәл -- беҙ генә булалмабыҙ! Ә шулай ҙа, һатылмаҫ, тамаҡҡа алданмаҫ кешеләрҙең илдә барлығы йәшәйеште мәғәнәле итә. Рәхмәт Хоҙай Тәғәләгә – һеҙҙең кеүектәр булғанға һәм шундай булғанға. Мәшһүрҙәрҙе замандаштары бер ҡасан да аңлап етмәгән. Сөнки, үҫешебеҙ буйынса уларҙан арттабыҙ. Бына миңә һорау бирҙеләр. Минең төшкә лә кермәгән әйбер: "Вы из рода Бурзян -- Ямаш, Мунаш, Янсары или Байсары?", -- тип. Яуап бирә алманым.

Йыһат. Оҙаҡ һәм бәхетле йәшә, Көнһылыу-һылыу! Бөрйән ырыуының ҡайһы араһынан икәнегеҙҙе ауыл ҡарыйҙары беләләр. Йәки <Азат Камалов, Фирюза Камалова. Атайсал. Уфа "Китап" 2001> тигән ифрат файҙалы китаптан ауылығыҙҙы тапһағыҙ, унда ниндәй ырыу һәм ара йәшәүе күрһәтелер. Байрам менән!

Көнһылыу. Ауылда ҡарыйҙар ғына түгел, ололар бөттө тиһәң дә була. Ҡартолатайымдың ғәрәп хәрефле яҙыуҙарын табып уҡытҡайным. Үҙен «ҡарый» тип яҙған. Шунда тәүгә осраттым ул һүҙҙе. Әле лә аңлап етмәйем мәғәнәһен Белгән генә кеше юҡ дәирәмдә. Тағы бер яҙмаһын соҡоп сығарҙым да, ултырам (атайым: "кәзә афишаға ҡараған һымаҡ" тип үртәлә ине былдай хәлгә), нимә икән тип. Бына уның ҡульяҙмаларынан өлгө:



Йыһат. Ҡарый — боронғо ҡарыһүҙҙәрҙе, тәүәрихтәрҙе төптән белеүсе аҡыллы ҡарт. Ҡомартҡы һүрәтләнмеш файлды асып ҡарамайынса уҡ сәмләнәм: ниндәй хәрефтәр менән, ҡулдан яҙылғанмы, әллә ташҡа баҫмамы, нисә битлек, нимә хаҡында икәнлеге билдәләме? Әгәр Өфөлә йәшәһәң, йәки юл төшһә, Башҡортостан диниә назаратына кереп (Чернышевский урамында), мөфтөй Нурмөхәммәт хәҙрәттән уҡыт. Мөһим ҡомартҡы булыуы бик ихтимал (ҡулыңдан ысҡындырма).

Көнһылыу. Ҡулдан яҙылған китапсыҡтар. Береһе -- солоҡ ҡорттарын һанап сыҡҡан, урындарын күрһәтеп. Уныһын Фәндәр академияһынан бер ҡыҙ үҙебеҙсә күсереп яҙып бирҙе.

Икенсеһен (әлегеһе) аҙаҡ таптым.Тик ҡартолатай репрессияға эләгеп (1930), унан һуң улын (1937) -- олатайымды халыҡ дошманы итеп, оя туҙған. Атайым ҡустылары менән беспризорник һымаҡ үҫкәндәр. Был әйберҙәр оләсәйемдә нисек ҡалғандыр, уны ФЗО-ға оҙатҡандар бит… Ҡол кеүек, ҡайҙа ҡыуалар -- шунда йөрөгән. Пенсия ала алманы: документтарҙа күренмәй ҡайҙа булғаны… Рәхмәт кәңәштәрегеҙгә! Рөхсәт итһәгеҙ, белмәгән ерҙәрҙә ярҙам һорармын әле. Мин бит биолог. Ҡан хәтере эшемде ташлатып, эҙләндертә башланы. Тик мин әле өйрәнсектә йөрөгән бала һымаҡ ҡына.

Йыһат. Тырышҡан — табыр, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр, тибеҙ; был һинең тәбиғи һәм изге ынтылыш, һылыу. Йәшәү билдәһе.

Көнһылыу. Уҡымышлы кешеләр шундай күп булған беҙҙә! Хатта ҡатын-ҡыҙҙар араһында ла. Әммә мәрхүмдәр инде. Һуңланым. Һис юғы мәғлүмәт йыйған булыр инем. Бер инәй пәхлевандар тураһында һөйләп маташҡайны. Шундай итеп бирелеп, ҡулға йәбешеп алып һөйләй. Мин башҡа һеңдереп өлгөрмәйем. Бер ни ҙә аңлай алманым. Үҙе һаңрау, ҡайтарып һорарға. Үлерен һиҙеп һөйләгән икән. 1983 ине.

Йыһат. Юғалтыу, юғалтыу... Океан уртаһындағы утрау кеүек, юғалтыуҙар илендә тороп ҡалдыҡ...

Көнһылыу. Юғалтыуҙарҙың ҡоласын аңлап та бөтәһе түгел. Яҙып алынғаны тамсы ғына. Оләсәйем йырлы-көйлө әкиәттәр һөйләр ине. Уларҙы күпме эҙләһәм

дә, юҡ китаптарҙа. Бәләкәй инем. Ел-ел, ел арбам, тип көйләгәненән башҡаһын йүнләп иҫләмәйем. Ә уның һеңлеһенең ире әкиәт йыраусы булған. Халыҡ күпләп барған ул йәшәгән кордонға әкиәт тыңлар өсөн. Оләсәйем һөйләгәндәр шунандыр, тим.

Йыһат. Һылыу, Бөрйәндең ҡайһы ауылынан һин?

Көнһылыу. Тыуған ауылым Ғәлиәкбәр. Әле Байназарҙа йәшәйем. Ғәлиәкбәр элек оло юл эсендә ятҡан. Екатерина юлы аша Стәрлетамаҡка үткән ул юл. Күпләп Әхмәтша хәҙрәттең Ҡөҙән мәҙрәсәһендә уҡығандар. Унан Стәрлегә, Өфөгә киткәндәр. Оләсәйем ниңәлер күп итеп Ғәлиә мәҙрәсәһен һөйләне. Ә мин уның һөйләгәнен иҫкелек ҡалдығына һанап, ҡолаҡ һыртынан үткәрә инем. Мәҙрәсәләрҙең төрлө кимәлдәге уҡыу йорттары икәнлеге башыма барып етмәгән…

Атайым яғынан оләсәйемдең ҡартатаһы шәйех булған -- Ғәйшә-Фәттәх-Абдрахман-Әбделғәни Әбдрахимов (ҡәбере Иҫке-Собханғолда. Яҙыулы ташты ҡырҙан килгән кеше ҡуйып киткән, бергә уҡыған булғандар):




Ул, оләсәйем, тик туғандарын һөйләргә ҡурҡты. Сөнки, ҡайныһы (1930 -- ҡарый тигәне), ире (1937) -- сәйәси яҡтан, атаһы (1929) мулла һәм бай итеп репрессияға эләккән.Үҙен ылауға ебәргәндәр, унан ФЗО-ға. Тороп ҡалған өс ул, әсәһе тере икәнен дә белмәй, беспризорник булып үҫкәндәр. Шулай ҙа уҡып сыға алғандар, матур йәшәнеләр.

Әле шәжәрә менән булашам да әллә күпме кешеләр менән аралашам. Совет заманында беҙҙең районды төпкөл итеп, наҙанлыҡҡа тиңләйҙәр ине был хәлде. Ләкин кемгә бәрелмәйем, зат-ырыуҙары зыялы кешеләр иҫ китмәле күп булған. Тик төбө-тамырҙары ҡоротолған. Ағай, күҙ йәшеһеҙ ҙә илап була икән… Тик ул эстә күл һымаҡ йыйыла ла йыйыла… Нисек һыя тиһең?! Цивилизация -- ул таш йорт, туҡ тамаҡ, ялтырап торған унитаз тигән төшөнсә ялмап алған илде. Рух, аң-белем кимәлендә ни тиклем түбән төшкәнебеҙҙе аңларҙан сикһеҙ йыраҡбыҙ. Айырым шәхестәрҙән башҡа. Улар тауышы беҙҙең күн ҡолаҡтарға -- пустой глас в пустыне…

Йыһат. Эйе, шулай, ләкин уяна һәм уйлана башлауҙар ҙа күренә. Ә күпселек -- эш урынымды, икмәгемде юғалтмайым, тип ҡалтыранып тора, уларҙы ғәйепләү ҙә ҡыйын, сөнки система шундай аянысла хәлгә төшөргән... Асыҡ һәм йәшерен репрессиялар... һ.б., һ.б... Әммә киләсәк яҡты!

Көнһылыу. Йыһат ағай, мин һалған ошо файлдарҙағы тамғаларҙың бөтөһөн бергә бер дәфтәргә күсергән кемдер. Сама менән Арҡайым асылғанғаса. Совет заманының дәфтәре былай. Ниңә Аркайым знагы былар менән бер ҡатарҙан төшөрөлгән икән? Электән белгәнме башҡорт ҡоролманың булғанын һәм планын?! Ҡайҙан күсерҙе икән ул кеше? Был дәфтәр -- боронғоса уҡымышлы апайҙың аласығынан. Ул күптән мәрхүм инде. Ҡыҙы һөйләүенсә, фарсы, ғәрәп телендәге китаптарҙы иркен уҡыған. Өс төрлө аттар булған башҡортта, тип һөйләгән. Хәйер, файлдарҙы асып ҡарарһығыҙ.

Йыһат. Ҡараным. Уйландыра торған һүрәттәр был, Көнһылыу-һылыу, үҙемә күсереп алам. Төп нөсхәне (һәм, ғөмүмән, ҡулъяҙмаларҙы) ныҡ һаҡлағыҙ, теләһә кем тәләфләмәһен. Ул совет осоро дәфтәренең тышлығында ташҡа баҫылған датаһы бармы икән, ныҡлап ҡара әле? Яҙмаларҙың йыйыныһы нисә бит тәшкил итә, нindәй хәрефтәр (ғәрәп, латин, кириллица) ҡулланылған?

Көнһылыу. Знак булған биттәр шулар инде. Тамамланмағанға оҡшай. Копияларҙы Фәндәр акдемияһына ебәргәйнем. Иждиһат итмәнеләр.

Йыһат. Башҡорт "ғалим"дарынан башҡаһын көтөп булмай... Һылыу, ул мәрхүмә (урыны ожмахта булһын!) уҡымышлы апайҙың, уның ҡыҙының фамилияһын, исемен, атаһының исемен миңә хәбәр итергә тырыш, йәме?!

Көнһылыу. Ул апай күсеп ҡайтты. Бер аҙ диктофонға яҙҙырҙым. Был знактар тураһында "с пристрастием" допрос алып ҡараным. Бер ни ҙә әйтәлмәне. Шулай ҙа, асылдырып һөйләтһәң, хикмәте байтаҡ. Дәрт әйтеү була торғайны, тип һөйләй. Аңлап етмәнем. Мөнәжәт әйтеүҙе һөйләйме? Шулай ҙа бер күплет булды һөйләткәнем. Ебәрә алмайым һеҙгә. Диктофоным ябай, тыңлап ҡына була.

Өйгә саҡырып һөйләшергә уй бар. Комп-ға һеб-камера ҡуйҙырғанмын. Әле иҫәндәрҙән нимәлер бөртөкләп яҙҙырып ҡалырға тырышам. Ҡыҙым ғаиләһе менән Өфөлә. Бында эш юҡ. Ирем мәрхүм инде күптән. Нигеҙ ҡоротмау үҙемә ҡалды. Донья ебәрмәй тота, донья ҡыҙырып йөрөп уйлағандарҙы эшләргә…

Уҡымышлы апай тигәнем -- Йәнсурина Фатима Мөхәммәтзариф ҡыҙы (1898-1972), Бөрйән районы Нәби ауылында тыуған, Байназар килене.

Йыһат. Һылыу, "олатай"ың — әсәйеңдеңме, әллә атайыңдыңмы атаһы? "Оләсәй"ең — әсәйеңдеңме, әллә атайыңдыңмы әсәһе? Күсеп ҡайтҡан апайыңдың ФИО? Дәфтәр хужаһын, нисәнсе йылдарҙа йәшәүен һәм дәфтәрҙе ҡулланыуын белмәйме?

Көнһылыу. Күсеп ҡайтҡан апай Алтынбаева Әсмә Ғыйбатулла ҡыҙы. Был дәфтәр төп йорттарында һаҡланған. Ул урында ағаһы Ғизетдин йәшәй. Әсмәнең дәфтәре булырға тейеш тип биргәйне, Әсмә апай, мин яҙманым, ти. Ул өйҙә ҡулдан яҙыуҙар күп булған. Тик туҙып, юғалып бәткән. Аласыҡ башынан китаптар биргәйнеләр, ныҡ сереп, йәбешеп бөткәстәре, нишләтергә белмәй йөрөй инем. Йәй Фәндәр Академияһынан Кулбердина Зәлифә (әхирәтемдең ҡыҙы) килгәйне. Шул ҡыҙ алып китте. Әле кемдер эшләй уның өҫтөндә. Атайым Зәки, уның атаһы Хаммат, уның атаһы Сәғитов Әбделҡәйүм Сәғит-карый улы. Атаһының атын һатып уҡырға ҡасып киткән.

Дәфтәрҙең икенсеһе уҡылмаған.

Кем яҙғандыр 1944 тип тышлығына, был мәлдә олатайҙар һөргөндә мәрхүм булғандар. Улдарымы икән? Атайымдың әсәһендә һаҡланған. Ул үлгәс, беҙгә күскән. Ни ғиләләр, быйыл яҙғыһын тыуған йортҡа ҡайтып соҡсондом иҫке яҙыуҙар араһында. Атайымдың бай библиотекаһын ҡустым таратып бөткән. Ә бына үҙемдең күҙем ҡайҙа булған?!.

Тышлығындағы өҫтәлмә яҙыу Сагитова Ғилминур тип уҡыла һымаҡ (иң бәләкәй ҡыҙының исеме).

Йыһат. Эйе, Сәғитова Ғилминур. Моғайын, сәскәләрҙе лә ул төшөргәндер – ҡыҙҙар ҡулы.

Көнһылыу. Теге китап та шулай биҙәлгән.

Йыһат. Аңлашылды, һылыу, рәхмәт! Иртәгә тыуған көнөң икән: күңеле яҙғы көндәй яҡты һәм уйсан һылыу Көнһылыуҙы ошо танһыҡ Байрамы менән ҡотлайым, көндәренең бөтәһенең дә уға һаулыҡ, именлек, уңыштар алып килеүен теләйем!

Шуның менән диалог тамам.

Инде килеп Көнһылыуҙың бабалар дәфтәре битендәге серле һүрәттәрҙең серҙәрен сисеп бирәйем (тарих буйынса хеҙмәттәремдә күҙәтеп барған инсандарға ауырлыҡһыҙ аңлашылыр). Һәр төп нөсхә һүрәттең (А) уң яғына (йәки аҫтына), сағыштырып ҡарау өсөн, бынан меңәр йылдар элекке, йәки бөгөнгө фәнни нигеҙле оҡшаш һүрәттәр (Б) килтерелә. Боронғолар Ер һәм Күк йөҙөн офоҡ һыҙығы уратыуындағы түңәрәк итеп һүрәтләгән.

## Кешелек донъяһының тап беҙҙең ерҙә – Уралда яралыуын күрһәтеүсе һүрәт (А):



А. Уртала -- инә ҡарынында йомро йәҙрәләрҙән хасил әҙәм балаһы ралғыһы. Тирәһендә – бала булып етлегә башлаған алты башбаба ралғыһы. Алтай тауҙарының ҡаяһында Күктән төшкән алты башбаба (“алты ҡошан”) тураһында яҙыу бар (Әҫәрҙәремдең ун дүртенсе томындағы “Яҙыуҙар” бүлегендә).

Б. Бөгөнгө фәнни һүрәттәр – әҙәм балаһы ралғыһы һәм баланың етлегә башлауы.

 … 

А. Уралдағы дүрт даруғалы башҡорт еренә тыуырға тейешле дүрт башбаба (тирәһендә Күктәге ғаләм-галактикалар):



Ул дүрт башбабаны, имеш, ҡуҫкар (һарыҡ тәкәһе) ҡиәфәтендәге дрт дәдәм (тотем) ҡурсалаған, бына шул дүрт ҡуҫкар һүрәте:



А. Донъя океаны уртаһындағы һигеҙ даруғалы, һигеҙ ҡырлы ҡитға Тәүтөйәгебеҙ:



Б. Башҡорт милли биҙәктәрендәге дүрт ҡырлы һәм һигеҙ ҡырлы ҡитға Тәүтөйәгебеҙ:





А.Тәүтөйәктең Күк йөҙө әйләнәһе, уны ураткан ғаләм-галактикалар:



Б. Бик боронғо тарих китабынан һүрәт: Тәүтөйәктең дүрт даруғаһында баҫып торған башбабаларҙың елгә таралған сәстәре асаба-астаҡ (свастика) ишараты хасил итеп, бабаларыбыҙҙың дүртеһенең дә ***<u>арыуҙар – арийҙар икәнлеген</u>*** белдерә. Тирәләге Күк йөҙө түңәрәгендә ғаләм-галактикалар йөҙә:



А. Төп нөсхәләге дүрт даруғаның да башбабалары ***башҡорт-арыуҙар*** – ***арийҙар*** икәнлеген күрһәткән дүрт асаба-астаҡ – свастика символы:



Б. Бик боронғо тарих китаптарында ла -- ошондай уҡ асаба-астаҡтар (свастикалар). Түбәндәге һүрәттә урталағы асаба-астаҡлы түңәрәк – мәркәз ҡала Өфө, уның тирәһендә дүрт даруға башҡорт-арыуҙары (арийҙары) һәм уларҙың йәшәйешен тәьмин иткән көн- төн символдары:



Бөйөк Ватан һуғышына тиклемге 1940—1941 йылдар совет осоро мәктәп дәфтәренең, моғайын, боронғо бер фолианттан күсерелмеш уғата ғәжәйеберәк сәхифәһе – ер йөҙөндәге иң боронғо ҡала Арҡайымдың ҡоштар осор бейеклектән күренмеш схемаһы бар:



СССР ғалимдарының тар даирәһенә ул тик 1987 йылда ғына мәғлүм булып, киң йәмәғәтселеккә беренсе башлап 1988 йылда “Наука Урала” гәзитендә иғлан ителә, ә “Вокруг света” журналының 1989 йыл 3-сө һанында тарих фәндәре кандидаты Геннадий Здановичтың “За две тысячи лет до Трои” тигән мҡәләһе сал ҡала харабаларының самолеттан күренмеш схемаһы менән бергә (беренсе тапҡыр!) ташҡа баҫылып сыға, бына ул:



Ә бөрйән бабаларыбыҙ уны, күрәһегеҙ, СССР ғына түгел, хатта батша Рәсәйе лә булмаған сал-боронғо замандарҙа уҡ ҡош осар бейеклектән һүрәтләп алған…

Рәхмәт төшкөрө йәш ғалимә З.Ғ. Ҡолбирҙина һылыуыбыҙ Көһылыуға күсереп биргән ҡулъяҙманан күренеүенсә, ошо ҡиммәтле ҡомартҡыларҙы һаҡлаусы “*Абдулкәйүм ибн Сәгид Әл-Хәлиди эн ҡарийе Ғәлиәкбәр*” олатай үҙенең уландары менән мыжғыу күсле йөҙ баш солоҡ аҫыраған, йыл һайын кәмендә мең дә алты йөҙ килограмм балауыҙлы бал алып, тирә-яҡ ғәләмдең ауыҙын балға ҡандырған; солоҡ эшенең ҡандай ҙа ауырлығын, күпме оһоллоҡ, егәрлелек, дәрт талап иткәнен беләбеҙ. Бына шундай эшһөйәр һәм тарихтан тәрән мәғлүмәтле ҡарыйҙы һәм эшсән уландарын большевиктар йырткыстарса гулагка һөрөп язалап үлтергән… Әммә улар йөрөткән нур саткылары илгә һибелеп ҡалған – бына беҙҙең күңелдәрҙе яҡтырта һәм йылыта!

13.03.2014.

**Праздник Каргабуткахы (Грачей каша).** Этот священный праздник соблюдается у нас якобы со времен Великого Потопа. После долгих мытарств по всемирной водной стихии ковчег Ноя-пророка пристала к черной земной суше, разведанной черным Грачом Карга и названной “гора-Насар” (слово насар/ницир

является синонимом слова яман), то есть современная гора Яман-тау -- самая высокая вершина на Урале. Событие это воспето в шумерском эпосе:

У горы Ницир корабль остановился.
Гора Ницир корабль удержала, не дает
качаться.
Один день, два дня гора Ницир держит корабль, не дает качаться.
Три дня, четыре дня гора Ницир держит корабль, не дает качаться.
Пять и шесть гора Ницир держит корабль, не дает качаться.
При наступлении дня седьмого
Вынес голубя и отпустил я;
Отправившись, голубь назад вернулся:
Места не нашел, прилетел обратно.
Вынес ласточку и отпустил я;
Отправившись, ласточка назад вернулась:
Места не нашла, прилетела обратно.
Вынес ворона и отпустил я;
Ворон же, отправившись, спад воды увидел,
Не вернулся; каркает, ест и гадит.
Я вышел, на четыре стороны принес я жертву...

Значит, Каргабуткахы – праздник благодарного жертвоприношения священному Грачу, ошибочно переведенному в тексте как Ворон. Гора Ницир (на современном башкирском языке Насар) называется ее синонимом Яман (Яман-тау).

Пора уже, наконец, хотя бы нам самим осознать эти праздники исконно башкирскими, а не продолжать плести на хвосте у огузоязычных тюрков.

07.04.2011

## Төньяҡ, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары тарихынан сәхифә

Ошо йылдың 19 апрелендә зәңгәр экрандан "Башҡорттар" тапшырыуында Асҡын районының үҙемә фамилиялаш (Солтанов) уҙаманы шул төбәк башҡорт ауылдарының тарихын тәрәндән белеп һөйләне. Ҡаҙансы ауылы тураһында ул: "Сыңғыҙ-хан заманына барып тоташа", — тигән төплө фекер белдерҙе. Әгәр ундағы сураш, ҡаҙансы башҡорттарының һәм, ғөмүмән, байлар ырыуының, Үҫәргән ҡәбиләһенә ҡарағанлыҡтарын да төшөндөртһә, мәсьәлә тулыраҡ асыла төшөр ине. Үҫәргәндең Йәнсура район гәзите элекке "Октябрь байрағы"ның 1988 йыл 2 июль һанында (3-сө бит) йөҙйәшәр Ишбикә Ямғыршина инәйҙән алынған мәғлүмәт бар: "Беҙҙең ырыу Арал тигән диңгеҙ яғынан сыҡҡан. Башта Һамар яғына күскәндәр. Унда оҡшамағас, Уралға килгәндәр. Тәүҙә Ағиҙел буйына ултырғандар, унан Һаҡмар — Ҡаҫмарт буйҙарын һайлағандар. Беҙҙең бүреләр

араһының [Ағиҙел ярындағы] иҫке төйәгенә аҙаҡтан ҡала һалғандар. Бөрө тигән ҡала бар бит әле. Ысын исеме Бөрө түгел, Бүре ул. "Бүре"нән "Бөрө"гә әйләнгән". Боронғо урыҫ тарихсыларының аңлатмаһына тап килә: "Бирск" — башҡорттоң "Бюрусь" (Бүре-әсә) тигәне ул, мәғәнәһе "волчица". Үҫәргән "бүре"ләренең ҡасандыр Ағиҙел һәп Ыҡ буйҙарында ла йәшәгәнлеге сер түгел, ғилми яҡтан (Р.Г. Кузеев. Происхождение башкирского народа. М., 1974) нигеҙләнгән. Үҫәргән башҡорттары бүре, сураш, айыу араларын иң боронғолар тип һанай (110-сы бит). Түбәнге Ағиҙел һәм төньяҡ Башҡортостанда күҙәтелгән бүре, ҡаҙансы, туғыҙ, сураш аралары был яҡтарҙа үҫәргән башҡорттарының булыуын асыҡ күрһәтә (332-се бит). Байлар ҡәбиләһенең тамғаһы Үҫәргәндеке менән бер иш (324-се бит). Ғалим Үҫәргән ҡәбиләһенең Сураш ырыуы Бөгөлмә ҡалҡыулығынан Көньяҡ Уралға күсенеүендә икегә бүленеүен, бер өлөшө Байлар составында Ыҡ буйында ҡалыуын, бүтәндәренең көньяҡҡараҡ Һаҡмар буйына китеүен билдәләй (329-сы бит). Һөҙөмтәлә хәҙерге Йәнсура һәм Асҡын райондарында икешәр Сураш ауылы, Нуриман районында бер Сураш, Ҡара диңгеҙ буйында Сурож ҡалаһы бар. Ә хәҙерге Асҡын районындағы Ҡаҙансы ауылының йәшәй башлауы, ысынлап та, Сыңғыҙ-хан осоронан килә, сөнки уны боронғо үҫәргәндәрҙең, өҫтә әйтелгәнсә, еребеҙҙең төньяҡ төбәгендә нигеҙләнгән һәм Сыңғыҙ-ханды тәхеткә күтәрешеүҙә төп роль уйнаған Мөйтән-бейҙең ҡартатаһы (атаһының атаһы) Ҡаҙансы-бей төҙөгән ауыл, тип beләбеҙ. Дөрөҫләгес Шәжәрә: ...38. Баба Төкләҫ-бей. — 39. Тура бин Баба Төкләҫ. — 40. Ҡаҙансы бин Тура. — 41. Туҡсаба бин Ҡаҙансы. — 42. Мөйтән-бей бин Туҡсаба... (Йыһат Солтанов. Башҡорт батшалары. Өфө — 2007; 74-се бит).

20.04.2014.

## «Урал батыр» -- берҙән-бер!

Иншаллаһ, «Урал батыр» эпосының, донъябыҙға ғына түгел, донъяға танылыу даирәһе һаман киңәйә бара, был йәһәттән, күп төрлө башҡа саралар ҡатарында, «Ашҡаҙар» радиоканалында алып барылған аҙналыҡ «Был донъя» тапшырыуын тыңлаусылар көтөп алалыр, моғайын. Шәхсән үҙем, ҡәнәғәтлек кисереү менән бергә, күңелемде ҡырған ҡайһы бер мәлдәрҙе әйтеп үтергә булдым. Мәҫәлән, бөтәбеҙгә билдәле академик һәм фән докторҙарыбыҙ ҡатнашҡан 21 май 2014 йыл тапшырыуында Розалия һылыу Солтангәрәйеваның «ҡарыһүҙ»ҙе (боронғо һүҙ, ҡарый-карттар һөйләүе мәғәнәһендә) «ҡарһүҙ» (снег-слово) тип туҡыуы ҡолаҡты ярҙы. Әйткәндәй, был хаҡта күренекле ғалимдарыбыҙҙың байтағы менән фекер алышҡаным бар, улар ҙа быға аптырауын һәм хилафлыҡтың башҡалар ауыҙынан да ҡабатланыуына ғәжәпләнеүен белдерҙе.

Әхмәт Сөләймәнов уҙаманыбыҙҙың былтыр «Ватандаш» журналында «Урал батыр» эпосын үҙбелдегенсә ямаулыҡлап «ҙурайтырға» ынтылыуының касафатын сайтымда аңлатырға тырышҡайным да ул («Урал батыр» ямаулыҡҡа мохтажмы?»), әммә бер үк балыҡ башы йәнә лә йәнгә тейҙе: белә-тора мифология

һәм фольклорҙы тиңләштереп, «Олонхо», «Манас» һ.б. урта быуат фольклорҙарын, ҡайһы бер төрки халыҡтарының остоҡ-мостоҡ миф ярсыҡтарын «Урал батыр»ға йәнәшә, хата өҫтөнөрәк ҡуйып «өйрәнергә» һәм шулар өлгөһөндә бөйөк эпосыбыҙҙы ҙурайтып-ямап-һиплəп, йәғни һыу ҡушып шыйығайтып, бутҡанан өйрә яһарға ныҡ ашҡына… Ә бит «Урал батыр» эпосы бөгөнгө көндә бөтөн кешелек донъяһына – берҙән-бер, донъяла уның тиңе юҡ! Тапшырыуҙа өсөнсө бер абруйлыбыҙ Фәнзил Санъяров та был хаҡта тос фекер әйтте, ғалимдың емешле эшләүе һиҙелеп тора.

Баш эймәбеҙ башы кәйелгәнгә —
Күнеккәнбеҙ үрҙән ҡарарға!
Кәрәк икән -- яраһындар беҙгә,
Кәрәк түгел беҙгә — ярарға.

Донъя яратылған замандарҙан
Ярып килә ҡарҙы халҡыбыҙ.
Ҡарыларҙың изге доғаларын
Боҙмай ҡабатларға хаҡлыбыҙ!

21.05.2014.

## Эйфория в объятиях Китая

28 мая 2014 года на экранах Башкирского спутникового телевидения проходила в атмосфере высокой эйфории очередная передача «Телеүҙәк» (Телецентр) на башкирском языке, посвященная визиту Президента В.В. Путина «в дружественный Китай», в хвосте представительной свиты которого окзался, к нашей общей радости, и наш «главарь» Р.З. Хамитов. В оживленной дискуссии принимали участие столичные политологи и ученые, преподаватели вузов и студенты-китаисты (также натуральные китайцы). Чувствовалось, что все мы россияне, в том числе башкортостанцы, в данный момент переживаем, назло нашим западным и заокеанским недругам, головокружительный исторический взлет – найден чрезвычайно удачный между великой Россией и с великим Китаем плодотворный общий язык – подписаны весьма выгодные для нас многочисленные далеко идущие соглашения. И вот какой исторический момент: сам наш Хамитов собственноручно подписал важный документ, предусматривающий щедрой инвестиций башкирской земле и, по-видимому, дорогими китайскими друзьями будет возможно построен около самой столицы, как и печально известный «Кроншпан», какой-то гигант-завод (может быть, тоже черный «кот в мешке»)… Но дело не только в этом. Мне кажется, во всеобщей эйфории, охватывающей республику, начинаем мы забывать (или хотим этого) о недавнем историческом прошлом. Как известно, Иосиф Сталин и Мао Цзедунь были тогда неразлучными братьями, а наш М.М. Шаймуратов по приказу вождя фактически создал для Мао Китайскую Народно-Освободительную Армию,

обеспечившей разгром Гоминданя и японских самураев с последующим провозглашением Китайской Народной Республики; была тогда подписана «Китайско-Советская дружба на десять тысячи лет». Однако уже через каких нибудь двух десятков лет неожиданно во всю мощь прогремела советско-китайская пограничная война из-за ничтожного клочка «исконно китайской» земли – Даманский остров на Уссури, но маленькая война эта могла превратиться в большую, а возможно и мировую…

Но нет худа без добра: мозги наши хотя бы на короткий миг проветрились от тогдашней эйфории – советским специалистам было задано досканально изучать и осветить китайскую историю, следствием чего в средствах массовой информации последующих лет появились обширные разоблачительные статьи корифеев науки, например, В. Кривцова «Огонь уже обжигает ресницы», В. Мясникова «Пекин требует территорий», Б.П. Гуревича «Мифы Чжунханьхая», С. Топорцева «Фальшивка» («Литературная газета» от 16 августа и 13 сентября 1978 г., 11 апреля и 15 августа 1979 г.) и другие. Из этих мы, массовые читатели, почерпнули нимало полезных для наших затуманенных идеологическими хламами мозгов сведений о подлинной «китайской дружбе на десять тысячи лет», думаю, повтор их будет полезным и для нынешних горячих патриотов, для чего приведу здесь некоторые цитаты из названных публикаций.

«Рассуждая над смыслом китайской истории, Лян Цичао пришел в 1922 году к следующему выводу: «Есть великое дело, которому наши предки непрерывно служили пять тысяч лет. Что это за дело? Я называю его расширением китайской нации. Изначально наша китайская нация представляла собой всего лишь несколько небольших племен, обосновавшихся в Шаньдуне и Хэнани. В течение тысяч лет они понемногу росли, росли и выросли в великую нацию, создавшую огромное и величественное государство». Да, согласен я с этим утверждением китайского ученого, но историк чуть-чуть погрешил в одном – постеснялся назвать имя изначального великого собирателя разрозненных и враждующихся между собой мелких ханьских (подлинно китайских) княжеств в один твердый кулак -- государство и положивщего начало китайской «вечной империи» -- имя «северного варвара цинь опоясившегося бечевкой» (циньского т.е. усарганского башкира) Ши Хуанди… Но продолжим цитирование знатока китайской истории Лян Цичао: «Она (поднебесная империя. – З.С.) росла двумя путями: первый путь — это ассимиляция бесчисленных народностей внутри и за пределами наших границ. Второй путь — это переселение людей нашей нации к границам и расширение территорий... История пять тысяч лет шла этими путями» (В. Кривцов). Короче говоря, «Владыка Поднебесной считал себя верховным правителем всего мира… Считалось: нет земли, которая бы не принадлежала императору: тот, кто ест плоды этой земли, -- подданный императора» (В.Я. Сидихменов. Китай: страницы прошлого. Издательство «Наука», М. 1978, стр. 198, 226).

Скажу честно: такие изощренные приемы захвата чужих земель и проникновения в другие этносы не может не напоминать изветные замашки «нашей» же петровско-российской империи, более молодой в сравнении с

китайской, но прыткой… Для более убедительности приведу редко публикуемый документ – «Завещание императора Петра I»:

***Текст завещания Петра Великого опубликованный в книге Ф. Гайярде.***

«Во имя святой и нераздельной Троицы, мы, Петр, император и самодержец всероссийский, всем нашим потомкам и преемникам на престоле и правительству русской нации.

I. Поддерживать русский народ в состоянии непрерывной войны, чтобы солдат был закален в бою и не знал отдыха: оставлять его в покое только для улучшения финансов государства, для переустройства армии и для того, чтобы выждать удобное для нападения время. Таким образом, пользоваться миром для войны и войною для мира в интересах расширения пределов и возрастающего благоденствия России.

II. Вызывать всевозможными средствами из наиболее просвещенных стран военачальников во время войны и ученых во время мира для того, чтобы русский народ мог воспользоваться выгодами других стран, ничего не теряя из своих собственных.

III. При всяком случае вмешиваться в дела и распри Европы, особенно Германии, которая, как ближайшая, представляет более непосредственный интерес.

IV. Разделять Польшу, поддерживая в ней смуты и постоянные раздоры, сильных привлекать на свою сторону золотом, влиять на сеймы, подкупать их для того, чтобы иметь влияние на выборы королей, проводить на этих выборах своих сторонников, оказывать им покровительство, вводить туда русские войска и временно оставлять их там, пока не представится случая оставить их там окончательно. Если же соседние государства станут создавать затруднения, то их успокаивать временным раздроблением страны, пока нельзя будет отобрать назад то, что было им дано.

V. Делать возможно большие захваты у Швеции и искусно вызывать с ее стороны нападения, абы иметь предлог к ее покорению. Для этого изолировать ее от Дании и Данию от Швеции и заботливо поддерживать между ними соперничество.

VI. В супруги к русским великим князьям избирать германских принцесс для того, чтобы умножать родственные союзы, сближать интересы и, увеличивая в Германии наше влияние, тем самым привязать ее к нашему делу.

VII. Преимущественно добиваться союза с Англией в видах торговли, ибо это именно та держава, которая для своего флота наиболее нуждается в нас и которая может быть наиболее полезною для нашего флота. Обменивать наш лес и другие произведения на ее золото и установить между ею и нашими торговцами и моряками постоянные сношения, которые приучат наших к торговле и мореплаванию.

VIII. Неустанно расширять свои пределы к северу и к югу, вдоль Черного моря.

IX. Возможно ближе придвигаться к Константинополю и Индии, обладающий ими будет обладателем мира. С этой целью возбуждать постоянные

войны то против турок, то против персов, основывать верфи на Черном море, мало-помалу овладевать как этим морем, так и Балтийским, ибо то и другое необходимо для успеха плана - устроить падение Персии, проникнуть до Персидского залива, восстановить, если возможно, древнюю торговлю Леванта через Сирию и достигнуть Индии, как мирового складочного пункта. По овладении ею можно обойтись и без английского золота.

X. Заискивать и старательно поддерживать союз с Австрией, поощрять для виду ее замыслы о будущем господстве над Германией а втайне возбуждать против нее недоброжелательство в государях.

Стараться, чтобы те или другие обращались за помощью к России, и установить над страною нечто вроде покровительства с целью подготовления будущего господства над нею.

XI. Заинтересовать Австрийский дом в изгнании турок из Европы, а по овладении Константинополем нейтрализовать его зависть, или возбудив против него войну, или дав ему часть из завоеванного, с тем чтобы позднее отобрать это назад.

XII. Привлечь на свою сторону и соединить вокруг себя всех грековосточных отщепенцев или схизматиков, распространенных в Венгрии, Турции и южной Польше, сделать их средоточением и опорою и предуготовить всеобщее преобладание над ними посредством установления как бы духовного главенства: будет столько друзей, сколько окажется у каждого врагов.

XIII. Когда Швеция будет раздроблена, Персия побеждена, Польша похоронена, Турция завоевана, армии соединены, Черное и Балтийской моря охраняемы нашими кораблями, тогда надлежит под великою тайною предложить сперва Версальскому договору, а потом Венскому, разделить власть над Вселенною. Если который-либо из них, обольщаемый честолюбием и самолюбием, примет это предложение — что неминуемо и случится, - то употребить его на погибель другого, а потом уничтожить и уцелевшего, начав с ним борьбу, в исходе которой сомневаться уже будет нельзя, ибо Россия в то время уже будет обладать всем Востоком и большей частью Европы.

XIV. Если паче чаяния тот и другой откажутся от предложения России, то надлежит искусно возжечь между ними распрю и истощить их во взаимной борьбе. Тогда Россия, воспользовавшись решительной минутою, должна устремить свои заранее собранные войска на Германию и одновременно с этим выслать два значительных флота, один из Азовского моря, другой из Архангельска, с своими азиатскими ордами, под прикрытием вооруженных флотов Черноморского и Балтийского. Выйдя в Средиземное море и океан, они наводнят с одной стороны Францию, с другой Германию, и когда обе эти страны будут побеждены, то остальная Европа уже легко и без всякого сопротивления попадет под него.

Так можно и должно покорить Европу».

Перевод с французского В. Зернова

Правда, наша русская элита со всей силой старается открещиваться от этого неприятного документа, называя его фальшивкой, но однако вся история деяний российских императоров сходятся с этим.

«В 1949 году в Китае снова возникло единое независимое государство — КНР, казалось бы, вставшее на путь дружбы и сотрудничества со своими соседями. Но не минуло и десяти лет, как прошлое, страшная консервативная сила традиции взяли верх, и снова — в который раз! — начала повторяться историческая драма. Разумеетеся, китайский экспансионизм был уже одет в костюмы XX века. «История отношений Китая с Россией, — заявляется на страницах пекинских изданий,— на деле есть злодейская история агрессии царской России в Китае, она также является историей борьбы китайского народа против агрессии царской России». И вот откровение самого «великого кормчего» Мао Цзэдуна: «Говорят, Китай миролюбив. Неправда. На самом деле Китай любит подраться» (В. Кривцов). «Мы должны покорить земной шар», -- заявил в 1959 году Мао Цзэдун. К этим экспансионистским планам пристегиваются нынешние «исторические» изыскания… В 1973 году чанкайшисты издали на Тайване книжонку некоего Чжана Цзянь-хуа, не маскировавшегося, в отличие от его пекинских коллег, под «марксиста». Но изъясняется он тем же языком и напечатал опус, проникнутый тем же антисоветским духом. Пытаясь обосновать шовинистские притязания на советскую территорию, он утверждает, будто слово «Сибирь» происходит от «сяньби» — наименования древнейших аборигенов Китая, «в каменном веке распространившихся в бассейн Енисея» (С. Топорцев). Кстати, должен я, автор данной статьи, заметить: названные китайским историком эти «древнейшие аборигены Сибири», которых даже русские авторы обзывают чуть-ли не монголами, фактически являлись прямыми предками нынешних российских тюрков – усарганской племени башкир; а этноним «сяньби» представляет из себя искаженный китайцами «усень-би» (варианты «усер-би», «усерган-би»; «би» значит вождь племени, князь). Подобное «присвоение» башкирского наследия идет полным ходом, к сожалению, не только в Китае, но и в родной для нас современной демократической России, примером могут служить великодержавный ажиотаж вокруг знаменитого городища Аркаима и вообще первобытного Уральского ареала. Как известно, древнебашкирская земля Скифия представляла из себя неразрывные две половины единого целого: Внутренний Башкорт – теоритически от Урала до Атлантического океана (коренное племя Усарган-Канлы) и Внешний Башкорт от Урала до Тихого океана (коренное племя Бажанак-Башкорт). Усарганское племя состояло из двух ответвлений: 1) ас-ар – что означает женщина (ас) довлеющая над мужчиной (ар) и 2) ар-ас -- мужчина (ар) довлеющий над женщиной (ас). С течением времени племя это умножилось до предела и произошло отделение ответвлений в качестве уже самостоятельных племен: 1) ас-ар – асар, усар (Усарган) и 2) ар-ас – арас, урыс (Рус). Но вот опять наши же почтенные ученые мужи, не разобравшись в сути вопроса, встали на путь отрицания башкир как аборигенов Урало-Алтайского ареала, подставляя вместо их исключительно одних русских, что показывает, как лакмусная бумажка,

нерущимость империалистических устремлений наших «старших братьев», завещанные им еще первым императором Петром.

Как пишет Б.П. Гуревич, «Не так давно в Пекине вышел школьный учебник по истории древнего и средневекового Китая, на страницах которого была, между прочим, помещена воспроизводимая нами карта-схема. Она должна дать представление учащимся средней школы о границах Танской империи (618—907 гг.) в Центральной Азии. «Пределы Танского государства были весьма обширными, — восторженно вещают авторы учебника. — На востоке они доходили до океана, на западе перевалили за озеро Балхаш, на северо-востоке распространялись до горного хребта Внешний Хинган (Становой хребет.—Б. Г.), расположенного к северу от Амура, на юге — до островов Южных морей». Это не первое изыскание такого рода. Подобное представление об «исторических» рубежах средневекового Китая, отражающее взгляды самых махровых великоханьских шовинистов, не раз встречалось в сочинениях некоторых китайских историков, в официальных заявлениях хозяев дворца Чжуннаньхай. Как известно, в 1964 году появился пресловутый «реестр» Мао Цзэдуна, согласно которому объем территориальных притязаний пекинских правителей к Советскому Союзу составил более чем полторы миллиона квадратных километров, включая сюда, помимо Советского Дальнего Востока, почти полмиллиона квадратных километров земель Казахстана и Средней Азии.




Эта карта помещена на 129-й странице пекинского учебника «История Китая». Пределы Китая, как уверяет помещенный рядом текст, «были весьма обширны», даже «невиданно обширны» — вся незаштрихованная территория принадлежала, дескать, ему. Достаточно сравнить эту фальшивку с любой географической картой, чтобы составить себе представление о том, на какие именно советские земли претендуют великоханьские шовинисты.

Они даже не прочь включить в «исторические границы» Китая всю Южную Сибирь, обширные районы Восточной Сбири и Алтай! Уже узаконены такие недвусмысленные выражения, как, например, «наше озеро Балхаш», «наше озеро Тэмурту» (Иссык Куль. — Б. Г.), «наше озеро Зайсан», «наша река Ну» Здесь же подвергается сомнению «законность» сооружения в свое время горрда Верного (ныне Алма-Ата), Пишпека (ныне гор. Фрунзе), Токмака, Копала и других. Восточный Памир, входящий в состав Горно-Бадахшанской автономной области Таджикской ССР, является, как считает тот же журнал «Лиши яньцзю», всего лишь «западной частью Синьцзяна»…

Во главу угла своей позиции Хуа Ци-юнь положил идею необходимости «возвращения» Китаю якобы «утраченных» им земель. «Старые границы Китая» заключали в себе, по лживому утверждению автора, огромные территории, пролегавшие между Камчатской и Сингапуром, озером Балхаш и Филиппинами. Корея, Бирма, Вьетнам, Непал, Бутан рассматривались *как* «уступленные» или «даннические государства», находившиеся в пределах «старых границ» Китая. Значительные участки советских дальневосточных земель с островом Сахалин, часть Казахстана и среднеазиатских республик СССР, части афганской и индийской территорий, архипелаг Рюкю также беззастенчиво включались в «потери» Китая. Монгольская Народная Республика вообще игнорировалась как суверенное государство и закрашивалась в один цвет с Китаем. Морские рубежи страны были «отодвинуты» автором за сотни и тысячи миль от материка, охватывая острова Восточно-Китайского и Южно-Китайского морей. Специальная карта «иллюстрировала» эту намечаемую программу территориальной экспансии…»

К сожалению, вот так обстоят дела с китайской «вечной дружбой». Китай берет тихим сапом: теперь уже для Дальнего Востока и Сибири этнический китаец стал повседневным привычным обывателем, они начинают тихо осваивать и Урал, Поволжье, тихо шастают уже и у преддверьях Кремля… Мне кажется, Старушка-История сама предупреждает Матушку-Россию: остерегайся очутиться в тесных объятиях Поднебесного – можешь тотчас оказаться в пасти Дракона! С Востоком дружи, но не враждуй с Западом!

14.06.2014.

## Бик һирәк һөнәр эйәһе

Ауыл халҡына һәм медицина, ветеринария белгестәренә яҡшы таныш та, ҡәҙерле лә ҡайн (тауар) дегете тураһында был һүҙем. Борон-борондан тормошобоҙҙа ныҡлы урынын биләгән, быуындан-быуынға бәҫен юғалтмай һаҡлаған аҫыл матдә ошо көндәрҙә бөтә Рәсәйҙең ни бары ике төбәгендә генә етештерелә, шул икәүҙең береһе һәм иң боронғоһо – республикабыҙҙың Белорет районында. Үҙ һөнәренә мөкиббән-тоғро ҡалған, уны үлтертмәй йәшәткән бишенсе быуын башҡорттоң (үкенескә күрә, исемен онотҡанмын) ауыр эшен, көсөргәнешле көнкүрешен телевизорҙан ҡарағас, онота алмайынса уйланып

йөрөйөм. Тырыш уҙаман ошо 21-се быуатҡа хас булмаған, баштан-аяҡ ҡара көс түгеүгә яраштырылған ифрат примитив ҡоролмала өнһөҙ-тынһыҙ, бер туҡтауһыҙ хеҙмәтен дауам итә, танау буйын ярып кермәле әскелтем-сөскөлтөм хуш еҫ аңҡытҡан, халыҡ һаулығын һаҡламаҡҡа үтә зарур иң арзанлы ҡайын дегетен ҡайната, үҙ ҡулы менән шешәләргә тултырып оҙата... Уның фиҙакәрлеген күреп һоҡланыусылар араһында юғарылыҡлы дәүләт эшмәкәрҙәре, зирәк аңлы инженерҙар бармы икән? Әгәр булһа, бына мөҡәддәс бурыс: берҙән-бер (уникаль) һөнәрмәнде, һөнәре ошо бишенсе быуында өҙөлөп ҡалмаһын өсөн, дәүләт иғтибарына алырға һәм бюджеттан тейешле сарыф бүлергә; һөҙөмтәлә ата-баба ҡоролмаһын әлеге хәлендәге ер аҫтынан сығарып, заманса бина эсендәге инженер аппараты төҙөп бирергә ине (хата «ноу-хоу» самогон аппараты ла эшләгәндәр бит!). Тауарының үҙкимммәте йәһәтенән конкурентына ал бирмәгән һөнәрмәнебеҙ игелекле эшен яҡшыртыуға тотонолған кескәй генә сығымдарҙы оҙаҡламай ҡаплатыр.

18.09.2014.

## Һуңламай ҡалған һуңлау

2012 йылда бөтөн илебеҙ менән 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығын гөрләтеп үткәреү күптәребеҙҙең иҫендәлер, әлбиттә. Мин дә түҙә алманым: бөйөк яуҙа башҡорт халҡының уртаҡ әсәй-Рәсәй өсөн йәнен аямай күрһәткән батырлығы, фиҙакәрлеге тураһында «1812 йылғы Ватан һуғышында 9-сы кантон (Үҫәргән) атлы полктары» тигән хеҙмәтемде яҙып, ул саҡта миңә мөхәррирҙәре ҡыйыуыраҡ һәм киң күңелле һымаҡ тойолған «Киске Өфө» гәзитенә тапшырҙым, баш мхәррир урынбаҫарынан яҡшы фекер ҙә алдым, ләкин ҡульяҙмам ни сәбәптәндер «туңып» ҡалды (хәҙер уны интернеттағы сайтымдан һәм теркәлеш [ВК] битемдәге «документы» бүлегенән асып уҡырға була). Заманында ҡәләмдәшем Фәрҙәнә һылыу Аҡбулатова радиостудияға саҡырып, эфирҙа юл асырға тырышып ҡараһа ла, йәнә килеп сыҡманы... Шунда һөйләйәсәгемде пунктлап ҡағыҙға теркәгәнмен, әле күҙемә салынып, мәңгелек теманы серҙәштәрем менән уртаҡлашырға һис тә һуң түгел, тип уйланым.

20.10.2014.

## 1812 – 14 йй. Ватан һуғышында башҡорттар

1. Юҡҡа ғына Ватан һуғышы тип аталмай, ә башҡорт яугирҙәре «төньяҡ амурҙары» тип данланмай.

2. Әҙип булараҡ, әҙәбиәт күҙлегенән ҡарайым: батшалыҡ дәүерендә лә, совет осоронда ла башҡорт әҙиптәре ниңә шул хаҡта яҙмаған, үле тынлыҡ һаҡлаған?

3. Төп сәбәбе – Рәсәй империяһында башҡорт тарихын тыйыу, йәшереү (меҫкен булып ҡалһындар).

4. Гитлер фашизмы ғәскәрҙәре ҡара яу булып СССР-ға ябырылғас ҡына, ыштан төбөнә шәре кергән Сталин режимы башҡорт атлы полктары тураһында тарихсыларға яҙырға рөхсәт итә һәм 1944 йылда ғына Әбүбәкер Усмановтың «Башкирские конники в Отечественной войне 1812 года» тигән хеҙмәте донъя күрә.

5. 70-се йылдарҙа мин Бородино ҡырында булғанда унда һуғышҡан башҡорттар тураһында бер нимә лә әйтелмәүенән әсенеп, был теманы «Ядкәр» тигән романымдың бер бүлегендә күтәрҙем (ул заманда Я. Хамматов ҡәләме лә был теманы ҡуҙғатҡаны юҡ инее).

6. Шунан һуң Янибай ағай Хамматовтың «Төньяҡ амурҙары» романы беҙ эшләйһе эштәрҙең яҡшы башланғысы булды.

7. Әммә башҡорттоң үҙенең Лев Толстойы, «Война и мир» кимәлендәге киң планлы, тәрән йөкмәткеле эпосы тыуырға тейеш – быға тарихи таяныстар етерлек.

8. Үҫәргән башҡорттары (9-сы кантон) был һуғыштарҙа айырыуса әүҙем ҡатнашҡан – Үҫәргәндән сыҡҡан әҙиптәребеҙ (нисәмә халыҡ шағиры, Салауат Юлаев премияһы лауреаттары иҫәпләнә!) ниңә һаман йоҡомһорай, ошо хаҡта ҡәләм тибрәтмәй?!

Ә ғөмүмән ҡарағанда:

а) 1811 йылда уҡ император Александр I Указы буйынса үҙтеләкле (добровольный) 2 Башҡорт атлы полкы төҙөлөп, Рәсәйҙең көнбайыш сигенә оҙатыла:

1-се полк – 9-сы кантондан (Үҫәргән);

2-се полк – 7-се, 12-се кантондарҙан.

Был полктар 1812 й. Наполеон ғәскәрҙәренә ҡаршы тәүге һуғыштарҙа ҡатнаша.

1-се полк Бородино ҡырында ла батырлыҡтар күрһәтә, Мәскәүҙән сигенеүсе Рәсәй ғәскәрен уның артынан һаҡлап бара;

б) 1812 йылдың 15 июне. Гродно ҡалаһы янындағы һуғышта 1-се Башҡорт (Үҫәргән) полкы яугирҙәре рядовойҙар Үзбәк Аҡмырҙин (үлеп ҡалған), Буранбай Сыуашбаев, һарунъя Ғилман Хоҙайбирҙин, яҫауыл Ихсан Әбүбәкерев һ.б ҙур батырлыҡ күрһәтә.

9. 1812 йылдың авгусында, тиҙләтелеп, 3-сө, 4-се, 5-се Башҡорт полктары төҙөп оҙатыла.

10. Шул 5 (биш) полка өҫтәп, ҡыҫҡа арала (1812 йылдың 10 октябренәсә) тағы 15 (ун биш) Башҡорт полкы һуғышҡа оҙатыла. Шул иҫәптән 9-сы (Үҫәргән) кантондан – 7-се, 8-се, 9-сы полктар. Тимәк, Үҫәргән башҡорттарынан – 1-се, 7-се, 8-се, 9-сы полктар – йәмғеһе 4 (дүрт) полк француз яуында ҡатнаша.

11. Фронтта 22 (егерме ике) Башҡорт атлы полкы һуғыша, шуларға өҫтәп тағы 6 (алты) запас полктар төҙөлә – бөтөнөһө 28 (егерме һигеҙ) полк.

12. Быларҙан тыш, тағы 12 (ун ике) мең башҡорт яугире Рәсәйҙең көнсығыш сиктәрен һаҡлай.

13. Башҡорт халҡында Рәсәй патриотизмы тойғоһо көсәйә. Башҡортостан мосолмандарынан Рәсәй ғәскәре файҙаһына 500 мең һум иғәнә йыйып тапшырыла.

14. Башҡорттар, Рәсәй ғәскәренә бүләк итеп, 4139 баш яу юрғаһын фронтҡа үҙҙәре илтеп тапшыра, шул йылҡыларҙың 1245 башы – Үҫәргән башҡорттарынан.

15. Башҡорт полктары Рәсәй ғәскәренең алғы сафтарында Парижға дөрөп керә.

Үҫәргәндән аталы-уллы Буранғол, Ҡаһарман Ҡыуатовтар Париждағы Еңеү парадында ҡатнаша, император Александр I тарафынан тантаналы мәжлескә ҡабул ҡылына, уларға дворян дәрәжәһе бирелә.

16. Француз яуында байтаҡ башҡорт ҡатындары ла үҙҙәренең яугир ирҙәре йәнәшәһендә батырҙарса һуғыша. Заманында урыҫ авторы Зефиров яҙып алған «Йәнтүрә хикәйәте» тап ошо хаҡта һөйләй; радио тыңлаусыларыбыҙға шуны уҡып ишеттерәйем.

17. Кем ул Йәнтүрә һәм ҡайҙан? Ҡулымдағы «Үҫәргән – Түңгәүер шәжәрәһе» өҙөгөнән уның хәҙерге Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ (элекке Йәнсура) районындағы Этбай (Үрге Ырыҫҡол) ауылынан икәнлеген күрәбеҙ:

1. Яукүсте (Күскенсе) Мусаҡай улы. – 2. Именбирҙе Күскенсе улы. – 3. Таймас-бей (кенәз) Именбирҙе улы (Шешәйҙәр араһы – Ҡәҙерша, Аҡнаҙар ауылдары). – 4. Бабай Таймас улы (хәҙерге Күмертау ҡалаһы Бабай ауылын нигеҙләгән). – 5. Өмбәт абыҙ Бабай улы (Һамар буйынан Өҫкәлек буйына килә; 1600 – 1703 йй.). – 6. Этбай Өмбәт улы (Этбай ауылын нигеҙләүсе). – 7. Бохарбай-батыр Этбай улы. – 8. Йәнтүрә-батыр (1812 – 14 йй. яугире) Бохарбай улы...

Үкенескә ҡаршы, башҡортто күрә алмаусы бәғзе берәүҙәр, шулай уҡ башҡорт нигилистары һәм ялағай-ҡурҡаҡтары һуңғы ваҡыттарҙа ифрат яһилланып, Ватан һуғышы йылдарында Рәсәйҙе башҡорттоң ҡырҡлап полкы һаҡлағанын кәметеп күрһәтергә – егерме йәки егерме ике генә итеп сафсаталарға тырыша. Уларса, йәнәһе, этнограф Р.Ғ. Кузеев самалауына ярашлы, ул заманда бөтөн башҡорт халҡының бөтә ир-ат затын (бала-саға, ҡарт-ҡоролар менән ҡуша) 125.000 (йөҙ егерме биш мең) кеше генә тәшкил иткәнлектән, бишәр йөҙлө егерме һигеҙ полк төҙөр өсөн ирҙәр һаны етмәй – төптө нигеҙһеҙ ялған. Беренсенән, урыны ожмахта булғыры Р.Ғ. Кузеевтың хеҙмәтендәге фактик материалдың байтағы алтын бәрәбәрендә булһа ла, дөйөм концепцияһы ла, айырым һөҙөмтәләре лә, үкенескә ҡаршы, дөрөҫлөккә тап килмәй, -- тарихи белеме наҡыҫтар ғына уның һәр бер раҫлауын алтынға һанай. Икенсенән, хатта оторолоҡло авторҙар ҙа башҡорттарҙан төҙөлгән 22 (егерме ике) атлы полкты һәм, шуға өҫтәп, атлы полктар рәүешендә Рәсәйҙең көнсығыштағы дәүләт сиктәрен һаҡлап тороусы 12.000 (ун ике меңлек) башҡорт атлы ғәскәрен таный. Ун ике мең атлы яугирҙең бишәр йөҙлөк 6 (алты) полктан хасиллығын да танып, егерме икегә алтыны ҡушаһы (22+6) ғына ҡала – тимәк, ысынлап та 28 (егерме һигеҙ) полк!

Бына шулай.

2012.

## Эс бошорткос ғилләләр

Бөтә изгеләребеҙҙең иҫтәлектәрен емергән, уларҙы халыҡ хәтеренән ҡырсып ташларға көсәнгән тоталитар совет режимы селпәрәмә килгәндән һуң, ата-баба китаптарын утҡа яҡҡан, мәсет манараларын киҫеп ауҙарған, әүлиә зыяраттарын бөлдөргән шул режимдың фиҙакәр функционерҙары йәғни яһил большевик ҡалдыҡтары хөрриәттә тағы иҫтәренә килеп, баштарындағы ҡыҙыл йондоҙло картузын таҡыялы салмаға алмаштырҙы, халыҡ хәтере ҡырҙарында большевиктарса йылғырлыҡ йәйелдерҙе. Шул арҡала рухи донъябыҙҙың совет осоро ғилләләренә яңы заман ғилләләре ялғанды һәм ялғана. Эс бошорҡос шундайҙарҙың дегәнәктәй күҙҙе ҡырған бер-нисәһен генә иғтибарға алайыҡ.

1. Эстәрлетамаҡ районы Талас ауылы тупрағында иң боронғо тәүдин заманынан уҡ ҡалмыш, Арҡайым ҡомартҡыларына иштәш свастика һүрәтле балсыҡ сүлмәктәр, мамонт һөйәктәре табылыуы һәм шунда бер-нисә гектар майҙанды биләгән сал-боронғо зыярат барлығы билдәле ине. 70-80-се йылдарҙа Талас урта мәктәбе уҡытыусыһы -- «Эстәрле» тигән роман авторы, урындағы комсомолияға шөһрәтле оран һалып, колхоздың ҡеүәтле техникаһын йүгәнләп, оло тарихи әһәмиәткә һәм ҡиммәткә эйә зыяраттың ҡәбер таштарын соҡорға ышыртып ташланы, «зыяраттан совет иленең гөбаҡсаһы яһаны» (ошо хаҡта «Совет Башҡортостаны» гәзитендә ҡыуаныслы мәҡәләһе баҫылып сыҡты).

2. Ул саҡтағы йәш археолог, хәҙер академик Нияз Мәжитов әфәнде тап шул ғилләле йылдарҙа ғилми эшмәкәрлеген киң йәйелдереп, Бөрйән районындағы Бабсаҡ баба ҡәберен, Күгәрсен районындағы Бәндәбикә инәй кәшәнәһен ҡуптарып асты, изгеләребеҙҙең һөлдәләрен, тоҡҡа тултырып, ҡайҙалыр ситкә оҙатты һәм улар эҙһеҙ юғалды.

3. Миәкә районының Илсеғол – Нарыҫтау ауылдары төбәгендәге ике тау башында ике изге – Алтын Урҙа императоры Туҡтамыш хан һәм заманының бөйөк сәрғәскәре Еҙекәй (урыҫ йылъяҙмаларындағы Едигей) батыр ҡәберҙәре бар һәм уларҙы ерле халыҡ «әүлиә зыяраттары» тип ҡәҙерләй, изгеләштерә ине. 90-сы болахәтле йылдарҙың бер йәйендә Мәжитов уҙамандың һәләтле шәкерте Иҙелбаев үҙбелдектән Туҡтамыш ҡәберен асып (хәҙер унда тәрән буш соҡор), данлы император һөлдәһен һәм һыныҡ ҡылысын ҡайҙалыр алып киткәнлеген миңә һәм юлдашым Ә. Йомағоловҡа ауыл хакимиәте башлығы һөйләне. Уғата эс бошорҡосо -- ошо быуат башында булды: салмаланмыш большевик ҡалдыҡтары, ялған тәүәрихсы Мөслимиҙең «Тәүәрих-и Болғар» уйҙырмаһына таянып, Еҙекәй батырыбыҙ ҡәберен Ислам нурын таратыусы сәхәбә Зөбәйер ҡәбере тип иғлан ҡылды ла һә тигәнсе тау итәгенә шуның исемендәге изге мәсет биналаны, «әүлиәле изге ер»гә табыныусылар ағымын эркелдертте. Ләкин изге сәхәбәнең тап ошонда ерләнеүе тарихи яҡтан бер нисек тә раҫланмай, ялған – был хаҡта боронғо күренекле ғалимдарыбыҙ киҫәткән. Мәҫәлән (урыҫса китаптан): «Еще Ш. Марджани, презрительно заявляя, писал что такие сочинения... «состоят исключительно из явной лжи, искажения событий, позорного суеверия», и все слова Муслими «не достойны не только доверия, но даже и внимания», так как автор их «всех людей считал, подобно себе, невежами и глупцами». Р. Фахрутдинов был еще более конкретен. «По-нашему мнению, -- писал он в 1900 году, -- это был одержимый человек, который всю свою жизнь, странствуя по

могилам, собирал и записывал выдуманные пожирателями подаяний и милостынь россказни» ( М.А. Усманов. Татарские исторические источники XVII – XVIII вв. Издательство Казанского университета, 1972. 153-сө бит). Һуңғы тамға заманабыҙҙың «зөбәйерсе» салмалыбаш большевиктарына ла ифрат йәпле йәбешә... Һәм бына Тажетдин Ялсығол-Башҡорди нимә ти: «Пәйғәмбәр ғәм әсхабларындан үч (өс) кемсәнәне ихтийәр идуб, дәғүәт өчөн Болғара ебәрмеш. Ул әсхабларның берсе Ғәбдеррахман бине Зөбәйер, икенчесе Хантыл бине Рәбиғ, үчүнчесе Зөбәйер бине Джәғда... Ул үч әсхаб Болғарда ун йыл ҡалдылар, мәдрәсә бина ҡылдылар... Андин кезин Ғәбдеррахман бине Зөбәйер вә Зөбәйер бине Джәғда һәр икесе Мәдинәйә киттеләр. Хантыл Болғарда ҡалды... Рузғардан суң Хантыл бине Рәбиғ вафат булды» (И.Г. Галяутдинов. «Тарих нама-и Булгар» Тажетдина Ялсыгулова. Уфа – 1990; 153, 156-сы биттәр). Тимәк, Ғабдрахман Зөбәйер улы һәм Зөбәйер Джәғда улы икеһе тиң иҫән-аман Мәккәгә ҡайтып киткән, ә Хантыл Рәбиғ улы иһә хан ҡыҙына өйләнеп, Болғар шәһәрендә ҡалып үлгән, бөгөнгө көндәге Нарыҫтау – Илсеғол төбәгендәге әүлиә зыяраттарына уларҙың ҡыҫылышы юҡ. Уйҙырмалы «Зөбәйер мәсете» ысын исемен алырға – бөйөк әһелдәребеҙ «Еҙекәй һәм Туҡтамыш мәсете» тип йөрөтөлөргә хаҡлы. Шуны ла әйтке килә: һалғас-һалғас был изге бинаны Шишмә районындағы Аҡзиратҡа – исеме генә лә ниндәй! – нигеҙләргә кәрәк ине, ысынлап та Ислам нурын балҡытыусы инсандарыбыҙ ерләнгән унда. Әйткәндәй, Нарыҫтау ауылы янындағы батшалар зыяраты ташландыҡ хәлдә, уның өҫтөнән ауыл мал көтөүе юл ярған – бөйөк тарихи ҡомартҡы кәртәләп алыуҙы көтә.

4. Йәнсура районы Үрген ауылы ҡаршыһындағы Турат тауында сал-боронғо таштар менән ҡоймаланған Ерәнсә-сәсән зыяраты бар; ғүмер-ғүмергә халыҡ уны тап Ерәнсә-сәсән ҡәбере тип белеп ҡурсалаһа ла, картуз-салмалы бер большевик ҡалдығы был изге урынды ауылдың икенсе яғына «күсереп» революция яһаған...

5. 1934 йылда республикабыҙҙың тере тәненән ҡырҡып алып Ырыббур өлкәһенә беркетелгән Сәнкем-Биктимер ауылы эргәһендә яуыз Аҡһаҡтимергә ҡаршы яуҙа батырҙарса ҡорбан булған башҡорт яугиренең «әүлиә зыяраты» бар ине, ураҡкан таштарын кемдер һүтеп алып киткәс, ер менән тигеҙләнгән... Һуңғыраҡ дәүер ҡаҙаҡ ханы Ҡасим ғәскәренә ҡаршы ҡанлы һуғышта еңелеп, тере килеш ҡаҙанда бешереп үлтерелгән Ырыҫмәмбәт ханыбыҙҙың (1580 – 1601) ауыл осондағы «әүлиә зыяраты» ҡоймаһын да «һарыҡташ шабашниктары» алып киткән, хәҙер унда кескәй генә гүр ташы сүкайып тора. Сәнкем-Биктимерҙән дүрт саҡрым үрҙәрәк Һунарсы ауылының Сәнкем юлы башында 1705 йылғы Килмәк абыз күтәрелешендә үлтерелгән 1200 (бер мең ике йөҙ) башҡортобоҙҙоң айырым-айырым өс убалап (ир-ат, ҡатын-ҡыҙ, бала-сағა дөйөм ҡәберлектәре) ерләнгән, һәр береһе яҫы таштар һалып уратылған «язаланғандар зыяраты» бар ине; таштарын өй нигеҙенә тығырға һүтеп бөткәстәре ер менән тигеҙләнгән – өҫтөндә ауыл өйҙәре... Биләнтау артылышына табан Һултанбай юлының уң яҡ ситендә Аҡһаҡтимер ғәскәренең ун ике яугире күмелгән бейек кенә дүрткел уба ла замананың таш юлы аҫтында ҡалған...

5. Усалы районының Ахун ауылы эргәһендәге сал-боронғо менгерҙәр (торataштар) башҡортто күрә алмаусылар тарафынан «башҡорт тарихы ҡомартҡылары» рәүешендә ҡыйратып ауҙарылған...

6. Ошо уҡ районды Әүешкүл янындағы Әүештау башында һаҡланған Беркә хан (Алтын Урҙа императоры) зыяратының ҡәбер ташындағы ядкәр төрлө «белгес»тәр тарафынан төрлөсә уҡылып, Ислам дине таратыусы башҡа бер исемле әүлиә ҡәбере рәүешендә табыныусыларын йыя. Ләкин уның Беркә хан ҡәбере икәнлеге үткән быуатта уҡ билдәле булып, шағир Рәми Ғарипов шуны баяғы билдәле археолог Н. Мәжитов менән бергә барып ҡарағас, 1974 йылда ошо шиғырын яҙған:

## Ҡала-тауҙар

Археолог дуҫҡа

Ҡала-тауҙар, ҡәлғә-тауҙар булып,
Һаман ҡалған халҡым телендә.
Һундар, Сыңғыҙхандар, Батыйхандар
Күпме ҡан ағыҙған илемдә!
........................................................................
Бәрке хандың таш ҡәбере ята
Әле булһа Әүеш тауында.
Ул, Урҙаның һуңғы ханы булып,
Ҡәбер тапҡан үҙенең яуында...

7. Күп мең йылдар элгәре үк тылсымлы һүрәттәренә алыҫ бабаларыбыҙ изге тәре (икона) рәүешендә табынған, балсыҡ китаптарға һыҙылмыш силуэттары кешелек донъяһына яҙма башланғыстарын биргән Тора-тау, Шәке-тау, Ҡуш-тау, Йөрәк-тау шихандар комплексыбыҙға ерйотар олигархтар ҡазаһы янай, дәүләт органдары һәм Ҡоролтай депутаттары енәйәтсел янауға күҙ йомоп ҡарай...

8. Һәм йөрәкте ҡанһыратып иң ныҡ борсолдорҡаны – Евразия ҡитғаһындағы иң боронғо цивилизация үрнәге, мәҙәниәт мәркәзе булған Өфө-II ҡаласығын, илебеҙ зыялыларының, түрәләренең һәм чиновниктарының өнһөҙ битарафлығы йәки аҫтыртын теләктәшлеге булышлығында, мөғжизәне донъяға таныттыртмайынса, танылып өлгөрмәҫенән элек юҡ иттертеп онотторто йәһәтендә яһилйәндәрҙең мәкерле эше бара. Сөнки тәүзаман тарихы буйынса башҡортҡа зыян килтереү – бөтөн кешелек донъяһы тарихын биртендереү ул. Бөйөк тарихи ҡомартҡыны һәләкәттән ҡурсалауҙа академик Нияз Мәжитовты ғына күрәбеҙ, ә ул иһә тимер ситлектә ҡанат килергә талпыныусы сал бөркөт хәлендә. Башҡортостан Республикаһы президенты был ситлекте асырға һис кенә лә йыйынмағандай...

Йәниҙгес эс бошоуҙан ҡәһәтләнеп, ҡайһылыр ки бәндәләребеҙгә өндәшәм: сәйәсәтең илә ҡыҙылмы һин, аҡмы һин, әммә рухың менән башҡорт килеш ҡал!

30.10.2014.

## Главная причина катастрофы Башкирской дивизии при выходе из рейда в 1943 году 23 февраля

Причина эта остается до сих пор неразгаданной загадкой российской истории. Написаны горы трудов ученых и воспоминаний непосредственных участников рейда, но докапаться до истины пока что никому не удалось. У авторов все дело сводился к тому, что в тот роковой момент последнего броска командир корпуса Борисов был в стельку пьян (а это правда), поэтому и дал гибельный приказ. Но корень зла, мне кажется, кроется в другом, а именно в глубоких исторических противоречиях между башкирским народом и имперскими устремлениями правителей России. Чтобы понять суть вопроса достаточно привести ниже следующую цитату из трудов выдающегося русского историка академика М.К. Любавского: «Из покоренных Россиею народностей, -- писал он, -- ни одна не потратила столько усилий и крови, чтобы отстоять свою старину, свои исконние права на занятые земли и угодья, свой национальный быт, как башкирская. В неравной борьбе она понесла большие количественные, материальные и несомненно духовные потери, но при всем том выявила свою этническую устойчивость, сумела сохранить многое из своего национального наследия и даже абсорбировать в себя значительную часть пришлых чужеродцев. Естественно поэтому, что во главу угла башкирской национальной истории выдвигается эта борьба со всеми ее причинами и поводами, со всеми перепитиями» (Из истории феодализма и капитализма в Башкирии, Уфа – 1971, стр. 227 – 228). А вот еще откровенно циничное признание одного из главных соратников вождя российской красной империи М.И. Калинина в драматическом для Башкортостана 1919 нгоду: «Автономия Башкурдистана – буфф для восточных народов. Мы башкирам не верим, гоним их солдат под Питер (на погибель, конечно! – З.С.)... Нам надо играть в их автономию, повсюду пролезать к ним и коммунизмом парализовать корни национализма и остальные вредные стороны автономии» (Национально-государственное устройство Башкортостана (1917 – 1925 гг.), автор-составитель Б.Х. Юлдашбаев, том 3, часть 1, стр. 6). Если учесть, что французское слово «буфф» означает «шутовской, комический», становится ясным, какую зловещую шутку сыграли в отношении башкир новоявленные красные империалисты, и такое шутовство, как показывают факты, не прерывалось даже в обшенародный трагический период Великой **Отечественной**...

Рассмотрим конкретний факт -- прорывный бой Башкирской дивизии 23 февраля.

Как хорошо известно, на всем протяжении рейда дивизия шла почти всегда как головная корпуса впереди и командир копуса Борисов со своим штабом – при ней. Однако на самом последнем этапе рейда по ходу приближения к линиям вражеской обороны порядок этот был резко нарушен, думается, по воле командующего фронтом Ватутина или его штабного офицера – обескровленной непрерывными авангардными боями Башкирской дивизии было приказано оторваться от общего потока и направиться направо (можно сказать, на верную

погибель) против частей знаменитого гитлеровского «Миас-фронта (генерал Борисов со своим штабом остался в расположении 14-ой дивизии, шедшей на хвосте потока) и приняв там неравный бой разгромил противника; двигаясь потом в главном направлении занял пункт Юлино-2, став тем самым опять-таки головной. По ходу движения соседние 14-ый и 15-тый дивизии уклонились от главного направления устремившись левее в район с. Штеревки (в итоге с малыми потерями вышли к своим). Об этом свидетельствует также письмо начальника оперативного отдела штаба 15-ой дивизии полковника в отставке П.И. Макарова (смотрите фото).



22 февраля генерал Шаймуратов был срочно вызван в штаб корпуса (Юлино-1) и получил, как хорошо известно, от пьяного командира Борисова строгий приказ немедленно начать бросок по направлению Штеревки и прорвать там немецкий фронт. Но имелся такой факт: накануне корпусная разведгруппа из 20 бойцов была послана в том направлении и полностью была уничтожена вблизи Штеревки (газеты «Правда» от 19 мая 1981 года и «Кызыл тан» от 30 ноябры 1982 года и фото места захоронений погибших), что говорило о большом скоплении там противостоящих вражеских сил.



Шаймуратов будучий зам. командиром корпуса, хорошо знал об этом и упорно добивался разрешения прощупать местность разведкой дивизии, но получил резкий отказ Борисова и грубый приказ немедленно начать бросок в район Штеревки. Многие, в том числе и автор этих строк, губительный приказ Борисова связывали с алкоголем, но скорее всего это было распоряжение сверху, и Борисов, не смея нарушить его, угрызнения совести своей подавил алкоголем... И еще вот что: идя наперекор собственному приказу он сам лично со своим начальником штаба неожиданно оторвался от башкир, стремительно догоняя тех двух счастливых дивизий, перешедших фронт левее почти без потерь, но случайным снарядом был тяжело ранен и попал фашистам в плен. Башкирская дивизия во главе со своим славным командиром, оставленная без обещанной встречной огневой поддержки со стороны 1-ой армии, достигнув поля напротив цепи скал у Романова балки попала в немецкий огненный капкан и ядро дивизии почти полностью было истреблено.



Имеется местоописание катастрофы (смотрите карту-схему исполненную участником рейда полковником запаса С.Х. Хабировым; звездочкой в кругу там обозначено место захоронений 20 разведчиков корпуса): «С запада на восток тянется балка, именуемая Романова. С северной стороны проходит цепь скал. Одна из них, обхватывающая своими крыльями южную сторону поселка Штеревка Ивановского района Ворошиловградской области, называется Хомякова, другая – Романовка... По следам старых ячеек можно определить, что от места гибели генерала на равнине за вершиной скалы были размещены огневые точки немецкой засады созданной для полного окружения и уничтожения группы конников стремящихся в Мало-Николаевку путем прорыва основной линии обороны немцев, которая проходила по высоте Пасечная, что находится в расстоянии 4,5 – 5 километров от места гибели генерала Шаймуратова» (гв. майор запаса К. Габитов, 16.07.1947 г. в книге З.А. Султанова «Башкирская дивизия», Уфа – 2007, стр. 157 – 159)... Порзительно: правее Штеревки линия немецкой обороны была почти обнажена и уцелевшие разрозненные части дивизии просочились через фронт. А ведь можно было, как и хотел Шаймуратов, заблаговременно разведать этот участок и благополучно вывести дивизию. Показателен еще такой факт, конников рейда, перешедших фронт, с нашей стороны никто и не ожидал (З.А. Султанов. Башкирская дивизия, стр. 186 -- из воспоминаний командира разведвзвода дивизии М. Гайсарова).

Как известно, героически погибший и захороненный на месте гибели генерал-майор М.М. Шаймуратов долгие годы числился пропавшим без вести, считался почти сдавшимся врагам. Командир корпуса генерал Борисов благополучно отсидел свое похмелье в немецком плену, вернулся протрезвевший и был обласкан властями: в 1946—1947 годах был слушателем высших академических курсов при Военной академии Генерального штаба, а в 1947—1958 годах — начальником военной кафедры Харьковского государственного университета. 2 апреля 1958 года по состоянию здоровья был уволен в отставку. Умер 29 мая 1987 года в Харькове.

Остается с горечью констатировать, история очень часто разыгралась не в башкирскую пользу. Даже в сверхпросвещенном 21-ом веке каждый мало-мальски сознательный башкир даже на своей исконней родине не перестает остро ощущать на своей шкуре холодное дыхание скрытного проявления этноцида, готовое время от времени в переломах истории превращаться в откровенный геноцид. Систематическое замалчивание или умаление со стороны мощных правящих сил даже явно выраженных исторических вкладов башкирского народа в сокровищницу российской и мировой цивилизации, культуры и постоянное замахивание на его святое из святых – родной язык говорит о многом... Пора нам всем, россиянам, становиться достойными гуманному вызову времени.

04.12.2014.

Таким образом выясняется: современный башкирский народ является неизменным аборигеном (коренным населением) Урала и единственным хранителем человеческих духовных ценностей со дня сотворения мира.

30.07.2015.

## Мөс (меч) менән яулап алынған Дуҫлыҡ

Бөгөн йәғни 2015 йылдың 7 авгусындағы Рәсәй – Башҡортостан радио каналы эфирынан баш ҡалабыҙҙың тарихи түңенә ҡуйылған мөһәбәт Дуҫлыҡ монументының юбилейы айҡанлы төрлө кешеләрҙең ошо һәйкәл тураһындағы фекерҙәрен тыңланыҡ. Шул ыңғайҙан мин фәкирегеҙ ҙә, тарих саңдарын аҡтарып салланған әҙип булараҡ, үҙ аңлауымды еткерергә теләнем.

Монументтың төп идеяһы – халыҡтар дуҫлығы – гүзәл ҡиәфәтле ике милләт һылыуҙары образында һынландырылһа, уның тарихи йөкмәткеһе иһә икәүҙе ошонда ҡауыштырған оҙон урыҫ мөсө (мечы) йәғни ҡылысы рәүешендә күҙаллана. Сөнки, авторҙар аңлауынса, быуаттар буйына тарҡаулыҡта йонсоған был халыҡтар был дуҫлыҡҡа ҡөҙрәтле «оло ағай»ҙың мөслө (мечлы) тарихи киҙәнештәре һөҙөмтәһендә иреште ләһә! Ҡыҙыл (ҡан төҫө) граниттан ҡойолған, күкте тишерҙәй ҡеүәтле һерәйгән мөстөң үткер йөҙөнә иғтибар итегеҙ: ул үҙенә нисәмә ҡара гранит (ҡара көстәр) ҡатламын үтәләй теҙгән (Яуыз Иван батша “шешлег”е!) – төптәгеһе Башҡортостан, унан ҡала Ҡазан ханлығы, Әстерхан ханлығы, Себер батшалығы... Эйе, барыһы ла һуғышып-яулап алынған... Үткәндәрҙе кире ҡайтарып та, тарихты алдап та булмай – бөтәһе лә дөп-дөрөҫ. Әйткәндәй, монументтың арт яғындағы барельефта теҙләнеп ҡурай уйнаған башҡорт һыны бар ине. Бер заман Илья Эренбург Башҡортостандан СССР Юғары Советы депутаты итеп һайланыу кампанияһында Өфөгә килгәйне, монументы ҡарап, ул: «Ниңә ҡурайсы башҡорт теҙләндертелгән?» -- тип асы һорағас, шау-шоу һалмайынса ғына, башҡорт ҡулындағы ҡурайҙы ҡырҡып ташланылар... Монумент авторҙары, моғайын, билдәле тарихи хаҡиҡәтте реализм ысулында сағылдыртып, ауыр һынауҙар аша тупланған оло дуҫлыҡтың ҡәҙерен белеп йәшәйек, күҙ ҡараһындай һаҡлайыҡ, тигән изге ниәттә булғандарҙыр...

07.08.2015.

## Һүҙ сере: кемгә – «кәллә», кемгә – «баш», ә кемгә «кәләпүш»

Ниңә башҡорт «баш» тигәнде (әҙәм башын) үзбәк – «кәллә», урыҫ «голова» тип белә – ошо хаҡта уйланғанығыҙ бармы? Ә был иһә әйтелгән өс халыҡтың да (телдең дә) бер оянан шытып сыҡҡанлығына ишара.

Оят һүҙ тип (сөнки телебеҙҙәге «әкәлә» -- ир-аттың енес ағзаһы булыу менән бергә имән орлоғо ла – «имән әкәләһе»!) оялмайынса ғына мәсьәләнең төбөнәрәк туҙ ҡуйһаҡ («тоҙ ҡойһаҡ»), ошолай асыҡлана: «әкә(лә)» -- «атай» тигән һүҙ ҙәһә! Шулай уҡ «атаңдың башы!» ( һәм «ҡ...» менән башланғаны) тигән әрләү һүҙебеҙ ҙә бар; ә боронораҡ шуның тулы әйтелеше «әкәләбаш» булған бит. Бына шул һүҙ тәүҙә ҡап-уртаға («әкәлә-баш») бүленеп, ике халыҡҡа «әҙәм башы» мәғәнәһендә ереккән: үзбәк уны хәҙер «(ә)кәлә – кәллә» тип әйтһә, башҡортҡа «баш» булып йөрөй. Урыҫ туғаныбыҙ иһә, тулы һүҙҙең тәүге һәм һуңғы өнөн (хәрефен) ҡыҫҡартып, «(ә) кәләба(ш) – кәләба/голова» тип атамаҡлай. Һәм татарҙың атаҡлы мили баш кейеме лә бер иш: «(ә)кәләба(ш) – кәләпүш»...

24.08.2015.

## Природного этнонима «монгол» история не знает

До провозглашения под руководством башкирского Муйтен-бия в 1206 году башкира Темасьяна, родившегося в 1155 году в башкирском ауле Темяс, «царем мира» Сынгыз-ханом (Чингиз-ханом), никакого этнонима «монгол» не было, были только племена и роды 1. «Бурятские» — булагаты, эхириты, хори, хонгодоры, 2. Найманы, 3. Олхонуты, 4. Тайджиуты. 5. Хойты, 6. Чонос.

Так как названный объединитель всех восточных кочевых племен был провозглашен «царем мира» (Сынгыз-ханом), то его өл/ил (страна-держава или государство) тоже был назван величавым именем «Манге-өл/ил»/Монгол — Вечная страна-держава и под этим именем Чингиз-хан вступил на Запад в поход, и там название это было воспринято как объединяющий этноним всех племен и народов державы, таким образом наши предки-тюрки превратились в «монголы». В подчинении Чингиз-хану были еще тюрки-татары – заклятые убийцы отца его. В ответ Чингиз-хан истребил род почти под корень, пощадив только часть его, в отместку посылал их в авангард своей воюющей армии. Поэтому завоеванные народы стали называть всю чингизханову орду и монголами, и татарами одновременно. А так называемым монгольским племенам название «монгол» было закреплено без никаких на то оснований.

Отец Чингиз-хана — Бурзянского рода башкир, мать Чингиз-хана — Усерганского рода башкирка, а основатель российской государственности великий хан Батый — родной внук Чингиз-хана.

13.10.201

5.

## Тревожное предчувствие

На самом преддверии 2016-го Нового года Госдума РФ умилостивилась вдруг на допуск учреждения в Российской Федерации новой общественной структуры – безземельной Культурной автономии всех башкир, и с тех пор не покидает меня тревожное предчувствие надвигающейся беды. С чего бы такая поспешность? Башкирский народ ведь в своем историческом развитии давно уже безвозвратно отверг навязанные ему со стороны подобные планы, ибо имел и имеет данную навечно Самим Богом собственную землю – ни кем неотъемлимую территорию и заменять ее на другую форму никогда не собирался. Вот почему когда в 1917 году братья-татары по-дружески захотели подсунуть нам придуманную ими и поддержанную монархистами безземельную автономию, весь башкирский народ поднялся на вооруженную борьбу за сохранение исконней своей земли и отстоял право на территориальную автономию в составе федеральной россии. С результатом победы башкир тогда же ловко воспользовались названные братья – отхватили с рук Ленина львиную долю дармовой башкирской земли для провозглашения такое же территориальное образование. Но даже современный «природный татарин» в своих генах продолжает иметь стремление к прежнему перекати-поле состоянию, что легко делает его, носителя известного притча «нам татарам все ровно», союзником скрытых разрушителей российской федерализации путем превращения национальных республик в имперские губернии во главе с «белым царем», оставив тем самым нацменам право на названную выше безтерриториальную культурную автономию. Пробьет час и акция эта наверняка будет безропотно поддержана радостно-одобрительным нашим госкурултаем, не встретит также никакого возражения со стороны превратившегося в придаток чиновничьего госаппарата всемирного курултая башкир. Губительному рецидиву может противостоять лишь сам народ, будемте же начеку!

01.01.2016.

## Фәһемле ҡиссалар яҙыусы

Миләүшә Готбод (ҡыҙ фамилияһы Ҡолмөхәмәтова) һылыуҙың 2015 йыл Өфөлә З. Биишева исемендәге «Китап» нәшриәтендә донъя күргән «Йылдар тыуҙырған юлдар» исемле тос йыйынтығын ҡәнәғәтләнеп уҡыным. Республикабыҙ ваҡытлы матбуғатында төрлө жанрҙағы сығыштары менән ярайһы уҡ билдәле булған әҙибәнең тәржемәи хәле менән яҙа-йоҙа ғына белештерә инем: баш ҡалабыҙҙың төрлө мәктәптәрендә башҡорт теле уҡытыусыһы, гәзит-журнал редакцияларында (башҡорт һәм урыҫ телдәрендә) уңышлы эшләгән журналист һәм... көтмәгәндә Европаның үҙәгендә урыҫ телендә яҙыусы Готбод булып танылған, шул уҡ ваҡытта үҙенең матур әсә телендә яҙышыуынан өҙөлмәй, республикабыҙ баҫмаларында ҡатын-ҡыҙҙарса әүҙемән ҡатнашыуын дауам иткән егәрле ҡәләм эйәһе...

Эйе, «ете диңгеҙ аръяғында» ятҡан сит ил тупрағында ла тап күркәм Уралындағылай һутлы бөрөләнеп япраҡ ярырға, сәскә атырға һәм татлы ижад

емештәрен бирергә була икән, әгәр ҙә ки рухи тамырҙарың тыуған тупрағыңдан йолҡонмаһа, гөлсәскәле ябалдашың йәмле Һаҡмар һәм Ағиҙел буйҙарының йәнсихәтле ел-ямғырҙарынан һутланһа һәм һулаһа...

Мәҡәләмде «ҡиссалар» һүҙенән башлауымдың хикмәте – китаптағы әҫәрҙәрҙең шәхсән үҙем тоҫмаллаған (бәлки, яңылышамдыр ҙа!) жанр үҙенсәлегендә. Билдәле булыуынса, боронғо матур әҙәбиәттәге ҡисса жанры – изге пәйғәмбәрҙәрҙең (ғөмүмән, күренеклеләрҙең) матди ҙа, рухи ҙа тормош сәхифәләрен берҙәй иңләгән хикәйәт, французлдарға ул, берәүҙәр билдәләүенсә, тарыраҡ ҡоласлы (шәхестең күп ҡырлы булмышының мөһим бер һырын ғына күҙаллаған) «эссе» жанры булып кергән. Ә китап авторы, миңә ҡалһа, алымдарҙың икеһенә лә эйә.

Йыйынтыҡтың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәти тураһындағы эссе менән асылыуы күңелемде яуланы. Сөнки һуңғы заман «халыҡ»лыларҙың ҡайһы берҙәренең самаһыҙ мин-минлек күләгәһе һуҙылыуҙан мәшһүребеҙҙең ижады ҡапланып уҡ бара ине, Миләүшә һылыуҙы ла, моғайын, ошо хәл борсоғандыр. Ә ниңә ул ҡиссаның ҡыҫҡарағын, эссены, һайланы икән, тиһәк, әҙәбиәт һөйөүселәрҙең теманан ныҡ хәбәрдарлығы иҫәпкә алынғандыр. Шуға күрә «пәйғәмбәр»ҙең сағыу ике балҡышына иғтибарҙы йүнәлтә: кешелеклелек сифаты һәм лирика. Тәүгеһенә, сурытып тормайынса, бер генә миҫал килтерә: «Мәҫәлән, -- ти ул, -- данлы генерал Доваторҙың атлы корпусында хеҙмәт итеүсе шағир-кавалерист Яҡуп Ҡолмойҙоң яу яланында эйәргә һалып яҙған шиғырҙарын 1942 йылда ул бер йыйынтыҡҡа туплап китап итеп баҫтырып сығара». Һуғыш осороноң матди һәм рухи ауырлығын, ҡатмарлылығын иҫәпкә алайыҡ. Шул замандағы әллә ҡайҙа ут эсендә «юғалып» йөрөгән йәш шағирҙың һуғыштан һуң мәшһүр лирик шағир булып өлгөрәсәген яҡшы белгән, тиерһең! Икенсе балҡышын асҡанда ла шиғырҙарҙы анализлауға иғтибарҙы сарыф итмәй әҙибә, был йәһәттән аҙмы-күпме әҙерлекле уҡыусының киң зауҡына таянып, күҙ төбәлгән ижад һырын мөһимерәк бер тәңгәлдән яҡтырта. «Шағирҙың күп популяр әҫәрҙәре, -- ти ул, -- Владимир Маяковский стилендә ижад ителгән. Ябай ғына күренгән ваҡиғаларҙы автор һутлы башҡорт телендә әһәмиәтле итеп тасуирлай белә, уларҙың барыһына ла фекер тәрәнлеге, тойғолар балҡышы хас. Ниғмәти шиғырҙарын һәм поэмаларын поэтик формалар байлығы, ритмик-интонацион төрлөлөк күркәмләй; яңылыҡты раҫлау пафосы лирикаһының төп үҙенсәлеген билдәләй. Тантаналы ваҡиғаларҙы һүрәтләгәндә шағир хатта марш ритмына тартым интонацияларҙы ла оҫта ҡуллана. Бәлки шуға күрә лә ул замандарҙа Рәшит Ниғмәти шиғырҙарын, поэмаларын иген баҫыуҙарында, ауыл клубтарында яттан һөйләгәндәр, һәр бер яңы сыҡҡан әҫәрен ҡулдан-ҡулға күсереп яҙыр булғандар... Йыйып әйткәндә, Рәшит Ниғмәти ижады егерме беренсе быуат әҙәбиәтенә лә ҡыйыу аҙымдар менән инде, халыҡ шағирының әҫәрҙәре башҡорт әҙәбиәтендә күренекле урын тота, тотасаҡ».

Йыйынтыҡҡа инеш өлөш, шулай итеп, Рәшит Ниғмәти шиғриәтенә хас аккорд булып яңғыраһа, артабанғы хикәйәтләүҙәрҙең күбеһе уйсан-моңло йыр төҫөндәге мыҡты йылға талғынлығына эйә. Драматург Нәжиб Асанбаев ижадында («Ҡаһарман, тыныслыҡ йырсыһы») Бөйөк Ватан һуғышы офицеры булараҡ үҙе

ҡатнашҡан һәм белгән фиҙакәрлек, батырлыҡ өлгөләре сәнғәтсән оҫта кәүҙәләндерелеүен күрәбеҙ. Фашист танкыларына ҡаршы ут яуҙырып һуңғы тамсы ҡанынаса алышыусы артиллерист-командирҙың, бөтә расчет ҡырылып бөтөп яңғыҙы ҡалғанда ла, дошманды еңеп сығыуы, әммә «смерш» тарафынан уның иҫән ҡалыуы шиккә алынып, зинданда үлем приговоры көтөп ултырыуҙары («Яралы яҙмыш», «Алтын бишек» кеүек драмалар) тетрәтә... Советтар Союзы Геройы Муса Йәлилдең Ырымбурҙағы йәшлегенә бағышланған «Ҡанат йәйгәндә» спекталендә әҙәмгә хас ҡаһарманлыҡ сифатының сығанаҡтары асыла...

Һуғыштан һуңғы тыныс тормош шарттарында ла була торған кеше драмалары Асанбаевтың үҙенең күңел драмалары менән һуғарылып, «Зәйтүнгөл», «Сирень сәскәһе», «Рәйсә», «Ҡыҙлы йорт», «Һыу юлы» һәм башҡа пьесаларында йөрәктәрҙе тулатты. Уларҙың яҙылыу, сәхнәгә ҡуйылыу тарихтарын Миләүшә һылыу оҫта һәм һаҡсыл аса, китап уҡыусылары менән дуҫтарса уртаҡлаша. Шул йәһәттән киң билдәле «Ҡыҙыл паша» спектакленең яҙмышы ифрат фәһемле һәм ҡыҙыҡлы. Бөйөк милли лидерыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди хаҡындағы драматик трилогия ла шундайҙар ҡатарынан. Ҡыҫҡа ғына әйткәндә, ҡисса сәхифәләрендә драматург Асанбаев донъяһы тулап йәшәй.

Ошондай кисерештәр менән нәүбәттәге ҙур күләмле әҫәрҙе аҡтара башлағас, йәшермәйем, һәйбәт түтәнән шыма ғына шыуып барған саңғымдың башы сутырмаҡлы туң ергә төртөлгәндәй тойҙом. Сөнки автор ихласланып сырамытырға теләгән мул емешле ижад алмағасының олпат һыны төбөнән алып ябалдашынаса яртылаш ҡыуарғанлығы күҙгә бәрелде, ирекһеҙҙән, «аҫтындағы эйәр атҡа тейер, эйәре лә белмәҫ, ат белә», тигән сая йыр юлдары иҫкә килеп, ни өсөндөр автор үҙе генә белмәй, ахыры, быны, тип үкенә биреп ҡуйҙым... Бының өсөн алмағасты (ҡисса геройын) ғәйепләп булмай, әлбиттә, сөнки беҙҙәр буй ебәргән етмеш йыллыҡ данлы совет осоронда асы яҙмыш ижадсыларҙың бер килкеһен тап ошолай ҡыу ярымтаҡлап имгәтте, ә сәбәбе – бөйөк юлбашсыларыбыҙ үҫеш өсөн һыҙып биргән тайпылмаҫлыҡ юл ине: пионерия – комсомол – партия – вузда тарих факультеты – партия үҙәк комитеты ҡаршыһындағы партия мәктәбе – вуздың марксизм-ленинизм тигән юҡмыш фән кафедраһы... Шул юҫыҡтан юртаҡлаған бәндәнең ижад алмағасы ваҡыт-ваҡыт ҡотороп сәскә атһа ла, төптән сысҡан (баяғы идеология!) зарарлаған ярты яғы ҡыу ағас хәлендә ҡалды...

Башҡорт мәҙәниәтенең ысынлап та күрке булған Нәжиб Асанбаев ижады кимәленә (хатта унан да бейегерәк!) күтәреп ҡуйылған әһелдең тәржемәи хәле лә, ижад емештәре лә, үҙем татып белгәнлектән, үкенесемә ҡаршы, әлеге ярымтаҡ алмағасты хәтерләтте, текст туҡымаһы ла, ҡиссанан да бигерәк, рәсми рухлы күп бүлектәрҙән ғибәрәт трактатҡа тартым ине. Бүлектәрҙең исемдәре үҙҙәре генә лә ни тора:

Тарихсы Нурғәлин ҡараштары.

З. Нурғәлин – сәнғәт һәм театр белгесе.

Ҡурай уҡытыу тарихы хаҡында.

Башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарынан торған мили оркестр нисек барлыҡҡа килә?

Фәлсәфәүи ҡараштары ниҙән ғибәрәт?

Телсе һәм әҙәбиәтсе Нурғәлин.

Театр белгесе...

Әҫәр башы уғата ғибрәтлерәк: «Тәнҡитсе плюс тарихсы плюс әҙәбиәтсе плюс театр белгесе плюс академик»... Хикәйәтләү үҙе иһә ошбу башҡа лайыҡлы олпат һүҙ менән бисмиллалана:

«Һәр халыҡтың тормошонда яҡты эҙ ҡалдырған шәхестәр була. Улар араһында халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдары Ҡол Ғәли, Ҡараһаҡал, Килмәк Нурушев, Салауат Юлаев, Алдар батыр, Исмәғил Тасимов, Мирсәлих Биксурин, Зәйнулла Рәсүлев, Ризаитдин Фәхретдин, Мөхәмәтша Буранғолов, Муса Мортазин, Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Жәлил Кейекбаев... Тап ана шундайҙарҙың береһе – олуғ ғалимыбыҙ Зиннур Әхмәҙи улы Нурғәлин».

Тап Нурғәлин ректор булып торған Өфө дәүләт сәнғәт институтында тап шуның егәрле ҡулы аҫтында егелеп эшләүсе, йәки уның яҡындары Айрат Ҡобағошов, Марат Зәйнуллин, Тимерғәле Килмөхәмәтов, журналист Сәлмән Ярмуллин кеүек хөрмәтле уҙамандарҙың маҡтауы менән ныҒытыла был раҫлау (әлбиттә, ал да гөл булыр ине, әгәр ҙә ки күҙ алдында баяғы ярымтаҡ алмағас һерәйеп тормаһа!). Ә бит атаҡлының шәхсән төп булмышы, эшмәкәрлеге, авторҙың уҡ хикәйәте буйынса, ижадсылыҡтан да бигерәк, яҡшы мәғәнәһендәге ҡоро чиновниклыҡ карьераһына тартым: «1968 йылдың көҙөндә яҙмыш уны Өфө сәнғәт институтының марксизм-ленинизм (бармаҡтан һурып уйлап сығарылған «фән»! – Й.С.) кафедраһы менән бәйләй. Ул ошо кафедраның мөдире һәм доценты була (юҡ фәндең юҡмыш кафедраһы мөдире! – Й.С.). Бер-нисә тапҡыр партбюро секретары, Өфө ҡала советы депутаты итеп һайлана... һәм артабан ошо институттың ректоры була». Әлеге лә баяғы: алмағасты ярымтаҡлаған дөйөм сир! Ошо зәхмәт ул заман ижадсыларының барыһына ла тейҙе, талантылар уны бирешмәй еңде, ә урта ҡул һәләтлеләр сәскә атам тип алданып йөрөп ҡыуарҙы... Тәжрибәле, бай тойғоло әҙибәбеҙ был юлы ниңә ябай ялтырҙы затлыһы менән бутаны икән, тип аптырап та ҡалаһың. Әйтәйек, геройының ысынлап та таланты эшмәкәр-ойоштороусы сифатына төбәлеп, сағыу эссе тыуҙырырға була ине ләһә! Хәйер, былай ҙа эссе бызырлай: муйынсаҡтағы быяла төймә йәнәшәһендә ынйылай йымылдап тора. Сөнки әҫәр геройының ижадсы булараҡ көслө яғы – мили сәнғәтте ысын ғилми кимәлдә уҡытыуҙы юлға һалыуҙа. Мәҫәлән, авторҙың үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, института «башҡорт ҡурайын махсус рәүештә профессиональ кимәлдә уҡытыуҙы индереү, башҡорт телен белгән музыка белгестәрен әҙерләү кеүек мөһим проблемаларҙы дәүләт кимәлендә» хәл итеү, «Каруанһарай» ижади төркөмөнөң барлыҡҡа килеүе лә уға бәйле. 1995 йылдың 18 ғинуарында «Известия Башкортостана» гәзитендә З. Нурғәлиндең «Нужно ли кураисту высшее образование?» тигән мәҡәләһе донъя күрә. Хөрмәтле ғалимыбыҙ унда башҡорт традицион музыка ҡоралдары ҡурай, ҡумыҙ, думбыра, өҙләү сәнғәте милләтебеҙҙең айырылғыһыҙ рухи донъяһы икәнлеген билдәләй, башҡорт ҡурайында уйнаусыларҙың әҙерлеге юғары кимәлдә уҡытылып та, улар көнбайыш музыка инструменттары габой, кларнет, торба кеүек үк уйнарға өйрәнергә

тейешлеге тураһында яҙа. Оҙаҡламай, башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарынан торған оркестрыбыҙ тыуа» – тап ошолар әҫәр геройын һоҡланғыс яһай түгелме?!

Ярай, ҡапҡан һайын ҡалъя булмай, тигәнде иҫәпкә алып, артабан дауамлайыҡ.

Автор бына, тәрән моңға бирелеп, баҡыйлыҡтағы ҡәҙерле олатаһы Яҡуп Ҡолмойҙоң шәхси архивын барлай. Һарғайып бөткән ҡағыҙҙарҙы күҙенән кисереп һағышлана, уйлана, ә был иһә талантлы шағир хаҡында, әҙәбиәтебеҙ хаҡында үҙенә күрә бер ҡисса. «Ғүмеренең һуңғы көндәренә ҡәҙәр, -- тип бергә кисерешәбеҙ, -- шағир Яҡуп Ҡолмой әҙәбиәт һәм сәнғәт әһелдәре менән аралашып, тығыҙ хеҙмәттәшлектә йәшәне. Ҡәләмдәштәренә һәм ижадташтарына битараф ҡалмайынса, улар хаҡында йылы һүҙ әйтеп, күңелдәрен үҫтереүҙе мәртәбәгә һананы. Ул ифрат бай күңелле, ихлас, ябай, дуҫлыҡтың ҡәҙерен белеүсән кеше булды. Олоһо менән дә, кесеһе менән дә уртаҡ тел тапты. Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһында әҙәби-музыкаль тапшырыуҙар программаһының баш мөхәррире булып эшләү дәүерендә бер-нисә тиҫтә әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренең тауышын яҙҙырып алып ҡалды. Үҙе яҡты донъя менән хушлашҡандан һуң донъя күргән «Хәтер хазинаһы» тигән китабында Афзал Таһиров, Төхфәт Йәнәби, Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбай, Ғариф Ғүмәр, Сәйфи Ҡудаш, Ғәлимов Сәләм, Сәғит Агиш, Мөхәтдин Тажи, Сәләх Кулибай, Ҡадир Даян, Низам Ҡәрип, Мөслим Марат, Мәлих Харис, Тимер Арслан, Ғилемдар Рамазанов, Ибраһим Ғиззәтуллин, Жәлил Кейекбаев, Ноғман Мусин, Абдулхаҡ Игебаев; күренекле сәнғәт әһелдәре , композиторҙар Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Рәүеф Мортазин, Халиҡ Заимов, Камил Вәлиев, Шамил Ибраһимов; талантлы йырсылар Мәғәфүр Хисмәтуллин, Зәки Мәхмүтов, Нәжиә Аллаярова, Хәбир Ғәлимов, Илфаҡ Смаков, Баныу Вәлиева, Камил Вәлиев, Хөсәйен Мәжитов, мәшһүр артист Арыҫлан Мөбәрәков һәм башҡалар хаҡында фәһемле ижади портреттар яҙып ҡалдырҙы». Һоҡланмау мөмкин түгел: бер быуын башҡорт мәҙәниәтен күкрәтеп сәскә аттыртҡан маһир һәм маһираларыбыҙ хаҡындағы сағыу энциклопедия!

Әммә иң ҡыҙыҡлыһы – хаттар, хаттар... Хат яҙыусылар: Мөхәтдин Тажи, Баязит Бикбай, Сәләх Кулибай, татар әҙиптәре Хәсән Сарьян, Зәки Нури... Автор ошо күренекле әһелдәрҙең хаттары менән аралаш уларҙың ижады һәм ижаддашлығы, мәҙәниәтебеҙ донъяһындағы уларға бәйле ҡыҙыҡлы һәм фәһемле ваҡиғалар менән дә арбай уҡыусыһы күңелен.

Яҡуп Ҡолмой лирикаһының затлы гәлсәрҙәй сыңлап торған илаһилығын «Былбылым» йыры үҙе генә лә тулы нескәлегендә тойҙорталыр:

Яҙ килә лә китә,
Йөрәк көтә-көтә,
Йәшлек үтә-үтә
Яҙ һымаҡ.
Һин былбылым минең,
Йырланмаған йырым,
Балҡып кил һин

Аҡкан таң һымаҡ...

Илаһи хистәр авторын республикала белмәгән кеше бармы?! Композитор Заһир Исмәғилев бына нисек хәтерләй: «Былбылым»ды яҙғас, мәрхүм Яҡуп Ҡолмой шундай шатланып йөрөнө! Ул уны үҙенең кәләшенә, Фатимаһына, арнаған булған. Миңә һүҙҙәре иҫ киткес оҡшаны. Бөтә әйбер һүҙҙән тора. Әгәр ҙә шиғыр матур булһа, моңо ла матур сыға. Шиғыр йырлап тормаһа, моңо булмаһа, унан бер нәмә лә килеп сыҡмай. «Былбылым» шул тиклем халыҡҡа яҡын булды – һүҙҙәре лә, көйө лә халыҡсан бит». Ғөмүмән, тип йомғаҡлай Миләүшә һылыу, Я. Ҡолмой шиғырҙарына йыр яҙмаған берәй композитор бармы икән?! Уларҙы йыйып баҫтырғанда, киләсәк быуын өсөн бынамын тигән баһалап бөткөһөҙ ҡомартҡы ҡалыр ине лә... Үкенескә ҡаршы, йылдар ағылып үтә тора, ә ноталары менән бергә нәшер ителергә тейешле китап һаман артҡараҡ күсә килә. Ә бит бөгөн Яҡуп Ҡолмойҙоң йәмғеһе өс йөҙҙән ашыу йыры иҫәпләнә. Уларҙы юғалтмайынса, йыйып-туплап, айырым китап итеп баҫтырып сығарыу – әллә ҡасан уҡ өлгөрөп еткән мәсьәлә!

Билдәле булыуынса, ысын ижадсының береһе лә бер-береһенә оҡшамай, бер-береһен ҡабатламай – һәр ҡайһыныһы үҙенсә. Ана шундай үҙенсәлекле шағирҙарыбыҙҙың йондоҙлоғо йыйынтыҡҡа уғата нурлы йәм өҫтәй, йымылдай. Нурҙар теҙемендә Фәниә Чанышева («Кешеләр, ҡулығыҙҙа минең йөрәгем»), Марат Кәримов («Йөрәктәрҙә яна һүҙе»), Марат Муллаҡаев («Әҫәрҙәрендә тормош дөрөҫлөгө»), Риф Мифтахов («Йондоҙҙарҙан шағир йылынған»), Тамара Ғәниева («Уйландырыусан ижад»), Мәснәүи Зәйнуллин («Күңел күге йондоҙло ине»), Миңлебай Юлмөхәмәтов («Мәғарифҡа бағышланған ғүмер»), Данис Тикеев («Уҡытыусы, ғалим, яҙыусы»), Марат Әбүзәров («Һин – атылған йыһан йондоҙолай»), Рауил Ниғмәтуллин («Уҡытыусым хаҡында һуңлап әйтелгән һүҙ») кеүек һүнмәҫ-һүрелмәҫ ижад нәжәғәйҙәре. Был донъянан иртә киткән Рауил Ниғмәтуллинды беҙ, ҡәләмдәштәре, илаһи талант эйәһе (бер юлы шағир ҙа, көйҙәр сығарыусы ла) һәм таҫыллы педагог булыуы менән бергә 90-сы йылдарҙың ҡурҡыу белмәҫ көрәшсеһе, Башҡорт халыҡ партияһын нигеҙләүсе итеп тә беләинек. Ҡасандырғы уҡыусыһы был шәхесте моңһоу итеп тасуирлауға өлгәшкән. Кеше ғүмере ҡыҫҡа, ләкин ысын ижад күкрәүе оҙон – беҙҙән һуң да китап уҡыусыларыбыҙ ошо йыйынтыҡ биттәрендә емелдәшкән йондоҙҙарҙы яратып күҙҙән кисерер, күңелдәре яҡтырыр.

Миләүшә һылыуҙың тарихсы-документалист булараҡ та уңышлы эш итеүен билдәләп үтке килә. Бөйөк Еңеүебеҙгә 70 йыл тулыу айҡанлы «Ватандаш» журналының 6-сы һанында донъя күргән «Кем һин, Даян Мурзин?» тигән ҙур күләмле документаль публицистикаһы унаң етди тикшеренеүсе икәнлеген дәлилләй. «Әле студент сағымда уҡ Даян Баян улы менән ике тапҡыр осрашҡас, -- тип яҙа баш һүҙендә, -- эш барышында унаң күҙ ҡарашын тойғандай, үҙе менән кәңәшләшкәндәй булам, яугир тормошоноң бығаса билдәһеҙ яңы биттәрен асҡанда үҙемдә ҙур яуаплылыҡ тоям». Яҙмыш уны ҡаһарманыбыҙ фашистарҙы ҡырып йөрөгән төйәктең тап үҙендә – Чехияла төпләнергә һәм батырҙы яҡшы күреп белгән кешеләр менән аралашып йәшәргә, башҡа авторҙарға тәтемәгән

тере мәғлүмәттәр алырға насип итте, бынан тыш ул Мурзин хаҡында Рәсәйҙә һәм төрлө сит илдәрҙә сыҡкан тиҫтәләгән баҫмаларҙы аҡтарҙы, быға саба билдәле булмаған байтаҡ ваҡиғаларҙы беренсе башлап яҙҙы. Һөҙөмтәлә был темаға һуңғы нөктә ҡуйылды, тип һанайым, инде уны китап итеп сығарыу бурысы ҡала.

Ҡул аҫтымда маһираның тағы ла бер хеҙмәте – «Башҡортостан рәссамдары» тигән эсселар ҡулъяҙмаһы. Әҫәрҙәрен кинәнеп уҡыһам да, әлегәсә ташҡа баҫылып сығыуҙы көткәнлектәренән, тәғәйен тотоп анализлауҙы киләсәккә ҡалдырып, буласаҡ китаптың мили мәҙәниәтебеҙгә ни дәрәжә мөһимлеген аңғартмаҡка ҡыҫҡа ғына аннотацияһын һәм йөкмәткеһе атамаларын килтереү менән сикләнәм:

Был йыйынтыҡ -- энциклопедик пландағы очерктар, мәҡәләләр, иҫтәлекле осрашыуҙар, башҡорт рәссамдары ижады һәм һынлы сәнғәте проблемалары хаҡындағы уйланыуҙар, һүрәтләмәләр һәм ижади портреттар йыйылмаһы. Унда милләтебеҙҙең рухи үҫешенә ҙур өлөш индергән Башҡортостан рәссамдары хаҡында ғилми-биографик материалдар тупланған. Йыйынтыҡ уҡыусыларҙа матурлыҡ тәрбиәләү, тыуған илде яратыу, уның байлығы һәм гүзәл тәбиғәте менән ғорурланыу тойғолары тәрбиәләй, китап туған тел, Башҡортостан мәҙәниәте предметын уҡытыусылар, студенттар, китапханасылар, мәҙәниәт йортонда эшләүселәр, шулай уҡ киң аудитория уҡыусылары өсөн тәғәйенләнә.

**ЙӨКМӘТКЕҺЕ:**

## Беренсе бүлек.

Башҡорт милли һынлы сәнғәтенең үҫеш этаптары һәм реализм традициялары.

Һынлы сәнғәттә 1773-1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышы һәм Салауат Юлаев образы.

Һынлы сәнғәттә 1812 йылғы Ватан һуғышы һәм темаһы.

Карикатура жанры.

## Икенсе бүлек.

### Һынлы сәнғәткә нигеҙ һалыусылар.

Тәүге башҡорт рәссамы (Ҡ.С. Дәүләткилдиев, 1887-1947).

“Бөйөк рәссамдар төпкөлдән сыға” (А.Э. Тюлькин, 1888-1980).

Ябайлыҡта – бөйөклөк (В.С. Сыромятников, 1885-1979).

Өсөнсө класлы рәссам (Ю.Ю. Блюменталь, 1870-1944).

Футурист рәссам (Д.Д. Бурлюк, 1882-1967).

**П.М. Лебедев (?).**

М.В. Нестеров (1862-1942).

### Оло быуын рәссамдары.

Үҙ халҡынын улы (Әхмәт Лотфуллин).

Асылына тоғро рәссам (Рәшит Нурмөхәмәтов).

Монументаль композиция авторы (Виктор Позднов).

Ю. Ракша.

Халыҡсан ижад (Рәшит Зәйнетдинов, 1938).

Карикатуралар оҫтаһы (А.А. Штабель, 1926-2002).

“Тәбиғәт -- иң шәп уҡытыусы!» (Б. Домашников, 1924-2003).

“Тыуған яҡты маҡтап туймайым” (А. Бурзянцев, 1928-1997).

“Рәссам булырға бала саҡтан хыялландым” (Э.М. Сәйетов, 1936-2004).

Бер портреттың тарихы (Ғабдулла Мостафин).

Милли рухлы рәссам (Ф.А. Кащеев, 1934).

**Салауат Юлаев образын һынландырыусылар.**

Монументаль һәйкәл авторы (С.Д. Тавасиев, 1894-1974).

“Салауат Юлаев” бюсының тәүге авторы (И.Г. Фридрих-Хар, 1893-1978).

Башҡорт рухлы рәссам (А.А. Кузнецов, 1927).

Тормошомдо Салауатҡа арнаным (М.П. Карташев).

Башҡорт рухлы рәссам (Анатолий Лежнев, 1885-1956).

**Фронтовик-рәссамдар.**

Һалдат скульптор. (З.Р. Басиров, 1927-2000).

Рәссам-журналист (Р.У. Ишбулатов, 1911-1967).

В.П. Пустарнаков (1924-2000).

Китап биҙәү оҫтаһы.  Р.Ғ. Ғүмәров (1911-2003).

Яугир рәссам (Ә.С. Арыҫланов (1926-1987).

**Ҡатын-ҡыҙ рәссамдар.**

Ҡурсаҡ театрын асыусы рәссам (М.Н. Елгаштина, 1913-2003).

Сигеүле-нағышлы ижад (А.Х. Ситдикова, 1913-1999).

Сәхнә биҙәү оҫтаһы (Ғ.Ш. Имашева, 1914-1995).

«Башҡортостанды тәү күреүҙән яраттым» (Т.П. Нечаева, 1922-2004).

В.М. Сорокина (1940).

**Бөгөн ижад итеүсе башҡорт рәссамдары.**

Арыҫлановтар династияһы (Мөхәмәт Нуриәхмәт улы һәм Рифҡәт Мөхәмәт улы Арыҫлановтар, 1910-2002, 1946).

Йондоҙло ижад (З. Ғәлимова, 1955).

«Ысынбарлыҡты шулай күрәм» (В.Г Шәйхетдинов, 1955).

Риф Абдуллиндың күнел донъяһы.

Һәләттәр ауаздашлығы (Николай Калинушкин, 1948-2004, Николай Пеганов, 1948-2006).

Ул баласаҡ иленән (Фәйзрахман Исмәғилев, 1955).

«Милләтем бөйөклөгөн шулай күрәм» (Ю.З. Әминев, 1980).

Уйсан ижад (Ә.М. Мәжитов, 1955).

Рәссам журналист (В. Меос, 1940).

«Ысынбарлыҡты шулай күрәм» (В.Г. Шәйхетдинов).

Педагог рәссам (Р.Ғ. Вәлиуллин, 1947).

Тамғалар моңо (Ф.Ерғәлиев,1952).

Графиканың тере донъяһы (З.Ғ. Ғаянов, 1941).

Үҙенсәлекле ҡылҡәләм оҫтаһы (Ж.Ә. Сөләймәнов, 1968).

Сәнғәтебеҙҙең ошондай ҙа бай тарихы, мәшһүрҙәре бар икән! Шуларҙы тиҙерәк халыҡҡа, киң йәмәғәтселек иғтибарына еткермәйенсә тороп, нисек түҙергә мөмкин?! Әҙибә киң диапазонлы мәҙәниәт белгесе булып тора.

...Алыҫ чех илендә Миләүшә Годбод исемендә танылған, Чехия Республикаһының урыҫ телле яҙыусылары һәм журналистары берлегенең ағзаһы булған талантлы ҡәләм эйәһенең Германияла йәшәүсе Рәүил, Арыҫлан атлы ейәндәре оләсәй менән ҡартатайҙы быйылғы Яңы йыл байрамына саҡырып, көтөп торалар икән. Оләсәй кеше унда быйыл уҡырға барған Рәүил ейәненә биргән изге вәғәҙәһен үтәргә – «Урал батыр» эпосын көйләп-аңлата башларға тейеш. Хәләл ефете Владимир (һөнәре буйынса юрист) менән берлектә «Урал батыр»ҙы чех теленә auҙарғандар, Аллаһы Тәғәлә бойороғонда нәшер итеүселәре лә бер үк табыла күрһен!

25.12.2015.

## Уфимский пантатарист записался в иудеи

Привлек мое внимание название книжки, изданной в 2011 году в Уфе: «Ирхан Тугай. Кто же истинный семит? Евреи, арабы или я, волго-уральский татарин? Пиктографическое письмо о древнейшем полюсе Земли. Путь атлантов в страну пророков. Пути земные Иисуса Христа». Из биографии автора узнал, что он всю сознательную жизнь прилежно трудился в нефтяных и газовых промыслах СССР, вышел на заслуженный отдых и в центре столицы солнечного Башкортостана в теплой, уютной квартире предался к глубоким историческим, религиозно-философским размышлениям, выискивая глубоких корней своих. Вспомнил я схожие занятия пенсионера из Кемерова -- заслуженного шахтера (покойного) Бориса Прокопьевича Синюкова (его сайт существует: borsin1.narod.ru). Но, в отличие от него, которому была присуща природная простота в помыслах, этот Тугай (Тимерхан Тимеръянович Шарафиев) при его несомненных положительных качествах заимел еще, как мне кажется, хроническую хворь, причиняющая душевный дискомфорт.

Родился он и вырос в лишенной национального духа башкиро-тептярской среде, ведь сельчане (бывшие чуваши, марийцы, мордва, башкиры) волею судеб были когда-то и кем-то определены в вненациональные «тептяры». На странице 142 читаю: «О том, что мы называемся татарами моя мать даже не знала. Как-то я спросил ее: «Мам, а все таки мы к какой нации относимся?» Она отвечала: «Мы – мусульмане».

Как известно, вплоть до конца 19-го века казанские мусульманы тоже не знали или не хотели знать навязанную им царскими колонизаторами кличку «татар», упорно называя себя «ҡазан кешесе» (казанский человек). Народная молва относила себя к древним булгарам; однако потом научно было доказано, что волжскую Булгарию населяли в основном два этноса: сувазы (предки современных чуваш и татар) и эсегель (предки современных усергенских башкир). Половина из тех древних чувашей, принявшая религию ислам, постепенно была

ассимилирована тюрками-башкирами и стали «казан кешесе», говорящие на ломаном башкирском языке. История превращения их в «татары» очень проста: на кануне 20-го века возникла там среди элиты политическая необходимость определяться в нацию, и перед ними, по-видимому, стояли два пути: называться исконними чувашами, или новоявленными башкирами; купеческо-байская прослойка казанцев, претендовавшая на великое наследие Чингизхана («татара» в их понимании) и строящая далеко идущие планы на создание в тюркоязычном регионе протекторат «Идель – Урал», выбрала и закрепила за народом бесхозный этноним «татар». Повсюду рыскала тайная партия пантатаристов-шовинистов, выискивая неустойчивых элементов среди населения, вербуя их в «великие волго-уральские татары». С молчаливого согласия местных тюря-манкуртов в западном Башкортостане достигли они желаемых результатов: в массовом порядке было внедрено преподавание в школах по казанской программе на казанско-татарском языке, заражая население вирусом пантатаризма. Даже теперешний Тугай не смог избежать сего, коварный вирус беспрестанно точил его светлый ум, внушая как молитву: «ты великий волго-уральский татарин, татарин, татарин!». Но вот беда: проклятые вездесущие ученые (по твердому убеждению Тугая в основном раши-москали да шовинисты-башкиры) противоречили сему, утверждая, что до нашествия чингизхана в регионе ни кто даже знать не знал слово «татар», жили одни башкиры да чуваши... Выходит, он, великий «волго-уральский татар» -- жалкий пришелец, перекати-поле без корней?!. Опротестуем! Обрушим свой праведный гнев на голову наглых угнетателей! Он пишет: «Я за равенство народов, за дружбу народов, против всякого насилия... особенно против национального шовинизма, которая особенно оголтелая у русского и башкирского народа» (стр. 52). Все же мельком признает, что татары и русские из одной крови, генетически братья они (стр. 57, 63). Тугай в этом прав: ведь научно доказано, что у татар, русских, финнов одинаковые ДНК! Но несмотря на это, его остро напереченный лексикон при каждом удобном случае продолжает «посылать» именно своих кровных братьев туда, куда Макар телят не гонял. На ходу также успевает напакостить проклятым аборигенам, используя своего рода «научные» открытия археолога В.А. Иванова (стр. 111) о древней турбаслинской культуре, якобы не принадлежавшей башкирам. Не утруждая себя возиться с артефактами, ясновидец по-своему расшифровывает слово «турбаслы» -- «тәре башлы» («крестоголовый» стр. 120). Очень жаль, что до сих пор никто, даже сам Мажитов, не обратил внимание на таинственную надпись на горшке той культуры (Н.А. Мажитов. Южный Урал в VII – XIV вв., издательство "Наука» М. 1977, стр. 234, рис. 5) исполненной способом древнебашкирского иероглифо-ребусного письма, которая читается: «Дөрә бес» (баш), что значит «Түрә Әбес (Абыз)» -- Правитель Ученый (от того же получился топоним «Дөрә Әбесле» -- «Турбаслы»)...

...В тихом уфимском уголке с помощью самих светлокрылых ангелов был установлен контакт с космосом и с тех пор счастливому хозяину регулярно стали привиднеться удивительные сны (стр. 53):

«О своих снах расскажу кратко, что видел много исторических личностей. Судить о них не стану, пусть это сделают Небеса: грешные они или нет. Итак, я

видел Карла Маркса, В. И. Ленина (кстати, его тело следует предать земле, потому что во сне он просил, чтобы его похоронили рядом с матерью: «Не хотел тут лежать, устал тут лежать». (Почему русская церковь не противится тому, что из него сделали идола. Твари, грешные!) Два раза видел И. Сталина и мне показалось, что грехи с него сняли, но на небеса пока его путь закрыт; Наполеона, который учил меня как поступать; Дж. Буша, который оказался не грешным человеком; Ельцина видел в первый раз как он опустошит Россию, а во второй раз как он будет наказан; также М. Рахимова -- президента Башкортостана видел один раз, как он подлые дела будет делать, другой -- как будет наказан (татарского вождя М. Шаймиева однако не упоминает! – З.С.); Пророка Мухаммада видел (да простит меня Аллах, ведь это был сон) первый раз — как он поднимается вверх, второй — как он меня благославлял. Были и такие видения: два раза побывал на Луне; получал во снах довольно интересные сообщения, которые будто сбываются уже сегодня; видел Землю сверху, а на ней что-то неописуемое. В результате всех этих видений я начал «ходить» по планете от континента к континенту и видеть то, что предназначалось всем будущим поколениям».

Но, к сожалению, ни Карл Маркс, ни Ельцин и тем паче Рахимов не смогли подтвердить казанскому патриоту факт архидревности «волго-уральских татар», а следы башкир, выявляемые на каждом шагу, «копателем старины» неизменно объявлялись татарскими (употребил бы нейтральное слово «тюрк» -- был бы ближе к истине! – З.С.). Но чует нутром шельмец: древняя и древнейшая история региона без башкир – это шаткий карточный домик, или дворец из песка. Поэтому в узловой момент своей космической концепции (в расшифровке данного пророком Моисеем кода «JHWH») вынужден он употребить именно башкирский язык (стр. 78): «Если слово «JHWH» написать, исходя из башкирского, по фонеме «ия һава һу» -- «ия» -- «владыка», «һава» -- «воздух», «һу» -- «вода», тогда «JHWH» можно понимать как «Владыка воздуха и воды»... Совершенно верно: согласно мифам пророк Муса (Моисей, Моше) был усергенским башкиром рожденным на Урале (известно место его захоронения), а усергенско-канлинская богиня Шульган-матур (матерь) владела стихией воды-воздуха, бажанак-башкирский бог Урал-батыр (патер) был владателем земли-огня...

«Многие славянофилы, -- пишет Тугай, подразумевая своих кровных братьев-русских, -- так называемые индоевропейцы, их историки будут спорить с вышеуказанными (его! – З.С.) примерами. А я скажу им в ответ: «Пошел ты на ...!» (стр. 15). С ходу он успевает посылать и ученого башкира Салавата Галлямова, дерзнувшего не разделять его чудес (стр. 42 – 44), но все же частично склонен прощать: «Но Салават в одном прав, когда пишет, что шумеры с Урала. И это правда!» (Конечно же должны мы тут непременно подразумевать, что шумеры – это не башкиры). Пытается он также поиздеваться над всеми башкирами, намекая на их предков, поклонников фаллосу. И невдомек стервецу, что башкиры давно уже молятся только богиням Совести, Чести и Свободы, когда его соплеменники татары и по-ныне считают своим священным национальным головным убором акалабаш – «калапуш» («фаллосова голова»)... Уфимского «волго-уральского татара» больше всего беспокоит приоритет евреев на получение статуса

древнейщих. Методом упорного штудирования Библии, Торы и Корана с привлечением топонимики Земного шара, языка «волго-уральских татар» и математическими расчетами был достигнут желаемый ему результат: оказывается, евреи не есть прямые потомки пророка Авраама, ими являются «волго-уральские татары» (стр. 13), а сам Иисус Христос по отцовской линии может быть даже не иудей, а сын римского солдата Пандиры... После этого всем братьям-иудеям остается лишь горько рыдать с горючими слезами: священное родословие в Торе отныне им не принадлежит, обетованная земля – тоже! Сие откровение уфимского ясновидца, как он сам надеется, будет признан всеми рабами Божиими и на земле восторжествует долгожданная справедливость -- мировое лидерство перейдет на улицу «волго-уральских татар»...

Надо признавать, на страницах книжки находятся и проблески удач (как мне кажется). К таковым можно отнести интересные догадки: «То что пишется в Библии от имени евреев, по крайней мере вранье. Библия была только переписана с шумерской (башкиро-шумерской! – З.С.) литературы» (стр. 30). «Шумеры и самаряне (усергены-башкиры. – З.С.) – это один и тот же народ» (стр.36). «Эта страна (Урал. – З.С.) в каком-то смысле была с древнейших времен Святой Землей или Землею Святых... Она к тому же лежала на некоторой тайной черте, соединяющей великий град Атлантиды, который находится там, где ныне полуостров Таймыр (древнее название Атаймор, выступ его далеко в океан в виде обширной круглой территории с огнедышашими вулканами и газовыми факелами, был известен как «остров Атлантида». На Атлантиде жили древние евреи, на Урале – древние башкиры, они были друг-другу «ут күрше» – «сосед по огню». Между соседями шел интенсивный товарообмен: от Урала – золото, от Атлантиды священный огонь для очагов и храмов... подробнее можно узнать на моем сайте в статье «Башкиры и евреи в древности». -- З.С.)... На этой Святой Земле, -- верно продолжает автор, -- возродились все монотеистические религии: иудаизм, христианство, католицизм. Любопытно, а где же возродился Ислам? Он же входит в состав этих религий. По логике, и он должен был возродиться тут же» (стр. 48). «Этот великий град (Атлантида. – З.С.) находился там, где сейчас Крайний Север, полуостров Таймыр» (стр. 55). Надо еще положительно отметить образцы хорошей публицистики, вкрапленные в разные места текста.

И вот золотая мечта Тугая о прекрасном будущем человечества -- земной рай под мировым правлением «семи мудрецов», которые «языком всемирного общения избрали бы... такой язык – какой у волго-уральских татар» (стр. 145) – и опять руп двадцать пять! Выходит, так и не смог ясновидец избавиться от злополучного вируса...

01.02.2016.

## Синдром «никчемности» -- болезнь башкирская

Продолжают терзать меня причуды наших славных «мужей науки», заставляя каждый раз браться за перо. Последним толчком стала статья

уважаемого специалиста по генам этносов Б. Муратова с резко выраженными симптомами застарелой болезни нашей элитной прослойки, находившаяся под пятой своих премудрейших наставников, т.н. «старших братьев», и хорошо приспособившаяся мирно и верно служить самому Дьяволу. Мне кажется, они давно уже примирились с чувством личной никчемности, отключив тем самым собственные мозги и утратив дар самостоятельного мышления. Следствием чего является принятая учеными-авторитетами исторической науки всеобщий постулат отрицающий автохтонности башкир и считающий их посторонним элементом на Урале т.е пришельцами или из Алтая, или из Индии, или из Ирана... (что служит политике власть имущих и весьма поощряется). В силу чего в науке (даже среди дипломированных ученых) процветает нигилизм подобный "откровению» некоего уфимского доктора наук, в полном серьезе утверждающему, что путешествие знаменитого Ибн-Фадлана в 922 году через башкирские земли и встречи его с башкирами "является литературной фикцией" (В.А. Иванов. У подножия Рифейских гор. Уфа – 1982)... Его башкирские коллеги, тоже дипломированные, пошли гораздо дальше: ведущий этнограф Р.Г. Кузеев в 1987 году собрал в Уфе своих коллег с разных концов России на научный симпозиум, где был дружно восхвален (лишь один я выступил с критикой) его тезис об образовании башкирской нации буквально перед нашими глазами – в 40-ых годах 20-го века... В середине 90-х годов наш толстый журнал "Агидель" тоже обрадовал своих читателей, опубликовав дерзновенное "открытие" любимого ученика доктора исторических наук Н.А. Мажитова о том, что всемирно известный мифо-эпический герой Урал-батыр являлся *реальным человеком совсем недавнего 16-го века* (времени завоевания Иваном Грозным Казани и добровольного присоединеня Башкортостана Русскому государству), а до этого (то бишь до 16-го века) народ Южного Урала был совсем небашкирским. Из этого следовало, что строителями и обитателями всемирно известного городища Аркаим были небашкиры, подкреплялось это авторитетом его наставника; после чего автор настоящих строк выступил с резкой критикой. Последствия не заставили долго ждать: Н.А. Мажитов дал категоричный совет редакции "впред не печатать таких выступлений Зигата Султанова" ("Агидель" 1999/2, стр. 149). Все это было наруку выступающим атаками в печати оголтелым антибашкиристам, таким отпетым как А. Константинов, считающий только себе подобных аборигенами Урала, а башкир – никчемными пришельцами, подлежащими стереть с лица земли (газета "Отечество" от 1993 г. №22); писатель А. Солженицин, ополчившийся против суверинитета ненавистных ему тюркских республик – Башкортостана, Якут-Саха, Татарстана; политикан В. Жириновский, яростно призвавший россиян выселить ненавистные ему татар и башкир «в Монголию, где сифилис и туберкулез»... Был ли ответ со стороны наших ведущих ученых? Да был, но как всегда "по-ученому". Например, по случаю III Всемирного курултая башкир в 2010 году Башкирским книжным издательством «Китап» была переиздана и вручена как подарок делегатам книга Н.А. Мажитова (в соавторстве с А.Н. Султановой) «История Башкортостана. Древность. Средневековье», где его устарелый постулат о

мифических небашкирских строителях Аркаима (стр. 44) был оставлен без изменения:

«Имеющиеся сейчас отдельные факты, -- утверждают авторы, -- позволяют предположить, что некоторым толчком к началу строительства городищ-крепостей типа Аркаим мог быть приход на Южный Урал какой-то многочисленной группы населения с территории Средней Азии. Археологический след ее четко фиксируется в широком применении в строительном деле саманного кирпича, что вообще несвойственно местным племенам (?! – З.С.), но является традиционным для народов Средней Азии с VII-VI тысячелетий до н. э. Нельзя упускать из виду и тот факт, что города-крепости с круглой планировкой также являются характерным элементом древней среднеазиатской культуры. В то время на территории Средней Азии начала зарождаться своеобразная религия зороастризм во главе с богом Ахура Мазда, которая с начала железного века утвердилась как официальная религия здешних государств. Вместе с мигрантами из районов Средней Азии, возможно, на Южном Урале тогда могли распространяться основные идеи зороастрийской религии».

Пишется вопреки общеизвестным фактам: ведь маг Сураштора/Заратуштра родился, жил и творил именно на нашей земле – на террритории между Волгой и Уралом, а точнее, "в азиатских степях к востоку от Волги" (Мэри Бойс. Зороастрийцы. Верования и обычаи. М., 1987, стр. 3). Возникает законное недоумение: почему так поступают ученые-башкиры?! Ответ я нашел у известного граффитиолога Иршата Бикбулатовича Зианбердина: "В книге А.А. Захарова и Т.Г. Захаровой «Как написать и защитить диссертацию» (Санкт-Петербург. ООО «Питер Принт». 2004), в разделе «Мнемотехника в изучении истории» буквально написано следующее:

*«Знание хронологии очень важно для понимания истории. Но опыт показывает, что люди... боятся дат. Как упорядочить множество из десятков княжеских имен династии Рюриковичей?» --* Это относится «научным» требованиям ГОСТа 2.105-95. Значит, для защиты научной диссертации Вам необходимо досконально знать «Историю государства Российского» и «Историю русской философии». И, таким образом, если Ваши мысли текут только в пределах этих требований, тогда и только тогда они могут быть «научными».

Не правда ли, как похожи эти требования на условия защиты диссертаций в Российской империи! В Российской империи одним из основных требований претендентам на научные звания было знание ими «русской православной теологии». Чтоб не быть голословным, я привожу здесь выдержку из книги «Очерки по истории математики» (Минск «Высшая школа» 1979), написанного Болгарским Б.В. и посвященную биографии Михаила Васильевича Остроградского.

*...Остроградский ввиду выдающихся успехов, проявленных им в математических науках, был представлен к утверждению за ним ученой степени кандидата математических наук... Профессор философии... Дудрович ... опротестовал представление Остроградского Советом университета и приложил к протоколу заседания Совета свое особое мнение. В котором возражал против производства Остроградского в кандидаты наук, приводя в качестве одного из мотивов то, что «Остроградский не слушал богопознания и христианского учения». Попечитель Харьковского учебного округа Карцев и министр Голицын главное внимание обратили на особое мнение Дудровича. Не считаясь*

*с постановлением Совета университета, министр не только запретил представлять Остроградского к ученой степени, но далее предписал задержать его университетский аттестат впредь до пересдачи заново всех экзаменов.*

Вот почему именно башкирские ученые мыслители 18-19 веков, в частности З.Расулев, Р.Фахретдинов, М.Уметбаев, М.Бурангулов, З.Валидов и многие другие не имели официальных Российских научных званий. Они, будучи представителями башкирского народа исповедующего исламскую религию, конечно, не могли даже и думать о защите диссертаций в соответствии с требованиями Российской империи. Между тем, труды и мысли З. Расулева, Р.Фахретдинова, М.Бурангулова, З.Валидова, как труды и мысли действительно академического уровня, до сих пор служат неиссякаемыми научными источниками, откуда черпаются все новые и новые научные сведения. И у меня тоже нет, какого бы то не было желания защищать диссертацию в соответствии с требованиями ГОСТа 2.105-95. Поэтому и оформляю свою работу в виде «Иршаднамэ», в полном соответствии с требованиями восточной мысли, так как считаю, что требования этого ГОСТа зацикливают мысль исследователя в «величестве, могуществе и исключительности» русского народа и православия" (И.Б. Зианбердин. ИРШАДНАМЭ – история Башкортостана в 12 томах с 30 века до нашей эры по 1755 год нашей эры том I. Исянгулово – 2010, стр. 4-6).

Значит, чтобы успешно защититься и получить долгожеланный диплом, и потом сделать хорошую научную карьеру, непременно нужно строго следовать требованиям указанного ГОСТа, в научной деятельности всегда и повсеместно придерживаться, не отклоняясь ни на вершок, политики правящего режима. Поэтому даже известные мужи официальных гуманитарных наук были склонны ущербному чувству личной никчемности, не смея противоречить даже в мелочах...

